Азат Камалов
Фирюза Камалова

# Атайсал




КАЗАНЬ
Волга
Кама
Белая
Степной Зай
Ик
Уфа
УФА
Дема
Кондурча
Волга
Белая
Урал
Бол. Иргиз
Самара
Сакмара
ОРЕНБУРГ
Урал
Урал

Азат Камалов
Фирюза Камалова

# Атайсал

Уфа
«Китап»
2001

УДК 911.37 (470.57)
ББК 63.3 (2 Баш)
К 18

Ответственный редактор: доктор филологических наук,
профессор **АЗАТ КАМАЛОВ**
Рецензент: профессор **БГУ АНВАР АСФАНДИЯРОВ**

**Камалов А. А$_м$ Камалова Ф. У.**

Атайсал. — Уфа: Башкирское издательство **«Китап», 2001.— 544 с.**

Данная книга представляет собой наиболее полный справочник по башкирским деревням, находящимся ныне на территории Республики Башкортостан и прилегающих к ней республик и областей РФ. В ней проанализированы малоизученные источники по истории Башкортостана. Основную часть книги занимают списки башкирских аулов с указанием на их родоплеменную принадлежность, родовое подразделение, военный клич, тамги и другие атрибуты, которые являются уникальным источником по населенным пунктам башкир — коренного народа Южного Урала и Приуралья, проживающих на этой территории с древнейших времен. Уникальность сведений книги заключается в фиксировании элементов ранней родоплеменной структуры башкирской общины и их былой военно-политической организации, а также в аккумулировании полевых, фондовых и архивных материалов. В книге имеется историко-этимологический словарь. В конце книги дается указатель, по которому легко можно найти интересующее название башкирского аула. Она предназначена на широкий круг читателей.

**ТП — 83**

**ISBN 5-295-02882-8**

**© Камалов А. А., Камалова Ф. У., 2001**

## АЛҺҮҘ

Был китап **АТАЙСАЛ** тип исемләнде.

Атайсал — «ата-олаталар йәшәгән ер, ил» тигән киң мәғәнәлә ҡулланыла. Ошо мәғәнәлә ҡулланылыуына, күрәһең, уның нигеҙенә *атай* тигән һүҙҙең һалыныуы сәбәп булғандыр. Яңы барлыҡҡа килгән һүҙ борон-борондан телебеҙҙә ҡулланылған *атай* һәм *сал* морфемаларынан тора. *Атай* һүҙенең мәғәнәһе билдәле булһа ла, *сал* морфемаһының мәғәнәһе әлегә тулыһынса асыҡланмаған. *Сал* морфемаһы «ҡарт, иҫке, боронғо; сал сәсле, хөрмәтле ҡарт кеше» мәғәнәһен йөрөтөүе ихтимал. *Сал* һүҙе *сал*, сул, *чул* «таш, ҡаты, ныҡ» тигән боронғо болғар морфемалары менән дә бәйле булырға мөмкин. Нисек кенә булмаһын, ул боронғо башҡорт шәжәрәләрендә батырҙар исеме араһында йыш ҡына осрай. Мәҫәлән, беҙгә бөрйән, ҡыпсаҡ, түңгәүер, үҫәргән шәжәрәләрендә *Атайсал, Байсал*, *Ҡаҙаксал*, *Сапсал*, *Ялпаксал* тигән антропонимдар булыуы билдәле.

Боронғо башҡорт һүҙе хәҙерге башҡорт телендә яңырыу кисерҙе һәм «ата-олатайҙар төйәге, тыуған ил» мәғәнәһендә ҡулланыла Атайсал ошо китапта тап шул мәғәнәгә эйә лә инде. Сөнки бында хәҙерге башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары нигеҙ һалған ауылдарҙың исемлеге, уларҙы өйрәнеү сығанаҡтары бирелде. Ошо исемлек бер үк ваҡытта хәҙерге башҡорттарҙың борон йәшәгән территорияһының, йәғни Боронғо Башҡортостандың яҡынса сиктәрен дә күрһәтеп тора.

Был исемлек башҡорттар иле — Бороню Башҡортостан буйынса юл күрһәткес-белешмә ролен дә үтәй. Ул һәр башҡорт ауылында башҡорт ауылдары тарихын өйрәнеүҙе маҡсат итеп тә ҡуйҙы. Бында документтар менән дәлилләнгән, ысынбарлыҡҡа тап килгән мәғлүмәттәр генә килтерелгән. Уларҙа боронғо һәм хәҙерге башҡорттарҙың Көньяҡ һәм Урта Уралда, Урал артында, Урал якында, Урта Волга буйында һәм Көнбайыш Себерҙә урынлашҡан ауылдары тураһында мәғлүмәттәр табып була.

**Авторҙар *АЗАТ* менән *ФИРУЗӘ КАМАЛОВТАР***

# ИНЕШ

Көньяҡ Урал топонимияһы буйынса XVIII быуаттан алып хәҙерге көндәргә тиклем алып барылған тикшеренеүҙәр, йыйылған материалдар, ҡульяҙма сығанаҡтар, әҙәбиәттә сағылыш алған күҙәтеүҙәр Башҡортостандың ер-һыу атамаларының тарихын һәм сығышын асыҡларға мөмкинселек бирә. Тарихи-этимологик тикшеренеүҙәргә тотонорҙан алда башҡарыла торған эштәр була. Шуларҙың байтағы, айырым әйткәндә, атамаларҙың яһалыу ысулдары, барлыҡҡа килеү принциптары, географик терминдарҙың исемлеге һәм мәғәнәләре, уларҙа сағылған фонетик, лексик, морфологик һәм синтаксик диалектизмдар һәм башҡалар ғалимдар тарафынан өйрәнелде лә инде. Улар башлыса Р. З. Шәкүров, Ф. Ғ. Хисаметдинова, А. Ә. Камаловтарҙың хеҙмәттәрендә сағылыш таптылар. Быларҙың барыһы ла «Башҡорт АССР-ының топонимдар һүҙлеге» (Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1980), А. К. Матвеевтың «Уралдың географик атамалары» (Свердловск, 1980), «Пай-Хойҙан Моғажарға тиклем» (Свердловск, 1984), Е. Н. Шуваловтың «Париждан Берлинға ҡәҙәр» (Силәбе, 1982) исемле хеҙмәттәрҙә тупланған. Этимологик тикшеренеүҙәр яһау өсөн кәрәк буласаҡ мәсьәләләрҙең ҡайһы берҙәре, мәҫәлән, атамаларҙың ҡатнаш милли мөхиттә ҡулланылыуы, атамаларҙың фонетик үҙенсәлектәрен уртаҡлыҡ исемдәр менән сағыштырып ҡарау һәм башҡа проблемалар ошо хеҙмәттә бер ни тиклем асыҡланасаҡ.

Һәр топонимик эштең төп маҡсаты булып ул атаманың тарихын һәм килеп сығышын асыҡлау тора. Әммә уның өсөн атаманы тәшкил иткән компоненттарҙың мәғәнәһен асыҡларға булышлыҡ иткән тикшеренеүҙәр яһалырға тейеш. Мәҫәлән, атаманың ҡулланыу әлкәһен, үҙенсәлеген билдәләгән мәғлүмәттәр кәрәк. Атамаларҙың ҡулланылыуы, дөйөм алғанда, һүҙҙәрҙең төрлө варианттарҙа йөрөүе менән туранан-тура бәйле. Атаманың варианттары төрлө (фонетика, морфема, һүҙ һәм һүҙбәйләнеш) кимәлдә ҡаралһа, маҡсатҡа ярашлы була. Әлбиттә, бындай тикшеренеүҙәр үткәреү өсөн төрлө урында йыйылған, төрлө сығанаҡтарҙан тупланған материалдарҙың булыуы зарур.

«Ни өсөн кәрәк былар?» тигән һорауҙың тыуыуы ихтимал. Атама варианттарының береһе генә лә уның килеп сығышын асыҡларға ярҙам итеүе ихти-

мал. Мәсәлән, *Нокат* тигән йылға бар. Уны *Онкот* тип тә йөрөтәләр. Ә был һуңғы вариант йылға атамаһының мәғәнәһен, сығышын асыҡлай ҙа инде. Тағы ла бер нисә атаманың варианттарын әйтеп үтәйек. Ейәнсура районында һаҡмарға ҡойған йылғаны *Ҡороюл* тип тә, *Ҡоруйыл* тип тә атап йөрөтәләр. Оло кешеләр Учалы районындағы *Учалы* күленең элек *Асыуҙы* тип тә аталғанын әйтәләр. Архангель, Ғафури райондарында *Асҡын* тигән йылғаны *Аҡһын* тип тә яҙҙырҙылар. Быларҙың барыһы ла башҡорт теленең фонетик үҙгәрештәре ҡанундарына ярашлы барлыҡҡа килгән.

Учалы районындағы бер йылғаны ҡайһы берәүҙәр *Мараҙы* тип, икенсе мәғлүмәт биреүселәр *Маҙар* тип атайҙар. Әлбиттә, *Маҙар* формаһы атаманың сығышын *мазар* «зыярат» тигән ғәрәп һүҙенә бәйләп аңлатырға мөмкинлек бирә, сөнки был осраҡта *р* — *ҙ* өндәренең урыны алмашыуы һөҙөмтәһендә *маҙар* һүҙе *Мараҙы* булып киткән.

Атамаларҙың морфологик варианттарын иҫәпкә алыу ҙа этимологик тикшеренеүҙәрҙә мөһим урын тота. Бүздәк һәм Ҡырмыҫҡалы райондарында *Ҡарбаш* тип йөрөтөлгән ауылдар бар. Морфемалар йәһәтенән бер төрлө булһалар ҙа, Ҡырмыҫҡалы районындағы *Ҡарбаш* ауылы *Ҡарламанбаш* тигән тулы форманан, Бүздәк районындағыһы *Ҡарамалыбаш* тигәндән ҡыҫҡартып алынған.

*Мейәс* йылғаһы Силәбе әлкәһенең Арғаяш районында *Миәһыу* формаһында ла ҡулланыла, һуңғы форма *Мейәс* атамаһын башҡорт теленән сығып аңлатырға мөмкинселек бирә.

Бер үк атаманың төрлө телдәрҙә йөрөгән формаларын иҫәпкә алыу ҙа уның сығышын асыҡларға ярҙам итә. Сөнки был осраҡта топонимды тәшкил иткән тамыр морфемалар йыш ҡына бер телдән икенсе телгә тәржемә ителәләр. Күптәргә таныш Тянь-Шань тауҙары атамаһы ҡытай телендә «Күккә олғашҡан тау» тигәнде белдерә. Төрки телдәрендә иһә был тау *Хан-Тәңре* тип атала. Был ике атаманың мәғәнәләре, дөйөм алғанда, яҡынса тап килә, сөнки тәңре — мәжүсиҙәрҙең күктә йәшәгән Аллаһы тип иҫәпләнә.

Лексик варианттарға асыҡ миҫал булып Днестрҙағы Белгород ҡалаһының исемен алырға мөмкин. Ул ҡала Днестрҙың Ҡара диңгеҙгә ҡойған ерендә урынлашҡан. Молдавандар уны *Четате-Альба,* төрөктәр *Аккирмэн* тип йөрөтәләр. Был өс атама ла «Аҡ ҡәлғә», «Аҡ ҡала» тигән төшөнсәгә эйә. Ошоға оҡшаш атама Башҡортостанда ла бар. Мәсәлән, Ғафури районынан аҡҡан *Усолканы* элек башҡорттар *Тоҙйылға* тип атаған булған. Әлеге осорҙа Ырымбурға ҡараған Соль-Илецк ҡалаһын башҡорттар *Тоҙтүбә* тип йөрөткән. Силәбе өлкәһендәге *Теча* йылғаһы башҡортса *ТинесЦДинес*, ҡайһы бер документтарҙа *Писим* тип тә теркәлгән. *ДинесИТинес* тигән форма атаманың кеше исеменән яһалыуына ишара яһай. Киң билдәле *Хөсәйенбәк* мавзолейы *Хөсэйенбәк* кәшәнәһе, *Кәшәнә* тигән варианттар ҙа осрай. Ырымбур әлкәһендә бер тирмәнде *Гиберт дегерменә* тип тә, *Тасмун дегерменә* тип тә атайҙар. Тикшереүҙәр *Тасмун* кешенең фамилияһы, *Гиберт* шул уҡ кешенең исеме булыуын асыҡланы. Ҡалтасы районында мариҙар йәшәгән *Оло Ҡураз*, *Кесе Ҡураз* тигән ике ауыл бар. Күршеләре уларҙы *Ҙур Атасавыл*, *Бәләкәй Атасавыл* тип йөрөтәләр. *Атас* тигәне боронғо *кураз* «әтәс» тигән фарсы һүҙен тәржемә

итеүҙән барлыҡҡа килгән. Ошоға оҡшаш топонимик варианттар атамаларҙың тарихын һәм сығышын тикшергәндә иҫәпкә алынырға тейеш.

Хәҙер, беҙ ауыл, ер-һыу атамаларының тарихын, сығышын асыҡларға етерлек, төрлө осорға ҡараған, төрлө типтағы сығанаҡтарҙан алынған мәғлүмәттәр тупланыҡ, тип иҫәпләйбеҙ. Бының өсөн Башҡортостандағы ғына түгел, ә күпме күрше әлкәләрҙә, Мәскәүҙә, Санкт-Петербургтағы дәүләт архивтарынан ҡулъяҙма китаптарҙы, шәжәрәләрҙе өйрәнергә тура килде. Башҡорт дәүләт университеты, Башҡорт, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институттарының фольклор, археологик һәм диалектологик экспедициялары материалдары ла иҫәпкә алынды. Төп сығанаҡтар исемлеген төҙөү, уларҙың ғилми һәм ғәмәли әһәмиәтен билдәләү — географик атамаларҙың этимологияһын, тарихын тикшереүҙә тик билдәле бер этап ҡына. Шуға ла ошо маҡсатты ниндәйҙер кимәлдә тормошҡа ашырыу һәм сығанаҡтарҙа бирелгән мәғлүмәттәрҙең дөрөҫлөгөн асыҡлау өсөн айырым бүлектә был сығанаҡтарға анализ яһалды. Төрлө сығанаҡтарҙы ентекле һәм үҙ-ара сағыштырып өйрәнеп тикшереү һөҙөмтәһендә күп кенә легенда һәм риүәйәттәрҙә әйтелгән факттарҙың ысынбарлыҡҡа тап килеүе асыҡланды. Бында яҙма сығанаҡтарҙы халыҡтан йыйып алынған материалдар менән сағыштырып өйрәнеүҙең һөҙөмтәле булыуын әйтеп үтергә кәрәк. Миҫал итеп *Аҫҡар, Буранбай, Мәмбәт, Һабыр, Сибай, Әмин* һ. б. ауылдарҙың тарихын күрһәтеп үтергә мөмкин. Материал нисек кенә бер урында күп тупланмаһын, бөтә башҡорт ауылдары тарихын һәм ер-һыу атамалары этимологияһын бер-ике кеше генә эшләп бөтөрә алмаясаҡ. Шуға ла был китапта беҙ урындағы энциклопедистар, төбәкте өйрәнеүселәр үҙҙәре тикшереүҙәр алып барһын өсөн төп сығанаҡтарҙы күрһәтеп, уларҙың әһәмиәтен билдәләп үтәбеҙ. Тарихты белеү — киләсәкте дөрөҫөрәк планлаштырыу өсөн кәрәк. Һәр кем үҙ тарихын үҙе өйрәнергә һәм яҙырға тейеш. Был китап шундайҙарға ярҙам итер, тип ышанабыҙ.

# I бүлек

## БАШҠОРТТАР ТУРАҺЫНДА БОРОНҒО АВТОРҘАР

Тарихи сығанаҡтар мәғлүмәттәре буйынса **ике төркөмгә** бүленә. **Беренсе төркөмдө** ниндәй ҙә булһа тикшеренеү элементтары булған сығанаҡтар тәшкил итә. **Икенсе төркөмгә** статистик типтағы сығанаҡтар ҡарай. Быңдай сығанаҡтарҙағы мәғлүмәттәр теге йәки был атаманы һанап үтеү менән генә сикләнә. Уларҙа ниндәй ҙә булһа тикшереү элементы, факттарға баһа биреү булмай. Был төркөмгә тарих, география, экономика һ. б. буйынса сығанаҡтар инә. Урында йыйып алынған материалдар ҙа ошо төркөмдә тикшерелә.

Башҡортостанда үҙҙәрен башҡорт тип иҫәпләгән ҡәбиләләр һаны ҡырҡтан ашып китә. Шуларҙың береһен, мәҫәлән, бөрйәндәрҙе академик Б. Н. Рыбаков IX быуатта хәҙерге Румыния менән Болгария территорияһында йәшәгән тип иҫәпләй (8-се биттәге картаны ҡара)*. Ә бына башҡорт тигән этноним (халыҡтың дөйөм исеме) тик IX быуат урталарында ғына тарихи-географик әҙәбиәттә теркәлгән. Быны IX быуаттың атаҡлы ғалимы Сәлләм Тәржемән эшләгән[1]. Сәлләм Тәржемәнде русса яҙылған сығанаҡтарҙа Саллам Переводчик тип тә йөрөткәндәр.

Ғәрәп географияһын тикшергән барлыҡ рус ғалимдарының тикшеренеүҙәрендә Сәлләм Тәржемәндең әҫәре иҫәпкә алынған. Мәҫәлән, билдәле шәрҡиәт белгесе Б. Н. Заходер уның тураһында: «Әл-Васик хәлифәһе хакимлыҡ иткән заманда (был 842—847 йылдарҙа була. — *Авторҙар)* Кавказ аша Хазарҙарға һәм унан арыраҡҡа сәйәхәткә барҙы... Хәлифәгә тәғәйен булған документтарында һәм телдән дә шул сәйәхәте тураһында тәьҫораттарын хәбәр итте», — тип яҙҙы[2]. Ғәрәп әҙәбиәте белгесе И. Ю. Крачковский хеҙмәттәрендә лә Сәлләм Тәржемәндең әҫәре юғары баһалана: «Төрлө сәйәхәттәр яратыусы Әл-Васиктың исеменә Сәлләм Тәржемәндең төньяҡтағы илдәргә сәйәхәте алып бара... Бынан ике йөҙ йыл элек иң тәүге академиктарҙың береһе З. Байер уны академик аңлатмаларҙа иҫкә ала... Ул Сәлләмдең яҙмалары ысын булған сәйәхәт тураһындағы отчетты тәшкил итә һәм фәндең иғтибарына лайыҡ»[3], ти.




*Племена Восточной Европы в первой половине IX в. по данным «Худуд ал-Алем»**

Сэллэм Тәржемәндең яҙмаларын немец теленән урыҫ теленә А. Н. Шемякин тәржемә итә[4]. Сәлләм Тәржемән яҙмаларының ҡайһы бер өлөштәре IX быуат урталарында Көньяҡ Уралда көн күргән башҡорттар, уның дөйөм исеме «башҡорт» этнонимы тураһында тәүге мәғлүмәт биреүе менән ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Түбәндә ул яҙмаларҙан бәләкәй генә өҙөк килтерелә:

«Беҙ Сорра-мен-ранан (ул Багдадтың төньяҡ өлөшө. — *Авторҙар*) әрмәндәрҙең батшаһы Исааҡ бин Измаилға яҙған хәлифәнең хаты менән юлға сыҡтыҡ, уны Тифлиста осраттыҡ. Унда алтын тәхет батшаһына тәғәйенләнгән яңы хат алдыҡ. Ул беҙҙе бик яҡшы ҡабул итте һәм артабан алландарҙың батшаһына оҙатты... Бында беҙ Филаг батшаға килдек. Унда артабан ышаныслы юл күрһәтеп барыусылар тапҡанға тиклем оҙаҡ ҡына йәшәнек. 27 көндән һуң беҙ башҡорттар сигенә килеп еттек»[5].

---

* **_Б. А. Рыбаков._ Киевская Русь и русские княжества XII—XIII вв. — М.: Наука, 1982.**

Сәлләм Тәржемәндең был мәғлүмәттәре шул ваҡыттағы һәм унан һуңғы осор ғалимдары тарафынан ысынбарлыҡҡа тап килгән, тип ҡабул ителгән.

Беренсенән, улар хәлифәгә тәғәйенләнгән булған, ә уны алдарға кемдең баҙнат итеүе мөмкин.

Икенсенән, яҙмаларҙың авторы үҙ заманының билдәле ғалимы булған. Юҡҡа ғына уны «Тәржемән», йәғни «тәржемәсе» тигән ҡушамат менән йөрөтмәгәндәр. Ул утыҙға яҡын телде белгән һәм заманында киң танылыу алған уҡымышлы кеше иҫәпләнгән. Ундай кеше үҙенең исеменә һәм яҙмаларына еңелсә генә ҡарай алмаҫ ине. Шуға күрә лә тикшереүселәр Сәлләм Тәржемән яҙмаларының булыуын да һәм унда килтерелгән мәғлүмәттәрҙе лә шиккә алмаған.

Сәлләм Тәржемәндең яҙмаларында килтерелгән мәғлүмәттәрҙең ысынбарлыҡҡа тап килеүен унан һуңғы осор тикшереүселәренең хеҙмәттәре лә раҫлап тора. Мәҫәлән, Сәлләм Тәржемәндән һуң 75 йыл үткәс беҙҙең эраның 921—922 йылдарында Көньяк-Көнбайыш Урал менән Түбәнге һәм Урта Волга буйы араһынан сәйәхәт яһаған Әхмәт ибн-Фаҙлан «үҙҙәрен төрки халыҡтарының береһе тип иҫәпләгән башҡорттар» илендә булыуын яҙып ҡалдырған[6]. Әхмәт ибн-Фаҙлан яҙмаларының ҡимммәте шунда: уның үткән юлы төрки халыҡтары йәшәгән территория аша үткән. Сөнки Әхмәт ибн-Фаҙлан төньяҡтағы илдәргә Сәлләм Тәржемән кеүек Кавказ тауҙары аша түгел, ә Урта Азия һәм Волга (Иҙел) йылғаһының һул яғынан сәйәхәт яһаған. Шуға күрә лә ул боронғо башҡорттар йәшәгән ерҙәрҙең көнбайыш өлөшөндә, *Ҡондорса* йылғаһы буйында булған. Административ-территориаль йәһәттән хәҙер был ерҙәр һамар әлкәһенә инә. Хәҙерге ваҡытта һамар әлкәһендә компактлы төркөм булып башҡорттар йәшәй. Әгәр ҙә ошоно иҫәпкә алһаң, һамар башҡорттары борон-борондан башҡорттарға ҡараған урындарҙа нығынған һәм хәҙерге ваҡыттарға тиклем боронғо ата-бабаларының төйәген һаҡлай икән, тип уйларға тулы нигеҙлек бар. Әхмәт ибн-Фаҙландың яҙмаларын ентекле өйрәнгән А. П. Ковалевский тағы ла бик мөһим бер нәмәгә иғтибар иткән. Ул: «Ибн-Фаҙланда һанап киткән йылғалар һәм унда йәшәгән халыҡтарҙың урыны тулыһынса тап килмәй. Сөнки теге йәки был территорияла йәшәгән халыҡтарҙы һанап сыҡҡас ҡына, ул үҙе үтеп киткән йылғаларҙың исемен теркәй. Яҙманан оғуздар, йәнәһе, *Чинк* һәм *Саған* йылғалары араһында, башҡорттар *Ҡондорса* менән *Оло Сәрмәсән* араһында йәшәй булып сыға. Ысынында иһә был халыҡтар байтаҡ киң территорияны биләп торған... Нәҡ шуның кеүек үк, бөтә йылғаларҙы һанап сыҡҡандан һуң болғарҙар батшаһы ставкаһында оҙайлы ваҡыт йәшәгәс булып киткән ике йылғаны атап ҡуя»[7]. Шулай итеп, Әхмәт ибн-Фаҙлан яҙмаларының үҙенсәлеген иҫәпкә алыу X быуатта башҡорттар йәшәгән илдең көнбайыш сиктәрен аныҡ билдәләргә булышлыҡ итә. Ул саҡта башҡорттар *Ҡондорса* буйын ғына түгел, ә унан көньяҡта һәм көнсығышта ятҡан байтаҡ ерҙәрҙе биләгән булып сыға.

Бының шулай икәнен ошо регион атамаларын хәҙерге Башҡортостан Республикаһы йылғалары системаһы менән сағыштырыу ҙа күрһәтеп тора, сөнки Волга-Иҙел буйы гидронимияһы тулыһынса тип

әйтерлек Башҡортостан Республикаһы ер-һыу атамаларына тап килеп тора:

| Һарытау, Һамар өлкәләрендәге ер-һыу атамалары | Башҡортостан Республикаһындағы ер-һыу атамалары |
|---|---|
| Үҙән — Волганың һул ҡушылдығы; | Үҙән — Ағиҙелдең һул ҡушылдығы, Белорет, Бөрйән райондарында;<br>Үҙән (Йүрүҙән) — Ҡариҙелдең һул ҡушылдығы;<br>Үҙән (Өйәҙән) — Өршәктең һул ҡушылдығы һ. б.; |
| Ырғыҙ — Волганың һул ҡушылдығы; | Ырғыҙлы — Ағиҙелдең һул ҡушылдығы;<br>Ырғыҙлы — Архангель районындағы йылға; |
| Быҙаулыҡ — Һамарҙың һул ҡушылдығы; | Быҙаулыҡ — Таналыҡтың һул ҡушылдығы; |
| Сәрмәсән — Волганың һул ҡушылдығы; | Сәрмәсән — Ағиҙелдең һул ҡушылдығы; |
| Уран (Соран) — Һамарҙың уң ҡушылдығы; | Уран — БР-ҙың төньяҡ-көнбайышындағы башҡорт ҡәбиләһе исеме; |
| Ҡондорса — Волганың һул ҡушылдығы | Ҡондорош — Йылайырҙың уң ҡушылдығы;<br>Ҡондорошло — Ғафури районындағы йылға |

Аҙаш атамаларҙың бер үк халыҡ, бер үк кешеләр тарафынан ҡушылыуын иҫәпкә алғанда, үрҙә һанап үтелгән ер-һыу атамаларын башҡорттар ҡушҡандар, тип фараз итергә тулы нигеҙ бар. Бер үк ваҡытта ошо атамалар Боронғо Башҡортостандың төньяҡ һәм көнсығыш сиктәренә лә ишара яһай.

Ибн-Фаҙландың яҙмалары ер-һыу атамаларының дөрөҫ теркәлеүе менән генә түгел, ә күплеге менән дә айырылып тора. Шуныһы ҡыуаныслы: Әхмәт ибн-Фаҙлан һанап сыҡҡан атамаларҙың барыһы ла тиерлек хәҙерге көндәргә үк килеп еткән. Мәҫәлән:

Ибн-Фаҙлан яҙмаһындағы *Джаих*, *Йайх* — хәҙер *Яйыҡ* (XVIII быуаттан алып рәсми исеме *Урал*); *Джаха-Саган,* (урыҫса *Чеган), Ирхиз — Ырғыҙ* (карталарҙа *Иргиз), Бачаг — Мешә* (урыҫса *Моча), Самур — Һамар* (урыҫса *Самара), Кинали — Кинәле, Сух — Сок, Кюнджюлю — Ҡондорса* (урыҫса *Кундурча), Джарамсан — Сәрмәсән* (урыҫса *Черемшан), Уран — Уран (Соран), Урам — У рем, Байнах — Майна*, *Ватыг — В атык* (урыҫса *Утка), Ниасна — Ниясна* (урыҫса *Ненеловка), Джавсыз — Даушызма*[8] һ. б.

Был ике боронғо яҙманан тыш, XI — XII быуаттарға ҡараған башҡа сығанаҡтарҙа ла башҡорт тигән халыҡ исеме һәм Башҡортостандың ер-һыу атамалары күрһәтелә. Атаҡлы Мәхмүт Ҡашғарлының




Река Атиль на карте Идриси (сверху) и соответствие ей на современной карте (Белая Воложка — Кама — Волга)*

* *Рыбаков Б. А.* **Русские земли по карте Идриси / Краткие сообщения Института истории материальной культуры. — М., 1952. — Т. 43. — 25-се бит.**

«Диуану лөғәт-эт төрк» исемле хеҙмәтендә *башғырт* этнонимы һәм *Этил (Этил)* йылғаһы теркәлгән[9], һуңғы сығанаҡтарҙың ҡиммәте атаманың боронғо ваҡытта ҡулланылған формаһын дөрөҫ биреүендә тора. Мәхмүт Ҡашғарлының һүҙлегендә бер карта бирелгән. Ул карта иң боронғо төрки картаһы тип билдәләнә[10]. Был карта төркиҙәрҙең донъя һәм халыҡтар тураһындағы боронғо ҡараштарын күрһәтеүе менән дә әһәмиәтле. Төркиҙәр донъяның сиге бар тип уйлағандар. Донъяның көнбайыштағы сиге булып Испания, көньяҡтағы сиге — Цейлон (хәҙерге Шри Ланка), көнсығышта — Япония, төньяҡта Себер менән Урал тауҙары иҫәпләнгән[11]. Картала Иҙел (хәҙерге Волга) тураһында түбәндәгеләр яҙылған: *«Этил* — ҡыпсаҡтар илендәге йылға. Ул Болғарҙар диңгеҙенә (бында Каспий диңгеҙенең икенсе исеме бирелгән. — *И. Умняков)* ҡоя; уның урыҫтарҙы ситләп аҡҡан бер ҡушылдығы бар»[12]. Беҙҙең өсөн картала *Ҡаманың Этилдең* үрге ағымы булып иҫәпләнеүе ҙур әһәмиәткә эйә. Был турала И. Умняков: «Мосолмандарҙың барлыҡ яҙыусылары *Этил* йылғаһының үрге ағымын бик үк яҡшы белмәгәндәр. Беҙҙең картограф *Волга* менән *Каманы* Урал тауҙарынан башланған *Этил* тип ҡабул иткән. *Кама* ғәрәп географтарынса *Волганың* ҡушылдығы тип түгел, ә уның үрге ағымы тип иҫәпләнгән»[13].

Шул уҡ ваҡытта был проблемаға икенсе төрлө ҡараштар ҙа булыуы билдәле. Академик Б. А. Рыбаков фекеренсә, ғәрәп географтары *Каманы* түгел, ә *Ағиҙелде Этилдең* (йәғни хәҙерге Волганың) үрге ағымы тип һанағандар. И. Умняков фекерен уртаҡлашмайынса, ул *Этил — Волга* көнсығыш географтарына Идрисигә (йәғни XII быуатҡа) тиклем үк билдәле булған тип яҙа[14]. Артабан үҙ фекерен түбәндәгесә дауам итә: *«Этил* йылғаһының үрге ағымы төшөнсәһе беҙҙең хәҙерге ҡараштарҙан айырылып торған. Идриси картаһында... ул *Осказка* тигән тауҙан сыҡҡан өс ҡушылдыҡтан яһала һәм көнбайышҡа табан аға. Был өс ҡушылдыҡ хәҙерге Урал тауҙарынан ағып төшкән *Ағиҙел*, *Өфө* һәм *Эй* йылғалары булырға тейеш. *Этилдең* көньяҡҡа боролған ерендә килеп ҡойған ҡушылдығы, һис шикһеҙ, *Кама.* Тик *Этилдең Кама* тамағынан алып *Волгаға* тиклемге өлөшө генә *Этил* тигән төшөнсәгә тап килә»[15]. (11-се биттәге картаны ҡара.)

Әгәр ҙә ки академик Б. А. Рыбаков башҡорттарҙың йылға системаһына исем биреү принциптары менән таныш булған булһа, ул саҡта боронғо *Этилдең* өс ҡушылдығы итеп *Ағиҙелде*, *Ҡариҙелде* һәм *Күгиҙелде* һанар ине. Боронғо төркиҙәр *Каманы ла (Сулман Иҙелде) Этил* йылғаһының бер өлөшө тип ҡарағандар. Нисек кенә булмаһын, боронғо сығанаҡты тикшереүсе академик Б. А. Рыбаковты интуицияһы алдамаған. *Этил* йылғаһы системаһына исем ҡушыу ҡанундарын белмәһә лә, дөйөм алғанда, *Этил* йылғаһының үрге ағымын дөрөҫ билдәләй алған һәм Идриси картаһының ҡиммәтен аныҡлаған.

Юғарылағыны йомғаҡлап, шуны әйтергә мөмкин: *Хазар (Каспий)* диңгеҙенә ҡойған *Этил* өс йылға *(Ағиҙел*, *Ҡариҙел* һәм *Күгиҙел* йылғалары) бергә ҡушылғандан һуң ғына барлыҡҡа килә, тип иҫәпләгәндәр ғәрәп географтары. Тимәк, *Этил* йылғаһының башы хәҙерге Өфө ҡалаһы, ҡойған ере *Каспий* диңгеҙе булып сыға. *Кама —Сулман Иҙел* иһә *Этилдең* уң ҡушылдығы тип ҡабул ителгән. Ә инде хәҙерге

*Волганың* башынан алып *Камаға — Сулман Иҙелгә* тиклемге өлөшөн ғәрәп географтары бер ниндәй исем менән дә картаға теркәмәгәндәр.

1154 йылда һыҙылған Идриси картаһы башҡорттарҙың йәшәгән урыны тураһындағы мәғлүмәттәре менән ҡыҙыҡһыныу уята. Мәҫәлән, унда: *«Әтилдән* (ул хәҙерге *Волганың* тамағындағы ҡала. — *Авторҙар)* Болғарға тиклем дала буйлап 30 көнлөк, һыу буйлап 2 айлыҡ... ара бар. Тауҙарҙан (бында *Бәшнәк* тауҙары күҙ уңында тотола. — *Авторҙар*), Эске Башҡортостанға 10 көнлөк, Эске Башҡортостандан Болғарға 25 көнлөк юл»[16], — тип яҙылған. Академик Б. А. Рыбаковтың иҫәпләүенсә, Идриси картаһындағы бер көнлөк юл 35—40 километрға, ә бер туҡталыш 87 километрға тиң булған. Шул тәртиптә иҫәпләгәндә, башҡорттар Болғар ҡалаһынан 875 км, ә бәжнәктәрҙән 350—400 км алыҫлыҡта йәшәгән булып сыға. Әммә, икенсе сығанаҡҡа таянып, академик Б. А. Рыбаков һуңғы араға төҙәтмә индерә, сөнки ысынында иһә башҡорттар бәжнәктәрҙән 10 көнлөк түгел, ә 10 туҡталышлыҡ юлда ятҡан. Ә, беҙ беләбеҙ, бер туҡталыш 87 км-ға тиң. Шулай булғас, бәжнәктәр ҙә башҡорттарҙан 870 км алыҫлыҡта йәшәгән. Был һандар башҡорттарҙың XII быуатта (дөрөҫөрәге 1154 йылға тиклем) көн күргән территорияһын күрһәтеп тора. Күрәһең, был ерҙәр хәҙерге Башҡортостан Республикаһының — көнбайыш, ә Боронғо Башҡортостандың урта (эске) өлөшөнә тап килә, сөнки Идриси картаһында ул урындар «Башкир ал-хариджи» тип билдәләнгән. Хариджи һүҙе ғәрәпсә «эске» тигән мәғәнәгә эйә. Идриси картаһын өйрәнгән Конрад Миллер схемаһында был бик асыҡ күрһәтелгән (14-се биттәге картаны ҡара).

Тышҡы Башҡортостан, йәғни Оло Башҡортостандың сиктәре, ҡайһы тарафтарға барып текәлгәнен Идриси картаһы күрһәтмәй. Ә бына Тышҡы Башҡортостандың (ғәрәпсә әйтһәк, Башкир ал-Халидж) көнбайыш сиктәрен башҡорттарға ҡараған башҡа сығанаҡтарҙы файҙаланып билдәләп була. Мәҫәлән, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының тулы хоҡуҡлы ағзаһы Ғайса Батыргәрәй улы Хөсәйенов Илеш районында яҙып алған «Болғарҙар һәм башҡорттар» тигән риүәйәттә болғар ханы Айҙар тураһында һүҙ бара. Ул үҙенең ауырыу ҡыҙын һауыҡтырыу өсөн өс ғәрәп дауалаусыһына мөрәжәғәт итә. Улары иһә болғарҙар ислам динен ҡабул иткән хәлдә генә ҡыҙҙы һауыҡтырырға риза булалар. Был риүәйәттә болғар ханы Алмуштың Бағдат хәлифәһе Джафар аль-Моҡтадирҙан (ул 902-932 йылдарға тап килә) болғарҙарҙы ислам диненә күндереү өсөн ғәрәп миссионерҙарын ебәрергә һорағандан һуңғы осор ваҡиғалары тураһында һүҙ бара, күрәһең. Ошо риүәйәттә, башҡорттар болғарҙарҙан 15—20 көнлөк юл алыҫлығында йәшәгәндәр, тип әйтелә[17]. Б. А. Рыбаковса иҫәпләгәндә, ул ара 525—700 км-ға тиң. Бында ике ил араһындағы юл Идриси картаһындағынан 175—350 км-ға яҡынraҡ күренә. Риүәйәттәге һандарҙы Боронғо Башҡортостандың көнбайыш сиктәренән алып Болғарҙарға тиклем ерҙәргә ҡарай, тип ҡабул итергә кәрәк.

XI быуаттағы картала ла (ул Мәхмүт Ҡашғарлының һүҙлегенә ҡушып бирелгән) Башҡорт далаһы күрһәтелгән. Шулай итеп, IX, X, XI һәм XII быуаттарҙағы сығанаҡтарҙың барыһында ла Көньяҡ Урал-




Восточная Европа по данным Идриси (схема Конрада Миллера)*

да һәм Урал яны далаларында йәшәгән башҡорттар, Башҡорттар иле, йәғни Боронғо Башҡортостандың барлығы сағылыш тапҡан.

Боронғо Башҡортостан тураһында ентекләп яҙған, уның сиктәрен күрһәткән XIII быуат сығанаҡтары беҙгә билдәле түгел. Ә бына XIY XV быуат сығанаҡтары Боронғо Башҡортостан, уның йылғалары, ҡалалары хаҡында бик ҡиммәтле мәғлүмәттәр бирә.

1375 йылда яҙылған Каталон атласында һәм бер туған ағалы-энеле Пициганиҙарҙың картаһында Иҙел йылғаһы бик аныҡ күрһәтелгән. Унда *Иҙел* (картала *Эдил)* Себер ҡалаһынан алыҫ түгел ерҙән башлана, артабан көнбайышҡа ҡарай аға, шунан һуң көньяҡҡа юл ала, тип яҙылған (15-се биттәге картаны ҡара).

---

* ***Рыбаков Б. А.*** **Күрһәтелгән хеҙмәт.**




Попытка расчленения карты Идриси на отдельные области, связанные с разными источниками информации (маршрутами)*

*1* — Группа маршрутов XII в., связывающих Киев с Западной Европой, Причерноморьем и Поволжьем; *2* — Балтийские маршруты; *3* — Маршрут Константинополь — Тмутаракань — Северский Донец (XI—XII вв.); *4* — Маршрут Константинополь — Трапезунд — Тмутаракань; *5* — Каспийско-Волжские маршруты по географическим сочинениям IX—X вв.

* Рыбаков Б. А. Күрһәтелгән хеҙмәт.

Каталон атласын һәм бер туған ағалы-энеле Пициганиҙарҙың картаһын өйрәнгән Ф. К. Брун был турала түбәндәгеләрҙе яҙа: «...Уның уйынса, *Эдил* 1) Оло һыҙма китабының *Ағиҙеле* йәғни *Белая Воложкаһы* менән; 2) *Ағиҙел* ҡушылғанға тиклемге *Кама* менән (XIV быуатта ла *Кама Волганың* ҡушылдығы тип түгел, ә, киреһенсә, *Волга Каманьщ* ҡушылдығы тип иҫәпләйҙәр. — *Авторҙар*); ахырҙа, 3) Кама ҡушылған ерҙән алып тамағына хәтлем Волга менән тап килгән»[18]. Ф. К. Брун фекеренсә, борон *Эдил* тип хәҙерге *Ағиҙел* йылғаһы, *Каманың Ағиҙел* тамағынан *Волгаға* тиклемге һәм *Волганың Кама* тамағынан алып *Каспий* диңгеҙенә тиклемге өлөшө аталған. XII быуатта һыҙылған Идриси картаһы менән XIV быуаттағы Каталон атласы һәм Пициганиҙарҙың картаһы араһында *Иҙел* йылғаһы тураһында бер генә айырма бар. *Идриси Этил* 3 йылға *(Ағиҙел, Ҡариҙел, Күгиҙел)* ҡушылғандан һуң ғына барлыҡҡа килә, тип XIV быуат атласы һәм карта авторҙары (Ф. К. Брун фекеренсә) *Эдил Ағиҙелде* лә үҙ эсенә ала тип иҫәпләйҙәр. Был ике картала боронғо *Эдил (Этил)* йылғаһының башланған урыны ла башлыса дөрөҫ билдәләнгән, сөнки уларҙың береһендә *Этил* Себер ҡалаһынан бик үк алыҫ булмаған урындан, икенсеһендә *Рифей* тауҙарынан башлана, тип фараз ителә[19].

1459 йылғы Фра Мауро картаһында асыҡтан асыҡ: *«Edil* йәки *Vulqa* йылғаһы Рифей тауҙарынан башлана... аҙаҡ *Каспий* йәғни *Гиркан* диңгеҙенә ҡарай аға», — тип яҙылған[20].

Бер туған ағалы-энеле Пициганиҙарҙың картаһы башҡа сығанаҡтарҙа осрамаған топонимик материалдарҙың күп булыуы менән үҙенсәлекле. Мәҫәлән, унда ошондай юлдар бар:

«Артабан беҙ тәүге карталағы Char ҡалаһынан һуң (күрәһең, был ҡала атамаһының башы), Каталон картаһында Pascherti ҡалаһы төшөрөлгән урында һәм уға ифрат оҡшаш Pascerty тигән ҡаланы осратабыҙ, уның атамаһы Рубруквиста Pascatir тип аталған. Курбский кенәз әйтеүенсә, «Каманың үрге ағымында йәшәгән» башҡорттарға бәйле, Ике картала ла Башҡорт һәм Йүкәтин ҡалалары араһында, Ителдең көньяҡ өлөшөндә, йылғанан бер аҙ ситтәрәк Рәшид-эд-Диндең Мөримдәрен хәтерләткән Marmorea ҡалаһын осратабыҙ. Уларҙы, ныҡ ҡаршылыҡ күрһәтһә лә, Батый тарафынан баҫып алынған бик һуғышсан мари (бигерәк тә туғай мариҙары) тип ҡабул итергә кәрәк»[21]. Шулай итеп, XIV быуатта эшләнгән Фра Мауро картаһында Паскерт тигән ҡала тәү тапҡыр теркәлгән. Моғайын, был урыҫтар нигеҙ һалған Өфө ҡалаһына тиклем үк булған Көньяҡ Уралдағы тәүге ҡала-ҡәлғәләрҙең береһелер. Уралдағы ҡалаларҙы өйрәнеүселәр, урыҫтар төҙөгән хәҙерге Өфө ҡалаһы урынында шул ерҙә йәшәгән халыҡтың ҙур йәшәү төйәге булған, тип әйтәләр[22]. Ә бының булыуы бик ихтимал, сөнки хәҙерге *Иҫке Өфө* тигән биҫтәне борон башҡорттар *Туратау* тип йөрөткәндәр. *Туратау* һүҙе, хәҙерге башҡорт теленә әйләндерһәң, *«калатау»* тигән мәғәнәгә эйә. Шулай итеп, Фра Мауро картаһы беҙҙең өсөн Паскерт тигән ҡаланың булыуын раҫлауы менән әһәмиәтле. Көнсығыш сығанаҡтарының байтағында Паскерттан башҡа икенсе ҡалалар теркәлгән булһа ла[23], XVI быуатҡа тиклемге Башҡортостан ҡалаһыҙ ил тип иҫәпләнгән. Ә Фра Мауро картаһында туранан-тура ҡала ла төшөрөлгән, *Паскерт* тигән исеме лә әйтелгән.


КАЗАНЬ
Волга
Кама
Степной Зай
Ик
Белая
Уфа
УФА
Волга
Кондурча
Бол.Иргиз
Самара
ОРЕНБУРГ
Урал
Сакмара
Белая
Урал
ЧЕЛЯБИНСК
Курган
▲ - тора һүҙле ҡаласыҡтар атамалары
● - ҡала һүҙле ҡаласыҡтар атамалары
▶ - хан һүҙле ҡаласыҡтар атамалары

Урта быуаттағы сығанаҡтарҙы ентекле өйрәнгән Ә. Б. Булатов Идриси картаһында Башҡортостанға ҡараған дүрт ҡаланы таба. Уларҙың *Хараҡыя* тигәне *Каманың Ағиҙел* менән ҡушылған ерендә булған. Ҡалған өсәүһе *Минжан*, *Мазира* һәм *Казира* тип аталған[24]. Хәҙерге Башҡортостан картаһында был ҡалаларҙың урыны ла юҡ, исеме лә билдәһеҙ. Әммә борон Башҡорттар илендә ҡалаларҙың булыуын күрһәткән ер-һыу атамалары бар. Һүҙ бында *кала* һәм *тура* тигән һүҙҙәр менән яһалған урын исемдәре тураһында бара. Беҙ хәҙерге башҡорт телендәге *кала* һүҙе һәм боронғо төрки телендәге *тура* һүҙе «нығытма» (урыҫса город) мәғәнәһен йөрөткәнен беләбеҙ.

Боронғо төрки ҡомартҡыларында ҡулланылған *тора (тура)* һүҙе менән Башҡортостан Республикаһында ун дүрт атама яҙып алынған. Улар Башҡортостандың бөтә райондарында тиерлек осрай, әммә күпселеге төньяҡ-көнсығыш, көньяҡ-көнсығыш үҙәк райондарға тап килә. Мәҫәлән: *Тратау* — Краснокама, Стәрлетамаҡ райондарында; *Хантора> Кандра* — Туймазыла; *Туратау*, *Туралы күле* — Өфө районында; *Тора* йылғаһы — Баймаҡ, Дыуан, Мәләүез, Мәсетле, Салауат, Учалы райондарында; *Торасыҡ тубәһе* Ҡариҙел районында теркәлгән.

*Кала* һүҙенә нигеҙләнеп барлыҡҡа килгән атамаларҙың һаны ла күберәк, таралыу ареалы ла киңерәк. Исеме есеменә тап килә тигәндәй, *кала* һүҙе атама эсенә ингән урындың күбеһендә ҡорған, убалар, боронғо ҡаласыҡ, нығытмалар табылып тора. Мәҫәлән: Илеш районындағы Ҡалатауҙа — *Йондоҙ* ҡаласығы, Ҡалтасы районындағы Ҡыҙ-Ҡалатауында — *Иҫке Мошты* ҡаласығы, Нуриман районының Ҡыҙ-Ҡалатауында — *Аҡбирҙе* ҡаласығы, Дүртөйлө районындағы Ҡалай-Тубала Бишкурай ҡаласығы булыуы билдәле. Былар Башҡортостандың археологик картаһында күрһәтелгән. Юғарыла һанап үтелгәндәрҙән башҡа, *Ҡалабар*, *Ҡалайылға* (Күгәрсен районында), *Ҡалатау* (Баҡалы, Балтас, Ғафури, Мәсетле, Миәкә, Салауат, Тәтешле, Саҡмағош, Шишмә райондарында), *Ҡалакүл* (Балтас районында), *Ҡалаташ* (Мәләүез районында), *Ҡалғаһау* (Бөрйән районында) тигән атамалар булыуы билдәле. Бәлки, был атамалар теркәлгән урындарҙа ла боронғо ҡаласыҡ, нығытма табылыр (17-се биттәге картаны ҡарағыҙ).

Әлбиттә, боронғо ҡалалар хәҙерге ҡалалар кеүек ҙур майҙанды биләмәгән, унда халыҡ та күп йәшәмәгән. Боронғо ҡала ырыу, ҡәбилә, ҡәбиләләр берләшмәһенең башлығы (бейе) йәшәгән урынды, оло йыйынға йыйыла торған төбәкте тәшкил иткән булырға тейеш. Шуғалыр ҙа, моғайын, боронғо ҡаласыҡтар атамаһында *хан* һүҙе лә осрай. Быға миҫал итеп, Баҡалы районындағы Карпов ҡаласығының *Ханша*, Иглин районындағы Охлебинин ҡаласығының *Ханкала*,. Баймаҡ районындағы *Ханкала* убаһын, Учалы районындағы *Ҡантүбә* убаларын килтерергә мөмкин (17-се биттәге картаны ҡара).

19-сы биттә Р. Ғ. Кузеев төҙөгән Боронғо Башҡортостан картаһы килтерелә*. Уның буйынса, боронғо башҡорттар хәҙерге Ағиҙел йылғаһының уң яғында йәшәмәгән булып күренә. Башҡорттарҙың боронғо

---

* *Кузеев Р. Г.* **Историческая этнография башкирского народа. — Уфа: Башкнигоиздат, 1978. — 164-се бит.**




Расселение древнебашкирских племен:

*1* — территория Волжской Булгарии в X в.; *2* — область расселения древнемадьярских племен в VIII—IX вв.; *3* — область расселения булгаро-мадьярских племен в IX—X вв.; *4* — древняя Башкирия; *5* — расселения «древнебашкирских» родо-племенных образований в XIX в. (1 — усерган; 2 — байлар, 3 — сураш; 4 — тангаур; *5* — бурзян; *6* — ягалбай; *7* — тамьян; *8* — ун; *9* — бишул; *10* — кудей; *11* — уран; *12* — сынрян).

* Карта из книги Р. Г. Кузеева «Историческая этнография башкирского народа. — Уфа: Башкнигоиздат, 1978.

ҡаласыҡтары (ҡалалары, туралары) иһә хәҙерге Башҡортостан Республикаһының бөтә райондарында ла табыла. Шуға ла был карта боронғо башҡорттарҙың VIII — IX быуаттарҙағы территорияһына ғына ҡағыла, тип ҡабул итергә кәрәк.

Ер-Һыу атамалары — ышаныслы сығанаҡ. Сөнки топоним ижтимағи ихтыяжды ҡәнәғәтләндереү өсөн барлыҡҡа килә. Шуға ла атамалағы мәғлүмәтте ала, уҡый белеү мөһим. Ер-Һыу атамаларын ғилми эштәрҙә файҙаланыу мөһим һығымталарға нигеҙ була ала, элек йәшәп килгән, нығынған фекер-фараздарға яңыса ҡарарға мөмкинселек бирә.

## УРЫҪ ТЕЛЕНДӘГЕ СЫҒАНАҠТАР (XVI—XVIII БЫУАТТАР)

IX—XIV быуаттарға ҡараған сығанаҡтар башлыса ғәрәп телендә яҙылған. Тик Каталон атласы, ағалы-энеле бер туған Пициганиҙарҙың һәм Фра Мауроның карталары ғына латин телендә башҡарылған. Боронғо сығанаҡтарҙың ер-һыу атамаларына ҡарағанда күберәк теге йәки был халыҡтар тураһында мәғлүмәт биреүен дә әйтеп үтергә кәрәктер. Башҡорттар Урыҫ дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылғас, XVI быуат урталарынан алып урыҫ сығанаҡтарында Башҡортостан, унда көн күргән башҡорттар тураһында мәғлүмәттәр бермә-бер арта.

XVII быуатта яҙылған «Оло һыҙма Китабы» иң ҡиммәтле сығанаҡтарҙың береһе булып тора. Унда башҡорттар тураһында түбәндәгеләр әйтелгән: «Ағиҙелдең тамағынан алып башына тиклем, Өфө йылғаһының ике яры һәм Урал тауҙарының ике яҡ битләүҙәре буйлап һәм унан арыраҡ та тик башҡорттар ғына йәшәй»[25].

«Оло һыҙма Китабы»нда Көньяҡ Уралдағы, Урта һәм Түбәнге Волга буйындағы башҡорт атамалары сағылған: Мәҫәлән: *Белая Воложка* (ул саҡта *Ағиҙелде* урыҫтар шулай атаған. — *Авторҙар), Кама*, *Өфө*, *Яйыҡ*, *Һамар*, *Ыҡ, Өфө* ҡалаһы, *Шайтан (Алабуға)* ҡаласығы, *Һарытау, Царицын, Аралтау (Уралтау)* һ. б. Быларҙан тыш «Оло һыҙма Китабы»нда шул осорҙағы башҡа сығанаҡтарҙа осрамаған, атамалар ҙа һанап кителә: *Йүгерек Ырғыҙ*, *Йылаш Ырғыҙ*, *Супулаҡ (Соҡулаҡ), Тура*, *Быҙаулыҡ*, *Кэмэлек*, *Караман, Кесе Үҙән*, *Ағас Үҙән* тигән йылғалар һәм *Һәнәрле күле*. Сығанаҡтағы *Тим, Карадыуан, Һыҙан (Һыҙран), Туйма, Үгеҙ*, *Уроя, Ырыҫлан, Царицьш*, *Упа*, *Услы*, *Уса*, *Арен (Ырын)* кеүек атамалар Көньяҡ Уралдағы топонимдарҙың килеп сығышын асыҡлауҙа баһалап бөткөһөҙ ярҙам итәсәк.

XVII—XVIII быуаттарҙағы дауыллы ваҡиғаларҙан, бигерәк тә 1773—1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышынан һуң, урыҫ телендәге сығанаҡтарҙа кеше йәшәгән төбәк, ауыл тураһында, уның ултырған урыны, ҡалғаләрҙән алыҫлығы, унда йәшәгән кешеләрҙең дөйөм иҫәбе, ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың һаны, ауылдың күренекле, хөрмәт ҡаҙанған кешеләре хаҡында мәғлүмәттәр күбәйә төшә. Бындай мәғлүмәттәр батша администрацияһына башҡорттарҙы ауыҙлыҡлар өсөн, уларҙан һалым түләтергә һәм башҡорттарҙың үҙ ирке өсөн иҙеүселәргә ҡаршы көрәшен алдан белеү өсөн кәрәк булыуы шикһеҙ. Шундай сығанаҡ-

тарҙың береһе булып 1776, 1777 йылдарҙа яҙылған ҡулъяҙма — «Ырымбур губернаһының топографик лексиконы йәғни һүҙлеге» тора[26]. Был ҡулъяҙма һүҙлектең авторы — «Ырымбур губернаһының топографияһы»н яҙған Петр Иванович Рычков. Ваҡытында баҫылырға тейешле булһа ла, авторы үлеп китеүе сәбәпле, ике томдан торған һүҙлек баҫылмай ҡала. 1994 йылда баҫылып сыҡҡан «Башҡорт топонимияһы» исемле монографияла беҙ был хеҙмәттең ғилми әһәмиәтен күрһәтеп үткәйнек инде[27]. Шуға күрә бында П. И. Рычков һүҙлегенең сығанаҡ булараҡ ҡына әһәмиәтенә иғтибарҙы йүнәлтәбеҙ.

П. И. Рычковтың ҡулъяҙма һүҙлеге ономастик материалдың күплеге менән айырылып тора. Һүҙлектә башҡорт ырыуҙарының, ауылдарының, ауыл эсендәге төрлө йәмғиәт етәкселәренең, ауыл ултырған йылға-тау һ. б. шундай урындар исемдәре бирелгән. Бер нисә миҫал килтерәбеҙ:

«Абҙаҡ — Исәт провинцияһының Күбәләк улусындағы, Байым тархан Таймасов старшина булған башҡорт ауылы. *Ҡыҙылға* ҡойған *Ҡаҫмаҡты* йылғаһы буйында. Ауылдан Силәбегә тиклем 20 саҡрым, унда 10 йорт бар»[28].

«Башҡортостандың Ағиҙел йылғаһының үрге ағымындағы бөрйән улусы. Перепись буйынса унда 156 йорт теркәлгән[29]».

«Иҫке Һаҡмар ҡаласығынан төньяҡҡа бер саҡрымда *Дар ағасы* тауы ята (Һаҡмар буйлап ярты саҡрым алыҫлығында яңы ҡаласыҡ төҙөлгән). Был тау үҙ исемен элек булып үткән беренсе башҡорт күтәрелешендә ҡатнашыусыларҙы ҡурҡытыу маҡсатында язалау өсөн ҡуйылған дар ағастарынан алған. Унда ике күл бар, үрге яғында — ваҡ сауыллыҡ»[30].

П. И. Рычков һүҙлегендә килтерелгән мәғлүмәттәрҙең дөрөҫлөгөнә шул осорға ҡараған башҡа сығанаҡтар менән сағыштырып ышанып була. Һүҙлектә, мәҫәлән, топонимдарҙың сығышын асыҡлауҙа дәлил булырлыҡ башҡорт дворяндары һәм урыҫ алпауыттарының исемлеге бирелгән. Беҙ уларҙың тулы исемлеген төҙөнөк. Башҡорт дворяндарынан түбәндәгеләрҙе һанап үтәйек:

**Аяҙбай Ҡаҙылов** — Сырҙы улусы йөҙ башы; **Байғаҙы Көҫәмешев** — Әйле һәм Һыҙғы улустары старшинаһы; **Байым** тархан **Ҡыҙрасов** — Күбәләк улусы старшинаһы; **Исай Тоҡтағолов** — Ҡара табын (икенсе урында Көҙөй) улусы старшинаһы; **Көсөк Мортазин** — Тиләү улусы старшинаһы; **Күкәй (Көнәй** тип тә яҙылған) **Бикбулатов** — Ҡыуаҡан улусы старшинаһы; **Коломбәт Асылбаев** — Оло ҡатай улусы старшинаһы; **Мортаза Юртумов** — Әйле улусы старшинаһы; **Мәхмүт Ҡалмаҡаев** — Терһәк улусы йөҙ башы; Рәсүл тархан **Таймасов** — Күбәләк улусы старшинаһы; **Сары Абдуллин** — Бала ҡатай (икенсе урында **Шуран**) улусы старшинаһы; **Собханғол Ҡошманов** — Әйле улусы старшинаһы; **Сөләймән Ҡармышаҡов (Ҡармышев** тип тә йөрөтәләр) — Оло ҡатай улусы старшинаһы; **Тереғол Ҡаҙанбаев** — Оло ҡатай улусы старшинаһы; **Туғыҙаҡ Тәүәбилев** — Мәкәтин (Бәкәтин) улусы старшинаһы; **Хәмит Тимеров** — Салйоғот улусы старшинаһы; **Әбделкәрим Ҡорманаев** — барын табын улусы старшинаһы; **Әбделкәрим Рахманғолов** — Барын табын улусы старшинаһы; **Әлекәй Юнаев** — Шуран улусы старшина ярҙамсыһы; **Әшер (Әшир) Байсу-**

**рин** — Терһәк улусы йөҙ башы; **Ялтыр тархан Таймасов** — Ҡара табын улусы старшинаһы һ. б.

Ошо исемлектәге кешеләрҙең күбеһе академик В. В. Вельяминов-Зернов тарафынан асыҡланған тархандар араһында бар. Мәҫәлән, **Ялтыр Таймасов, Рәсүл Таймасов, Байым Ҡыҙрасов** һ. б. Әммә унда яңыларын да осратырға мөмкин, мәҫәлән, П. И. Рычков һүҙлегенә **Рәсүл Этйеймәҫов** инмәгән.

В. В. Вельяминов-Зерновтың «Башҡорттарға урыҫ батшалары биргән тарханлыҡты өйрәнеү сығанаҡтары» тигән хеҙмәтендә[31] тархандың фамилияһы, исеме, уның балалары, яҡындары, тархандың дәрәжәһе бирелеү сәбәптәре һәм тархандың батшаға күрһәткән хеҙмәттәре һанап үтелгән. Мәҫәлән, «Ырымбур экспедицияһы Өфө әйәҙе кәнсәләренең тархандарға һәм башҡорттарға 1784 йыл 24 декабрь указы.

Ноғай даруғаһы

Бөрйән улусынан

1) **Алдарбай Исәкәев** тарханға, уның балалары, ейәндәре һәм ир туғандарына — Алдарҙың Ҡырым һәм Аҙау походтарында ҡатнашҡаны, унда өс тапҡыр яра алғаны, уның менән яңғыҙ алышта һуғышҡан черкесты еңеп үлтергәне, ҡырым татарҙарынан тел (плен) алып ҡайтҡаны һәм император Петр Беренсе ғали йәнәптәре хөрмәтенә изгелекле һәм мәңгелек дан иғлан иткәне өсөн»[32].

В. В. Вельяминов-Зернов хеҙмәтенең аҙағында тархандар тураһындағы архив документтарының күсермәһе бирелгән. Шул күсермәләрҙә **Алдарбай Исәкәевтең** балалары, ир туғандары, ейәндәренең исемдәре килтерелгән. Мәҫәлән, Алдар Исәкәев тархандың **Морат, Муса, Йосоп, Мәҡсүт, Мансур, Мысыр, Сәйетбаттал, Бәхтегәрәй, Әҙелгирәй Алдаров** тигән улдары булған. Уның ир туғандары **Арыҫланбәк Дәүәтәев, Ҡашҡар Дәүәтәев**, ейәндәренән **Алтынйәлил, Үтәгән Моратовтар, Хоҙамәндә, Уткилде, Сыуашбай Мусиндар, Әбдәс Йосопов, Хоҙайназар Мәҡсүтов**, бүләләренән **Сурай, Яҡшыдәүләт, Байғужа, Ләнүзә Арыҫланбәковтар, Йәһүтә Суриндар** тарханлыҡ дәрәжәһен алған булған. Ошо уҡ сығанаҡтарҙан Алдар Исәкәевтең атаһы **Исәкәй Ҡаҙырбаҡин** да һанап үтелгән. Хеҙмәттең иҫкәрмәләрендә Алдар Исәкәевтең артабанғы яҙмышына ҡағылышлы ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бар. Мәҫәлән:

**«Алдарбай (Алдар) Исәкәев (Исәев)** тураһында, уның ҡырғыҙ-ҡайсаҡтарҙы Рәсәйгә буйһоноуына булышлыҡ итеүҙә ҡатнашыу, ғөмүмән, уның тормошо хаҡында Рычковтың «Ырымбур тарихы»нда (11-се, 14-се, 16-сы, 403-сө, 419-сы, 486-сы биттәрҙә) һәм «Ырымбур губернаһы топографияһы»нда (111-се, 218-се, 311-се биттәрҙә) ҡыҙыҡлы һәм ентекле мәғлүмәттәр табырға мөмкин. Алдар ғүмере бәхетһеҙ тамамлана. 1740 йылда ул генерал-майор Соймонов тарафынан Минзәлә ҡалаһында 1735—1740 йылғы Башҡорт ихтилалында ҡатнашҡаны өсөн язалап үлтерелә»[33].

Ошоға оҡшаш мәғлүмәттәр башҡа улус тархандары тураһында ла бар. Әлбиттә, тулы мәғлүмәтте был сығанаҡты ентекле тикшергәндән һуң ғына алып булыуын онотмаҫҡа кәрәк. Айырып әйткәндә, В. В. Вельяминов-Зернов хеҙмәтенең 22-се битендә «(Себер даругаһы Ҡара табын улусы. — *Авторҙар)* башҡорт тархандары **Ҡыҙрас, Ильяс Мул-**

лаҡаевтар, уларҙың бер туған ағалары **Үтәкәй Юлышев** һәм уның улы **Йомаҡайға»**[34] тарханлыҡ бирелгән тип яҙылған. Был инде **Ҡыҙрас** менән **Ильястың** аталары **Муллаҡай,** уның атаһы (бәлки ағаһы. — *Авторҙар)* **Үтәкәй**, **Үтәкәйҙең** атаһы **Юлыш** булған тигәнде аңлата. Шулай итеп, сығанаҡ мәғлүмәттәрен ентекләп өйрәнеү табын ҡәбиләһе башҡорто **Муллаҡаевтар** шәжәрәһенең бер өлөшөн асыҡларға мөмкинлек бирә.

Был сығанаҡта беҙҙе атамаларҙың сығышын асыуға булышлыҡ иткән мәғлүмәттәр ҡыҙыҡһындыра. Ошо йәһәттән тарханлыҡ дәрәжәһе «башҡорт бейҙәре **Йосоп, Ғәбдин, Сәфәр Бикәтәевтәргә**... уларҙың иптәштәре **Ишкә,** аталары һәм олаталары **Ишкилде** менән **Йосоп** һәм ҡарт ата-олатайҙарының Ҡырым, Аҙау һәм Швед походтарындағы хеҙмәттәре өсөн бирелде»[35] тип әйтелгәндәр бигерәк тә мөһим. Бында хәҙерге Әбйәлил районындағы Оло Ғәбдин ауылына нигеҙ һалған Ғәбдин Бикәтәев тураһында һүҙ бара.

Академик В. В. Вельяминов-Зернов архивта һаҡланып ҡалған указдар буйынса ғына эшләүен һыҙыҡ өҫтөнә алған. Шуға ла нисек кенә ҡиммәт булмаһын, академик төҙөгән тархандар исемлеге тулы түгеллеген әйтеп үтергә кәрәк. Быуның шулай икәнлегенә Ә. Н. Усмановтың XVI—XVIII быуаттарҙағы Башҡортостан тарихына арналған хеҙмәтен өйрәнеп ышанырға мөмкин[36]. Ошо хеҙмәттә В. В. Вельяминов-Зернов исемлегендә булмаған тархандарҙың исеме һәм фамилиялары осрай. Мәҫәлән, Күрпәс-Табын улусынан **Аҡҡыров Күскәлдәй**, Мең улусынан **Балтан Үркәй**, Ҡыпсаҡ улусынан **Бикбулатов Күсәнбирҙе**, Тамъян улусынан **Икбаев Тәкәй**, Әйҙе улусынан **Имаев Килкәй**, Бөйрән улусынан **Сәликәев Әхмәмәт**, Тамъян ауылынан **Юшуров Ивен** һ. б.[37].

Өфө һәм уның эргә-тирәһендәге ер-һыу атамалары буйынса 1591 — 1629 йылдарҙы эсенә алған «Өфө буйынса ер бүлеү кенәгәһе» бик ҡиммәтле сығанаҡ булып тора. Был сығанаҡты тәүгеләрҙән булып билдәле тарихсы Н. Ф. Демидова археографик йәһәттән тикшерҙе[38]. Айырып әйткәндә, ул «Өфө буйынса ер бүлеү кенәгәһе» Өфөлә даими хеҙмәт гарнизонының барлыҡҡа килеүен, ҡаланың, тәүге халыҡтары,
XVI быуат аҙағында Өфөлә барлыҡҡа килгән төрлө ҡатламдар структураһын, бүлеп бирелгән ерҙәрҙең географик ориентирҙарын, йомошло кешеләр һәм башҡорттар биләмәләренең үҙгәреү характерын һ. б.-ларҙы асыҡларға булышлыҡ итә, тип билдәләне. Хеҙмәттең топонимик йәһәттән ҡиммәтен күрһәтеүгә Р. З. Шәкүрев тә ике мәҡәләһен арнағайны[39]. Унда автор «Өфө буйынса ер бүлеү кенәгәһе» Өфө эргәтирәһенең физик-географик һәм топонимик тасуирламаһы тип баһалай. Тарихи үҙгәрештәр кисергән топонимик номенклатура автор тарафынан тикшерелгән. «Өфө буйынса ер бүлеү кенәгәһе»нең төрки сығанаҡлы топонимдарҙы өйрәнеүҙә, атамаларҙың сығышын асыҡлау өсөн әһәмиәте ҙур.

Әммә «Өфө буйынса ер бүлеү кенәгәһе» ер-һыу атамалары ғына түгел, ә, ғөмүмән, XVI быуат аҙағы — XVII быуат башы Өфө ономастикаһы буйынса бик ҡиммәтле мәғлүмәттәр йыйылмаһы булып тороуын да күҙ уңынан сығарырға ярамай. Быуның шулай икәнен был сыға-

наҡты икенсе сығанаҡта һаҡланып ҡалған мәғлүмәттәр менән сағыштырып белеп була. Мәҫәлән:

| «Өфө буйынса ер бүлеү кенәгәһе» исемлеге | П. И. Рычков «Лексиконы...» һәм «Иҡтисади иҫкәрмәләр»ҙәге исемлек |
|---|---|
| 1. Аничков (Оничков) | 1. Аничковтар |
| 2. Атай Репьев, Петр Атаев | 2. Атаевтар |
| 3. Брехов | 3. Бреховтар |
| 4. Ветошник (Ветошников) | 4. Ветошниковтар |
| 5. Волков | 5. Волковтар |
| 6. Гладышев | 6. Гладышевтар |
| 7. Ждан Усольцев | 7. Ждановтар |
| 8. Зыков | 8. Зыковтар |
| 9. Каловский | 9. Каловскийҙар |
| 10. Киржацкий | 10. Киржацкийҙар |
| 11. Лопатин | 11. Лопатиндар |
| 12. Онучин | 12. Онучиндар |
| 13. Тарбеев | 13. Тарбеевтар |
| 14. Ураков | 14. Ураковтар һ. б. |

Ошондай ономастик материалдар Өфө янындағы ер-һыу атамаларының сығышын асыҡлауҙа ышаныслы сығанаҡ булып тора. Быны түбәндәге таблица күрһәтә:

| Өфө тирәһендәге топонимдар | «Өфө буйынса ер бүлеү кенәгәһе» исемлеге | Һуңғыраҡҡы сығанаҡтар мәғлүмәттәре |
|---|---|---|
| 1 | 2 | 3 |
| 1. Сергей Аничков (Оничков) биләмәһе | Аничков (Оничков) Олександр Олександр улы, Аничков (Оничков) Володимер Володимер улы | Аничковтар — Өфө провинцияһы дворяндары (П. И. Рычков «Лексиконы...»), Аничковтар — Өфө өйәҙе ауыл биләүсеһе (Генераль межалауға иҡтисади иҫкәрмәләр, артабан — ГМИИ); Аничково ауылы Владимир төбәге менән, Аничково (шул уҡ Тауш) ауылы, Аничково төбәге — Өфө өйәҙендә (ГМИИ) |
| 2. Кадомцева (Кадомцево, батша һарайы ауылы Кадомцево, Кадамцева) ауылы; Кадомцова (Яңы Богородское) ауылы | Яңы Слободанан Кадомец Иван Васильев; Кадомцево ауылы крәҫтиәне Кадомцев Смирка (Смирный) | Богородское (шул уҡ Кадомцево) — Өфө өйәҙе ауылы; Сидор, Василий, Дмитрий Леонтий улдары Кадомцевтар — Өфө өйәҙе ауыл биләүселәре (ГМИИ) |

| 1 | 2 | 3 |
|---|---|---|
| 3. Атай ыҙаны, Атай баҫыуы | Атай Репьев — Кадомцево дәүләт ауылы крәҫтиәне; Атаев Петр (Петр Атай улы Репьев) — йомошло крәшен, Кадомцево ауылы крәҫтиәне | Атаевтар — Өфө провинцияһы дворяндары (П. И. Рычков «Лексиконы...»); Авдотья Иван ҡыҙы, Григорий, Василий, Дмитрий Степан улдары Атаевтар — Өфө өйәҙе ауыл биләүселәре; Ивановка (шул уҡ Атаево) — Авдотья Иван ҡыҙы Атаеваның биләмәһе (ГМИИ) |
| 4. Онучин күле | Иван (Ыван) Черников (Онучин) — баяр балаһы | Онучиндар — Өфө провинцияһы дворяндары (П. И. Рычков «Лексиконы...»); Наталья Никита ҡыҙы, Никита, Василий Иван улдары Черников-Анучиндар — Өфө өйәҙендәге ике ауылды биләүселәр, Черниково (Анучино) — Өфө өйәҙендәге ауыл (ГМИИ) |
| 5. Шөгөр ауылы, Шөгөр (Урьяҙы йылғаһы) | Шөгөр (Шөгөрәли) Күккүҙов, Манҡатай Шөгөрөв — Мең улусы башҡорттары, Шөгөрөв Ҡарабай | Шөгөр ауылы — Өфө өйәҙендә (ГМИИ) |

Беҙ «Өфө буйынса ер бүлеү кенәгәһе»ндәге топонимдарҙың һәм антропонимдарҙың исемлеген төҙөнөк һәм уларҙың дөйөм һанын билдәләнек. Китаптағы кеше исемдәре һәм фамилияларының һаны 355, топонимдарҙың һаны 267 булып сыҡты. «Өфө буйынса ер бүлеү кенәгәһе» ҡайһы бер атамаларҙың боронғо торошон асыҡларға, формаһын тергеҙергә, региондағы топонимик системаның үҫеш ҡанундарын күҙәтергә булышлыҡ итә. Түбәндә «Өфө буйынса ер бүлеү кенәгәһе»ндә генә осраған атамалар килтерелә. Мәҫәлән, (ойконимдарҙан) *Абыҙ* ҡаласығы, *Булаш Игилик*, *Максим Керәшен*, *Шөгөр* ауылдары. *Күгәрсен* баллы төбәге, *Максим Мордвинов (Мордвин)* починогы, *Яңы Слобода*, *Яңы Починок*, *Пятое Писемский* биләмәһе; (гидронимдарҙан) *Брызгалову Булаш* күлдәре; *Киәҙе (Киәз)*, *Ҡарғалыҡ*, *Лесен*, *Өлдөклө$_у$ Сикияз*, *Ҡара ярын*, *Черкасъяҙы*, *Шекшиҙе (Шекшиҙер)* йылғалары, *Табын* кисеүе һ. б.-лар.

Тикшеренеүселәр өсөн «Өфө буйынса ер бүлеү кенәгәһе»ндәге атамаларҙың структураһы ла ҡыҙыҡһыныу уята. Сығанаҡта бер нигеҙле һәм күп нигеҙле топонимдар ҙа бар. Уларҙың 91 процентын ике һәм өс нигеҙҙән яһалған атамалар тәшкил итә. 9 процент бер һәм дүрт нигеҙҙән торған атамаларға тура килә. Әммә улар оригиналь структуралы булыуы менән айырылып тора. Мәҫәлән, бер нигеҙле атамаларҙың барыһы ла генетив типта (йәғни эйәлек килеш формаһында).

Бында һүҙ рус сығышлы топонимдар тураһында бара. Мәҫәлән, **роспашь Атаева, деревня Кадомцева, городьба Рудакова.** Генетив типтағы атамалар бер, ике һәм ос нигеҙле атамаларҙың 35,5 процентын тәшкил итә. Сығанаҡтағы атамалар морфологик йәһәттән дә ифрат ҡыҙыҡлы. Уларҙың 30,5 проценты *-ов,* суффикслы сифаттан, 16,3 проценты төп сифаттан яһалған. *-ск> -ин* суффикслы атамалар өлөшөнә 11,5 процент тап килә.

Юғарыла күрһәтелгән Р. З. Шәкүрев мәҡәләһендә **Иванова межа Рудакова, Первушинская пашня Пушкарева** кеүек өс нигеҙле һирәк осрай торған атамалар килтерелгән. Уларға **Енгузина пустая земля, Иванов Васильчинин усад** тигән атамаларҙы өҫтәргә мөмкин. Әммә иң ҡыҙыҡтары дүрт һәм биш һүҙҙән яһалған атамалар араһында. Ҡарағыҙ: **Якова Звягина поместная земля, Яковлева земли Звягина грань, Иванова заложные земли Рудакова** (былары дүрт һүҙле топонимдар), **Михайлова земля Гаврилова сына Ортемьева, Якунина пашня Кондратьева сына Толмача** (былары биш һүҙле атамаларҙан).

Һүҙьяһалыш йәһәтенән сығанаҡтағы атамаларҙың ҡатнаш ысул менән яһалған синтаксик конструкцияларҙың күп булыуы иғтибарҙы йәлеп итә.

Әлбиттә, тикшерелгән сығанаҡтағы тарихи, географик һәм лингвистик мәғлүмәттәр һанап үтелгәндәр менән генә, бәлки, сикләнмәйҙер, тип уйлайбыҙ. Әммә ошолары ла «Өфө буйынса ер бүлеү кенәгәһе»нең (1591 —1592—1626 йылдар) тарихи һәм хәҙерге Башҡортостан топонимияһы өсөн ифрат ҙур әһәмиәтле икәненә ышаныrға мөмкинлек бирә.

XVIII быуат аҙағында Рәсәйҙә Генераль межалау башлана. Уның төп маҡсаты булып ерҙәрҙе илдәге социаль-сәйәси хәлдәргә ярашлы итеп бүлеү тора. Межалау материалдары карталарға төшөрөлә. Карталар иһә иҡтисади иҫкәрмәләр менән тәьмин ителә. Был иҫкәрмәләрҙә теге йәки был ауылдың, географик объекттың кемдеке булыуы, уның ориентирҙары, ауылда йәшәгән кешеләрҙең социаль һәм милли йәһәттән составы, кешеләрҙең һаны, шөғөлө, административ-территориаль бүленеше, урынға ҡыҫҡаса географик тасуирлама урын ала. Мәҫәлән:

*«Ҡалны (Ҡаңлы. — Авторҙар)* улусы,
Үрмәкәй, Балғажы һәм Аҡтау түбәләре башҡорттары менән прапорщик Петр Осип улы Тевкелев, төрлө дәрәжәле типтәрҙәр һәм башҡа диндәге кешеләрҙең дөйөм биләмәһе:
Бүздәк
башҡорттар 7 йорт — 11 ир-ат, 12 ҡатын-ҡыҙ,
мырҙалар 11 йорт — 46 ир-ат, 33 ҡатын-ҡыҙ;
Ҡандракүл
башҡорттар 23 йорт — 73 ир-ат, 78 ҡатын-ҡыҙ,
типтәрҙәр 5 йорт — 22 ир-ат, 16 ҡатын-ҡыҙ;
Шалынлыкүл (Шланлыкүл. — *Авторҙар)*
башҡорттар 12 йорт — 40 ир-ат, 37 ҡатын-ҡыҙ,
типтәрҙәр 14 йорт — 48 ир-ат, 55 ҡатын-ҡыҙ,
мырҙалар 4 йорт — 8 ир-ат, 5 ҡатын-ҡыҙ...

Иҡтисади иҫкәрмәләр.
Күрһәтелгән ауылдар урынлашҡан:
Бүздәк — Ҡыйҙаш йылғаһының һәм ике Шишмәнең ике ярында. Унда мәсет...
Ҡандракүл — Ҡандракүл буйында. Унда мәсет...
Шалынлыкүл — Ҡыйҙаш йылғаһының уң, исемһеҙ үҙәктең ике яғында. Унда мәсет... Ерҙәре Әсән йылғаһының — уң, Сөн, Сәрмәсән йылғаларының — һул, Силанзар йылғаһының — уң, Сураш йылғаһының һул яғында, Оло Ҡарандың ике яғында урынлашҡан.

Ошо ауылдарҙың кешеләре ерҙе эшкәртәләр. Етеш йәшәйҙәр. Ҡыр эштәренән тыш бәйләм бәйләйҙәр, етен, киндер иләйҙәр. Үҙ мәнфәғәттәре өсөн етен, буҫтау һуғалар, күпмелер өлөшөн һаталар»[40].

Һүрәтләнгән объекттың төрөнә ҡарап мәғлүмәттәрҙең характеры үҙгәрә. Ҡалалар, мәҫәлән, түбәндәгесә тасуирлана: «Бәләбәй ҡалаһы сыуаштар, суҡындырылған крәҫтиәндәр һәм улар менән бергә йәшәгән сауҙагәрҙәр, мещандар, отставкалағы һалдаттар һәм уларҙың кесе йәштәге балаларының биләмәһе. Ере 3547 дисәтинә һәм 1353 сутый. V рәүиз буйынса унда 279 ир-ат...» Артабан ауылдар һәм уларҙың хужалары исемлегендә йорттар һаны, йәшәгән ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙҙар һаны бирелә: «Бәләбәй ҡалаһы:

сыуаштар 14 йорт — 31 ир-ат, 30 ҡатын-ҡыҙ,
сауҙагәрҙәр 3 йорт — 16 ир-ат, 15 ҡатын-ҡыҙ,
мещандар 4 йорт — 15 ир-ат, 16 ҡатын-ҡыҙ,
отставкалағы һалдаттар һәм
уларҙың балалары 4 йорт — 2 ир-ат, 9 ҡатын-ҡыҙ,
кесе йәштәге балалар — 3 ир-ат, 1 ҡатын-ҡыҙ,
дворяндар — 36 ир-ат, 32 ҡатын-ҡыҙ,
сиркәү хеҙмәткәрҙәре — 17 ир-ат, 32 ҡатын-ҡыҙ,
рәүиз сауҙагәрҙәре — 3 ир-ат, 6 ҡатын-ҡыҙ,
төрлө чиндағы кешеләр — 149 ир-ат, 133 ҡатын-ҡыҙ».

Ҙур йәшәү урындарына иҡтисади иҫкәрмәләр ентеклерәк бирелгән: «Был ҡала (йәғни Бәләбәй ҡалаһы. — *Авторҙар)* губерна ҡалаһы Өфөнән көньяҡ-көнбайышта 54—15 төньяҡ киңлектә (широта) һәм, 71—58 оҙонлоҡта (долгота) ята. Баш ҡала Мәскәүҙән — 1432, Санкт-Петербургтан — 2160, губерна ҡалаһы Өфөнән 139 верста алыҫлыҡта. 1782 йылда, Өфө наместничествоһы асылғанда, элекке сыуаш ауылынан ҡала итеп раҫлана.

Бәләбәй йылғаһының уң һәм ике Шишмәнең һәм түбәнге Бәләбәй тип аталған йылғаның ике яғында урынлашҡан»[41].

Ошоноң кеүек мәғлүмәттәр Өфө һәм Ырымбур губерналарының бөтә ҡалалары һәм ауылдары буйынса бар. Уларҙың дөрөҫлөгө шик тыуҙырмай, сөнки улар элекке һәм һуңғараҡ сығанаҡтарҙа ла осрай. Мәҫәлән, Өфө ҡалаһы янындағы Брызгалово күле[42] XVI быуат аҙағында яҙылған «Өфө буйынса ер бүлеү кенәгәһе»ндә лә бар[43].

Иҡтисади иҫкәрмәләр өҫтәлдәге белешмә әсбабы булырлыҡ итеп төҙөлгән, сөнки унда ауылдар, биләмәләр һәм уларҙың хужалары алфавит күрһәткесе менән тәьмин ителгән. Түбәндә Өфө өйәҙендәге

ауыл һәм биләмәләр хужаларының (эйәләре) фамилиялары бирелә, уларҙың ҡайһы берҙәренең Өфө һәм Ырымбур губернаһының башҡа өйәҙҙәрендә лә үҙ биләмәләре бар. Ҡарағыҙ: Аксаков, Алакаев, Алкин, Ахлебинин, Атаев, Бекетов, Булгаков, Вавилов, Ветошников, Воецкий, Волков, Гладышев, Глумилин, Демидов, Дурасов, Зубов, Иглин, Каловский, Кадомцев, Киржацкий, Пекарский, Суворов, Тарбеев, Тимашев, Топорнин, Черников-Анучин, Шипов, Юматов һәм башҡалар.

Биләмәләрҙең һәм географик объекттарҙың күрһәткесе ойконимия буйынса ғына түгел, микротопонимдар буйынса ла материалдарҙы үҙ эсенә ала. Ул исемлектән теге йәки был объекттың нисек һатып алынғанлығы тураһында ла белергә мөмкин.

| Дачалар алфавиты | Генераль межалау буйынса номеры | Пландың ҡайһы өлөшөндә |
|---|---|---|
| Аничково (шул уҡ Тауш) | 313 | 1 |
| Аничково Владимир төбәге менән | 298 | 1 |
| Çыбы-мең улусына ҡараған ерҙәр | 99 | 1 |
| Миндияр (шул уҡ Бикчурин) утары | 102 | 4 |
| Ҡараяҡуп ауылына ҡараған Туйғужа урманы | 43 | 1 |
| Алексеевка ауылына ҡараған Өршәк-мең улусы еренең бер өлөшө | 116 | 1 |
| Ҡаңлы ҡәбиләһе Туҡбай ырыуы башҡорттары биргән ер | 346 | 5 |
| Черниково (шул уҡ Анучино) ауылы | 201 | 1 |

Шулай итеп, «Генераль межалауға иҡтисади иҫкәрмәләр»ҙең барлыҡ өлөштәре лә Башҡортостан топонимияһы буйынса баһалап бөткөһөҙ ҡиммәт сығанаҡ булып тора. Улар Көньяҡ Уралдағы ҡала, ауылдарҙың үҫеш тарихын, килмешәк халыҡтың тупланыу процесын, Башҡортостан халҡының милли составы үҙгәреүен, һәм башҡа шундай күренештәрҙе күҙәтергә мөмкинлек бирә.

## XIX БЫУАТ СЫҒАНАҠТАРЫ

«VIII рәүиз буйынса башҡорттар менән мишәрҙәрҙең ауылдары, йорттары һәм йән иҫәбе ведомостары» XIX быуат сығанаҡтары араһында иң ҡиммәте һәм күп мәғлүмәтлеһелер[44].

БДУ профессоры Ә. З. Әсфәндиәров был документты тәү башлап тапты, өйрәнде һәм донъяға сығарҙы[45]. Ул кантондарҙың нумерацияһын дөрөҫләп, «Генераль межеваниеға иҡтисади иҫкәрмәләр» материалдары менән сағыштырып ауылдар исемлеген тулыландыра, һәр

өйәҙҙәге ауыл халҡының милли составын билдәләй. Сығанаҡтың ғилми һәм практик әһәмиәте уның тарафынан түбәндәгесә баһаланған: «Ведомостарҙа һәр кантондағы һәм өйәҙҙәге башҡорт һәм мишәр ауылдарының һаны бирелгән. Тарихсылар ауыл, йорт һәм кантон, өйәҙ буйынса ғына түгел, ә ырыу һәм түбәләр буйынса ла халыҡ иҫәбе тураһында мәғлүмәттәр табасаҡ. «Ведомостар...» һәр ауылдың ҡайһы түбәгә һәм ергә милке буйынса ҡайһы ырыуға ҡарағанын күрһәтә. Уларҙа шулай уҡ ауыл халҡының (аҫаба, һатып алынған, ҡаҙнаға, ҡортомға алынған һ. б.) ергә мөнәсәбәте, шөғөлдәре билдәләнә. «Ведомостар...» буйынса мишәрҙәрҙең таралып ултырыуын һәм улар ауылдарының барлыҡҡа килгән яҡынса ваҡытын асыҡлап була»[46]. Килтерелгән өҙөктәргә сығанаҡтың Башҡортостан ҡалалары, ауылдары һәм башҡа географик объекттарҙың тарихын, атамаларының этимологияһын асыҡлау өсөн кәрәк булған төп сифаттары һанап сығылған. Ҙур күләмле хеҙмәтте архивтағы төп нөсхәһе менән сағыштырыу уның ҡайһы бер урындары төшөрөп ҡалдырылыуын күрһәтә. Мәҫәлән, «Ведомостар»ҙың баҫылған вариантында нөсхәләге туғыҙынсы иҫкәрмәләр бирелмәгән. Мәҫәлән, «Көньяҡ Урал археографик йыйынтығы»ның II сығарылышында түбәндәгеләрҙе уҡыйбыҙ:

**VII Башҡорт кантоны**

| Өйәҙҙе һәм йортто тәшкил иткән ауылдар | VII рәүиз буйынса йән һаны | | Ниндәй улусҡа ҡарай | Ниндәй түбәгә ҡарай | Үҙ ерҙәрендәме, типтәрлек хоҡуғындамы | Йәйләүгә сығалармы, юҡмы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | ир-ат | ҡатын-ҡыҙ | | | | |
| **Стәрлетамаҡ өйәҙе** | | | | | | |
| **Мерәҫ** | **162** | **180** | **Өршәк-мең** | **Ҡаҙаш** | **Үҙ ерҙәрендә** | **Йәйләүгә сығалар** |
| **Обер-эфисәрҙәр** | **6** | **21** | **«—»** | **«—»** | **«—»** | **«—»** |
| **Түрҫәгәҙе** | **111** | **123** | **Меркет-мең** | **Аҡҡондо** | **Үҙ ерҙәрендә, шул иҫәптән Иҫке Төрөмбәт 13 ир-ат, 10 ҡатын-ҡыҙ; Яңы Төрөмбәт 76 ир-ат һәм Кәлсер-Буран, 38 ир-ат, 38 ҡатын-ҡыҙ типтәр хоҡуғында** | |

Әммә архивтағы төп нөсхәләге ведомостарҙың 9-сы номерлы иҫкәрмәһендә тикшеренеүселәргә әһәмиәтле булған мәғлүмәттәр бар. Ҡарағыҙ:

«9-сы иҫкәрмә

Өршәк-мең улусы ерендә ауыл булып көн күрәләр: Йәнбәк — типтәрҙәр — 21 йән, Бозаяз — мишәрҙәр — 41 йән, Туҡай — мишәрҙәр — 339, типтәрҙәр — 11 йән, Ҡорманай-мишәрҙәр — 316, типтәрҙәр — 26 йән, Таңсәйет — типтәрҙәр — 83 йән, Искәндәр — типтәрҙәр — 114 йән, сауҙагәрҙәр һәм мещандар — 66 йән, Николаевка — сыуаштар — 113 йән, Ниғмәтулла — мишәрҙәр — 422 йән.

Башҡорттарҙан башҡа Меркет-мең улусы • ерҙәрендә ауыл булып йәшәйҙәр:

Кәлсер-Буран — 36 типтәр, 106 мишәр,

Итекәй — 60 типтәр, 16 мишәр,

Ғүмәр — 57 типтәр,

Кәбәс — 39 типтәр, 14 мишәр, 10 татар,

Татлыгүл — 115 сыуаш һ. б.»

Бының кеүек иҫкәрмәләр башлыса ҡатнаш зоналарҙа, йәғни башҡорттар менән йәнәш мишәрҙәр, татарҙар, сыуаштар һәм башҡа килмешәк халыҡтар йәшәгән территорияларҙағы ауылдар буйынса яһалған. Быңдай иҫкәрмәләр ҡайһы бер атамалар сығышын тикшергәндә бик кәрәк булыр ине. Әммә башҡорт һәм мишәр кантон етәкселәре төҙөгән ведомостарҙы әҙерләү, баҫтырып сығарыу — үҙе үк ҙур хеҙмәт емеше. Улар башҡорт һәм мишәр ауылдары буйынса бик кәрәкле һәм ышаныслы ҡулланма әсбап булып хеҙмәт итә.

Ә. З. Әсфәндиәров тарафынан әҙерләнгән һәм баҫтырып сығарылған ведомостарҙағы мәғлүмәттәргә килгәндә, улар, дөйөм алғанда, төп нөсхәнең материалдарын дөрөҫ сағылдыра. Ҡайһы бер яңылышлыҡтар ауылда йәшәгән кешеләрҙең һанын һәм ауыл исемен дөрөҫ яҙмауға ҡайтып ҡала. Быңдай хаталар, күрәһең, сығанаҡты баҫыуға әҙерләгәндә ебәрелгәндер. Әйтергә кәрәк, улар күп түгел. Мәҫәлән, Иткүл, Шәкүр, Күсәр, Тәкә, Ҡолоҡас ауылдары һәм Бала-Ҡатай улусы исемдәре Иткүлек, Шкүр, Куҫкар, Така, Ҡулукач һәм Бала-Батай тип яҙылған.

Дөйөм алғанда, тикшерелгән сығанаҡтың әһәмиәте Башҡортостан топонимияһын өйрәнеүҙә баһалап бөткөһөҙ ҙур. Унда беҙ урындарҙа йыйып алынған материалдарҙа әйтелгән күп факттарҙың документаль раҫланыуын табабыҙ. Ведомость мәғлүмәттәре бигерәк тә төньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттары өсөн мөһим, сөнки был төбәктәге башҡорт халҡын 30-сы йылдарҙан бирле мәктәптә татар телендә уҡытыу һөҙөмтәһендә улар үҙенең ниндәй милләткә ҡарағанын онотоп бара. Быны раҫлау өсөн XIX быуат уртаһына ҡараған «Ведомостар»ҙан һәм XX быуат уртаһына ҡараған 1969 йылғы «Башҡорт АССР-ының административ-территориаль бүленеше»нән бер нисә миҫал.

| № | Ауыл исеме | XIX быуаттағы башҡорттарҙың этник составы һәм һаны | Килмешәктәрҙең килеү ваҡыты һәм һаны | Башҡорттарҙың һәм килмешәктәрҙең нисбәте | 1969 йылда ауыл халҡының күпселек милләте |
|---|---|---|---|---|---|
| 1 | Аҡбаш — VIII Башҡорт кантонының 1-се йорто (хәҙерге Кушнарен районы) | Ҡаршын ҡәбиләһенең сатылған, ҡәҙрәй һәм ҡарға ырыуы, 169 ир-ат, 176 ҡатын-ҡыҙ | Мишәрҙәр (килгән ваҡыты теркәлмәгән) — 21 йән, типтәрҙәр 1730 йылдан — 140 йән | 345—161 | татарҙар |
| 2 | Мәүлет — VIII Башҡорт кантонының 1-се йорто (хәҙерге Кушнарен районы) | Дыуанай ҡәбиләһенең баҡай ырыуы — 22 ир-ат, 15 ҡатын-ҡыҙ | — | 37—0 | татарҙар |
| 3. | Юлыш — VIII Башҡорт кантонының 1-се йорто (хәҙерге Кушнарен районы) | Ҡаршын ҡәбиләһенең сатылған, ҡәҙрәй һәм ҡарға ырыуы — 24 ир-ат, 23 ҡатын-ҡыҙ | — | 47—0 | татарҙар |

Элек бер генә татар ҙа булмаған Мәүлет, Юлыш ауылы кешеләре хәҙер үҙҙәрен татар тип иҫәпләй. Бына шуның өсөн дә төньяҡ-көнбайышта башҡорттар халыҡ иҫәбен алған һайын яҡынса 8 процентҡа кәмей.

Башҡортостанға типтәрҙәрҙең килеү ваҡыты, һаны, уларға бирелгән ер күләме, нигеҙләнеп алған документтары, бәхәсле һәм башҡалар менән уртаҡ биләмәләр тураһында ла ышаныслы сығанаҡ бар. Ул документ «Ырымбур, Пермь һәм Волга губерналарындағы типтәрҙәр менән бобылдәрҙең һаны, улар хужа булған ер күләме, шулай уҡ 1839 йылдың 18 ноябренән алып 1842 йылдың 15 февраленә тиклемге ер һатыу һәм ҡортомға биреү ҡағиҙәләрен уларға ҡарата ҡулланыу тураһында дело» тип агала[47]. Был сығанаҡ БДПУ доценты, тарих фәндәре кандидаты Б. С. Дәүләтбаев тарафынан табылған һәм баҫтырып сығарылған[48]. Шул уҡ автор сығанаҡҡа тәүге археографик тасуирлама яһаған[49]. Мәҫәлән, «ведомостарҙа типтәрҙәрҙең биләгән ерҙәренә акттары һәм хоҡуҡтары тураһында ҡиммәтле материалдар тупланған[50], тип билдәләй автор. Б. С. Дәүләтбаев тарафынан әҙерләнгән һәм баҫтырып сығарылған ведомостарҙың ҡиммәте иң тәүҙә Башҡортостанға типтәрҙәрҙең күсеп килеү ваҡытын, шулай уҡ башҡорт, мишәр ауылдарының яҡынса барлыҡҡа килеүен асыҡлау өсөн өҫтәлмә материал биреүҙән ғибәрәт. Мәҫәлән:

| Ауыл номеры | Командалағы ауылдар | Ир-ат һаны | Биләнгән ер күләме | Ергә акттары һәм хоҡуҡтары бәхәсле һәм башҡалар менән уртаҡ биләмәләр |
|---|---|---|---|---|
| | Стәрлетамаҡ өйәҙе | | | |
| 1. | Яңғыҙкайын | 212 | билдәһеҙ | 115 типтәр 1747 йылда Юрматы улусы Ҡармыш ырыуы менән төҙөгән яҙыу; 48 кеше 1804, 1811 йылдарҙа төҙөгән договор буйынса биләй. 1799 йылғы межалауҙа Богоявленск заводы менән бәхәс сыҡты, сөнки һуңғыһы үҙенә алдап ер бүлеп алды. Эш сенатта ята. |
| 2. | Янрус<br>бобылдәр | 211<br>15 | билдәһеҙ | 59 типтәр Юрматы улусы Ҡармыш ырыуы менән төҙөгән яҙыу, 137 кеше 1803 йылда шулар менән төҙөгән договор буйынса, ә бобылдәр бер ниндәй актһыҙ биләй. Аҫаба башҡорттар менән бәхәс бар, сөнки улар 1833 йылда ошо уҡ ерҙәрҙе хәрби губернатор рөхсәте менән генерал-майорша Пашковаға яңылыш һатҡан. Эш хәл ителгәнсә, ер типтәрҙәргә файҙаланырға бирелгән[51]. |

Уҡыусыларға тәҡдим итеп, был материалдарҙы баҫыуға әҙерләүсе Б. С. Дәүләтбаев ошо сығанаҡты Ә. З. Әсфәндиәров баҫтырған документ[52] менән бергә өйрәнергә кәрәклеген иҫкәртә, сөнки әле тикшергән сығанаҡта ауылдағы халыҡтың бер өлөшө булған типтәрҙәр, бобылдәр тураһында ғына һүҙ бара. Авторҙың ошо кәңәштәренә иғтибар итеп, типтәрҙәр һәм башҡорт менән мишәр ауылдары буйынса мәғлүмәттәрҙе бер-береһе менән сағыштырыу өсөн Ә. З. Әсфәндиәров әҙерләгән сығанаҡтан Яңғыҙкайын һәм Янрус буйынса материалдар килтерәйек:

| Йорт номеры | Өйәҙ, ауыл исеме | VIII рәүиз буйынса кешеләр һаны: ир-ат | VIII рәүиз буйынса кешеләр һаны: ҡатын-ҡыҙ | Улус исеме | Ырыу (түбә) исеме | Ергә мөнәсәбәте | Йәйләүгә сығалармы, юҡмы | Иҫкәрмәләр |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
| | VII Башҡорт кантоны Стәрлетамаҡ өйәҙе | | | | | | | |
| 9 | Яңғыҙкайын | 31 | 22 | Юрматы | Ҡармыш | аҫабалар | йәйләмәйҙәр | башҡорттарҙан тыш юрматы ҡәбиләһенең |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | | | ҡармыш ырыуы ерендә Яңғыҙҡайында 137* мишәр, 207 типтәр йәшәй |
| | Янрус | 41 | 35 | Юрматы | Ҡармыш | аҫабалар | йәйләмәйҙәр | Янруста 20* мишәр, 218 типтәр йәшәй |
| | II Мишәр кантоны Стәрлетамаҡ өйәҙе | | | | | | | |
| 4 | Яңғыҙҡайын | 139 | 141 | — | — | Юрматы улусынан 1747 йылдағы яҙма буйынса биләйҙәр | йәйләмәйҙәр | |
| | Янрус | 20 | 22 | — | — | Яңғыҙҡайын мишәрҙәре менән бер документ буйынса биләйҙәр. | | |

Килтерелгән миҫалдар Б. С. Дәүләтбаев исемлеге буйынса башҡорт ауылы Яңғыҙҡайында мишәрҙәрҙән башҡа 1741 йылдан алып 212 типтәр, Янруста 1749 йылдан алып 211 типтәр, 15 бобыль йәшәүен күрһәтә. Ә. З. Әсфәндиәров исемлеге буйынса шул уҡ ауылдарҙа 207 һәм 218 типтәр көн күргән, һандар тулы тап килмәһә лә, улар араһында айырма ҙур түгел (207 урынына 212, 218 урынына 226)[53].

Тимәк, сағыштырылған сығанаҡтар бер-береһендәге мәғлүмәттәрҙе үҙ-ара тултыралар. Шул уҡ материалдар XIX быуат уртаһынан алып ҡайһы бер ауылдарҙа килмешәк халыҡтың һаны төп халыҡтыҡынан ҡарағанда арта барыуын да күрһәтеп тора. Мәҫәлән, Яңғыҙҡайын ауылында 53 башҡорт менән бергә 349 типтәр һәм мишәр йәшәһә, Янруста 76 башҡортҡа 256 типтәр һәм бобыль тап килә. Был мәғлүмәттәр XIX быуат уртаһында башҡорт ауылдарында, ғөмүмән, бөтә Башҡортостанда барған социаль-иҡтисади, социаль-сәйәси хәлдәрҙең торошон һәм үҫешен, шулай уҡ ул хәлдәрҙең хәҙерге Башҡортостан халыҡтары тормошонда сағылыуын күҙәтергә булышлыҡ итә.

Әле анализланған сығанаҡтар, башлыса, Башҡортостан ауылдарындағы башҡорт, мишәр һәм типтәрҙәр тураһында ғына мәғлүмәттәр бирә. Уларҙан айырмалы рәүештә, Рәсәй империяһының бөтә губерналары буйынса төҙөлгән кеше йәшәгән урындарҙың (ауыл, ҡала, ҡасабаларҙың) исемлеге илдә йәшәгән барлыҡ халыҡтарҙы ла үҙ эсенә алған. Шул исемлектәрҙең 1870 йылда төҙөлгән 45-се томы Өфө губернаһын төрлө яҡтан тасуирлауға арналған[54].

Был белешмә әсбап ике өлөштән тора. Беренсе өлөшөндә Өфө губернаһына дөйөм характеристика яһала. Айырып әйткәндә, сығанаҡ губернаның географик урынын, территорияһын, был региондың физик-географик үҙенсәлектәрен күҙ алдына баҫтыра. Ауылдарҙың, ҡасабаларҙың исемлеген килтереүҙән алда ҡалаларға тасуирлама яһалған. Ауылдар һәм ҡасабалар исемлеге түбәндәге тәртиптә бирелгән: 1. Өфө өйәҙе; 2. Бәләбәй; 3. Бөрө; 4. Златоуст; 5. Минзәлә; 6. Стәрлетамаҡ өйәҙҙәре. Белешмәнең аҙағында ауылдарҙың алфавит тәртибендәге күрһәткесе бар.

Беҙҙең өсөн был сығанаҡ бөтә йәһәттән дә мөһим. Шулай ҙа унда Өфө губернаһы тураһында урыҫ тикшеренеүселәренең үҙҙәре яҙған тарихи, статистик, этнографик күҙәтеүҙәр һәм материалдар бигерәк тә әһәмиәтле.

Тарихи очерктарҙа урыҫ ауылдарының һәм ҡалаларының төҙөлөү сәбәптәре һәм үҙенсәлектәре әйтеп үтелгән. Мәҫәлән, инеш мәҡәләлә «башҡорт ихтилалдарынан иң ышаныслы ҡотолоу сараһы булып һаҡланыу өсөн махсус төҙөлгән нығытмалар (крепостар) тирәһендә урыҫ колонияһын үткәреү тора», тип яҙылған[55]. Сығанаҡта тәүге урыҫ ауылдарының барлыҡҡа килгән ваҡыты туранан-тура күрһәтелгән.
XVII быуатта Өфө губернаһы Өфө өйәҙендә — 8, Бөрө өйәҙендә — 2, Минзәлә өйәҙендә 2 урыҫ ауылына нигеҙ һалына, мәҫәлән: **Красный Яр** (1635), **Богородское** (1647), **Дәүләт Дыуанайы** (1647), **Иҫке Яңғалыш, Монастырь Дыуанайы, Воскресенское (Чесноковка), Ямашевка** (1677), **Сорвиха, Касево, Иванкино** (XVII быуаттың 2-се яртыһында барлыҡҡа килгән).

Сығанаҡта хәҙерге көндә лә үҙенең фәнни әһәмиәтен юғалтмаған күҙәтеүҙәр бар. Мәҫәлән, сығанаҡты төҙөүсенең «XVIII быуатҡа тиклем Златоуст, Стәрлетамаҡ һәм Бәләбәй өйәҙҙәрендә бер генә урыҫ ауылын да күрмәйбеҙ» тигән иҫкәрмәһе төбәк өйрәнеүселәрҙең иғтибарын йәлеп итерлек мәғлүмәт булып тора. Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк:
XVIII быуаттың 1-се яртыһында төҙөлгән торама пункттарҙың бөтәһе лә нығытма итеп һалынған. Айырып күрһәткәндә, Бөрө өйәҙендәге Йәлдәк нығытмаһы 1735 йылда, Бәләбәй өйәҙендәге **Нуғайбәк** нығытмаһы менән Стәрлетамаҡ өйәҙендәге **Табын** нығытмаһы 1736 йылда барлыҡҡа килгән[56].

Торама пункттар стан буйынса бирелгән, урыны, ихата һаны, ирааттарға, ҡатын-ҡыҙҙарға айырып, кешеләрҙең иҫәбе күрһәтелгән. Былар ҙан тыш, ауылдағы халыҡтың милли составы, административ, уҡыу, хәйриә йорттары, ғибәҙәтханалар һанап сығылған, ауылда йәшәгән кешеләрҙең сәнәғәт төрҙәре буйынса шөғөлө лә белешмә төҙөүселәрҙең иғтибарынан ситтә ҡалмаған, һанап үтелгәндәрҙән башҡа белешмәлә ауылдарҙың өйәҙ ҡалаһынан һәм стан үҙәгенән алыҫлы-

ғы билдәләнгән. Әммә улар бында бирелмәне. Ошондай ук мәғлүмәттәр башҡорт, урыҫ, татар, сыуаш һәм башҡа милләт ауылдары буйынса ла бар. Мәҫәлән:

| № | Торама пункттар исеме | Урыны | Ихата һаны | Халыҡ һаны | | Халыҡтың этнографик составы, ғибәҙәтханалар, административ, уҡыу, хәйриә учреждениелары... Ер эшкәртеү һәм малсылыҡтан башҡа промысла төрҙәре |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | ир-ат | ҡатын-ҡыҙ | |
| | 1 стан, Өфөнән Ырымбурға почта тракты буйлап | | | | | |
| 27 | Борискино (Ҫабыр), ауыл | Өршәк йылғаһында | 53 | 139 | 119 | Б. — 1 мәсет. Училище. Ҡортсолоҡ һәм сабата үреү. |
| 35 | Келәш, ауыл | Йүкәле шишмәһендә | 154 | 424 | 441 | Т. — 1 мәсет. Училище. 6 лавка, һыу тирмәне. Һәр шишәмбелә баҙар. Балта оҫталары һәм итек тегеүселәр[57]. |
| 71 | Ивановка (Королевка, Атаево), ауыл | Бобровое күлендә | 13 | 32 | 35 | Р. |
| 487 | Бишбүләк, ауыл | Ҡыңғыр-Мәнәүез йылғаһында | 160 | 370 | 410 | Ч. 352—391, М. 16—13. Р. 2—6. 1 православие сиркәүе. Училище. 1 һыу тирмәне һәм 7 мутовка тирмәне. Ҡортсолоҡ, ылаусылыҡ, кейемһалым тегеү һәм сабата үреү[58]. |

Был сығанаҡ тағы ла ауыл-ҡалалар урынлашҡан гидрографик объекттарҙы күрһәтеүе менән дә әһәмиәтле. Сөнки был үҙе үк бер исемле төрлө ауылдарҙың сығышын аныҡлауҙа өҫтәлмә дәлил булып тора. Ошондай материалдар «Генераль межеваниеға иҡтисади иҫкәрмәләр»ҙә генә бар ине.

Әле тикшерелгән сығанаҡтағы кеүек материалдар XIX быуат аҙағында сыҡҡан 10 томлыҡ «Өфө губернаһы буйынса статистик мәғлүмәттәр йыйынтығы»нда[59] ла күп.

Был сығанаҡта Өфө губернаһына тулы иҡтисади характеристика бирелгән. Беҙҙең топонимик тикшеренеүҙәр өсөн иһә ауыл-ҡалаларҙың үҫеш тарихын һәм атамаһының килеп сығышын асыҡларға

булышлыҡ иткән материалдар кәрәк. Улар статистик йыйынтыҡтың беренсе — алтынсы томдарына яһалған ҡушымталарҙа тупланған. Ошо алты томдың ҡушымталарында һәр ауыл-ҡалаға киң генә физик-географик тасуирлама бирелгән. Мәҫәлән: Архангельское (Иглино, Бәләгәҫ) ауылы — тигеҙ урында: Бәләгәҫ йылғаһы тирмән ҡуйыу өсөн яраҡһыҙ; ялан ерҙәрҙә күл һәм бер нисә һаҙлыҡ бар. Ауылға бүленгән ер ике урында: береһе ауыл янында, икенсеһе 7 саҡрымда. Ауылға ҡараған ерҙәрҙә үҙгәрештәр: 18 дисәтинә тимер юл өсөн тартып алына, айырым усадьбалар өсөн майҙан артты. Ерҙе бүлеүҙең һуңғыһы 1886 йылда тимер юлды һалыу өсөн булды. Ялан ерҙәр ауылдан 7 саҡрымға тиклем. Ере — ҡара тупраҡ. Асыҡ урманһыҙ урындарҙың 18 дисәтинәгә яҡынын Өфө йылғаһының яры ҡомло һәм 15 дисәтинәһен йырынлы урындар биләй, һуңғыларының һаны билдәһеҙ, ә күрһәтелгән майҙан яҡынса билдәләнде. Ҡыуаҡтар тигеҙ ерҙең бер генә урынында. Алпауыт Вергилинға ҡараған ерҙә ауылда аҙна һайын баҙар була. Тимер юл станцияһында көндәлек эшләү — ауыл халҡының төп кәсебе»[60]. Әле килтерелгән мәғлүмәттәр Башҡортостан Республикаһының Иглин районы үҙәге Иглин (Бәләгәҫ, Архангельское) ауылы атамаһын өйрәнгәндә, һис шикһеҙ, кәрәк була.

«Өфө губернаһы буйынса статистик мәғлүмәттәр»ҙең VII томында ла ауылдар тарихын, уларҙың исемдәренең этимологияһын асыҡлауға ярҙам итерлек иҡтисади мәғлүмәттәр, ауылдарҙың эйәләре тураһында материалдар ифрат күп[61]. Миҫал итеп, сығанаҡтың Өфө әйәҙе (хәҙер Иглин районы) Иглин, Ҡыбау һәм Таутөмән ауылдары буйынса өҙөк килтерәбеҙ:

| № | Ауыл, товарищество, айырым биләүселәр исеме, генераль межевание буйынса дачалар номеры | Ауыл ҡараған йәмғиәт исеме | Крәҫтиәндәрҙең разряды | Милләте | Халҡы | | | Надел буйынса рәүиз йәки товарищество кешеләре | Ер күләме (дисәтинәләрҙә) |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | йорт һаны | ир-ат | ҡатын-ҡыҙ | | |
| 4 | Архангельское, Иглин, Бәләгәҫ, 229—332* | Архангельское һәм Иглино | дәүләт һәм алпауыттыҡы | урыҫ | 191 | 530 | 628 | 169 | 891 |
| 16 | Башҡорт Ҡыбауы**, 327—335 | Башҡорт | аҫаба | башҡорттар | 174 | 484 | 450 | 245 | 11269 дисәтинә (Таутөмән ауылыныҡы менән бергә) |
| 17 | Таутөмән, Таутимән, Тауфтөмән, 327—335 | Таутөмән | аҫаба | башҡорттар | 77 | 192 | 157 | 102 | |

* Ауылда ике йәмғиәт.
** Ауыл Яңы Троицкий улусындағы Таутөмән ауылы менән бер йәмғиәткә ҡарай.

Башҡорт ауылдарына нигеҙ һалған кешенең кем икәнлеген асыҡлау өсөн рәүиз (хәҙергесә әйтһәк, перепись) материалдарын файҙаланыу ҙур әһәмиәткә эйә. Рәүиз (урыҫса ревизские сказки) — ул перепись (рәүиз) ваҡытында ауылда йәшәгән кешеләрҙең исемлеге. Унда ауылға нигеҙ һалған кешенең үҙен йәки туғандары тураһында материал табырға мөмкин. Миҫал өсөн Хәйбулла районы Аҡъюл ауылы буйынса рәүиздән өҙөк килтерәйек:

«Ырымбур губернаһы, шул уҡ өйәҙҙең IX Башҡорт кантоны 1-се өләшөндә нисә ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ йәшәгәнен күрһәткән рәүиз исемлеге. 1816 йылдың 22 февраль көнөндә 15-се номерлы исемлек буйынса **Аҡъюл** ауылында.

3. Аҡъюл Абзанов — 89 йәштә. Аҡъюлдың улдары Әбделвәхит — 3, Әбделхалиҡ — 28, Әбделмән — 30 йәштә. Әбделмән деӊ улы Әбделхәйер — 4 йәш. Аҡъюлдың бисәһе — 40, ҡыҙы Шалара — 13, Әбделхаликтың бисәһе Сәлимә — 20 йәштә. Әбделмәндең бисәһе Күҙбикә — 40, ҡыҙы 8 йәштә»[62].

Был исемдәр һәм һандар Аҡъюлдың 1727 йылғы, ауылға исеме бирелгән кеше һәм Абзандың улы булыуы тураһында һөйләй. Аҡъюлдың 4 улы: Аҡынсыҡ 1773 йыл, Әбделмән — 1786, Әбделхалик — 1788, Әбделвәхит 1813 йыл, Шәкирә тигән бер ҡыҙы 1803 йылғы, ҡатыны Уразбикә 1776 йылда тыуғанлығын, Аҡъюлдың 89 йәштә икәнлеген күрһәтә. Ауыл буйынса төҙөлгән исемлектән Аҡъюлдың 1759 йылғы Әҙелбай Абзанов һәм 1744 йылғы Юлдыбай Абзанов тигән ағайҙары булыуы, тик уларҙың рәүиз үткәрелгән ваҡытта икенсе ауылда йәшәүе асыҡлана. Абзандың өлкән улы Аҡынсыҡ 1816 йылда 40 йәшлек бисәһе Йәнбикә, ике улы Әбделвәли (1799 йылғы) һәм Дөсмөхәмәт (1806 йылғы) менән айырым ғаилә ҡороп йәшәгән. Ошо материалдарҙы файҙаланып, **Йылайыртамағы** тигән ауыл үҙенең **Аҡъюл** тигән исемен 1727 йылда тыуған Аҡъюл Абзановтан XVIII быуат урталарында алған, тип фараз итеп була.

Ошоға оҡшаш мәғлүмәттәрҙе рәүиздән Өфө, Ырымбур губерналарына ҡараған барлыҡ ауылдар буйынса ла табырға мөмкин. 1984 йылда «Ағиҙел» журналының 5-се һәм 6-сы һандарында билдәле тарихсы Ә. З. Әсфәндиәровтың «Ауылдар ҡасан барлыҡҡа килгән?» тигән хеҙмәте баҫылып сыҡты[63]. Был хеҙмәт тулыһынса рәүиз материалдарына таянып яҙылған. Мәҫәлән:

«Һаҡмар буйындағы **Кинйәбулат** ауылы ике ауылды башлап ебәргән. Уларҙың береһе — Таналыҡ буйында **Буранбай**, икенсеһе — **Яңы Кинйәбулат.** Тәүгеһе 1816 йылғы VII ревизияла күрһәтелгән. Ул йорт старшинаһы, атаҡлы ҡурайсы Буранбай Ҡотосов тарафынан XIX быуат баштарында нигеҙләнгән. 1834 йылда унда — 38, 1859 йылда ни бары 26 йорт иҫәпләнгән. VIII ревизия материалдарында ғаилә башлығы 53 йәшлек Буранбай Ҡотосов «енәйәте өсөн 1820 йылда Себергә һөрөлгән» тип яҙылған[64]. Был факттар Ә. З. Әсфәндиәров тарафынан 1816 йылғы (йәғни VII) рәүиздән алынған. Тик ҡайһы бер осраҡтарҙа ғына ул рәүиз материалдарының дөрөҫлөгөн раҫлар өсөн шәжәрәләрҙе файҙалана.

Рәүиздәрҙең ҡиммәте тағы ла шунда: улар бер генә түгел, ә бер нисә күрше ауылдарҙың сығышын асыҡларлыҡ мәғлүмәттәр бирә.

Мәҫәлән, VIII рәүиз буйынса VI Башҡорт кантоны IV йорто Таулыҡай ауылында Таулыҡайҙың улдары Аҡкусҡар Таулыҡаев — 84 йәшлек, Йәнйегет Таулыҡаев — 59 йәшлек (1812 йылда) һ. б. Йәнйегет Таулыҡаев фамилияһынан һуң: «Баш начальство бойороғо буйынса яңы ойошторолған **Йәнйегет** ауылына күсерелде», — тип яҙып ҡуйылған[65]. Шуға ла рәүиздәр бөтә ауылдарҙы бергә алып, комплекслы өйрәнеүҙе талап итә. Шундай тикшереүҙән һуң ғына ауылдың сығышы, атамаһының этимологияһы тураһында тулы мәғлүмәтте алырға мөмкин. Әммә рәүиз материалдарын өйрәнгәндә уларҙың бер үҙенсәлегенә иғтибарҙы йәлеп итке килә: рәүиздәр ауылдың барлыҡҡа килеү ваҡыты тураһында ғына түгел, ә ауылға теге йәки был исемдең ҡушылыуы тураһында мәғлүмәт бирә. Рәүиз материалдарында Буранбай Ҡотосов 1816 йылда 49 йәштә булған тип яҙылған, йәғни ул 1767 йылда тыуған. 1820 йылда Буранбай Себергә һөргөнгә ебәрелә. Ошоға ҡарап, **Буранбай** ауылы 1767 йылға тиклем, йәғни Буранбай Ҡотосов тыуғанға хәтлем булмаған, тип иҫәпләргә ярамай. Ауыл уға тиклем икенсе исем, **Кинйәбулат** исеме менән йөрөгән булған. Тик Буранбай Ҡотосов ваҡытында ғына ул Буранбай тип аталған. Тимәк, рәүиздәр аныҡ атаманың яҡынса барлыҡҡа килеү ваҡытын ғына күрһәтә. Бынан беҙ Кинйәбулат исеменең һәм ауылдың ҡасан барлыҡҡа килгәнен билдәләй алмайбыҙ әле.

Кешеләрҙең йәшен билдәләүҙә әҙерәк айырмалыҡтар күренһә лә, дөйөм алғанда рәүиз ауыл халҡы тураһында аныҡ ҡына мәғлүмәттәр бирә. Быны беҙ төрлө рәүиздәр буйынса материалдарҙы сағыштырып белә алабыҙ. Мәҫәлән, бер рәүиздә Аҡъюл Абзанов 1727 йылда, икенсеһендә 1731 йылда тыуған тип яҙылған. Бер үк рәүиз материалдарында Аҡынсыҡ Аҡъюлов төрлө орфограмма менән йә Ахунчюк, йә Акунчук тип, ҡыҙы бер урында Шалара, икенсе ерҙә Шаказа тип теркәлгән. Дөрөҫө Шәкирәлер тип уйлайбыҙ, сөнки Шалара, Шаказа тигән ҡыҙ исемдәре башҡортта осрамай. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, бындай ғына хаталар был сығанаҡтың ҡиммәтен бер нисек тә төшөрмәй.

Рус телендә яҙылған сығанаҡтарҙы өйрәнеүҙе йомғаҡлап, ғалимдарҙың иғтибарынан ситтә ҡалған, әммә ҡиммәтле мәғлүмәтле тарихи, географик әҙәбиәттең күп булыуын әйтеп үтергә кәрәк. Был йәһәттән беҙ Өфө губернаһы Бөрө әйәҙе исправнигының элекке ярҙамсыһы Н. Н. Макаровскийҙың «Өфө әйәҙе V стандың географик һәм статистик тасуирламаһы»н күрһәтмәй мөмкин түгел[66]. Н. Н. Макаровский өйәҙҙе улустар, участкалар буйынса һәм төрлө аспектта — статистик, социаль-иҡтисади, медик-биологик, географик һ. б. тасуирлай. Китаптың аҙағында Өфө әйәҙе V стан ауылдары айырым тасуирлана. Мәҫәлән: «Ҡатау улусы Ләмәҙ ауылы. *Ләмәз* йылғаһының текә ярында урманда урынлашҡан. Ауылдың 45 өйө 1 урам булып һуҙылған.

Тасуир ителеүсе ауыл 1843 йылда барлыҡҡа килгән. Ауыл халҡының ҙур өлөшө — урындағы кешеләр, шулай уҡ Ҡатау заводы хужаһы кенәз Белосельский-Белозерскийҙыҡылар ҙа бар, бәләкәй өлөшө — һарытау губернаһынан күсеп, урындағы йәмғиәткә яҙылыусылар. Рәүиз буйынса 81 кеше... Ысынында иһә 139 ир-ат, 129 ҡатын-ҡыҙ йәшәй»[67].

Башҡорт ауылдарын тасуирлау нигеҙҙә ошоноң һымаҡ структуралы статьяны тәшкил итә. Әммә башҡорттарҙың көнкүрешен характерлаған яңы мәғлүмәттәр ҙә бирелә:

«**Яхъя** ауылы, Ҡытаутамаҡ улусы. Асыҡ ерҙә *Бирҙәш* тигән йылға буйында урынлашҡан. Барыһы ике буй, өс арҡыры урамдан тора. Ихаталары киң, күбеһенсә кәртәләп алынмаған. Урамдары киң, 20 сажиндан кәм түгел. Ауылда 87 өй. Уларҙың бөтәһе лә ағастан буралған, иҫкергәндәре бар, ҡайһыларының ҡыйығы юҡ. Рәүиз буйынса... 169 кеше. Ысынында 156 ир-ат һәм 140 ҡатын-ҡыҙ. Бөтә кешеләр ҙә аҫабалыҡ хоҡуғында, бик ярлы йәшәйҙәр. Малсылығы 169 баш ат, 154 һыйыр, 63 һарыҡ һәм 92 кәзә аҫрауҙан ғибәрәт.

**Яхъя** халҡы күрше **Миндеш, Ишембай** һәм **Абдрахман** ауылдары башҡорттары менән бергә бик уңдырышлы 10380 дисәтинә ергә хужа, әммә ошо байлыҡ менән файҙалана белмәйҙәр...»[68].

Автор тарафынан ошоноң һымаҡ Өфө әйәҙе V станының 43 ауылы тасуирланған. Бындай мәғлүмәттәр хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Салауат, Ҡыйғы, Нуриман һәм Иглин районлары ауылдары тарихын, ойконимдарының сығышын билдәләүҙә бик кәрәк. Китап элекке стан приставы тарафынан яҙылғанғамылыр, был сығанаҡ ышаныслы мәғлүмәткә эйә булыуына ҡарамаҫтан, Совет осоронда фәнни әйләнешкә индерелмәне.

## БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘГЕ СЫҒАНАҠТАР

Башҡорт телендә яҙылған сығанаҡтар башҡа телдә яҙылғандарына ҡарағанда, әлбиттә, күпселекте тәшкил итә. Улар, Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, Башҡорт дәүләт университеты, Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институты һ. б.-лар тарафынан төрлө йылдарҙа ойошторолған ғилми экспедицияларҙа йыйылған. Хәҙерге ваҡытта улар Рәсәй фәндәр академияһы Шәрҡиәт институты Санкт-Петербург бүлексәһенең ҡулъяҙмалар фондында[69], В. И. Ульянов-Ленин исемендәге Ҡазан дәүләт университетының ғилми Китапханаһында[70], Рәсәй фәндәр академияһы Ҡазан филиалының ғилми архивында[71], Башҡорт дәүләт университетының башҡорт әҙәбиәте кафедраһында[72], Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең ғилми архивында һаҡлана[73].

Башҡорт телендә яҙылған сығанаҡтарҙың араһында беҙҙе бигерәк тә географик атамалар һәм ауыл исемдәре тураһындағы шәжәрәләр һәм легендалар ҡыҙыҡһындыра. Әгәр ҙә юғарыла һанап үтелгән фондтарҙа, дөйөм алғанда, төрлө йөкмәткеле риүәйәт һәм легендалар бирелгән булһа, Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ҡулъяҙма фондында тик шәжәрәләр генә тупланған[74]. Экспедицияларҙа йыйып алынған шәжәрәләрҙең бер өлөшө баҫылып сыҡты[75].

Р. Ғ. Кузеев тарафынан әҙерләнгән «Башҡорт шәжәрәләре» тигән китапта ҡәбилә, ырыу шәжәрәләре менән бер рәттән ҡайһы бер ауыл-

дарҙың, мәсәлән, **Сытырман, Моҡас** һәм **Мораҙым** ауылдарының шәжәрәләре лә бар[76].

Моҡас ауылы шәжәрәһендә, башҡаларҙан айырмалы рәүештә, ирҙәрҙең генә түгел, ә ҡатын-ҡыҙҙарҙың исемдәре лә теркәлгән. Р. Ғ. Кузеев фекеренсә, шәжәрә «XVIII быуат аҙағында, йә XIX быуат башында» яҙылған[77]. Ауылға исеме бирелгән Моҡас тигән кеше Аҡъяр бейҙең улы. Аҡъяр бейҙең атаһы билдәһеҙ, ағаһымы, ҡустыһымы Килдейәр бей исемле булған. Шәжәрәлә Моҡастың, уның атаһы Аҡъяр бейҙең тыуған-үлгән ваҡыты тураһында бер ниндәй ҙә мәғлүмәт бирелмәгән. Шәжәрәне төҙөгән кеше Бүкәнбайҙың ҡыҙы Еҙбикәнең ейәне булып сыға тигән генә иҫкәрмә бар. Еҙбикәнең атаһы Бүкәнбай иһә Байҙағол тигән кешенең Арыубикә тигән бисәһенән тыуған кеше икәне билдәле. Арыубикә менән Моҡас — ағалы-һеңлеле кешеләр, сөнки икеһе лә Аҡъяр бейҙең балалары. Был мәғлүмәт ауылға нигеҙ һалған кешенең тыуған ваҡытын яҡынса билдәләргә мөмкинселек бирә. Р. Ғ. Кузеев, был шәжәрә XVIII быуат аҙағында, йә XIX быуат башында яҙылған, тип фараз итә, сөнки ул шәжәрәләге һәр быуынға уртаса 25 йыл бирә. Ошо система менән иҫәпләгәндә, Еҙбикә — 1760, уның атаһы Бүкәнбай — 1735 йылда, ә Бүкәнбайҙың атаһы Байҙағол, Байҙағолдоң бисәһе Арыубикә һәм Моҡастарҙың 1705—1710 йылдарҙа тыуыуы ихтимал. Ул саҡта ауыл үҙенең Моҡас тигән исемен тәбиғи, Моҡас тыуғандан һуң ғына ҡабул итә ала. Тимәк, шәжәрәләге ауыл Моҡас исеме менән 1705—1710 йылдарҙан һуң теркәлә башлай.

Әммә ошо уҡ ауыл буйынса БДУ профессоры Ә. З. Әсфәндиәров тә бер шәжәрә табып баҫып сығарҙы[78]. Унда Р. Ғ. Кузеев донъяға сығарған шәжәрәләгенән боронғораҡ мәғлүмәттәр бар. Һуңғы шәжәрәлә, Моҡас Теләүкәй тигән кешенең улы булыуы тураһында яҙылған. Ике шәжәрәлә лә хәҙерге Башҡортостан Республикаһы Мәләүез районындағы Оло Моҡас хаҡында һүҙ бара. Ә. З. Әсфәндиәров шәжәрәһендә Моҡас Тамъян ҡәбиләһе башлығы Шәғәле Шаҡманға барып тоташа. Ә ул башҡорттарҙың Мәскәүгә 1552 йылда ебәрелгән илселеге составында булған оло башҡорт кенәзе. Икенсе шәжәрәнең өлөшө түбәндәгесә: Төмән бей — уның улы Балун бей — уның улы Тамъян бей — уның улы Ураҙай бей — уның улы Мотай бей — уның улы Ҡырай бей — уның улы Шәғәле Шаҡман — уның улы Буралы — уның улы Илсекәй — уның улы Теләүкәй — уның улы Моҡас Теләүкәев — уның улы Ҡасҡын Моҡасов. Ҡасҡын Моҡасов иһә 1764 йылғы документтарҙа осрай. Әгәр ҙә был йылдарҙа донъяуи эштәр менән шөғөлләнгән Ҡасҡын Моҡасовты 30-ҙар тирәһендәге кеше булғандыр тип фараз иткәндә, уның тыуған йылы яҡынса 1734 йылдарға тура килә. Ҡасҡындың атаһы Моҡас, тимәк, 1705—1710 йылдарҙа тыуған кеше булып сыға. Р. Ғ. Кузеев килтергән шәжәрә схемаһы буйынса ла, Ә. З. Әсфәндиәров шәжәрәһе буйынса ла Моҡас 1705—1710 йылдар тирәһендә тыуған булып сыға. Ике сығанаҡ та бер датаны раҫлай. Был инде шәжәрәләге мәғлүмәттәрҙең дөрөҫлөгөн күрһәтә.

«Башҡорт шәжәрәләре» китабының аҙағында Р. Ғ. Кузеев Моҡас ауылы шәжәрәһенә аңлатмалар биргән. Унда Моҡас ауылы Тамъян ҡәбиләһенең Нөгөш-Тамъян ырыуы башҡорттарына ҡарай тип яҙылған[79]. Экспедиция материалдары, шулай уҡ башҡорт ауылдары ведо-

мостары был аңлатмаларҙың дөрөҫлөгөн күрһәтә. Оло Моҡас ауылына ысынында Тамъян ҡәбиләһе башҡорттары нигеҙ һалған. Ауылдың оло ҡарттары ундағы араларҙы ла (аймаҡтарҙы) онотмаған. Унда *моҡас*, *тимэс*, *ҡаҙаҡ*, *шағыман* тигән аймаҡтар булған. Ауылдың тамғаһы түбәндәге сифатта СЦ,.

**Оло Моҡастан** айырылып сыҡҡан **Бәләкәй Моҡаста** араларҙың исеме икенсерәк: *күҙәй*, *ҡалмаҡ*, *тараҡан* һ. б.

Юғарыла тикшереп сығылған «Башҡорт һәм мишәр кантоны начальниктарының... ведомостарында» **Моҡас** ауылы берәү генә һәм ул Стәрлетамаҡ әйәҙе VII Башҡорт кантоны Тамъян улусының 20-се йортонда[80] теркәлгән.

XIX быуат урталарында **Моҡаста** 310 кеше, шул иҫәптән 153 ир-ат, 157 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән. XIX быуаттың икенсе яртыһында **Моҡастан Бәләкәй Моҡас** айырылып сыҡҡан булырға тейеш, сөнки XIX быуат аҙағына һәм XX быуат башына ҡараған сығанаҡтарҙа ике: **Оло Моҡас, һәм Бәләкәй Моҡас** күренә. Ул саҡта **Оло Моҡаста** 37 йорт булып, 96 ир-ат, 83 ҡатын-ҡыҙ, Бәләкәй Моҡаста 31 йорт булып, 83 ир-ат һәм 74 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән[81].

Шәжәрә, әгәр ҙә уны файҙаланып, ауыл барлыҡҡа килгән ваҡытын, тарихын, уға нигеҙ һалған кешенең шәхесен, тоҡомдарын, ата-бабаларын асыҡлап булһа, баһалап бөткөһөҙ ҡиммәтле сығанаҡты тәшкил итә. Әммә ундай мәғлүмәттәрҙең шәжәрәлә булмауы ла ихтимал.

Юғарыла күрһәтелгән Р. Ғ. Кузеев тарафынан төҙөлгән «Башҡорт шәжәрәләре» китабында БР-ҙың Ауырғазы районы **Иҫке Мораҙым** ауылы шәжәрәһе лә бар[82]. Әммә был шәжәрәне **Мораҙым** ауылы барлыҡҡа килеүен асыҡлау өсөн ҡулланып булмай тиерлек. Сөнки унда Мораҙымдың ата-бабалары ла, тоҡомдары ла күрһәтелмәгән. Шәжәрәлә тик бер генә дата — башҡорт бейҙәренең 1555 йылда Ҡаҙанға Мәскәү дәүләте батшаһына барған ваҡыты ғына әйтеп үтелә. Мәҫәлән, Мең һаҙаҡлы Ураҙас бей мең ырыуының 11 бейе араһында 6-сы бей итеп һанап үтелгән. Шунан башҡа мәғлүмәт табыуы ҡыйын. Шуға ла фараз итергә тура килә. Әгәр ҙә 1555 йылда Ураҙас бей 40 йәштә булһа, уның тыуған йылы итеп 1515 йылды иҫәпләргә тейеш булабыҙ. Мораҙым иһә Ураҙас бейҙән 12 быуын һуң йәшәгән. Р. Ғ. Кузеев системаһы буйынса һәр быуынға яҡынса 25 йыл иҫәпләгәндә, Мораҙым ауылына исем биреүсе 1815 йылдарҙа тыуған булып сыға. Тимәк, **Иҫке Мораҙым** ауылы үҙенең хәҙерге **Мораҙым** тигән исемен тик 1815 йылдарҙан һуң ғына йөрөтә башлаған, тип әйтә алабыҙ.

Был дата өҫтәлмә дәлилдәр файҙаланыуҙы талап итә, тик улар беҙҙә хәҙергә юҡ. XIX быуат уртаһындағы башҡорт кантондары начальниктарының ведомостарында **Мораҙым** ярайһы уҡ ҙур ауыл булып теркәлгән. Унда 305 кеше йәшәгән булған. Шунда уҡ **Мораҙым** ауылы Меркетмең улусының **Аҡҡондо** түбәһенә ҡарай, тип яҙылған[83]. Экспедицияла хәҙерге **Иҫке Мораҙымда** 4 ара (аймаҡ) барлығы асыҡланды. Сатлыҡовтар араһы — *таҙ*, Смаҡовтар — *ҡара*, Мораҙымовтар *байым* тип йөрөтөлә. Тағы ла *кинйәкәй* тигән ара булыуы билдәле, тик уның кешеләре йөрөткән фамилиялар әйтелмәгән. Өршәк һыуында ултырғанғамы, уның буйындағы мең ҡәбиләһе башҡорттары ҡайһы

бер документтарҙа өршәк-мең ырыуы тип теркәлгән. Шул уҡ мәғлүмәт Р. Ғ. Кузеевтың аңлатмаларында ла сағылыш тапҡан[84]. Беҙ иһә башҡорт кантондары начальниктары төҙөгән ведомостарҙың мәғлүмәттәрен дөрөҫ, тип һанайбыҙ. Уның буйынса **Мораҙым** ауылы меркетмең башҡорттары тип ҡарала. Етмәһә, өршәк-мең ырыуы ауылдары араһында **Мораҙым** ауылы бөтөнләй теркәлмәгән.

## ТОПОНИМИК РИҮӘЙӘТТӘР ҺӘМ ЛЕГЕНДАЛАР

Фольклорҙы өйрәнеүселәр риүәйәттәр менән легендаларҙы халыҡтың ауыҙ-тел ижадының бер жанры тип ҡарай. Улар араһында ауыл, аныҡ географик урын атамаһына бәйле риүәйәттәр һәм легендалар бар. Улар фольклористика фәненә «топонимик легенда һәм риүәйәттәр» термины менән килеп инде[85]. Халыҡтың үҙаңының, донъяға ҡарашының һәм халыҡ ижадының ҡулланылыу формаһы булараҡ легенда һәм риүәйәттәр, әлбиттә, халыҡ фантазияһы, реаль ысынбарлыҡты ҡабул итеү емеше булып тора. Мәҫәлән, **Ашҡаҙар, Өфө** атамаһының барлыҡҡа килеүенә арналған легендаларҙың тарихи ысынбарлыҡ менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ.

Әммә легенда һәм риүәйәттәр араһында реаль ысынбарлыҡҡа нигеҙләнеп барлыҡҡа килгәндәр ҙә бар. Ҡайһы бер фольклор жанрының тарихилығын өйрәнеп, БДУ профессоры Ә. З. Әсфәндиәров, «һуңғы осорға ҡараған легенда һәм риүәйәттәр генә түгел, ә боронғо эпостар, ҡобайырҙар ҙа халыҡ тормошонда һәм аңында һиҙелерлек эҙ ҡалдырған тарихи факттарға нигеҙләнеп тыуҙырылған. Улар мөһим ваҡиғаларҙың халыҡ тарафынан ҡабул ителеүен һаҡлайҙар», тип яҙа[86].

Авторҙың был фекере күп кенә тарихи йырҙарҙы, айырып әйткәндә, кантон түрәһе Ҡыуатов тураһында ауылдар тарихы, «күбәләк» этнонимы, Салауат Юлаевтың улдары тураһындағы һәм, йәнәһе болғарҙар тарафынан нигеҙләнгән ауылдар һ. бгларҙың тарихын ентекле тикшереү һөҙөмтәләренә нигеҙләнгән.

Башҡорт дәүләт университеты тарафынан 1969 йылда сығарылған «Башҡорт легендалары» китабында тормош-көнкүреш легендалары араһында «Сибай» риүәйәте бирелгән[87]. Ул риүәйәт «Сибай, Айсыуаҡ, Биктимер, Баҡдәүләт — Атайсалдың тоҡомдары» тигән белдереүҙән башлана. Артабан ул түбәндәгесә дауам ителә: «1667 йылдар тирәһендә улар, барлығы 7 ғаилә Ырымбур далаларынан ауылдың (йәғни **Иҫке Сибайҙың**. — *Авторҙар)* хәҙерге ултырған урынына күсеп килгәндәр»[88]. 1967 йылда «Совет Башҡортостаны» гәзитендә (4 март номеры) Ғибат Биишев олатайҙың «Сибай» исемле мәҡәләһе баҫылды[89]. Унда шәжәрәнән тыш Атайсал һәм уның тоҡомдары тураһындағы риүәйәт файҙаланылған. Гәзит мәҡәләһендә Атайсалдың Ирәндек буйлап күсеүе ентекләп тасуир ителгән. Мәҫәлән, Атайсалдың тәүҙә Ырымбур далаларында күсмә тормошта йәшәүе, унан хәҙерге Башҡортостан Республикаһы Күгәрсен районы Санъяп ауылы тирәһенә килеп ултырыуҙары, шунан һуң ғына хәҙерге **Иҫке Сибай** ауылы ултырған ергә килеп нығыныуҙары тураһында яҙылған.

Беҙҙең экспедиция материалдары араһында Атайсал тураһындағы риүәйәттең ҡайһы бер урындарын раҫларлыҡ мәғлүмәттәр бар. Мәҫәлән, Туҡ һәм Соран буйындағы бөрйән башҡорттарының **Ҡотломбәт** ауылында *атайсал* араһы теркәлгән[90]. XIX быуат уртаһында Ырымбур әйәҙе IX Башҡорт кантоны Бөрйән, Ҡыпсаҡ улустарының 18-се йортонда (БР-ҙың хәҙерге Күгәрсен районы территорияһы) **Моҡас** һәм **Мырҙабай** тигән ике ауыл телгә алынған. Уларҙың икәүһе лә Бөрйән улусының атайсал ырыуына ҡараған булған[91]. Риүәйәттә иҫкә алынған **Санъяп** (рәсми исеме **Үрге Санъяп**) хәҙер Күгәрсен районында **Атайсал Бөрйәне** тип йөрөтөлә. Әйткәндәй, ауыл эсендәге ара — аймаҡтар араһында *атайсал* атамаһын осратып була[92]. Тағы ла Атайсал тоҡомдары булған Сибай, Айсыуаҡ, Биктимер һәм Баҡдәүләт, шулай уҡ Сибайҙың ете улы 1834 йылғы рәүиз материалдарында теркәлгән. Баҡдәүләт Ырыҫаҡов — 1745, Биктимер Мотаев 1756, Айсыуаҡ Мотаев 1750 йылда тыуған. Сибайҙың өлкән /улы Этбай — 1775, Ҡотлогилдеһе — 1776, Иҫәнгилдеһе — 1784, Амангилдеһе — 1785, Дәүләте — 1787, Утарбайы 1789 йылда тыуған. Утарбай Сибаевтың, йырҙарҙа данлаған ҡатыны Батима унаң үҙенән ике йәшкә кесе (1791 йылғы) булған[93].

«Башҡорт халыҡ ижады: Риүәйәттәр, легендалар» китабында «Болғарҙар менән башҡорттар» риүәйәте урынлаштырылған. Унда башҡорттар болғарҙан 15—20 көнлөк юлда, урман араларында йәшәгән, тиелә[94]. Сағыштырығыҙ: 1154 йылда Идриси һыҙған картаға академик Б. А. Рыбаковтың иҫкәрмәләрендә эске башҡорттар (Эске Башҡортостан тип уҡы. — *Авторҙар)* болғарҙарҙан 25 көнлөк юл алыҫлығында йәшәгәндәр тип, билдәләнә[95].

Риүәйәттәрҙең тарихи ысынбарлыҡҡа тап килгән осраҡтарына миҫалдарҙы күп килтерергә мөмкин. Әммә ошолары ла ҡасандыр булып үткән реаль хәл-ваҡиғаларҙың риүәйәттәрҙә сағылыш алыуына ышандыра.

## ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ ТАРИХЫ БУЙЫНСА ЭКСПЕДИЦИЯЛАРҘА ЙЫЙЫЛҒАН МАТЕРИАЛДАР

Үткән тормоштоң ысын хәл-ваҡиғалары хәҙерге көндәргә легенда һәм риүәйәт рәүешендә килеп еткән. Әммә боронғо көнкүреш нигеҙендә барлыҡҡа килгән халыҡ ижады төрҙәренең ҡайһы берҙәре легенда һәм риүәйәт формаһында түгел, ә ысын булған тарих итеп һөйләнелә. Урта быуаттар, XIX быуат һәм XX быуат башы әҙәбиәтендә тауарих тигән әҙәби әҫәрҙәр осрай. Әммә улар монографик характерҙағы, ғилми-тикшеренеүҙең һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән ғилми-әҙәби жанрҙы тәшкил итә. Ә тарих — бәләкәй күләмле, тауарих менән риүәйәт уртаһында торған халыҡ ижады төрө. Сөнки унда тәпсирләп тикшереү юҡ. Тарихта, башлыса, һөйләүсенең үҙ ҡарашы сағыла. Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге Ғилми архивында һәм Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ҡулъяҙма фондында тупланған, ғилми экспедицияларҙа һәм командировкаларҙа йыйылған материалдарҙың күпселек өлөшө тап ана шундай тарихты, йәғни бәләкәй тауарихты тәш-

кил итә лә инде. Улар халыҡтың ауыҙ-тел ижадында «ер-һыу тарихы», «ауыл тарихы» һ. б. шундай формаларҙа йәшәй. Ошондай тарихтарҙың бер нисәүһен килтерәйек.

Башҡортостан Республикаһы Федоровка районы Оло Сытырман ауылы тураһында тарихтар.

Беренсеһе, 1892 йылда тыуған Мәүҡәев Мәхмүт Мөхәмәт улы һөйләгән версия:

«Беҙҙең элек йәшәгән төп урыныбыҙ хәҙерге Ҡариҙел районы Сытырман ауылында булған. Салауат ихтилалы ваҡытында батшаға ҡаршы сығыш яһаған кешеләрҙе *сытырман* тип атағандар. Беҙҙең ата-олатайҙар тынысыраҡ йәшәү урыны эҙләгәндәр. Эҙләй торғас, улар хәҙерге Стәрленән алыҫ булмаған ергә ултырғандар. Әммә унда ла тыныс булмаған. Стәрле эргәһенән *Балыҡлы* йылғаһы буйына күскәндәр. Был яҡынса 1673 йылдарҙа булған. **Сытырманда** Сытырман улусының контораһын төҙөгәндәр. **Сытырман** бигерәк тә ҙурайып киткәс, унан 1898 йылда **Бала Сытырман** бүленеп сыҡҡан».

Икенсеһе, 1893 йылда тыуған Сәлимов Әхмәҙулла Ғилман улы һөйләгән версия:

«**Сытырман** ауылы хәҙерге ултырған ергә Иҙел аръяғындағы **Мирәтәк** тип аталған урындан күскән.

Тәүҙә **Оло Сытырманға** нигеҙ һалынған, аҙаҡтан **Бала Сытырманға. Бала Сытырман** ауылы уртаһынан *Сытырман* тигән йылға ағып ята. Хәҙер ҙә бар, ҡоромаған ул йылға. Оҙонлоғо 20 км тирәһе».

Өсөнсөһө, 1900 йылда тыуған Кинйәбаев Йыһаннур Йыһангир улының версияһы:

«**Сытырман** ауылы урынлашҡан ерҙә урман юҡ. Әйләнә-тирәлә тик тал ғына үҫә. Шуға ла унда сытыр күп. Ошо һүҙ ауыл исеме булып китеп, ауыл **Сытырман** тип аталған».

Күреүегеҙсә, **Сытырман** ауылының тарихы һәм атамаһының килеп сығышы тураһында ауылдың ҡарттары араһында ла уртаҡ ҡараш юҡ. Ә был хәл атаманың этимологияһын тикшереүҙә өҫтәлмә ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Дөрөҫмө-түгелме, халыҡта һаҡланып ҡалған ҡараштар иҫәпкә алынырға тейеш: шулай ҙа һәр фекер, һәр деталь тикшереүҙе талап итә. Мәҫәлән, хәҙерге Федоровка районы **Сытырманы** Ҡариҙел районынан күсеп килгән тигән фекер башҡа сығанаҡтан алынған мәғлүмәттәр менән раҫланмай. Федоровка **Сытырманын** юрматы ҡәбиләһенең *тәтегәс* ырыуы башҡорттары нигеҙләгәндәр, Ҡариҙелдәге **Сытырман** — татар ауылы.

«**Бала Сытырман Оло Сытырмандан** 1898 йылда бүленеп сыҡҡан» тигән фекер ҙә дөрөҫ түгел, сөнки 1834 йылғы VIII рәүиздә **Бала Сытырман** айырым ауыл булып теркәлгән[96].

Икенсе версияның, Сәлимов Әхмәҙулла олатайҙың «**Сытырман** ауылы Иҙел (йәғни Ағиҙел) аръяғынан **Мирәтәк** тип аталған урындан күсеп килгән» тигән фекере дөрөҫлөккә тап килгәнгә оҡшай. Сөнки Стәрлетамаҡ ҡалаһын һалыу өсөн уның хәҙерге урынында йәшәгән Юрматы башҡорттарын Ағиҙелдең уң һәм һул ярҙарына һөрәләр. Шуның һөҙөмтәһендә күп кенә ауылдарҙың ерҙәре тартып алына, ауылдар икегә бүленә. Мәҫәлән, Стәрлебаш районындағы **Йәлембәт** (икенсе исеме **Шипай**) һәм Ишембай районындағы **Ҡанаҡай (Шипай)**

ауылдары элек күрше йәшәгәндәр. Ҡала төҙөү өсөн ер таҙартыу арҡаһында элекке ике күрше ауыл ике яҡта тороп ҡалған. Ошоно иҫәпкә алһаҡ, Сәлимов версияһы ысынбарлыҡҡа яҡын. Икенсенән, **Оло Сытырман** ауылында *мирәтәк* араһы бар. Был да **Мирәтәк** тигән ерҙән күсеп килгән тигән фекерҙе ҡеүәтләп тора.

Сытырман атамаһының этимологияһын асыҡлағанда, батшаға ҡаршы көрәшкә күтәрелгән кешеләрҙе, шулай уҡ *сытыр* күп булған урынды *сытырман* тип атауҙарының дөрөҫлөгө тикшерелергә тейеш. Шунан һуң ғына был ауыл исеменең сығышы бер ни тиклем асыҡлана төшә.

Учалы районы **Һөйөндөк** ауыл советына ҡараған **Көсөк** тигән ауыл атамаһының нигеҙендә ятҡан Көсөк исеме тураһындағы тарих иғтибарға лайыҡ. Шул ауыл кешеһе 1898 йылда тыуған Раянов Шакир Раян улы беҙгә түбәндәге тарихты һөйләне:

«Беҙҙең тирәләге башҡорттарҙа борон, әгәр ҙә бер кеше икенсе кешене үлтерһә, уның ҡанын яларға тейеш булған. Әгәр ҙә ки ул быны эшләмәһә, үлтерелгән кеше һәр ваҡыт уның төшөнә күренә икән. Ауыл батыры Көсөккә үҙ ауылын, ырыуҙаштарын һаҡлағанда йыш ҡына йортҡа баҫып килеүселәрҙе үлтерергә тура килгән һәм үҙе үлтергән дошмандарҙың ҡанын көсөк һымаҡ ялау уның ғәҙәтенә кереп киткән. Шуға ла уны **Көсөк** тип исемләгәндәр, имеш».

Беҙҙең һәм башҡалар тарафынан йыйылған, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге һәм Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фондтарында тупланған ошондай материалдар күп кенә ауыл һәм географик объекттар атамалары буйынса бар. Уларҙың барыһы ла башҡа анализланған сығанаҡтар менән бергә ҙур әһәмиәткә эйә һәм топонимдарҙың этимологияһын асыҡлағанда файҙаланырға тейеш.

---

[1] ***Заходер Б. Н.*** **Каспийский свод сведений о Восточной Европе: Горган и Поволжье в IX—X веках. — М.: Издательство восточной литературы, 1962. — 39-сы бит.**

[2] *Шунда ук.*

[3] ***Крачковский И. Ю.*** **Избранные сочинения. — М.-Л.: Изд-во АН СССР, 1957. — Т. 4. — 137—141-се биттәр.**

[4] **Жизнеописания древних, средневековых и нового времени путешественников, посетивших Россию, или говоривших о ней и других соседственных с нею странах (Перевод с немецкого *А. Н. Шемякина.* — М.: Изд-во Общества истории и древностей Российских при Московском университете, 1865. — 111 — 115-се биттәр.**

[5] ***Шунда ук.*** **(Бында һәм аҙаҡта ла сығанаҡтарҙың стилистикаһы һаҡлана. — Авторҙар.)**

[6] ***Ковалевский А. П.*** **Книга Ахмеда ибн-Фадлана о его путешествии на Волгу в 921—922 гг.: Статьи, переводы, комментарии. — Харьков: Изд-во Харьков, гос. ун-та, 1956. — 130-сы бит.**

[7] ***Шунда ук.*** **— 98-се бит.**

* ***Шунда ук.*** **— 181-се бит.**

[9] **Девону лугот-ит турк: Индекс-лугат. — Тошкент: Фан Узбек. ССР, 1967. — 392-се, 404-се биттәр.**

[10] ***Умняков И.*** **Самая старая турецкая карта мира (XI в.) /'Труды Самаркандского государственного педагогического института им. А. М. Горького. — Самарканд, 1940. — Вып. 1. — 105—115-се биттәр.**

" ***Шунда ук.*** **— 111 -се бит.**

[12] ***Шунда ук.*** **— 111 -се бит.**

[13] ***Шунда ук.*** **— 115-се бит.**

[14] *Рыбаков Б. А.* Русские земли по карте Идриси /'Краткие сообщения Института истории материальной культуры. — М., 1952. — Вып. 43. — 25-се бит.

[15] *Шунда уҡ.*

[16] *Рыбаков Б. А.* Күрһәтелгән хеҙмәт. — 27-се бит.

[17] Башҡорт халыҡ ижады: риүәйәттәр, легендалар. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1980. — 150-се бит.

[18] *Брун Ф. К.* Перипл Каспийского моря по картам XIV столетия /'Записки Новороссийского университета. — Одесса: типография Ульриха и Шу́льце, 1873.— Т. 9. — 3—4-се биттәр.

[19] *Шунда уҡ.*

[20] Материалы для историко-географического Атласа России. — СПб: Издание Археографической комиссии, 1871. — 11-се бит.

[21] *Шунда уҡ.*

[22] *Иофа Л. Е.* Города Урала. — М.: Географгиз, 1951. — 62-се бит.

[23] *Булатов А. Б.* Восточные средневековые авторы о башкирах /'Археология и этнография Башкирии. — Уфа: БФАН СССР, 1971. — Т. 4. — 324-се бит.

[24] *Булатов Ә. Б.* Күрһәтелгән хеҙмәт. — 324-се бит.

[23] Книга Большому Чертежу или Древняя карта Российского государства, поновленная в разряде и списанная в книгу 1627 года. Издание второе. — СПб.: Типография Российской академии, 1838. — 152-се бит.

[26] *Рычков П. И.* Лексикон или словарь топографический Оренбургской губернии. — Т. 1. — Оренбург, 1776. — Т. 2. — Ырымбур, 1777. /'Рәсәй дәүләт китапханаһы. Ҡулъяҙмалар бүлеге. 313-сө Федоров фонды.

[27] *Камалов А. А.* Башкирская топонимия. — Уфа: Китап, 1994. — 10—11-се биттәр.

[28] *Рычков П. И.* Күрһәтелгән хеҙмәт. — Т. 1.

[29] *Шунда уҡ.* — 47-се бит.

[30] *Шунда уҡ.* — 66-сы бит.

[31] *Вельяманов-Зернов В. В.* Источники для изучения тарханства, жалованного башкирам русскими государями /'Приложение к IV тому Записок императорской Академии наук. — СПб., 1864. — № 6. — С. 1—48.

[32] Шунда уҡ. — 9-сы бит.

[33] *Шунда уҡ.* — 26-сы бит.

[34] *Шунда уҡ.* — 26-сы бит.

[35] *Шунда уҡ.* — 17-се бит.

[36] *Усманов А. Н.* Присоединение Башкирии к Московскому государству. — Уфа: Башкнигоиздат, 1949.

[37] *Шунда уҡ.* — 89-сы бит.

[38] *Демидова Н. Ф.* Древнейший источник по истории города Уфы /'Из истории феодализма и капитализма в Башкирии. — Уфа: БФАН СССР, 1971. — 253—258-се биттәр.

[39] *Шакуров Р. 3.* «Отводная книга по Уфе» как топонимический источник /'Южноуральская конференция по археографии и источниковедению истории, литературы и языка. Тезисы докладов и сообщений. — Уфа, 1975. — 96—98-се биттәр; *Шул уҡ автор.* «Отводная книга по Уфе» как источник по топонимии Башкирии /'Археография и лингвистическая текстология Южного Урала: Сб. статей. — Уфа: БФАН СССР, 1977. — 84—88-се биттәр.

[40] РГАДА. — Ф. 1355. — Ед. хр. 929, 930.

[41] РГАДА. — Ф. 1355. — Ед. хр. 929, 930.

[42] РГАДА. — Ф. 1355. — Ед. хр. 1884.

[43] «Отводная книга по Уфе» (1591 — 1625 гг.) *Ц* Из истории феодализма и капитализма в Башкирии. — Уфа: БФАН СССР, 1971.

[44] ЦГИА РБ. — Ф. И — 138 (Оренбургская губернская казенная палата). — Оп. 2. — Д. 431. — 1 — 180-се биттәр.

| Аҡкүз (Аккуз) | бүләр | бүләр | | | | | | тептяри из башкир |
| Апас (Апас) | бүләр | бүләр | | | | | | |
| Ахун (Ахун) | бүләр, йәнәй | бүләр | йәнәй яғы, усаба яғы | | | | | тептяри из башкир |
| Иске Байсар (Старый Байсар) | бүләр | бүләр | | | | | | тептяри из башкир |
| Яңы Байсар (Новый Байсар) | бүләр | бүләр | | | | | | тептяри |
| Иске Биксәнтәй (Старый Бикчентай) | бүләр | бүләр | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Биш Күмәч (Биш-Кумяч) | бүләр | бүләр | | | | | | |
| Бүләк (Буляк) | бүләр | бүләр | | | | | | тептяри |
| Жыман (Земан) | бүләр | бүләр | | | | | | |
| Олы Имән (Улы-Имян) | бүләр, байлар | бүләр, салағош | үрәзмәт түбәсе, суратай түбәсе, ҡайын түбә | | | | | тептяри |
| Ҡачҡын (Качкын) | бүләр | мышыға | | | | | | тептяри |
| Ҡолын (Кулун) | бүләр | мышыға | | | | | | тептяри |
| Иске Ҡормаш (Старый Курмаш) | бүләр | бүләр | | | | | | тептяри |
| Яңы Ҡормаш (Новый Курмаш) | бүләр | бүләр | | | | | | |
| Ҡыр-Ҡайынтүбә (Кыр-Каинтюбе) | бүләр | бүләр | | | | | | тептяри |
| Меңнәр (Минляр) | бүләр, мең | бүләр | | | | | | тептяри |
| Мәчти (Мячти) | бүләр | бүләр | | | | | | |
| Иске Сәфәр (Старый Сафар) | бүләр, йәнәй | бүләр, йәнәй | гәрәйтүбә, бишкүмәс, торалы түбәсе, бүләктүбә | | | | | тептяри из башкир |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Яңы Сәфәр (Новый Сафар), Тәтәй ауыл | бүләр, йәнәй | бүләр, йәнәй | | | | | | |
| Табанлы күл (Табанлы-Куль) | бүләр | бүләр | | | | | | |
| Тенәкәй (Тенякай) | йәнәй | тәнәкәй | | | | | | |
| Түке (Тюке) | бүләр | мышыға | | | | | | тептяри |
| Усы (Усы) | бүләр | мышыға | | | | | | тептяри |
| Чураҡай (Чуракай) | бүләр, йылан | бүләр | | | | | | |
| Иске Әғбәз (Старый Агбяз) | бүләр | бүләр | |  | | | | |
| Юғары Яхшый (Верхний Якшей) | бүләр | бүләр | | | | | | тептяри |
| Түбән Яхшый (Нижний Якшей), Олы Имәнтамаҡ, Түбән Яҡшы | бүләр | бүләр | | | | | | тептяри |
| Адай (Адай) | йәнәй | туғыҙ | | | | | | тептяри |
| Аҡкүҙ (Аккуз) | йәнәй | чығыр | | | | | | |
| Иске Буғаҙы (Старые Богады) | йәнәй | буғаҙы | аҫаба, типтәр, йәнәй | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Юғары Буғаҙы (Верхние Богады), Яңы Боғаҙы | йәнәй | буғаҙы | | | | | | |
| Яңы Боғаҙы (Новые Богады) | йәнәй | буғаҙы | | | | | | |
| Буаз Күл (Буаз-Куль) | йәнәй | йәнәй | | | | | | |
| Ҡалмаш (Калмаш) | йәнәй, байлар | ҡамбар, ҡалмаш | | | | | | |
| Ҡарт (Карт) | йәнәй | ҡамбар | | | | | | |
| Иҫке Ҡәҙермәт (Старый Кадырмет) | йәнәй | буғаҙы | | | | | | |
| Яңы Ҡәҙермәт (Новый Кадырмет) | йәнәй | буғаҙы | | | | | | |
| Иске Семиострово (Старое Семиострово), Ушар, Сауз, Өшәр | йәнәй | йәнәй | ҡайынтүбә | | | | | |
| Яңа Семиострово (Новое Семиострово), Пузырева, Чиялек | йәнәй | йәнәй | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Иске Солтанғол (Старый Султангул) | йәнәй | буғаҙы | | | | | | |
| Яңа Солтанғол (Новый Султангул) | йәнәй | буғаҙы | | | | | | |
| Татар Суҡсуы (Татар-Сууксу), Башҡорт Суҡсуы | йәнәй | ҡамбар | | | | | | |
| Терпеле (Терпеле) | йәнәй | буғаҙы | | | | | | |
| Чалманарат (Чалманарат) | йәнәй, бүләр | йәнәй | сураҡайтүбә | | | | | |
| Шәбез (Шабиз), Шабыз | йәнәй | ҡамбар | | | | | | |
| Шәбезбаш (Шабизбаш), Шабызбаш | йәнәй | ҡамбар | | | | | | тептяри |
| Татар Әжби (Татар-Азби), Ҡайынтүбә | йәнәй | туғыҙаҡ | | | | | | |
| Иске Балтач (Старый Балтач) | гәрәй | әзәкул | | | | | | тептяри |
| Яңа Балтач (Новый Балтач) | гәрәй | әзәкул, таҡталасыҡ | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Бурсыҡ (Бурсык) | гәрәй | таҡталасыҡ | | | | | | тептяри |
| Иске Гәрәй (Старый Гарей), Түбән Гәрәй | гәрәй | таҡталасыҡ | | | | | | |
| Юғары Гәрәй (Верхний Гарей), Яңа Гәрәй | гәрәй | таҡталасыҡ | | | | | | |
| Иске Жиәш (Старый Жияш) | гәрәй | әзәкул | | | | | | тептяри |
| Яңа Жиәш (Новый Жияш), Ҡарамалы | гәрәй | әзәкул | | | | | | тептяри |
| Илчебай (Ильчибай) | гәрәй | йәнзигит | | | | | | |
| Ирмәш (Ирмяш) | гәрәй | әзәкул | | | | | | |
| Ҡуян (Куян) | гәрәй, тамъян | әзәкул, ҡуян | | | | | | |
| Мерәс (Миряс), Юғары Мерәс | гәрәй | әзәкул | | | | | | |
| Таҡталачыҡ (Такталачук), Юғары Таҡталачыҡ | гәрәй | таҡталасыҡ | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Иске Теләкәй (Старый Телекей) | гәрәй | таҡталасыҡ | | | | | | |
| Түмерже (Тумержи), Тайморза | гәрәй | таҡталасыҡ | | | | | | |
| Шәрип (Шарип) | гәрәй | әзәкул | | | | | | |
| Әжәкул (Азя-Кул) | гәрәй | әзәкул | | | | | | тептяри |
| Татар Ямалыйы (Татар-Ямалей) | гәрәй | таҡталасыҡ | | | | | | |
| Күжәкә (Кузяки) | байлар | ҡалмаш | | | | | | тептяри |
| Түбән Ҡарач (Нижний Карач) | байлар | ҡалмаш | | | | | | тептяри |
| Юғары Ҡарач (Верхний Карач) | байлар | ҡалмаш | | | | | | |
| Түбән Урғаҙы (Нижняя Ургаза) | байлар | ҡалмаш | | | | | | |
| Чат (Чат) | байлар | ҡалмаш | | | | | | |
| Чыныҡ (Чынык) | байлар | ҡалмаш | | | | | | тептяри |
| Әтәс (Атяс) | байлар | ҡалмаш | | | | | | |
| Айыш (Аиш) | ҡырғыҙ | байсары | | | | | | тептяри |
| Аҡтанышбаш (Актанышбаш) | ҡырғыҙ | ябалаҡ | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Ҡазыҡай (Казыкай) | ҡырғыҙ | ябалаҡ | | | | | | |
| Чөгәнә (Чуганя) | ҡырғыҙ | ябалаҡ | | | | | | тептяри |
| Иске Әлем (Старый Алим), Иске Әләм | ҡырғыҙ | байсары | | | | | | тептяри |
| Яңа Әлем (Новый Алим), Әлем | ҡырғыҙ | байсары | | | | | | тептяри |
| Ҡолшәрип (Кулшарип) | ҡыпсаҡ | | | | | | | |
| Иске Солтанғол (Старый Султангул) | ҡыпсаҡ | | | | | | | |
| **АЛЬМЕТЬЕВСКИЙ РАЙОН (ӘЛМӘТ РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Абдрахман (Абдрахман) | юрмый | | | | | | | тептяри |
| Биш Мунча (Биш-Мунча) | юрмый | | | | | | | тептяри |
| Яңа Кәшер (Новый Кашир) | юрмый | | | | | | | тептяри |
| Яңа Нәҙер (Новый Надир) | юрмый | | | | | | | |



| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Сөләй (Сулей) | юрмый | | | | | | | тептяри |
| Байлар (Байлар) | байлар | байлар | | | | | | |
| Яңа Сөләй (Новый Сулей) | юрмый | | | | | | | |
| Тайсуған (Тайсуйган), Тайсуйған | юрмый | | | | | | | тептяри |
| **АПАСТОВСКИЙ РАЙОН (АПАСТАУ РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Шәм Балыҡчы (Шам Балыкчи) | балыҡсы | | | | | | | |
| Болын Балыҡчы (Луговые Балыкчи) | балыҡсы | | | | | | | |
| Кесе Урсаҡ (Малый Урсак) | мең | өршәк мең | | | | | | |
| Олы Урсаҡ (Большой Урсак) | мең | өршәк мең | | | | | | |
| **БУГУЛЬМИНСКИЙ РАЙОН (БӨГӨЛМӘ РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Ҡарабаш (Карабаш) | юрмый | | | | | | | тептяри |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Кичучат (Кичучат) | | | | | | | | |
| **БАВЛИНСКИЙ РАЙОН (БАУЛЫ РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Алабакүл (Алаба-Куль), Алабуғалыкүл | байлар | байлар | | | | | | |
| Байлар (Байлар) | байлар | байлар | | | | | | |
| Баулы (Бавлы), Баллыйылға | байлар | байлар | | | | | | |
| Яңы Баулы (Новые Бавлы), Яңы Баллыйылға | байлар | байлар | | | | | | тептяри |
| Димтамаҡ (Димтамак) | байлар | байлар | | | | | | |
| Татар Тумбарлысы (Татарские Тумбарлы) | байлар | байлар | | | | | | |
| Иске Чуты (Старые Чоты), Иске Чөтэй | байлар | байлар | | | | | | |
| Йэнэй (Еней, Еновка) | йэнэй | | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Әпсәләм (Абсалям) | байлар | байлар | | | | | | тептяри |
| Аҡбаш (Акбащ) | ҡырғыҙ | заһит (заит) | | | | | | тептяри |
| Бэйрэкэ (Байракя) | ҡырғыҙ, ҡатай | заһит (заит) | | | | | | тептяри |
| Кэрэкэшле (Каракашлы), Ҡараҡашлы | ҡырғыҙ | заһит (заит) | ҡатай заты, буби заты, ҡаҙанлы | | | | | |
| Иске Ҡаразирек (Старый Каразирек) | ҡырғыҙ | заһит (заит) | | | | | | |
| Яңа Ҡаразирек (Новый Каразирик) | ҡырғыҙ | заһит (заит) | | | | | | |
| Ташкичу (Таш-Кичу) | ҡырғыҙ | заһит (заит) | | | | | | |
| Ташлы (Ташлы) | ҡырғыҙ, ҡыр-йылан | заһит (заит) | | | | | | |
| Исэрғап (Исергап) | ҡыр-йылан | тыңламаҫ | шэреле, чирмеш, ҡырғыҙ, нэсем, ҡазанлы, типтэр, этэмбэй | | | | | тептяри |
| Ҡыҙылъяр (Кызыл-Яр) | ҡыр-йылан | тыңламаҫ | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| **ДРОЖЖАНОВСКИЙ РАЙОН (ДРОЖЖАН РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Иҫке Өпәй (Старый Упей) | өпәй | | | | | | | |
| **ЕЛАБУЖСКИЙ РАЙОН (АЛАБУҒА РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Бәзәкә (Бизяки) | өпәй | бәзәкә | | | | | | |
| Ҡураз (Кураз) | байлар | турай | | | | | | |
| Турай (Турай) | байлар | турай | | | | | | |
| **КУКМОРСКИЙ РАЙОН (КҮКМОР РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Масҡары (Маскары) | ҡатай | масҡары | | | | | | |
| **ЛЕНИНОГОРСКИЙ РАЙОН (ЛЕНИНОГОРСК РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Бәкер (Бакир), Иштерәк | юрмый | | | | | | | тептяри |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Шөгөр (Шугур) | юрмый | | | | | | | тептяри |
| Түбән Шыршылы (Нижние Чиршилы) | юрмый | | | | | | | |
| Мөъмин (Муьмин) | тамъян | | | | | | | |
| Ҡаратай (Каратай), Зәй-Ҡаратай | | | | | | | | |
| **МАМАДЫШСКИЙ РАЙОН (МАМАДЫШ РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Туғыҙ (Тугыз) | йәнәй | туғыҙлар | | | | | | |
| **МЕНЗЕЛИНСКИЙ РАЙОН (МИНЗӘЛӘ РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Иске Байлар (Старый Байлар) | байлар | салағош, турай | | | | | | тептяри |
| Тауасты Байлар (Тау-Асты Байлар) | байлар | салағош, турай | | | | | | |
| Юғары Байлар (Верхний Байлар) | байлар | салағош, турай | | | | | | |
| Яңа Байлар (Новый Байлар) | байлар | салағош, турай | | | | | | |
| Буюрган (Буюрган) | байлар | турай | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Гөлөк (Гулюк) | байлар | салағош | | | | | | тептяри |
| Дәүек (Давек) | байлар | салағош | | | | | | тептяри |
| Күзкәй (Кузькай) | байлар | турай | | | | | | тептяри |
| Ҡолош (Кулуш) | байлар | турай | | | | | | |
| Кәлмиә (Кальмия) | байлар | турай | | | | | | тептяри |
| Малтабар (Малтабар), Кривошеина, Яңа Байлар | байлар | турай | | | | | | тептяри |
| Сәмәкәй (Семекей) | байлар | салағош | | | | | | тептяри |
| Таулар (Таулар), Тау Байлар | байлар | | | | | | | тептяри |
| Туйғужа (Туйгужа), Чебенле | байлар | салағош | | | | | | тептяри |
| Таир (Таир), Таһир, Туйыр, Чебеньки | байлар | салағош | | | | | | тептяри |
| Тулыбай (Тулубай) | байлар | салағош | | | | | | тептяри |
| Тау асты Тәкермән (Тау-Асты Такерман) | байлар | салағош | | | | | | тептяри |
| Юғары Тәкермән (Верхний Такерман), Өскө Тәкермән | байлар | салағош | | | | | | тептяри |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Урус (Урус) | байлар | салағош | | | | | | тептяри |
| Хужамәт (Хужахмет), Күзәмбәт | байлар | салағош | | | | | | тептяри |
| Яңа Айман (Новый Айман) | бүләр | мышыға | | | | | | |
| Яңа Биксәнтәй (Новый Бикчентай) | бүләр | бүләр | | | | | | |
| Иркинәш (Иркиняш) | бүләр | мышыға | | | | | | |
| Ҡалтаҡ (Калтак) | бүләр | мышыға | | | | | | тептяри |
| Татар-Мышыға (Татар Мушуга) | бүләр | мышыға | | | | | | |
| Тегермәнче (Такерманчи) | бүләр | мышыға | | | | | | |
| Ятыу (Ятов), Мышығатамаҡ | бүләр | мышыға | | | | | | |
| Күгәш (Кугаш) | мең | ҫарайлы мең | | | | | | тептяри |
| Урғуҙа (Ургуза), Юғары Ҡыуаҙы | мең | ҫарайлы мең | | | | | | |
| Сәит (Саит) | мең | ҫарайлы мең | | | | | | тептяри |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Сарсаз Тәкермән (Сарсаз Такерман) | мең | çарайлы мең | | | | | | |
| Бикбул (Бикбул) | йәнәй | туғыҙ | | | | | | тептяри |
| Ғәле (Галий) | йәнәй | туғыҙ | | | | | | |
| Кәлмырҙа (Кальмурза) | йәнәй | туғыҙ | | | | | | |
| Имәнле (Имянли) | ирәкте | абдулбин | | | | | | |
| **МУСЛЮМОВСКИЙ РАЙОН (МӨСЛИМ РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Вәрәшбаш (Варяшбаш) | ирәкте | абдулбин | | | | | | |
| Иçке Вәрәш (Старый Варяш), Шыршылы Ҡарантамаҡ | ирәкте | абдулбин | | | | | | тептяри |
| Метрәй (Метряй) | ирәкте | абдулбин | | | | | | тептяри |
| Мәллэтамаҡ (Меллятамак), Шәрип | ирәкте | абдулбин | | | | | | тептяри из татар |
| Наратасты (Нарат-Асты) | ирәкте | абдулбин | | | | | | |
| Салауз-Мухан (Салауз-Мухан) | ирәкте | абдулбин | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Түбән Табын (Нижний Табын) | ирәкте, табын, мең | абдулбин, çарайлы мең | | | | | | тептяри |
| Юғары Табын (Верхний Табын) | ирәкте, табын | абдулбин | | | | | | |
| Тамъян (Тамьян) | ирәкте, тамъян | абдулбин | | | | | | тептяри |
| Тегермәннек (Тегерманник) | ирәкте | абдулбин | | | | | | тептяри |
| Туғаш (Тугаш) | ирәкте | абдулбин | | | | | | |
| Бакабыз (Бекабыз), Бикабыз | бүләр | бүләр | | | | | | тептяри |
| Зөбәйер (Зубаир) | бүләр | мышыға | | | | | | |
| Исәнсеф (Исянсеф) | бүләр | мышыға | | | | | | тептяри |
| Күбәк (Кубяк) | бүләр | бүләр | | | | | | тептяри |
| Ҡарамалы (Карамалы) | бүләр | бүләр | | | | | | тептяри |
| Мәсғүт (Масгут), Мәсәғүт | бүләр | бүләр | | | | | | тептяри |
| Сикия (Сикия) | бүләр | бүләр | | | | | | тептяри |
| Симәк (Симяк) | бүләр | мышыға | | | | | | тептяри |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Иҫке Әлмәт (Старый Альмет) | бүләр | бүләр | | | | | | |
| Әмәкәй (Амекей) | бүләр | бүләр | | | | | | тептяри |
| **ОКТЯБРЬСКИЙ РАЙОН (ОКТЯБРЬСК РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Иҫке Татар Әлмәте (Старый Татарский Альмет), Әлмәтмулла | байлар | салағош | | | | | | тептяри |
| Әхмәт (Ахмет), Түбән Әхмәт, Әхмәтабыз | байлар | салағош | | | | | | |
| **РЫБНО-СЛОБОДСКИЙ РАЙОН (РЫБНО-СЛОБОДА РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Сатлыған (Сатлыган) | ҡаршын | сатлыған | | | | | | |
| **САБИНСКИЙ РАЙОН (САБА РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Ҡазанчы Бигәнәй (Казанчи-Бигиней) | танып | ҡаҙансы | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| **САРМАНОВСКИЙ РАЙОН (САРМАН РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Азалаҡ (Азалак) | байлар | салағош | | | | | | тептяри |
| Түбән Бикмәт (Нижний Бикмет) | байлар | салағош | | | | | | |
| Кәүжиәк (Кавзияк) | байлар | салағош | | | | | | тептяри |
| Ҡаташ-Ҡаран (Каташ-Каран) | байлар | салағош | | | | | | |
| Ҡормаш (Курмаш) | байлар | салағош | | | | | | тептяри |
| Муртышбаш (Муртышбаш) | байлар | салағош | | | | | | |
| Муртыштамаҡ (Муртыштамак) | байлар | салағош | | | | | | |
| Зур Нөркәй (Большой Нуркей) | байлар | салағош | | | | | | |
| Рангазар (Рангазар) | байлар, ҫарайлы мең | салағош | | | | | | тептяри |
| Рантамаҡ (Рантамак), Рангазартамаҡ, Ушар | байлар, ҫарайлы мең | салағош<br>салағош | | | | | | тептяри<br>тептяри |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Сарман (Сарман) | байлар, ҫарайлы мең | салағош | | | | | | тептяри |
| Сураш (Сураш) | байлар | сураш | | | | | | |
| Тләнчетамаҡ (Тлянчитамак), Кләнчетамаҡ | байлар, ҫарайлы мең | салағош | | | | | | татары |
| Усай (Усай) | байлар | салағош | | | | | | тептяри |
| Яңы Усай (Новый Усай), Садыҡ | байлар | салағош | | | | | | тептяри |
| Шарлыәрәмә (Шарлы-Урема) | байлар | салағош | | | | | | тептяри |
| Яңа Әхмәт (Новый Ахмет), Яңы Әхмәтабыз | байлар | салағош | | | | | | |
| Ҡазаҡлар (Казаклар) | мең | ҫарайлы мең | | | | | | татары |
| Ҡарашай-Саҡлау (Карашай-Саклау) | мең | ҫарайлы мең | | | | | | татары |
| Саҡлаубаш (Саклаубаш) | мең | ҫарайлы мең | | | | | | тептяри |
| Сарайлы (Сарайлы), Илексаз, Сарайлы Бикмәт | мең | ҫарайлы мең | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Сармашбаш (Сармашбаш), Исхаҡ | мең | ҫарайлы мең | | | | | | |
| Сарысаз-Тәкермән (Сары-Саз Такерман) | мең | ҫарайлы мең | | | | | | |
| Сулы Саклау (Сулы-Саклау), Өскө Саклау | мең | ҫарайлы мең | | | | | | |
| Өсөйлө Саклау (Учуйли-Саклау) | | | | | | | | |
| Чураш (Чураш), Саклау | мең | ҫарайлы мең | | | | | | татары |
| Әтрәкле (Атрякли) | бүләр | мышыға | | | | | | тептяри |
| **ЧЕЛНИНСКИЙ РАЙОН (САЛЛЫ РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Ҡалмаш (Калмаш) | байлар | бизәки | | | | | | тептяри |
| Әжмәкәй (Азмекей), Әҙекәй, Иҙекәй | байлар | бизәки | | | | | | |
| Мусабай (Мусабай) | ҡырғыҙ | | | | | | | |
| Чаллы (Чаллы) | гәрәй | | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| **УДМУРТ РЕСПУБЛИКАҺЫ — УДМУРТСКАЯ РЕСПУБЛИКА** | | | | | | | | |
| Камбар станцияһы (Станция Камбар) | йәнәй | ҡамбар | | | | | | |
| **СИЛӘБЕ ӨЛКӘҺЕ — ЧЕЛЯБИНСКАЯ ОБЛАСТЬ** | | | | | | | | |
| **АРГАЯШСКИЙ РАЙОН (АРҒАЯШ РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Байғаҙы (Байгазы) | әй, табын | әй (әйҙе) | сүтек | | | | | |
| Бикҡол (Биккул) | әй, табын | әй (әйҙе), барын табын | | | | | | |
| Дәрбиш (Дербиш) | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | | | | | | |
| Дәүләтбай (Давлетбай) | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | | | | | | |
| Ишәле (Ишали), Үләнде | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | | | | | | |
| Ҡаҙыр (Кадыр), Ҡәҙер | әй (әйҙе) | торналы | ҡомой, күкйүргәк | | | | | |
| Ҡолҡай (Кулукай), Ҡолоҡай | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | | | | | | |
| Ҡорамша (Курамша) | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Ҡорман (Курман), Мишәр | сырҙы | сырҙы | | | | | | |
| Ләүәш (Лаваш), Хужа | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | | | | | | |
| Морат (Мурат) | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | | | | | | |
| Мәрженбай (Марженбай) | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | | | | | | |
| Мәтәл (Метели) | әй (әйҙе), ҡатай | әй (әйҙе), бала ҡатай | бохар, әжәк, ҡалмаҡ, юлаҡ, аскилде, көсөк, барын, аҙғым, ҡылсыҡай | Ş — дөйәмуйын | | | | |
| Труҡай (Трукай), Тураҡай | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | | | | | | |
| Оло Ултрак (Большой Ультрак), Отраҡ | әй (әйҙе), өпәй, терһәк | әй (әйҙе), аҡбай | | | | | | |
| Кескәй Ултраҡ (Малый Ультрак), Отраҡ | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | | | | | | |
| Бәләкәй Усман (Малый Усман) | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Үтәбай (Утябай) | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | | | | | | |
| Хәйбәт (Хайбат), Сарҙакты | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | | | | | | |
| Хәлит (Халит), Әливҡол, Терһәк, Тахталым | әй (әйҙе), терһәк, һалйот | әй (әйҙе) | һаҙаҡ |  | | | | |
| Әлеш (Алиш) | әй (әйҙе), терһәк | әй (әйҙе) | | | | | | |
| Абдыр (Абдыр), Әбдер | табын | ҡара табын, күкйүргәк | әпсәләм, бөркөт, бәжәкәй | | | | | |
| Аҡбаш (Акбаш) | табын, әй (әйҙе) | ҡара табын | | | | | | |
| Бәжекәй (Бажекай) | табын | ҡара табын, күкйүргәк | таҫтар, һигеҙәк, туғыҙаҡ, һиҙгәк |  | | | | |
| Дәүләтбай (Давлетбай) | табын, әй (әйҙе) | ҡара табын, барын табын | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Илембәт (Илимбет) | табын | ҡара табын | | | | | | |
| Оло Иҫәнгилде (Большие Исянгильды) | табын | ҡара табын, барын табын | | | | | | |
| Көҙәш (Кузяш), Көҙөй, Әлмей | табын, әйле | ҡара табын | | | | | | |
| Оло Ҡуйһары (Большие Куйсары) | табын | ҡара табын, барын табын | борос, дәржимән, сысҡан, толоптар, борҡон, ҡара үгеҙ |  | | | | |
| Кескәй Ҡуйһары (Малые Куйсары) | табын | ҡара табын, барын табын | | | | | | |
| Мөхәмәтколой (Мухаметкулуй), Ҡолой, Мостафа | табын, әй | барын табын | мостафа, ҡолой |  | | | | |
| Наҡай (Накай) | табын, көҙөй | ҡара табын | | | | | | |
| Мәүлет (Мавлют) | табын | барын табын | | | | | | |
| Раҡай (Ракай), Ҡараһыу | табын | ҡара табын | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Сәләй (Саляй), Сөләй, Ҡушай | табын | ҡара-, барын табын | | | | | | |
| Иҫке Субыл (Старый Субыл), Тикторҙо | табын | ҡара табын, күкйүргәк | |  | | | | |
| Яңы Субыл (Новый Субыл) | табын | ҡара табын, күкйүргәк | | | | | | |
| Туғыҙбай (Тугузбай) | табын | ҡара табын | | | | | | |
| Һаттыҡ (Сатлык) | табын, бәкәтин | ҡара табын | ил аймағы, бәжәкәй, һаҡау сыты |  — балға | | | | |
| Этҡол (Иткул), Туҡыс, Этҡолаҡ | табын | | | | | | | |
| Ялтыр (Ялтыр) | табын | ҡара-, барын табын | | | | | | |
| Яратҡол (Яраткул), Әбдрәхим, Ниғмәт, Салам | табын | ҡара-, барын табын | | | | | | |
| Аяҫкол (Аязкул), Аяҙбай | сырҙы | сырҙы | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Иҙәш (Идяш) | сырҙы | сырҙы | | | | | | |
| Оло Ҡорман (Большой Курман), Мишәр | сырҙы | сырҙы | ҡорман, әбел, өрөк |  | | | | тептяри из башкир |
| Кескәй Ҡорман (Малый Курман) | сырҙы | сырҙы | | | | | | |
| Мәсәй (Масяй), Терһәк | сырҙы, терһәк | сырҙы | |  — сүмес | | | | |
| Яуымбай (Яумбай) | сырҙы | | | | | | | |
| Байрамғол (Байрамгул) | ҡыуаҡан | йылан, сәғит, тау, сатҡы, ҡырҡөйлө | | | | | | |
| Булат (Булат) | ҡатай, ҡыуаҡан | бала ҡатай | ваҡтар, теләкәй, ҡаҙан, аҙғым | | | | | |
| Назар (Назар), Нәзир | ҡатай | бала ҡатай | | | | | | |
| Этбай (Итбай), Сытый, Итбай | ҡатай | бала ҡатай | | | | | | |
| Сәйет (Саит), Әжебай, Этҡолаҡ, Һыҙғы | һыҙғы | һыҙғы | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Уразбай (Уразбай), Алтынбай, Туҡыс, Ҡуйбаҡ, Туғыҙ, Селянкино | һыҙғы, ҡатай | ялан ҡатай | | | | | | |
| Бесмәй (Письмей) | | | | | | | | |
| Бигәрҙе (Бигарды) | | | | | | | | |
| Етембай (Зитимбай) | | | | | | | | |
| Ҡуянбай (Куянбай) | | | | | | | | |
| Ҡыҙыл Бүләк (Кызыл-Буляк) | | | | | | | | |
| Мусаҡай (Мусакай) | | | | | | | | |
| Птицефабрика (Птицефабрика) | | | | | | | | |
| Суртаныш (Суртаныш), Тау Шураны | | | | | | | | |
| Сәғит (Сагит) | | | | | | | | |
| Хоҙайбирҙе (Худайберды) | | | | | | | | |
| Һары (Сары) | | | | | | | | |
| Һырғайҙы (Сыргайды) | | | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Шайтан-Көҙөй (Шайтан-Кудей) | | | | | | | | |
| Таш (Таш) | | | | | | | | |
| **ВЕРХНЕУФАЛЕЙСКИЙ РАЙОН (ЮҒАРЫ ӨФӘЛЕ РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Дауыт (Даут) | әй (әйҙе), терһәк | әй (әйҙе) | | | | | | |
| **КАСЛИНСКИЙ РАЙОН (КӘҪТЕ РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Ғәлекәй (Галикей) | | | | | | | | |
| **КРАСНОГВАРДЕЙСКИЙ РАЙОН (КРАСНОГВАРДЕЙСКИЙ РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Алабуға (Алабуга), Алабағаты | бәкәтин (мәкәтин) | | | Т — балға | яғылбай | ҡарама | | |
| Мәүлит (Мавлют) | табын | ҡара табын, ба- | | | ҡарағош | ҡарағас | салауат | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | рын табын | | | (бөркөт) | | | |
| Тәүкәй (Таукай), Ҡуяҫан | әй (әйҙе), казачий башҡорт | әй (әйҙе) | әпсәләм, аҡкайын, ҡалмыҡ, көрәк, ҡойон, ҡолой, ҡатай, бураҡ | | шоңҡар (аҡкош, бөркөт, торна) | тирәк (муйыл) | һандал (салауат) | |
| Яҡуп (Якуп), Сивәйгүрә | әй (әйҙе), казачий башҡорт | әй (әйҙе) | | | | | | |
| Байғусҡар (Байгускар) | һалйот | | | | көйөлдө | көйөрөс | барлас (тутыя) | |
| Бирҙәнеш (Берданыш) | бәкәтин | | | | | | | |
| Һаттыҡ (Сатлык) | | | | | | | | |
| **КУНАШАКСКИЙ РАЙОН (ҠОНШАҠ РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Бүре (Бури), Бүре Һеңрәне | һалйот, һеңрән | | ҡономбай, ҡыттытаяр, еңде |  | көйөлдө | көйөрөс | барлас (тутыя) | |
| Айыу (Аюв), Айыу Һеңрәне | һеңрән | | | | | | | |
| Ғәшер (Ашир), Әшер, Шуран, Ҡунаҡбай | терһәк | | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Ерәнкүл (Зирян-Куль), Һеңрәнкүл | һеңрән | | | | | | | |
| Ибраһим (Ибрагим), Шуран, Сонабай, Ҡунаҡбай | ҡатай | оло ҡатай, бала ҡатай | | | ҡауҙы | артыш | тайлаҡ | |
| Ихсан (Ихсан) | һалйот | | | | көйөлдө | көйөрөс | барлас (тутыя) | |
| Кирпәсте (Кирпясты) | бәкәтин | | | | | | | |
| Яңы Ҡаҙаҡбай (Новый Казакбай), Көпсөн | һалйот | | | | | | | |
| Ҡарасур (Карасур) | һалйот | | | | | | | |
| Ҡобағош (Кубагуш) | һалйот | | | | | | | |
| Ҡолошбай (Кулужбай), Ҡоложбай, Тешбай, Итешбай | ҡатай | оло ҡатай | ҡалмаҡ, ҡоломбәт, ғәҙелшә, айыу |  | ҡауҙы | артыш | тайлаҡ | |
| Ҡомғол (Кумгуль) | һеңрән | | | | | | | |
| Ҡоншаҡ (Кунашак) | ҡатай | оло ҡатай | | | ҡауҙы | артыш | тайлаҡ | |
| Ҡунаҡбай (Кунакбай) | һалйот | ғәҙелша, айыу | | | көйөлдө | көйөрөс | барлас (тутыя) | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Ҡоломбәт (Кулумбет), Арыҡ | | | | | | | | |
| Оло Ҡыҙыл (Большой Кизил) | һалйот | | | | | | | |
| Кескәй Ҡыҙыл (Малый Кизил) | һалйот | | | | | | | |
| Ҡырмыҫҡалы (Кармаскалы) | ҡатай | оло ҡатай | | | | | | |
| Маян (Маян), Муры | һалйот | | |  — салдау | | | | |
| Мөслим (Муслюм) | табын | ҡара табын | | | ҡараҒош (бөркөт) | ҡараҒас | салауат | |
| Мәхмүт (Махмут) | терһәк | | | | | | | |
| Солтанай (Султанай), Ыҫҡайҙы | һалйот | | | | | | | |
| Сөләймән (Сулейман), Йүкә, Терһәк, Кеүәшауыл | ҡатай, табын, терһәк | бала ҡатай, барын табын | | | | | | |
| Сабаҡты (Чебакты), Сабаҡтыкүл, Аҡсабаҡ | | | | | | | | |
| Султан (Султан) | | | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Сүкер (Сукир), Соҡор | һеңрән, һалйот | | |  — салдау | | | | |
| Сәркә (Серка), Серкә | һалйот | | иркәбай, ҡушый, сабир |  — йәйә | көйөлдө | көйөрөс | барлас (тутыя) | |
| Һеңрән (Сенгрян), Карино | ҡатай | оло ҡатай | |  | ҡауҙы | артыш | тайлаҡ | |
| Һарыкүлмәк (Сары-Кульмяк), ШыҒай | ҡатай, һалйот | бала ҡатай, оло ҡатай, ялан ҡатай | әбзәл, кетей, апат, аҙан, ялан | | | | | |
| Шәрипҡол (Шарипкул), Шәрип | ҡатай, табын | бала ҡатай, барын табын | | | | | | |
| Ямантай (Ямантай), Манатау | ҡатай | оло ҡатай | |  | | | | |
| Баязит (Баязит) | табын | ҡара табын | | | ҡараҒош (бөркөт) | ҡараҒас | салауат | |
| Зәбер (Забир) | һалйот | | | | | | | |
| Мансур (Мансур), Яҫауыл, Яҫауыл Мансур ауылы | табын, һалйот | ҡара табын, барын табын | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Усман (Усман) | әй (әйҙе), ҡатай | әй (әйҙе), ҡатай | | | | | | |
| Әлемғол (Алимгул) | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | | | шоңҡар (аҡҡош) | тирәк (муйыл) | һандал (салауат) | |
| Ҡарағайкүл (Карагай-Куль) | шуран, ҡатай | бала ҡатай, оло ҡатай | | | | | | |
| Яңы Мәсәй (Новый Масяй), Терһәк | сырҙы, терһәк | | | ♀ — сүмес | | | | |
| Ҡәнзәфәр (Канзафар) | | | | | | | | |
| Ибраһим (Ибрагим), Борисово, Бәрискә | | | | | | | | |
| **КУСИНСКИЙ РАЙОН (ҠУҪА РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Бөтөрөшкән (Петрушкино) | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | | | | | | |
| Ҡасҡын (Каскин) | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | | | | | | |
| Туҡтар (Туктар) | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| **НАГАЙБАКСКИЙ РАЙОН (НУҒАЙБӘК РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Ҡужбай (Кужбай) | сырҙы | | | | һайыҫҡан | ерек | тутыя | |
| **НЯЗЕПЕТРОВСКИЙ РАЙОН (НӘЗЕ-ПЕТРОВКА РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Аптраҡ (Аптрак) | шуран, ҡатай | оло ҡатай | | | | | | |
| Йосоп (Юсуп) | шуран, ҡатай | оло ҡатай | | | | | | |
| Арслан (Араслан), Боҫҡаҡ, Мимес | әй (әйҙе), өпәй | аҡбай | | Y.Y.Ұ | | | | |
| Арслан (Араслан), Арсланбәк | ҡалмаҡ, һарт | | ҡарашҡаҡ, һалйот, кәскилде | | | | | |
| Юлдаш (Юлдаш), Зәбир | ҡатай | оло ҡатай, бала ҡатай | | | ҡауҙы | артыш | тайлаҡ | |
| **СОСНОВСКИЙ РАЙОН (СОСНОВКА РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Шығай (Шигай), Һары күлмәк | әй (әйҙе), ҡатай | әй (әйҙе), оло ҡатай | ҡаҙбүре | | | | | |
| Этимгән (Итимгян) | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | | | шоңҡар (аҡҡош, бөркөт, торна) | тирәк (муйыл) | һандал (салауат) | |
| Тәгеш (Тагеш) | ҡатай | бала ҡатай | ҡалмаҡ, иштәк, мөстәк, турғай, ҡаҙаҡ | | ҡауҙы | артыш | тайлаҡ | |
| Мамай (Мамай) | табын | ҡара табын, барын табын | һөпәис, ҡалмаҡ, шуран |  | ҡарағош (бөркөт) | ҡарағас | салауат | |
| Һултай (Султай) | табын, әй (әйҙе) | ҡара табын, әй (әйҙе) | биҙергән, ишәм, ҡалмаҡ, мәлинәй, таҙ, буранғол, исмаил |  | | | | |
| Табын (Табын) | табын | | | | | | | |
| Туҡтамыш (Туктамыш) | табын | ҡара табын | | | | | | |
| Туҡтыбай (Туктубай), Сиреүсә | табын | ҡара табын | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Әлмәй (Альмей), Көҙәш, Көҙөй | табын, әй | ҡара табын, әйҙе | | | | | | |
| Әлеш (Алиш) | | | | | | | | |
| **ТРОИЦКИЙ РАЙОН (ТРОИЦКИЙ РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Һары (Сары), Көйөкбүкән | ҡатай | бала ҡатай | | | | | | |
| **УЙСКИЙ РАЙОН (УЙ РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Булат (Булат) | ҡатай, ҡыуаҡан | бала ҡатай, йылан, сәғит, тау, һатҡы, ҡырҡ өйлө | ваҡтар, теләкәй, ҡазан, аҙғым | | | | | |
| Булат (Булат) | табын | ҡара табын, барын табын | | | ҡарағош (бөркөт) | ҡарағас | салауат | |
| Лапы (Лапы) | табын, әй (әйҙе) | ҡара табын, барын табын, әй (әйҙе) | | | | | | |

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Мәһәҙей (Магадей) | табын | ҡара табын, барын табын | | | | | | |
| Төхмәт (Тухмет) | | | | | | | | |
| **ЧЕБАРКУЛЬСКИЙ РАЙОН (СЫБАРКҮЛ РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Атжитәр (Адзитар) | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | аҡбай, ҡоломбай, сиғандар, биктимировтар, сәлим | к, ш, [illegible], н, и | шоңҡар (аҡҡош, бөркөт, торна) | тирәк (муйыл) | һандал (салауат) | |
| Байғаҙы (Байгазы) | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | | | шоңҡар (аҡҡош) | тирәк (муйыл) | һандал (салауат) | |
| Ҡаҙыбай (Казибай) | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | | | | | | |
| Сәмер (Самер) | әй (әйҙе) | әй (әйҙе) | | | | | | |
| Назар (Назар) | ҡатай | бала ҡатай | | | ҡауҙы | артыш | тайлаҡ | |
| Сыбаркүл (Чебар-Куль) | | | | | | | | |



| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| **ИТКУЛЬСКИЙ РАЙОН (ИТКҮЛ РАЙОНЫ)** | | | | | | | | |
| Иткүл (Ит-Куль), Уртауыл | һеңрән, терһәк | | | | | | | |
| Ҡарабаш (Карабаш) | | | | | | | | |
| Мөхәмәт (Мухамет), Һаҡтау | һыҙғы, табын | һыҙғы, барын табын | | | | | | |
| Киштәм ҡалаһы (Кыштым) | • | | | | | | | |

# III бүлек

## ТАРИХИ-ЭТИМОЛОГИК ҺҮҘЛЕК

Топонимик тикшеренеүҙәрҙең төп маҡсаты булып атамаларҙың тарихын һәм сығышын өйрәнеү, атаманың этимологияһын асыҡлау тора. Топонимик этимология уртаҡлыҡ һүҙҙәр этимологияһынан айырыла. Топонимдар яңғыҙлыҡ исемдәрҙән дә, уртаҡлыҡ исемдәрҙән дә яһалырға мөмкин. Шуға ла топонимик этимология — атама яһалған нигеҙҙе асыҡлау менән сикләнә. Мәҫәлән, ауыл атамаһы, ырыу-ҡәбилә, кеше исеменән яһалған булһа, топонимик этимология эшләгәндә ауылға нигеҙ һалған кеше йә этник берәмектең асылын, тарихына иғтибар итергә тура килә. Әгәр ҙә инде ер-һыу атамаһы географик терминдан барлыҡҡа килһә, ул саҡта шул терминдың мәғәнәһен һәм сығышын асыҡларға кәрәк.

Был белешмәлә беҙ ер-һыу атамаларының тарихын, сығышын һәм этимологияһын асыҡларлыҡ материал етерлек булған осраҡта ҡайһы бер топонимдарҙың киләсәктә яҙыласаҡ тарихи-этимологик һүҙлегенә әҙерләнгән мәҡәләләр бирәбеҙ. Уларҙы башҡорт теле һәм әҙәбиәте, Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте, тормош һабаҡтары дәрестәрендә, кластан тыш эштәрҙе, мәктәптән тыш сараларҙы үткәргәндә, шәжәрә байрамдарында файҙаланырға була.

## АТАЙСАЛ

Баймаҡ районындағы **Иҫке Сибай** ауылын элек **Атайсал** тип йөрөткәндәр. Атайсал исемен халыҡ үҙенсә аңлата: йәнәһе, бер кеше улын меңгәштереп барған саҡта, аты текә тауҙан ҡолап төшә лә аяғын һындыра. Шунан улы атаһына: «Атай, сал!» — тип ҡысҡыра. **Атайсал** исеме шунан ҡалған имеш, тип һөйләйҙәр. Был легенда халыҡтың ижади фантазияһы емеше булып тора. Ысынында иһә **Сибай** ауылына *Атайсал* тигән батырҙың тоҡомдары нигеҙ һалған. Арҙаҡлы бабалары хөрмәтенә ауылды Атайсал тип атағандар. Бынан Атайсалдың кеше исеме булыуы аңлашыла.

Әҙәби телдә лә *атайсал* тигән һүҙ бар. Унда был һүҙ борон да, хәҙер ҙә «ватан, ата-олатайҙар төйәге, тыуған ер, тыуған ил» мәғәнәһендә ҡулланыла. Быны иҫбатлар өсөн бер нисә миҫал килтерәйек. «Ҡуңыр буға» эпосында, быҙауҙарын эйәртеп, тыуған еренә ҡайтҡан һыйырын эҙләп барған Таңдыса:

— *Буйға буйсан, һылыулыҡҡа һылыу*
*Урал ғына тауҙың ҡоланы;*
***Атайсалдан** килгән барса малдың*
*Кире ҡайта торған йолаһы*, — тип үҙенең

күңелен йыуата ла:

*Ҡуңыр буғам, һәу-һәу-һәу,*
*Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү*, — тип сәңгел тауышы

менән һауаны ярып һөрәнләп ебәрә. *(Ҡара:* Башҡорт халыҡ ижады. III том. Эпос. Өфө, Китап, 1998. 289-сы бит).

Ике томлыҡ «Башҡорт теленең һүҙлеге»нә индерелмәһә лә, уның нигеҙен тәшкил иткән картотекала *атайсал* һүҙе иҫкергән исем тип теркәлгән. Халыҡ ижадында ҡулланылған атайсал тигән иҫке исем хәҙер үҙенең яңырыу осорон кисерә. Ул авторлыҡ неологизмы булып халыҡ шағиры Рауил Бикбаев, Сәләх Кулибай, Абдулхаҡ Игебаев һәм башҡалар ижадында килеп инде. Рауил Бикбаев «Йүрүҙән ярында» тигән шиғырында:

*Яҙмыш ҡай саҡ **атайсалдан***
*Илтһә лә ят ергә;*
*Ил, ҡаялағы ҡыҙ булып,*
*Килһен хәтергә*, — тип яҙғайны *(Ҡара:* Ағиҙел,

1968, № 4. 81-се бит).

Сәләх Кулибай «Төрлө һуҡмаҡтар» тигән мәҡәләһендә лә *атайсал* һүҙен ҡулланған:

«Уң аяғын ныҡ йәрәхәтләү сәбәпле, *атайсал* яуын икенсе төркөм ғәрибе булып хөкүмәттән пенсия юллап алып та, бригадир булып та дыу типтереп эшләп йөрөгәндә, анау юлдаш йондоҙ күкте балҡытып йөрөгән яҙҙа сирләп, вафат булып ҡалды» (Ағиҙел, 1961, № 10. 51-се бит).

Килтерелгән өҙөктәрҙә *атайсал* һүҙе «ата-олатайҙар ере; ата-бабайҙар иле, ватан, тыуған ил» мәғәнәһендә ҡулланылғаны шикһеҙ.

Юғарыла беҙ борон *Атайсал* тигән кеше йәшәгәнен әйткәйнек. Күрәһең, уның ғаиләһе ҙур, бала-сағалары күп булғандыр. Уның улдарынан, ейәндәренән, бүләләренән, тыуаларынан, тыуа-яттарынан таралған тоҡом һәм уларҙың балалары XIX быуаттағы рәүиздәрҙә *атайсал* ырыуы кешеләре тип теркәлгән. Күгәрсен районындағы **Санъяп** ауылы икенсе төрлө **Атайсал Бөрйәне** тип атала. Тимәк, Атайсал ҡарт бөрйән ҡәбиләһе кешеһе булған. Санъяп ауылында шул бөрйән ҡәбиләһенә ҡараған *Атайсал* ҡарт тоҡомо көн күргән. Бөрйән ҡәбиләһенең атайсал ырыуы шул уҡ райондың **Ҡасҡын** ауылында ла йәшәгән. Быларҙан башҡа Мәләүез районының **Оло Моҡас**, **Бәләкәй Моҡас** ауылдарындағы халыҡ та үҙҙәрен *атайсал* ырыуы тип иҫәпләй.

Атайсал тигән ара (аймаҡ) булыуы ла ғалимдарға билдәле. Мәҫәлән, Бөрйән районындағы Ғәҙелгәрәй (Шүлгән), Аралбай (Боһондо башы), Ырымбур өлкәһендәге Переволоцкий районының Ҡотлөмбәт (Бишул) ауылдарында **атайсал** тигән араға (аймаҡҡа) ҡараған кешеләр бар. Шулай итеп, **Атайсал** тигән кеше исеме ырыу, тоҡом атамаһына әйләнгән.

Атайсал кеүек кеше, тоҡом исеме башҡорт телендә бер үҙе генә булмаған. Уға оҡшаш, аҙағында «сал» формантлы кеше исемдәре шәжәрәләрҙә, ер-һыу атамаларында, тарихи сығанаҡтарҙа йыш ҡына осрай. Мәҫәлән, бошмаҫ ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһендә **Һарыбайсал,** табындарҙыҡында **Муҙылсал**, түңгәүерҙәрҙә **Һатыусал,** үҫәргәндәрҙә **Ҡаҙаҡсал, Ялпаҡсал** тигән быуындар теркәлгән. Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә **Исмәғил Сайсаллы** тигән кеше тураһында яҙып ҡалдырған *(Ҡара:* Истоки, 1992, № 10). Бөрйән районындағы *Үҙәнгә* ҡойған *Ҡарамансал*, *Оҙонсал,* Баймаҡ районындағы *Сапсал* йылғалары исемдәрен дә ошо рәткә теркәһәң борон телебеҙҙә «сал» формантлы антропонимдарҙың байтаҡ ҡына булыуына ышанырға мөмкин.

Сал формантына килгәндә юғарыла килтергән миҫалдар уның борон башҡорт теленең кеше исемдәрендә актив ҡулланылғанын күрһәтеп тора. Форманттың мәғәнәһен ике төрлө аңлатырға мөмкин, тип иҫәпләйбеҙ. *Сал* һүҙе хәҙерге башҡорт телендә «сал сәсле, оло кеше», Урал тауына ҡарата *Сал Урал* «Иҫке Урал, Боронғо Урал» мәғәнәләрендә ҡулланыла. Әгәр ҙә *Атайсал* тигән кеше исемендә ошо төшөнсәгә эйә булһа, Атайсал, «оло атай, өлкән атай» тигән мәғәнәне йөрөтә булып сыға.

«Сал» формантын икенсе төрлө лә аңлатырға мөмкин. Хәҙерге төрки телдәренән тик сыуаш телендә генә формаһы менән «сал»ға яҡын һүҙ бар. Сыуаш телендә был һүҙ «таш» мәғәнәһендә ҡулланыла. Сал формантлы антропонимдарҙың йыш осрауын борон башҡорт телендә лә «таш» мәғәнәһендәге сал тигән һүҙ булғанына ишара яһай. Тик ул һүҙ ата-әсәнең яңы тыуған балаға, сабыйға таш кеүек сәләмәтлек, һаулыҡ, ныҡлыҡ, ауырымауын теләүҙе белдереү өсөн ҡулланылған булырға тейеш. *Ташбулат*, *Ташҡына*, *Таштимер*, *Тимербулат*, *Тимерҡасим*, *Тимерйән*, *Бикбулат*, *Биктимер* кеүек исемдәр ата-әсәнең балаға ныҡ, сәләмәт булыуын теләүҙе белдереп барлыҡҡа килгән. *Атайсал* һәм шуның кеүек исемдәрҙәге сал форманты таш кеүек сәләмәтлек, ныҡлы һаулыҡ теләүҙе аңлатыу өсөн ҡулланылған, тип әйтергә тулы нигеҙ бар. Нисек кенә булмаһын, шуныһы асыҡ: *Атайсал*

кеше исеме булып ер-һыу атамаларына килеп ингән. Ошо исем тора-бара Атайсалдан таралған тоҡомдо белдергән ара, ырыу исеменә әйләнгән. Бының шулай икәнен Атайсалдың шәжәрәһе лә күрһәтеп тора. Был шәжәрәнең күсермәһен безгә Ғибат олатай Бейешев ебәргәйне. Шул шәжәрәне файҙаланып, Бейешев олатай үҙе «Совет Башҡортостаны» гәзитенең 1967 йылғы 4 март һанында «Сибай» тигән мәҡәлә баҫтырып сығарҙы. Атайсал-Сибай ауылына, Атайсалдың тоҡомдарына бәйле легенда-риүәйәттәр ҙә халыҡ араһында ныҡ таралған. Уларҙың икеһе 1969 йылда Башҡорт дәүләт университеты уҡытыусылары Кирәй Мәргән менән Марат Минһажетдинов һәм дә Әхмәт Сөләймәновтар әҙерләгән «Башҡорт легендалары» тигән хеҙмәттә бирелгән, һуңғы осорҙа Башҡортостан ауылдары тарихын өйрәнеүсе Башҡорт дәүләт университеты профессоры Әнүәр Закир улы Әсфәндиәров архивтан легендаға һәм шәжәрәгә аныҡлыҡ индерерлек материалдар тапты. Шуларҙың барыһын бергә файҙаланып, Атайсал-Сибай тарихын асыҡларға мөмкинлек тыуҙы. Шулай ҙа төрлө сығанаҡтарҙы бер-береһе менән сағыштырғанда, асыҡлыҡ индерә торған һорауҙар күп булып сығыуы күҙгә бәрелә.

Ғибат олатай Бейешев шәжәрәһе (ул был шәжәрәне Иҙрисов Утарбай Шаһимәрҙән улындағы төп нөсхәнән күсереп алған) тулы булмағанлығы асыҡлана. Рәүиҙҙә *Сибай Тәнекәй* улы йөрөп, шәжәрәлә *Абзан* улы тип яҙылған. Баҡдәүләт яҙма материалдарҙа *Ырыҫаҡ* улы, шәжәрәлә иһә *Аҡкужа* улы тип теркәлгән. *Айсыуаҡ* менән дә шул уҡ хәл ҡабатлана. Шәжәрәлә *Айсыуаҡ Аҡбирҙенең* улы, документтарҙа *Мотай* улы тип бирелгән. Ибраһим, Мотай, Айсыуаҡ быуыны ла буталған. Шәжәрәлә Ибраһим Мотай улы, рәүиҙҙә Ибраһим Айсыуаҡ улы булып күренә. Күрәһең, Мотайҙан, Айсыуаҡ, Айсыуаҡтан Ибраһим быуыны килергә тейеш, сөнки Ибраһим 1776 йылғы, Айсыуаҡ 1750 йылғы. Айсыуаҡҡа 26 йәш тулғанда, улы Ибраһим донъяға килә. Бының ысынбарлыҡҡа тап килеүе ихтималыраҡ. Шәжәрәнең өҫкө, боронғо өлөшө лә башҡа мәғлүмәттәр менән тулыландырылырға тейеш.

Атайсал яҡынса XVI быуат аҙағында йәшәгән. Шәжәрә буйынса, уның 11 улы булған. Әммә тик береһе генә, *Һарыгол* тигәне бирелгән. Исхаҡ Мотаев мәҡәләһендә Атайсалдың Аҡмырҙа тигән улы булыуы әйтелгән. Уны ла иҫәпкә алып, Атайсалдан һуңғы икенсе быуынды ике кеше Һарыгол һәм Аҡмырҙа тәшкил итә, тип фараз итергә мөмкин.

**Өсөнсө быуынға** Һарығол менән Аҡмырҙа балалары инә. Һарығолдан Бурансы, Иәрғаҙы, Һунарсы һәм Айыткол тарала.

Аҡмырҙаның туғыҙ улы булған: Теймәҫ (Тимаш), Ярғалса, Илмырҙа, Үтәш, Абзан, Арыҡкиләй, Илсеғол, Һарығол һәм Татлымбәт.

**Дүртенсе быуынды** Абдулла (Һунарсы улы), Аҡкужа (Бурансы улы), Мотай (Йәрғаҙы улы), Ағыш, Ырыҫаҡ һәм Тәнәкәй тәшкил итә. Һуңғы өс кешенең, йәғни Ағыш, Ырыҫаҡ һәм Тәнәкәйҙең кем улдары икәнен асыҡ ҡына әйтеп булмай. Әммә шуныһы мөһим: **Тәнәкәй** — Сибайҙың атаһы. Бөтә архив документтарында **Сибай Тәнәкәев** тип яҙылған. Ул осорҙа атайҙың исеме бер үк ваҡытта фамилия функцияһын да үтәгән. Юлай улы *Салауат* — **Салауат Юлаев,** Арҫлан улы *Кинйә* — **Кинйә Арҫланов** тип йөрөтөлгән кеүек, Тәнәкәй улы *Си-*

*бай* — **Сибай Тэнэкэев** тип теркәлгән. Ошоноң кеүек факттарға иғтибар иткәндә, Атайсал шәжәрәһенә бигерәк тә унын өçкө өлөшөнә төҙәтмә индерергә тура килә.

Атайсал шәжәрәһенең боронғо өлөшө түбәндәгесә булырға тейеш. Ғәмәли дөрөçлөк өсөн быуындар араһындағы мөнәсәбәттәр, әгәр ҙә ул иçәпкә алынһа, пунктир менән күрһәтелә.




Тәнәкәйҙән Сибай килә. Шәжәрәнең Сибайҙан һуңғы өлөшө рәүиз буйынса асыҡлана. Сибайҙың ун бер улы була. Өлкән улы Этбай (1775 йылғы), икенсе улы Ҡотлогилде (1776 йылғы), һултангәрәй, Айытбай, Кирәй, Аманбай, Иçәнгилде (1786 йылғы), Амангилде (1785 йылғы), Дәүләтҡол (1787 йылғы), Туҡман (1788 йылғы), Утарбай (1789 йылғы). Мәшһүр «Сибай» йырын, күп кенә ғалимдар Шәйәхмәт сығарған тиһәләр ҙә, беҙҙеңсә, был йырҙың авторы Утарбай булырға тейеш. Сөнки Утарбайҙың да (1796 йылғы) Фатима (рәүиздә Батима) тигән ҡатыны була. Утарбай 1832 йылда һөргөнгә ебәрелә.

*Хуш булығыҙ, туған тиң-тоштарым,*
*Киткеләрем килмәй илемдән,* —

тип тик үҙ иленән һөрөлгән кеше генә йырлай ала. Утарбай Сибаев тураһындағы риүәйәттә *(Ҡара:* Башҡорт легендалары, БДУ, 1969. 112-се бит) «Утарбай 1833 йылда Исән тигән ҡаҙаҡ ханы менән һуғышып үлеп ҡала», тиелгән. Ысынында иһә, ул турала алда яҙып үткәнсә, 1932 йылда 43 йәшлек Утарбай Себергә һөргөнгә ебәрелә. Атаһы һөргөнгә ебәрелгәндә Утарбайҙың улы Шәйәхмәткә 12 йәш була. Шәйәхмәттең ҡатыны ла Фатима исемле. Ошо хәл Сибай йырының авторын билдәләүгә буталсыҡ индергән дә инде.

Утарбай Сибаевтың дүрт улы (Вәлит, Шаһиәхмәт, Ҡотләхмәт,

Шәрәфетдин) һәм ике ҡыҙы (Фазила, Динә) була. Ҡатыны Батима. Бына ошо ике ҡатындың Батима (әҙәби формала **Фатима)** тигән исеме иғтибарҙы йәлеп итә лә инде.

*Һауаларҙа осҡан, ай, ҡарсыға*
*Ҡәйелә-ҡәйелә килә, ҡош күреп.*
*Йөҙ илле лә керпек күҙҙәрен йомоп,*
*Көтә микән Фатимам, төш күреп,* —

тип әйтелә «Сибай» йырында. «Йөҙ илле керпекле» ҡатынынан, балаларынан, туғандарынан айырылыуы, әлбиттә, ир уртаһы кешегә (Утарбайға ул саҡта 43 йәш була) ауыр. Йырҙың тыуыуына бер Утарбайҙың фажиғәһе генә сәбәпсе булмағандыр, бәлки. Нишләптер Сибайҙың икенсе улы һәм дә У тарбайҙың ағаһы Иҫәнгилде Сибаев та 1832 йылда һөргөнгә ебәрелә. Рәүиз материалдарында Иҫәнгилденең улы Кәрәйғәленең 1832 йылда һалдатҡа алыныуы яҙылған. 1816 йылда Мөсрөп Мулжаяҡов, 1820 йылда Ағанаш Ҡоҙашев, бер йылдан уның ағаһы Туғанаш Ҡоҙашев, 1828 йылда Бикжан Ҡолшөгөрөвтәр ауылдан китеп, ҡасҡын булып йәшәүҙе артыҡ күрәләр. Быларҙың бөтәһе XIX быуат башында Сибай ауылында социаль хәлдең киҫкен булыуы тураһында һөйләй. «Сибай» йыры бына ошондай үҙ иленән ҡыуылып, һөрөлөп, ҡасып йөрөргә мәжбүр булған кешеләрҙең ятраҡан йәрҙәренә, ғаиләһенә, яҡын туғандарына, тыуған еренә мөхәббәт ораны булып яңғырай.

Ҡасан барлыҡҡа килгән **Атайсал, Сибай** тигән ауыл исемдәре? Был мәсьәләлә лә рәүиз материалдары һәм шәжәрә ярҙамға килә. Рәүиз документтарында Сибайҙың балаларының йәше күрһәтелгән. Уның өлкән улы Этбайға 1834 йылда 59 йәш була. Тимәк, Этбай 1775 йылда тыуған. Фәндә һәр быуынға уртаса 25—30 йәштән һалалар. Шулай иҫәпләгәндә, Сибай яҡынса 1745—1747 йылдарҙа тыуған. Сибай ауылының исеме лә ошо датанан һуң ғына барлыҡҡа килгәне асыҡлана.

**Сибай** ауылының тәүге исеме — **Атайсалдың** барлыҡҡа килеүе лә яҡынса билдәләнә. Сибайҙың улдарынан Атайсалды алты быуын айыра. һәр быуынға 25—30 йылдан иҫәпләгәндә (1775-тән алабыҙ 180-де), Атайсал яҡынса 1595 йылдарҙа тыуған, тип фараз итергә мөмкин. Атайсалдың балалары Туҡ-Соран (хәҙерге Ырымбур әлкәһе), Эйек яҡтарында (хәҙерге Күгәрсен, Мәләүез райондарында) яҡынса XVII быуат баштарында көн күргәндәр. Ырымбур ҡалаһы архивындағы бер шәжәрәнән күренеүенсә *(Ҡара:* Малоизученные источники по истории Башкирии. Уфа, БФАН СССР, 1976. 162-се, 164-се биттәр), XVII быуатта Бөрйәндәрҙең бер өлөшө *Һаҡмарҙың Яйыҡҡа* ҡойған ерендә һәм *Аҡтүбә* буйында йәшәгән. XVII быуат башы — башҡорттарҙың ҡалмыҡтар менән көрәш осоро. Шуға, көньяҡтағы тынғыһыҙ урынды ташлап, Атайсалдың балалары, ейәндәре, бүләләре, тыуалары йәшәр өсөн яйлыраҡ, тынысыраҡ ерҙе һайлап, өскә бүленеп тарала. Бер өлөшө *Туҡ-Соранды* ташламай. Икенсе өлөшө *Эйек* буйына күсә. Ә һарығол **Ирәндекте** һайлай. (Был турала 424-се биттәге картаны


КАЗАНЬ
Волга
Кама
Степной Зай
Ик
Дема
Уфа
УФА
ЧЕЛЯБИНСК
КУРГАН
Волга
Кондурча
Белая
Урал
Сакмара
Самара
Бол. Иргиз
ОРЕНБУРГ
Урал
— атайсал ырыуы ауылдары
— атайсал араһы таралыуы
— Атайсал тигән атамалар

ҡара). Шулай итеп, Атайсалдың тоҡомдары Төйәләҫ буйында **Атайсал** ауылына нигеҙ һала. Ошо Атайсалдан аҙаҡ **Сибай,** хәҙер **Иҫке Сибай** тип йөрөтөлгән ауыл барлыҡҡа килгән.

Йомғаҡлап шуны әйтергә кәрәк. *Атайсал* — бөрйән ырыуына ҡараған тоҡом вәкиле. Уның ғаиләһе ишле, балалары, ейәндәре, бүлә-тыуалары бик күп булған. Тора-бара улар ара-тоҡом ғына түгел, ә ырыу дәрәжәһенә тиклем ҙурайып, XIX быуат баштарында Атайсал ырыуы исеме булып теркәлгән. Хәҙерге көндә был исем яңырыу осо-рон кисерә. Ер-Һыу, тыуған ил, тыуған ер, ватан, ата-олатайҙар төйәге тигән мәғәнәле термин, неологизм булып ҡулланыла. Быға, бәлки, һүҙҙең нигеҙен тәшкил иткән *атай* тамыры ла булышлыҡ иткәндер. Нисек кенә булмаһын, уның хәҙерге башҡорт әҙәби телендә үҙ урыны бар һәм беҙ быны танырға, белергә, өйрәнергә һәм урынлы ҡулла-нырға тейешбеҙ.

# АҠҺАРЫ АУЫЛЫ

Көйөргәҙе районы **Аҡһары** ауылы — Отрада ауыл советына ҡараған. **Аҡһары** Башҡортостандың көньяғындағы данлы ауылдарҙың береһе. Бынан быуат ярым элек ул Ырымбур губернаһы IX Башҡорт кантоны 28-се йортоноң үҙәге булған. **Аҡһары** ауылы кешеләре үҙҙәрен һыуын ҡыпсаҡ ырыуына ҡараған башҡорттар тип иҫәпләйҙәр. Ауылдың оло ҡарттары, мәҫәлән, *Кускилдин Хөснөтдин, Н аурызбаев Бәҙретдин, Баянов Нигмәтша* олатайҙар, *Яманһары, Яманғол, Иманғол* һәм *Аҡһары* тигән дүрт ағалы-ҡустылы кешеләр дүрт ауылға нигеҙ һалған, тип һөйләйҙәр.

**Аҡһары** ауылы хәҙерге Өфө — Ырымбур юлы өҫтөндә ултыра. **Аҡһары** тирәһенән Крәҫтиән һуғышы ҡаһарманы, Емельян Пугачевтың тоғро яуҙашы Салауат Юлаев үтеп киткән булған. Өфө — Ырымбур тимер юлының Башҡорт Отрадаһы тигән станцияһы урынлашҡан ерҙә ул үҙенең яугирҙары менән туҡтап киткән. Ул яҡтарҙа *Туғай Юшатыры* аға (уны карталарҙа *Ялан Юшатыры* тип тә йөрөтәләр). Ул бик матур туғайлыҡтан аҡҡан тулы һыулы йылға. Уның буйында борон ошо тирәләге башҡорт ауыл халыҡтары йәйләгән булған. Быны шулай икәнен ер-һыу, тау, кисеүҙәр исеме лә дөрөҫләп тора. **Аҡһары** ауылының төньяҡ межаһынан башлап *Юшатыр* буйында **Томансы** ауылы кешеләре йәйләгән. Хәҙер ҙә *Томансы төбәге, Томансы кисеүе* тигән урындар бар.

Ҡашмау кисеүенән түбәнерәк *Ҡуян кисеүе, Ҡуян төбәге* исемле урын булыуы билдәле. Бында Йомағужа (хәҙерге Күгәрсен) районы **Ҡуян** ауылы халҡы йәйләгән. Унан түбәнгә табан, бер километр тирәһендә, *Көҫәпәй* кисеүендә Мәләүез районының **Көҫәпәй** (рәсми исеме Аптраҡ) ауылы кешеләренең йәйләүе булған. Йылға түбәнендә *Апас кисеүе, Апас күле, Апас тауы* тигән атамалар осрай. Унда инде **Апас** ауылы кешеләре йәйләгән. Башҡорт **Морапталы** кешеләре лә *Туғай Юшатыры* буйында йәйләү тотҡан. Әле лә ул ерҙе *Мораптал кисеүе* тип йөрөтәләр. Ошо йәйләүҙәр урынында Бабич (Шишмә) бригадаһынан километр ярым көньяҡта бер уба булған. Ул уба хәҙер һаҡланмаған инде. Ә элек ул ерҙә йәйләү халҡы биш ваҡыт намаҙлыҡ мәсет һалған. Уны «Аҡмәсет» тип йөрөткәндәр, сөнки уны **Шоңҡар** тауының аҡ ташынан һалғандар икән. Унда Бүгәсәү батша — аҡ батша йәшәгән. Аҡ батшаға ярҙамға башҡорттарҙан отряд йыйып, Салауат батыр менән Кинйә ошо йәйләүҙәрҙән ғәскәр туплағандар. Яуға китер алдынан, батырҙар ошо мәсеткә ҡарап, фатиха алып киткәндәр. Башҡорт Отрадаһынан көнсығышта 2—3 километрҙа Юлай урманы бар. Ул ер хәҙер Наҙар ауылына ҡарай. Был турала шул ауылдың 70—80 йәшлек оло ҡарттары *Наурызбаев Бәҙретдин*, *Баянов Нигмәтша* олатайҙар *Кускилдин Хөснөтдин* олатайға ошо турала 1926 йылда һөйләгән булғандар. Салауат менән Кинйә был яҡтарға, күрәһең, бер нисә тапҡыр килгән булһа кәрәк. Улар *Юшатыр* буйына тағы ла килеп, тиҙ генә отряд туплап, Бүгәсәүгә ярҙамға алып киткәндәр. *Юшатыр* буйында йәйләгән башҡорттар, ошо дауыллы йылдарҙы иҫкә алыптыр инде, йыр ҙа сығарғандар:

*Тэрән йылға аға тауышһыҙ,*
*Һай йылғалар аға сылтырап.*
*Дошман акыллыһы хәүефһеҙ,*
*Иҫәр дуҫтарыңдан бул йырак.*

**Аҡһары** ауылы тирәһендәге йылға-күлдәр:

*Туғыҙтимер* йылғаһы, **Туғыҙтимер** ауылының өҫ яғынан башлана, Аҡһары ауылын үтеп, километр тирәһендә *Ялан* (йәғни *Тугай) Юшатырына* ҡоя.

*Юшатыр* — Ермолаевканан Ялан Юшатырына ҡоя.

*Һаҫыккул, Муҫа күле* — Аҡһарынан көнбайышта, 2 км тирәһендә.

*Апас күле*, *Мөстән күле* — Аҡһарының төньяғында.

*Ҡотой ҡылыһы*, *Әминә ҡылыһы* тигән һыу исемдәре бар.

*Шишмә*, *Һаҙанлы йылғаһы* — ауылдан көнсығышта 2—3 километрҙа.

Элек *Үҙән (Иҫке Үҙән)* тигән йылға булған. Хәҙер ҡороған. Олатайҙар:

*Ерән ҡашҡа менеп*, *елән кеме п*,
*Йөрөһәң ине Үҙән буйлатып*,
*Көрәгәләр асып*, *ҡымыҙ эсеп*,
*Әйҙә, ултырайыҡ ҡурай уйнатып*, —

тип йырлап иҫкә алалар ине шул буйҙары *Үҙән*

**Аҡһары** ауылында яҙып алынған тау-таш исемдәре:

**Шоңкар** тауы Аҡһарынан көнсығышта ята (улар икәү: **Ата Шоңкар** тауы, **Инә Шоңкар** тауы).

**Әтәс** тауы — төньяҡ-көнсығышта.

**Аралбай** тауы — көнбайышта.

**Күгел** тауы, **Күпертау, Мәскәй** тигән тауҙар бар.

Төрлө урын, төбәк, үҙәк, соҡор, урман исемдәрен дә үрҙә һанап киткән олатайҙар яҙҙырғайны:

*Тарбикә әбей усағы*, *Һорат соҡоро*, *Тәрәнсоҡор*, *Әтәс соҡоро*, *Ғәббәс соҡоро*, *Мәсет урманы*, *Дөмбүләк*, *Ҡуянлыбүләк урманы*, *Сыбайбүләк, Ҡортлобүләк*, *Ҡыҫыҡ* һ. б.

**Аҡһарыға** күрше, яҡын булған ауылдар: **Башҡорт Морапталы, Татар Морапталы, Яҡут, Ҡалта, Ҡыҙыл Маяҡ, Аллабирҙе, Ялсыкай (1 Трактор), Шишмә (Бабич), Ҡунаҡбай, Назар, Яманғол, Яманһары.**

Топонимик легендалар:

**Аралбай тауы** — Аҡһарынан көнбайышта, көньяҡтан төньяҡҡа һуҙылған. Ауылдың көньяғында 15—18 саҡрымлап тигеҙлек, аҡлан ята. Ошо тауҙан тигеҙлектән ябырылыусы яуҙы күҙәткәндәр. Тау өҫтөндә бер-береһенә яҡын 2 уба бар. Әйләнәһе 40—60 аршындыр, бейеклеге 2 аршиндан артыҡ, өҫтө сиҙәм үләне менән ҡапланған. Ошо тауҙың битләүендә Юшатыр совхозы һабан һөргәндә, бер тимер күлдәк тә (һуғыш кейеме) таптылар.

**Мәскәй** тауы Аралбайҙан көньяҡта ята. Элек һәр ваҡыт төндә ут саҡкылары күренеп торған.

*Ҡашмау* кисеүе **Аҡһары** ауылынан алыҫ түгел, Юшатырҙа *Ҡашмау* кисеүе бар. Йәйләү халҡы ла ҡыҙ биреү, килен төшөрөү, һыуға башлау ғәҙәттәрен тотҡандар. Яңы төшкән киленде һыуға башлағанда, йәмле *Юшатыр* һыу буйына барып, сәхрә сәскәлектә йәштәрҙең бейеп-уйнап алыу ғәҙәте лә булған. Түңәрәктә:

*Ҡашмауын да ҡаҙаған,*
*Быҙауын талға бәйләгән.*
*Быҙау талды кимерә лә*
*Ҡыҙҙар һеҙгә тилмерә,*
*Егеттәр ҙә типтерә,* —

тип таҡмаҡлап бейешеп тә алғандар.

Ҡайһы берҙәре йырлап, еңгәйҙе маҡтағандар:

*Яҙ мәлкәйҙәрен шунан beләм,*
*Көйөлдө ҡош оса һыҙғырып.*
*Сәсмауҙарҙы тағып, ҡашмау кейеп,*
*Матур еңгәм килә, ҡыҙ булып.*

Шулай итеп йырлап, бейеп тиргә батҡан килен, һыуға етеү менән ҡашмауын ысҡындырып йыуыуынам тигәндә, уны һыуға төшөрөп ебәрә. Ҡашмауҙы таба алмайҙар, ул юғала. Шул урынды *Ҡашмау* кисеүе тиҙәр. Быны 1918 йылда 75 йәшлек Сәлихова Сәхипьямал өләсәй һөйләгәйне, тип яҙа Ҡускилдин Хөснулла олатай.

Әсфәндиәров Ә. З. үҙенең китабында **Аҡһары** ауылы тураһында түбәндәге тарихи мәғлүмәттәрҙе килтергән:

«**Аҡһары** ауылы Ҡыпсаҡ ҡәбиләһенең *һыуын ҡыпсаҡ* ырыуына ҡараған булған. Был ауыл Бөрйән улусының ерендә урынлашҡан. Ысынында был тирә ҡыпсаҡтар ере булған, әммә 1627 йылғы документ менән бөрйәндәр *Оло* һәм *Кесе Юшатыр, Һайылмыш* йылғаһы буйындағы ерҙәрҙе, батшаға барып, үҙҙәренә беркеткәндәр. Шуға күрә лә ҡыпсаҡтар бөрйәндәрҙең припущенниктарына әйләнгәндәр.

Ауыл 1789 йылдан уҡ билдәле. 1795 йылда ауылда барлығы 10 хужалыҡ булып, 52 кеше йәшәгән. Аҙаҡтан **Аҡһары** ҙурайып китә. Сөнки унда ҡыпсаҡтарҙан тыш **Санъяп, Эткол** һәм **Һөйөш** ауылынан бөрйәндәр һәм ҡара ҡыпсаҡтар күсеп ултырған. 1920 йылда Аҡһарыла 109 хужалыҡ булып, унда 218 ир-егет, 141 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән.

Ауылға **Аҡһары** тигән кешенең исеме бирелгән. Аҡһарының атаһы, олаталары билдәһеҙ, ә улдары 1816 йылғы рәүиздә теркәлгән. 1816 йылда Псәнсе Аҡһаринға 70 йәш була. 57 йәшлек Күсәк тигән улы сотник була. Унан башҡа Ҡускилде (54 йәштә), Күсәрбай (52 йәштә), Әлибай (51 йәштә) һәм есаул Мөхәмәтрәхим (34 йәштә) тигән улдары теркәлгән» (А. З. Асфандияров. История сел и деревень Башкирской АССР: Справочник. Книга первая. Уфа: Башкнигоиздат, 1990. 185-се бит).

# АРҠАУЫЛ

**Арҡауыл** — *Йүрүҙән* йылғаһы буйында ултырған Салауат районындағы боронғо башҡорт ауылдарының береһе. Уны икенсе ауылдарҙа *Үҙән* буйы **Арҡауылы** тип йөрөтәләр. Элек ауыл хәҙерге исеме менән түгел, ә **Монай** тип атап йөрөтөлгән. Быны 1901 йылғы һәм унан элек сыҡҡан бөтә белешмәләрҙә осратып була. Мәҫәлән, 1901 йылда **Арҡауыл (Монай)** Өфө губернаһы Өфө өйәҙе Мырҙалар улусы **Монай** ауыл йәмғиәтендә торған. Ул саҡта ауылда 807 аҫаба башҡорт йәшәгән. **Арҡауылда** йәшәгән кешеләрҙең 23773 дисәтинә ере булған. Әҙ генә булһа ла, ауылда ҡырҙан күсеп килгән башҡорттар ҙа көн күргән. Улар ауылдың аҫабаларынан ер алып йәшәгәндәр.

1870 йылда был ауыл **Монай** тип кенә теркәлгән. Ул саҡта **Монай** административ йәһәттән Өфө губернаһы Златоуст өйәҙенең 3-сө станына буйһонған булған. Ауылда бер мәсет, ике уҡыу йорто, бер һыу тирмәне, ун лавка эшләгән, һәр аҙнаның шишәмбе көнөндә халыҡ баҙарға килгән. Йылдың 25—31 сентябрендә йәрминкә үткәрелә торған булған. Ауыл халҡы иген дә сәскән, мал да ҡараған, бигерәк тә ҡортсолоҡ менән тирә-яҡта дан тотҡан.

VIII рәүиз (перепись) буйынса (ул 1834 йылда була) **Монай (Арҡауыл)** ауылында 316 кеше йәшәгән. Улар Өфө губернаһы VIII Башҡорт кантоны Мырҙалар улусына ҡараған. Билдәле булыуынса, идара итеүҙең кантон системаһы ваҡытында боронғо улус исемдәре башҡорт ырыуҙары исеменән алынған булған. Шулай булғас, **Арҡауыл (Монай)** ауылында әйле ҡәбиләһенең мырҙалар ырыуы башҡорттары йәшәгән. Ошо мәғлүмәт ауылдың тағы ла бер исемен иҫкә төшөрә. **Арҡауылды** хәҙер ҙә **Мырҙалар Арҡауылы** тип тә йөрөтәләр. Тимәк, был исем дә юҡҡа ғына бирелмәгән. Сөнки районда тағы ла бер **Арҡауыл,** был юлы **Түбәләҫ Арҡауылы** (рәсми исеме **Ҡарағол**) бар.

Салауат районындағы башҡорт ауылдарының бер үҙенсәлегенә иғтибар итергә кәрәк. Был төбәктәге башҡорт ауылдарында бер генә түгел, ә бер нисә ырыу кешеләре бергә йәшәй. Күрәһең, төрлө балаларҙан, яуҙарҙан һуң тере ҡалған, әммә ере тартып алынған икенсе ырыу башҡорттары үҙҙәренең күршеләре еренә, ҡайһы осраҡта уларҙың ауылына барып һыйынырға мәжбүр булғандар. Арҡауылда мырҙаларҙан башҡа, әйле ҡәбиләһенең ҡаратаулы, өләште, көҙөй ҡәбиләһенең бүләкәй-көҙөй ырыуҙарына ингән башҡорттар йәшәгән. Йәғни ике ҡәбилә — әйле һәм көҙөй башҡорттары бергә көн күргәндәр. Быны хатта ауылда ҡулланылған тамғаларҙан да һиҙемләп була. Сөнки элек Арҡауылда ике төрлө тамға ҡулланылған. Уларҙың береһе , (исеме уҡ-йәйә), икенсеһе ошо формала ,  булған.

Ошо мәғлүмәттәрҙе Арҡауылдың үҙендә хәҙерге көндә йәшәгән кешеләрҙең белмәүҙәре лә мөмкин. Шуға ла уларҙы, иғтибар менән өйрәнеп, артабан ауыл ҡарттары һөйләгән яңы мәғлүмәттәр менән тулыландырып, башҡорт теле, әҙәбиәте, Башҡортостан тарихы, Башҡортостан мәҙәниәте дәрестәрендә файҙаланырға кәрәк.

Ауыл тарихын, географияһын, ерле һөйләш үҙенсәлеген шул ауылдың ер-һыу атамаларын файҙаланып та өйрәнеп була.

**Йүрүҙән** атамаһын алайыҡ. *Йүрүҙән* — *Ҡариҙелгә* (Өфө, Өфө иҙеленә) һул яҡтан барып ҡушылған ҙур йылға. Ул үҙенең ҙурлығы, һыуының сафлығы, хозур тәбиғәтле урындан ағыуы менән дан тотҡан оло йылға. *Йүрүҙән* үҙенең исеме менән дә үҙенсәлекле, тел тарихы, диалектология фәне, ғөмүмән, халыҡ тарихы өсөн мөһим мәғлүмәт йөрөткән *ҙур* һәм *уҙән* тигән һүҙҙәрҙән барлыҡҡа килгән.

Йүрүҙән атамаһы тураһында мин дә, Рәшит Шәкүр ҙә яҙып сыҡҡайныҡ инде. Шулай ҙа уның хаҡында әйтәһе фекерҙәр, асыҡлай торған һорауҙар бар әле. Мәҫәлән, *уҙән* һүҙенең мәғәнәһе һәм уның таралыу географияһы.

**Йүрүҙән** атамаһындағы *йүр* компонентының (өлөшөнөң) *йүр* «ҙур», «оло» тигән һүҙгә барып тоташыу ы бәхәс тыуҙырмай. Ә бына *уҙән* һүҙенең мәғәнәһен аңлатыу кәрәк. Бының өсөн башҡорт теленең генә материалдары етерлек түгел, шуға ла башҡа төрки телдәренә мөрәжәғәт итергә тура килә.

Башҡорт әҙәби телендә, уның диалекттарында *уҙән* һүҙе өс — «йылға үҙәне», «уйһыулыҡ» һәм «туғай» тигән мәғәнәләрҙә ҡулланыла. Был мәғәнәле һүҙҙәр йылға атамаһының тәбиғәтенә тап килмәй. Ә ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, ҡумыҡ, уйғыр һәм сыуаш телдәрендә *уҙән* һүҙенең (сыуаш телендә ул *воран)* «йылға» тигән дүртенсе мәғәнәһе бар. Йүрүҙән атамаһындағы *уҙән* һүҙе «йылға» тигәнде аңлатыуы бик ихтимал. Йүрүҙән *Йүрүҙән* формаһынан барлыҡҡа килгән, ундағы *йүр* һәм *уҙән* һүҙҙәре «ҙур йылға» тигән мәғәнәне йөрөткән, тип уйларға тулы нигеҙ бар.

*Йүрүҙ&ңде* урындағы халыҡ *Үҙән* тип кенә йөрөтә. Ә *Үҙән* исемле йылғалар Башҡортостанда байтаҡ ҡына. Бөрйән, Белорет районында *Ағиҙелдең* бер һул ҡушылдығы *Үҙән* тип атала. Белорет районындағы *Әүжән* йылғаһы ла *(Ағиҙелдең* уң ҡушылдығы) шул уҡ *уҙән* менән бер тамырҙаш һүҙҙән яһалған. Ҡырмыҫҡалы районында *Өршәк* йылғаһының уң ҡушылдығы *Үҙән* (икенсе төрлө *Өйәҙән)* тип йөрөтөлә. Бүздәк районында ла *Үҙән* тигән йылға барлығы билдәле, һарытау өлкәһендәге *Үҙәнде* (ул *Иҙел-Волганың* һул ҡушылдығы), Ҡаҙағстандың Урал өлкәһендә тағы ла *Һары Үҙән*, *Ҡара Үҙән* (икенсе төрлө *Оло Үҙән, Кесе Үҙән)* тигән йылғалар булыуын күп кешеләрҙең белмәүе лә мөмкин. Был атамаларҙың бөтәһе лә боронғо замандарҙа ниндәй ҙә булһа башҡорт ҡәбиләһенең (йәки ҡәбиләләр берләшмәһенең) төйәкләнеп йәшәгән урындарында барлыҡҡа килгән. Быны шуның менән генә аңлатып була.

Кешенең холҡо үҙе менән ҡуша йөрөй, ти халыҡ. Бик дөрөҫ һүҙ. Халыҡ холҡон ғына түгел, ә үҙенең ғөрөф-ғәҙәтен, йолаһын, телен, хатта элек үҙен уратып алған атамалар донъяһын да үҙе менән ҡуша алып йөрөй. Яңы урынға күскән халыҡ ата-бабалары йәшәгән, уларҙың рухын һаҡлаған элекке урын исемдәрен ташламай, ә яңы төйәгендәге йылға-һыу, тау-таш һәм башҡаларға элекке атамаһын ҡушып, боронғо ата-олатайҙар рухын тергеҙгән. Шулай итеп яңы илдә иҫке атама йәшәй башлай. Бына шуға бер миҫал. 1920 йылдарҙа һарытау өлкәһендәге *Үҙән* буйынан ҙур ғына төркөм башҡорттары Баймаҡ районының Йылайыр совхозына күсереп килтерелә. Яңы урындағы ауылдарына был халыҡ яңы исем эҙләп тормай, ә *Үҙән* тип исем бирәләр.

Тимэк, юғарыла һанап үтелгән *Үҙән* йылғаларының исеме бер ҙә осраҡлы барлыҡҡа килмәгән. Үҙән буйында йәшәп тә икенсе урынға күсеп киткән халыҡ яңы төйәгендә иҫке атамаһын ташламаған, яңы төйәкләнгән урындағы йылғаға, ауылға исем итеп биргән. Бына ошо хәлгә туранан-тура бәйле рәүештә бер төрлө исемле (уларҙы топоомоним тип йөрөтәләр) йылғалар, ауылдар барлыҡҡа килә.

Шулай итеп, **Үҙән** — боронғо башҡорттар йәшәгән оло илдең көнбайышынан (Иҙел — Волга буйынан) алып **Урал** тауына хәтлем ерҙә таралған төрки сығанаҡлы атама. Нигеҙе менән дөйөм төрки һүҙенән яһалған булһа ла, атама булараҡ тик башҡорттар йәшәгән боронғо төйәктәр урындары тураһында бәйән иткән *Йүрүҙән (Үҙән)* ул.

**Арҡауыл (Монай)** ауылында аңлатыуҙы талап иткән тағы ла бер атама бар — ул *Ҡорғаҙаҡ.*

*Ҡорғаҙаҡ* һыуы — шифалы шишмә. Уның һыуы составы, сифаты яғынан бөтә донъяға билдәле Трускавец һыуынан бер ҙә ҡалышмай. Бөйөр сирле кешеләргә файҙалы, шифалы һыу ағып ята *Ҡорғаҙаҡ* шишмәһендә. Шуға ла боронғо ғалимдар Янғантауҙы өйрәнгәндә уның эргәһендәге шишмәне лә тикшерер булғандар. Шулай XVIII быуат аҙағында атаҡлы ғалим-биолог, академик П. С. Паллас был шишмәнең бер үҙенсәлегенә иғтибар иткән. *Ҡорғаҙаҡ* борон йылдың нисек килеүенә ҡарап үҙенең ағышын үҙгәртә торған булған. Ҡоро, ямғырһыҙ йылдарҙа ҡороған, йә булмаһа ер аҫтына һеңеп юғалып торған. Атаҡлы ғалим *Ҡорғаҙаҡтың* тәбиғәтен генә тасуирлап ҡалдырған, ә атамаһының мәғәнәһенә, йылғаның ни өсөн *Ҡорғаҙаҡ* тип аталыуына иғтибар итмәгән. Хәҙер быны башҡорт телендә ер-һыу атамаларының барлыҡҡа килеү үҙенсәлеген өйрәнеп кенә белеп була.

Географик атамаларҙы өйрәнеү шуны күрһәтә. Башҡорт телендә ҡорой торған шишмә, бәләкәй йылғаларға составында «ҡоро» һүҙе булған атама биргәндәр. «Шишмә ҡоро буламы ул?» — тип һорарға, әлбиттә, урын ҡала. Ҡыҙыҡ, әммә шулай! Быға ышаныу өсөн, башҡорт теле топонимияһы ҡанундарын аңлау өсөн ысынбарлыҡҡа (атамалар донъяһына) мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Башҡортостанда *коро* һүҙе менән яһалған атамалар бик күп. Мәҫәлән, Ейәнсура районында *Ҡороайыры*, *Ҡороер*, *Ҡоруйыл,* Мәләүез районында *Ҡорай*, Белорет районында *Ҡорғаҙы*, Бүздәк, Миәкә, Йылайыр райондарында *Ҡороған*, Мәсетле районында *Ҡорғат* (икенсе төрлө *Ҡорғаҙы)*> Бөрйән районында *Ҡороғакҫыр*, Илеш районында *Ҡоро Ҡаран*, Әлшәй районында *Ҡоро Ҡыҙыл*, Балаҡатай районында *Ҡоро Нөгөш*, Учалы районында *Ҡороуҙы*, Баҡалы районында *Ҡорсай,* Ырымбур әлкәһенең Переволоцкий районында *Ҡорай (Ҡорайыр)* тигән йылғалар һәм башҡалар. Был атамаларҙы яҙып алғанда, ауылда йәшәгән оло ҡарттар һәм башҡа кешеләр беҙгә ошо йылға, шишмәләрҙең ҡоро, ямғырһыҙ йылдарҙа һыуы ҡороуын әйттеләр.

Бына тағы ла бер нәмәгә иғтибар итергә кәрәк. Һыуы ҡоромоған йылға, мәҫәлән, *Ҡыҙыл*, *Ҡаран*, *Нөгөш* тип бер ниндәй аныҡлауһыҙ атама менән йөрөтөлһә, һыуы ҡорой торған йылғалар иһә *Ҡоро Ҡаран*, *Ҡоро Ҡыҙыл*, *Ҡоро Нөгөш* формаһында *(коро* һүҙе менән йылғаның атамаһы бергә) ҡулланыла. Шулай итеп антонимик иш (пар) барлыҡҡа килә. Әгәр ҙә инде һыуы ҡорой торған йылға бер үҙе генә булғанда, *Ҡорғаҙы*, *Ҡорғат*, *Ҡороған*, *Ҡороуҙы* кеүек атамалар

тыуа. **Корғаҙаҡ** исеме ошо һуңғы атамалар тибында барлыҡҡа килгән. Ул *короро* «ҡорой торған» һәм *ғаҙаҡ* (уның варианттары *ғаҙы> ғат)* «йылға» тигән боронғо башҡорт һүҙенән тора.

Есемдең тәбиғи асылын халыҡ бер һүҙ (был осраҡта *коро* һүҙе) менән генә аңлатҡан да ҡуйған. Ябай, әммә бик тапҡыр.

**Арҡауыл (Монай)** ауылы тәбиғәттең матур урынында урынлашҡан. Уны мәшһүр **Ҡаратау, Ҡарауылташ, Ҡырккантау, Бурлытау, Ҡыҙҙар тауы, Ослотау, Өсҡул тауы, Сейәлетау, Шылау** тауҙары уратып алған. Уларҙың **Бурлытау, Ҡыҙҙар тауы, Ослотау,** Сейәлетау тигән тау атамаларын, бәлки, аңлатып тороу ҙа кәрәкмәҫ. Ә ҡайһы бер атамалар аңлатыуҙы талап итә.

Халҡыбыҙҙың боронғо тормошон һүрәтләгән атамаларҙың береһе булып Ҡарауылташ тора. Боронғо замандарҙа ил сигендә әлеге кеүек сик буйы һыҙығы үткәрелмәгән. Шулай ҙа ил ҡарауылһыҙ ҡалмаған. Сиккә яҡын урынлашҡан бейек тау баштарында хәүеф-хәтәр тураһында хәбәр итерлек һаҡсылар торған. Хәбәрҙе төрлөсә белдергәндәр. Ҡайһы берҙәре ауылға сапҡын ебәргән, икенселәре тау башында һаламдан йә сатырҙан ут яғып хәбәр иткәндәр. Ҡарауылсылар торған урындар ҡайһы бер һөйләштәрҙә «һаҡ» (Һаҡтау), «баҡ» (Баҡсытау) һүҙҙәре, ә был яҡта «ҡарауыл» тигән һүҙ менән яһалған атамалар ярҙамында белдерелә. **Ҡарауылташта,** тимәк, борон ауылға ситтән килгән баҫҡынсылар тураһында хәбәр итеүселәр торған. Күрше **Ахун** ауылында йәшәгән бабайҙар **Ҡарауылтүбә** (унда **Ҡарауылташты** шулай атап йөрөтәләр) тураһында икенсе төрлө риүәйәт һөйләнеләр.

Бик борон замандарҙа Ҡарауылтүбәлә башҡорттарҙың ҡарауылы торған. Был яҡҡа монголдар һөжүм итеүен белгәс тә улар төп көскә хәбәр итәләр. Ә үҙҙәре зарлыларҙы (йәғни монголдарҙы. — *Авторҙар)* ебәрмәй, туҡтатып торорға булалар. Әммә көс тигеҙ булмай. Еңеләләр. Шулай ҙа күп дошмандарҙың башына етәләр. Унда күп кешеләр үлгән. Ҡәберҙәре әле лә бар.

Бына ошондай тарихи исем ул **Ҡарауылташ.**

**Өсҡул, Бай ҡулы, Тәрән ҡул, Бишәүҙәр ҡулы** һ. б. Был атамаларҙы Салауат районында (шулай уҡ Ҡыйғы, Дыуан, Балаҡатай һәм Мәсетле райондарында) йәшәгән башҡорттарға аңлатып тороуҙың кәрәге юҡ. Тик икенсе төбәктәрҙә донъя ҡорғандар ундай атамаларҙы аңлап етмәүе ихтимал. Сөнки *ҡул* һүҙе Башҡортостандың бөтә райондарында ла тигеҙ ҡулланылмай. Ә был төбәктә, Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында, *ҡул* һүҙле атамалар булмаған ауыл табыуы ҡыйын. **Арҡауыл (Монай)** ауылында ғына ла биш атама яҙып алынған.

*Ҡул* — оҙайлы үҫеш юлы үткән дөйөм төрки-монгол һүҙе. Ул хәҙерге күп кенә төрки һәм монгол (уға бүрәт, ҡалмыҡ һәм монгол телдәре инә) телдәренең һүҙлек составында киң ҡулланыла. Мәғәнәһе, әлбиттә, күп төрлө. Монгол телдәрендә гол, *һол, кол* һүҙҙәре «йылға», «йылға үҙәне» мәғәнәһендә йөрөһә, башҡорт телендә башлыса «үҙәк» (русса «лог», «ложбина») төшөнсәһенә эйә.

Юғарыла һанап үтелгән атамалар, тимәк, «Өсүҙән», «Бай үҙәге», «Тәрәнүҙәк», «Бишәүҙәр үҙәге» (Бишәүҙәр — күрше ауыл исеме) тигән мәғәнәлә ҡулланылған булып сыға.

# АРТАУЫЛ

Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында, Янауыл районында Артауыл исемле ике ауыл бар. Уларҙың береһе — **Иҫке Артауыл,** икенсеһе **Яңы Артауыл** тип атала. **Яңы Артауылда** билдәле башҡорт шағиры һәм яҙыусыһы Ғайнан Әмири тыуған. Был ауылдар бының менән генә түгел, ә исеменең башҡорт тел белеме өсөн әһәмиәтле мәғлүмәт йөрөтөүе менән дә үҙенә иғтибарҙы йәлеп итә.

1834 йылдағы VIII рәүиз (перепись) материалдарында Бөрө өйәҙе X Башҡорт кантонының 14-се йортонда *(йорт* — ул ваҡыттағы иң бәләкәй административ-территориаль берәмек) **Уртауыл** тигән ауыл теркәлгән. Был ауылға уран ҡәбиләһенең ҡотламыш ырыуына ҡараған аҫаба башҡорттар нигеҙ һалған. Ул саҡта **Уртауылда** 351 ир-егет, 341 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән.

1870 йылда **Иҫке Уртауыл, Яңы Уртауыл** тигән ике ауыл булған. **Иҫке Уртауыл** *Уръя* йылғаһын һыулаған. Ауылда 94 хужалыҡ булып, унда 248 ир-егет, 239 ҡатын-ҡыҙ көн күргән. Бөтәһе лә башҡорт милләтенән булған. **Уртауылда** мәсет, уҡыу йорто, ике һыу тирмәне эшләгән. Халыҡ ҡортсолоҡ менән дә әүҙем шөғөлләнгән.

1901 йылғы документтарҙа был ауылдар **Уртауыл** тип түгел, ә **Артауыл** тип яҙылған. **Артауыл** Байғужа улусының **Бәҙрәш** ауыл йәмғиәтенә ингән. Ауылдағы өйҙәр һаны арта төшкән. Хәҙер ундағы аҫаба башҡорттар 103 хужалыҡ төҙөп йәшәгән. Уларҙың 282-һе ир-егет, 278-е ҡатын-ҡыҙ затынан булған.

Тел фәне өсөн бынан шундай һығымта яһап була: XIX быуат урталарында башҡорт теленең ҡайһы бер һүҙҙәрендә һәм атамаларында *у* өнөнөң *а* өнөнә күсеүе, йәғни *у>а* фонетик күсеше бөтмәгән булған. Был башҡорт тел белеме өсөн мөһим мәғлүмәт булып тора.

Иҫке Уртауылда йәшәгән уран ҡәбиләһенең ҡотламыш ырыуына ҡараған аҫаба (ергә хужа) башҡорттарҙың ауыл эсендәге нәҫел, зат исемдәре беҙгә билдәһеҙ. Ә бына ауыл кешеләренең мал-мөлкәткә, солоҡ-умартаға ҡуйған тамғаларын тарихсы Әнүәр Әсфәндиәровтың хеҙмәттәренән табып була.

XIX быуатта **Уртауыл** кешеһе Япар Урусаев, төрлө документтарға У сифатлы, Кинйә Аҙналин менән Ғайсар Уразлин ⊽ , Сөйөш Ишмәтов ⊥, Иҫәнғол Өсәйенов ꟸ| кеүек тамғалар һала торған булғандар. Уларҙан башҡа тағы ла ошондай ⊨, Ⱨ, П, ⊻, ╥, ¥, △, ⟅ сифатлы тамғаларҙы ҡулланғандар.

Шундай уҡ тамғалар аҫабаларҙың үҙ ерҙәрен Ҡазан, Уҫы өйәҙҙәренән күсеп килгән монастырь крәҫтиәндәренә арендаға биргән һатыу грамоталарында ла ҡултамға урынына ҡуйылған булған.

Иҫке Артауылда Яҡуп Аҙналин, Кинйә Аҙналин, Ҡотой Рахманғолов, уның ағаһы Бәшир Рахманғолов, Әбдүс Яҡупов, Ғәйетбай Яҡупов, Ғөмәр Ранғолов, Ғайса Сөйөшөв, Раим Иҫәнбаев, Яныш Сәғитов, Әбдүвәли Әбйәлил улы Ғәбдүсов, Ғәббәс Ғәбдүсов, Әбүбәкер Сабит улы Уразлин, Исмәғил Әбүбәкеров һ. б-лар йәшәгән.

1842 йылда 37 йәшлек Әбдүвәли Әбйәлил улы Ғәбдүсов Ырымбурҙа *Яйыҡ* йылғаһында сик буйын һаҡлауҙа биш тапҡыр хеҙмәттә була.

Әбүбәкер Сабит улы Уразлин да сик һаҡлауҙа ике тапҡыр хеҙмәт итеп ҡайта.

Рәсәй батшаһы 1736 йылда Башҡортостанда йыйындарҙы тыя. Бының менән батшалыҡ Башҡортостанда мөстәкиллекте хәтерләткән һәр нәмәне бөтөрөргә тырышҡан. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, 1840 йылда Артауылда йыйын үткәрәләр. Унда күрше 12-се, 13-сө йорттарҙың старшиналары Мөхәмәтвәли Ҡарманов, Әбделғәфәр Дүскәев үҙенең кешеләре менән ҡатнашҡан булған. Был хәл үҙе генә лә уран башҡорттарының үҙ законы менән йәшәүе, ирекле йәшәүгә ынтылыуы тураһында һөйләй.

XIX быуат уртаһында Артауыл ҙур ғына ауыл булған. Ул саҡта 83 өйлө ауылда 704 кеше йәшәгән, һәр йән башына 7 бот ярым иген сәскәндәр. Ауылда өс һыу тирмәне эшләгән. 1870 йылда был тирмәндәрҙең береһе эшләүҙән туҡтаған, һәр хужалыҡ уртаса өс-дүрткә яҡын ат, дүрт-бишкә яҡын һыйыр, 2 һарыҡ, 2 кәзә аҫрағак.

1847 йылда **Артауылдан** бер ауыл бүленеп сыға, уға **Яңы Уртауыл** тип исем ҡушалар. **Яңы Артауылға** йән биргән ауыл **Иҫке Артауыл** тип атала башлай.

**Яңы Артауылдың** тағы ла бер исеме бар — ул **Янтыҡ. Янтыҡ** боронғо төрки теленән алынған һүҙҙән яһалған. Боронғо төрки телендә ул «сағыл» тигән мәғәнә йөрөтә.

**Артауыл** тирәһендәге ер-һыу атамалары ла фән өсөн бик әһәмиәтле мәғлүмәт бирә. Мәҫәлән, **Артауылға** нигеҙ һалған уран башҡорттары *Беҙ* һәм *Беүә* йылғалары буйында урынлашҡандар. Тарихи документтарҙан *Ҡарабеҙ* тигән йылға булғанын белеп була. Мәҫәлән, Уртауыл кешеһе Ҡотой Рахманғолов һәм Яңауылда старшиналыҡ вазифаһын башҡарған Ибраҡ Иманаевтар **Касево** ауылы крәҫтиәндәренең *Ҡарабеҙ* (документта *Ҡарапись)* йылғаһы буйынан файҙаланыуға алған ерҙәре өсөн ете йыл хаҡ түләмәүҙәре хаҡында ялыу яҙғандар.

*Беҙ*, *Ҡарабеҙ*, *Беүә* атамаларын төрки телдәре материалдары менән аңлатып булмай. Сөнки уларҙың нигеҙендә боронғо уғыр (хәҙерге ханты, манси һәм венгерҙарҙың ата-бабаларының) телендәге һүҙҙәр ята. *Беҙ* атамаһы «вис» тигән һүҙҙән барлыҡҡа килгән. *Бис* иһә — венгр телендә «һыу» тигән һүҙ. *Беүә* атамаһы хәҙерге удмурт, коми халыҡтарының ата-бабалары теленән алынған. Ул телдәр пермь телдәре тип атала. Пермь телендә *беүә* «соҡор» тигәнде белдерә. Тимәк, *Беүә* «соҡор», *Беҙ* «һыу», *Ҡарабеҙ* «ҡараһыу» тигән төшөнсәләргә эйә. Быны шулай булыуы бик ихтимал. Күрәһең ошо төбәктәге Соҡор (Тәтешле районында), Кесеҡыр (Кесе Соҡор Яңауыл районында) тигән ауыл исемдәре юҡҡа ғына барлыҡҡа килмәгән, күрәһең.

# АСҠАР

**Асҡар** — Әбйәлил районының үҙәге. Ул Урал аръяғындағы боронғо ауылдарҙың береһе. **Асҡарҙың** өс исеме булған. Уларҙа ауылдың оҙайлы тарихы сағылған.

**Асҡар** ауылы иң тәүҙә **Түңгәүер** тип йөрөтөлгән. **Түңгәүер** тигән исемде ауылға ҡәбилә исеменә ҡарап ҡушҡандар. Сөнки был ауылда йәшәгән кешеләр элек түңгәүер ҡәбиләһенә ҡараған. Түңгәүер ҡәбиләһенә килгәндә, ул борон замандарҙа бөрйән, үҫәргән ҡәбиләләре менән бергә йәшәр булған. Элек уларҙың йәйләүҙәре лә бер-береһенән алыҫ булмаған. Бөрйән, түңгәүер һәм үҫәргән башҡорттарының төп өлөшө Башҡортостандың хәҙерге Бөрйән, Әбйәлил, Йылайыр, Хәйбулла, Ейәнсура, Ырымбур әлкәһенең Ҡыуандыҡ, Медногорский, Һарыҡташ райондарында таралған. Борон улар башҡорттар йәшәгән ерҙе көньяҡтан сикләп торғандар. Бер-береһенә яҡын йәшәһәләр ҙә, һәр ҡәбиләнең ере үҙенә айырым булған. Билдәле йырыбыҙ Таштуғайҙа һүрәтләнгән мәшһүр ерҙәр (ул хәҙерге Хәйбулла районы **Аҡъяр** ауылы тирәһендә) элек түңгәүерҙәргә ҡараған булған. Тик аҙаҡ түңгәүерҙәр ул ерҙәрҙе үҫәргәндәргә ҡалдырып, үҙҙәре *Таналыҡ* йылғаһы буйлап үргә күтәрелгәндәр. Һаҡмар буйында түңгәүерҙәргә ҡараған ҙур ауылдарҙан **Юлдыбай, Иҫке Яҡуп** ауылдарын күрһәтергә мөмкин. Унан төньяҡтараҡ түңгәүерҙәрҙең ауылдары һирәкләнә. Ә бына Әбйәлил районында 6—7 түңгәүер ауылы бар. Улар араһында **Асҡар** иң ҙуры һәм күренеклеһе. Тирә-яҡ ауылдар бөрйән, тамъян, ҡыпсаҡ һәм күбәләк ырыуҙарына ҡарағайлыҡтан, яңы ырыуға, түңгәүергә ингән **Асҡарҙы** борон **Түңгәүер** тип ырыу исеме менән атап йөрөткәндәр.

Түңгәүер ҡәбиләһенә ҡараған ауылдар бер нисәү булғас, был ауылды икенсе исем менән йөрөтөргә тура килә. XIX быуатта баҫылған карталарҙа **Асҡарҙың Әбделйәлил** (ҡайһы бер яҙмаларҙа **Ғәбделжәлил)** тигән исеме сағылдырылған. Мәҫәлән, «Сборник статистических, исторических и археологических сведений по бывшей Оренбургской и нынешней Уфимской губернии» (Уфа, 1968) тигән китаптағы картала **Аскарово** атамаһы эргәһенә йәйә эсендә **Абдул ялил** тип яҙып ҡуйылған.

Экспедицияларҙа йыйылған материалдар ҙа быны раҫлай. 1966 йылда Әбйәлил районындағы **Асҡарҙа** түбәндәге легенданы яҙып алғайным: «**Асҡар** — элек **Әбделйәлил** тип аталған. Әбделйәлил тигән кеше ошо тирәләге халыҡты ауыл итеп ултыртып йөрөгән. Әбделйәлил ҡарттың 3 улы булған. Уларҙың береһе Асҡар исемле». Ошоға оҡшаш легенда хәҙерге Бөрйән районы **Асҡар** ауылында ла яҙып алынған: «Хәҙерге Ғәбйәлил районында Ғәбйәлил тигән ҡарт йәшәгән. Уның 2 улы булған. Береһенең исеме Аһҡар (икенсеһенең исемен автор әйтмәгәйне. — *Авторҙар). Бируай **Аһҡар*** әле Ғәбйәлил районында. **Втаруй Аһҡар** бында, Бөрйән районында. Беҙҙең **Аһҡар** ер биләр өсөн ошо ергә ебәрелгән булған». Бында информаторҙарҙың һүҙҙәре үҙгәртелмәйенсә бирелде.

1781 йылда Санкт-Петербургта баҫылып сыҡҡан «Список населенных мест по сведениям 1866 года» тигән белешмәнең 28-се томында

шул уҡ мәғлүмәттәр сағылдырылған. Тик бында 1-се **Асҡарҙың** (әлеге Әбйәлил районы үҙәгенең) икенсе исеме булып Әбйәлил (русса Абзелилова), 2-се **Асҡарҙың** (Бөрйән районындағы ауылдың) икенсе исеме сифатында Әбделйәлил (русса Абдул-ялилева) формалары йөрөй. Был ауылдар һыулаған йылғалар ҙа белешмәлә бик асыҡ итеп күрһәтелгән. Унда: «**Аскарова 1-я (Абзелилова)** расположена на речке *Тангатаре»*, «**Аскарова 2-я (Абдул-ялилева)** расположена на речке *Нугуше»* тип яҙылған.

Тарихсы-этнограф Р. Ғ. Кузеев материалдарында 1-се **Асҡар** ерле һөйләштә ҡулланылған форма менән **Иҫке Аһҡар** һәм **2-се Аҫҡар** тип бирелгән. Был ике ауылды яҡынайтҡан башҡа материалдар ҙа бар. 1-се **Аһҡарҙа** *түмәй, мышаяҡ, өпәй, аптыраҡ* тигән аралар булған, ауылдар ҡулланылған тамға  «ай». Шундай уҡ аралар һәм тамға Бөрйән районындағы **Асҡарҙа** ла бар. Тик бында аралар һаны күберәк, етәү: *түмәйҙәр, мышаяҡтар, упайҙар, аптыраҡтар, тупыстар, сыуаштар* һәм *иместәр.* Тамғалары — «ай». *Нөгөш* йылғаһы буйындағы **Асҡарҙы** күрше-күләндәре **Һайыҫҡан** тип йөрөтәләр. Бының сәбәбе, беҙҙең уйыбыҙса, түңгәүер ҡәбиләһенең ҡошо һайыҫҡан булыуындалыр. Әбйәлил районы **Ҡусҡар** ауылында яҙып алынған материалдарҙа түңгәүерҙең тамғаһы — ай, ағасы — ерек, ҡошо — һайыҫҡан тип күрһәтелгән. Тимәк, легенда, риүәйәт итеп һөйләнелгән ауыл тарихы асылда дөрөҫлөккә тура килә.

Бөрйән районы **Асҡар** ауылында яҙып алынған легендала Аһҡар ҡарттың ике улы булыуы, уларҙың береһе Астанғол, икенсеһе Туңғатар исемле булыуы ла әйтелгән. Был мәғлүмәттәр иғтибарға лайыҡ, сөнки тарихи документтарға ҡарағанда, 1816 йылда **Асҡар** ауылында Танғатар Асҡаров тигән старшина ярҙамсыһы йәшәгән. Боронғо фамилияларҙың башлыса атаһы исеменән яһалғаны билдәле. Тимәк, Танғатар Асҡаров «Таңғатар Асҡар улы» тигәнгә тап килә. Был осраҡта ла халыҡтың ауыҙ-тел тарихында күрһәтелгән факттар раҫлана: Асҡарҙың улы Туңғатар, асылда Таңғатар Асҡаров булып сыға. Бөрйән районындағы тәүге Тоз да (йәғни Товарищество по обработке земли. — *Авторҙар)* юҡҡа ғына Таңатар тип аталмағандыр. *(Ҡара:* В. Б. Таһиров, В. Салихов. Асҡар. Совет Башҡортостаны. 06.10.67).

Ер-һыу атамаларын юҡҡа ғына ерҙең йәнле тарихы, тип йөрөтмәйҙәр. Әлеге **Асҡар** янында ғына **Таңатар** йылғаһы бар. Ул йылғаға шул Асҡар улы Таңатарҙың исеме ҡушылғандыр, тип уйларға урын ҡала.

Шулай итеп, тәүҙә **Түңгәүер, Әбделйәлил, Әбйәлил, Асҡар, Асҡар Түңгәүере, Беренсе Асҡар, Иҫке Асҡар** тип атап йөрөтөлгән ауыл исеменең серҙәрен асырға тырышыу ҡыҙыҡлы ғына табыштарға килтерә. Әйткәндәй, Әбйәлил районының исеме лә Асҡарҙың Әбделйәлил тигән атамаһына барып тоташа. Әбделйәлил ҡыҫҡарып Әбйәлил булып киткән.

**Яңы Асҡар** исеменән үк күренеүенсә, оҙайлы ғына үҫеш юлы үткән. Ул үҫеште цифрҙар ярҙамында ла күрһәтеп була. Мәҫәлән, 1795 йылдарҙа теркәлгән Генераль межеваниеға иҡтисади иҫкәрмәләргә ҡарағанда Асҡар ауылында барлығы 23 йорт булған, унда

155 кеше йэшэгэн. Шуларҙың 96-һы ир, 59 ҡатын-ҡыҙ. 1841 йылғы материалдарҙан был ауыл арыу уҡ ҙурая төшөүе, 6-сы Башҡорт кантонының Верхурал өйэҙенэ ҡараған Түңгэүер улусының 12-се йортондағы **Асҡар** ауылында 430 кеше йәшәгәнлеге билдәле. Шуларҙың 217-һе ир, 213-ө ҡатын-ҡыҙ. Был осорҙа ла ауыл кешеләре йәйгеһен йәйләүгә сығып йөрөр булғандар. *(Кара:* А. З. Асфандияров. Ведомости башкирских и мишарских кантонных начальников о численности и социально-экономическом положении населения по деревням в середине XIX в. *Н* Южноуральский археографический сборник. Уфа: БФАН СССР, 1976, 2-се сығарылыш, *221-се* бит.) 1969 йылғы «Башҡорт АССР-ы Административ-территориаль бүленеше» белешмәһендә **Асҡар** ауылында 3 меңгә яҡын кеше йәшәүе күрһәтелгән. Әлеге көндә Әбйәлил районының үҙәге **Асҡарҙа** 4 меңдән ашыу кеше йәшәй. Асҡар — ҙур мәҙәниәт һәм сәнәғәт үҙәге. Урта мәктәп, Мәҙәниәт һарайы, Пионерҙар һарайы, заманса йыһазландырылған дауахана, сауҙа, элемтә, тәьминәт учреждениелары һ. бглар бар.

Быларҙың барыһы ла ауылдың үҫеш тарихын, уңыштарыбыҙҙың кимәлен нығыраҡ күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итә.

# АХУН АУЫЛЫ ТАРИХЫ

**Ахун** ауылы Салауат районының Мәсетле ауыл советына ҡарай. Бынан бер быуат элек уның адресы икенсе төрлө булған. Ул саҡта кем дә булһа бер кеше хат ебәрергә теләһә, был ауылға «Өфө губернаһы Златоуст өйәҙе Мырҙалар улусы Ахун ауыл йәмғиәте, Ахун ауылы» тип яҙыр ине. VIII рәүиз ваҡытында **Ахун** ауылы Өфө губернаһы, VIII башҡорт кантоны, Мырҙалар волосының 9-сы йортона ҡараған. Был ваҡытта ла **Ахун** Мырҙалар волосына ҡараған. Сөнки **Ахун, Арҡауыл, Иҙелбай, Илтәй, Көҫәпәй, Күҫәләр** һәм башҡалар менән бергә (бөтәһе 15 ауыл) мырҙалар ырыуын тәшкил иткән.

Ауылдың сығышы, боронғо ырыуҙарҙың районда нисек таралып ултырыуы тураһында 1893 йылда тыуған ике ҡарт — Хужин Шакир һәм Фәтихов Хәтим олатайҙар түбәндәгеләрҙе һөйләне.

Борон-борон заманда әлеге **Лағыр** ауылы ултырған ерҙә Мырҙа тигән ҡарт йәшәгән. Уның өс улы булған: Тырнаҡлы, Тыуса һәм Ахун. Ул саҡта Мырҙа ҡарт донъя көткән урындар ҡара урман менән ҡапланған булған. Мырҙа ҡарттың улдары һунарсылыҡ менән шөғөлләнгән. Хәҙерге Мөсәт ауылы урынлашҡан ерҙә Мырҙа ҡарттың өс улына — Тырнаҡлыға, Тыусаға һәм Ахунға бер бик ҙур болан осрай. Боланды былар аулап алалар. Тик уны бүлешкәндә, өс бер туған ағалы-энеле кешеләр ыҙғышып китәләр. Эш хатта һуғышыуға хәтлем барып етә. Уландарының һуғышып килеүен Мырҙа ҡарт та белеп ҡала. Уларҙың ярашырға бик тә уйҙары булмағас, Мырҙа ҡарт өс улына өс урындан ер бүлеп бирә. Ахунға ер *Үҙән* (йәғни *Йуруҙән)* буйынан эләгә. **Ахун** ауылы исеме ана шул Мырҙа ҡарттың улы Ахунға бәйле барлыҡҡа килгән. Бында Ахун беренсе башлап килеп ултырған, шул ҡарттың исеменә ауыл **Ахун** тип аталып китә.

Ваҡыт үтә бара. **Ахун** ауылы ҙурая. Унда Ахун ҡарттың нәҫеле күпселекте тәшкил итә. Ахун ҡарт нәҫелен *ҡырғыҙ* аймағы тип йөрөтәләр. Ул шунан килә. Ахундың Келәм тигән улы Ҡаҙаҡ далаларында мал көткән. Шул ваҡытта бер ҡырғыҙ ҡыҙы менән таныша. Ул ҡыҙ менән башлы-күҙле булырға һөйләшәләр. Ошо ҡыҙҙы алып ҡасыу өсөн иң ҡыйыу һәм батыр егеттәрҙән егерме һыбайлы алып китә. Шуларҙың ярҙамында ҡыҙҙы Келәм урлай һәм **Ахун** ауылына алып ҡайта. Ҡырғыҙ ҡыҙынан бик күп бала тыуа. Шул нәҫелде *ҡырғыҙ* аймағы тип әйтәләр. Улар хәҙер ауылдың **Уртасуҡ** тип аталған өлөшөндә йәшәйҙәр.

Ауылда тағы ла *ҡоҙғон, ҡотлосура, таҙ, маңғул, таулы, тилмәк, әптекәй* тигән аймаҡтар бар. Уларҙың ни өсөн шулай аталғаны билдәһеҙ. Ә бына *ҡотлосура* тигән аймаҡ шул исемле кешегә бәйле. Сөнки **Ахун** ауылы борон **Ҡотлосура** тип тә йөрөтөлгән булған.

Борон кеше үҙенең шәхси милкенә хужалығын белдереү өсөн ҡултамға урынына тамға ҡулланған. Мәҫәлән, *ҡырғыҙ* аймағы ошондай X̲ «ҡайсы» дамға (информаторҙар шулай тип әйтте) һалған. Тилмәктәр дамғаһы ла шуға оҡшаш: △. Әптекәйҙәрⳤ «өҙәңге» дамға йөрөткән. Быларҙан башҡа, мәҫәлән, «һөңгө» тип аталған дамғалар ҙа ҡулланылған. Ләкин уларҙың ҡайһы аймаҡтыҡы икәнен асыҡ әйтеп булмай.

Хужин Шакир, Фатыхов Хәтим бабайҙар бына ошоларҙы һөйләне. Уларҙың тарихты, боронғо тормошто белеү өсөн әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ ҙур. Ә бына ер-һыу атамаларын билдәле бер системаға һалып өйрәнгәндә, уларҙан тарих, этнография, биология, география, философия, диалектология кеүек фәндәр буйынса ифрат күп мәғлүмәт алып була.

Юғарыла килтерелгән ауыл тураһындағы риүәйәт тарихы этнография буйынса күп мәғлүмәт бирә. Унан тыш *Игенйылға*, *Сарсапҡан тау*, *Ҡыҙҙар тауы*, *Йәрсе ағас тауы* тигән атамалар ҙа ауылда йәшәгән халыҡтың һөнәре, йәшәү үҙенсәлеге тураһында һөйләй. Мәҫәлән, уларҙың Ахун башҡорттарының игенселек, ағас әҙерләү, сар, тирмән таштары әҙерләп һатыу менән шөғөлләнеүе тураһында белеп була.

Ә **Ҡыуаҡан** тауы тигән атама ҡайҙан килеп сыҡҡан? Билдәле булыуынса, борон *кыуакан* тигән башҡорт ҡәбиләһе булған. Улар хәҙерге **Ҡытаутамаҡ (Усть-Катав), Минйәр, Һилейә, Йүрүҙән, Һатҡы** ҡалалары ултырған ерҙәрҙе биләгән булған. Урыҫ байҙары, заводчиктары, башҡорт старшиналарын алдап, ер һатып алғас, унда йәшәгән ҡыуаҡан башҡорттары көнсығышҡа, Урал аръяғына, күсеп китергә мәжбүр булған. Хәҙер улар Силәбе әлкәһенең Миәс ҡалаһы тирәһендә йәшәйҙәр, ә ҡыуаҡан ҡәбиләһе исеме ошо тау атамаһында һаҡланып ҡалған.

Ер-Һыу атамаһынан ошо ерҙә йәшәгән төрлө йәнлек, ҡош-ҡорт, үҫкән ағастар тураһында ла белеп була.

Мәҫәлән, *Ҡондоҙоя* тигән урында борон ҡондоҙҙар йәшәгән. Ҡондоҙҙар инде хәҙер был тирәлә юҡ. *Көсөгән ояһы*, *Бөркөт оя* тауы тигән атамалар ошо ҡоштарҙың ояһы булған урынға ишара яһай.

Борон ҡарағайҙың йәш үҫентеләрен *терке* тигәндәр. *Теркелеҡул* атамаһы, тимәк, «йәш ҡарағай үҫентеләре күп булған үҙәк» тигәнде белдерә.

*Убырғул*у *Убырғара* тигән урын исемендә башҡорттарҙың боронғо ышаныуҙары сағылған.

Атамаларҙа диалектология, фонетика, тел күренештәре, тарихи лексикология буйынса ла байтаҡ материал табырға мөмкин.

*Окҫонтау* атамаһын алайыҡ. Уны *Укҫын тау* тип тә йөрөтәләр. *Окҫон* (уның варианты *укҫын)* — үлән, йыуа исеме. Әҙәби телдә ул *оҫҡон йыуаһы* тип ҡабул ителгән. Ә бында ул метатеза (фонетик үҙгәреш, өндәрҙең урынын алмаштырыу) һөҙөмтәһендә *укҫын* формаһында ҡулланылған.

*Тояҡай аралы*, *Иҫке Үҙән аралы* һәм *Түбәнге кисеү утрауы*у *Үрге утрау* тигән урындар бар. Был атамалар бер үк төшөнсәне аңлатҡан *арал* һәм *утрау* тигән синонимик терминдар ярҙамында яһалыуы менән ҡыҙыҡлы. Арал да, утрау һүҙе лә руссаға «остров» тип тәржемә ителә. Тимәк, был яҡта йәшәгән башҡорттар тел йәһәтенән икегә бүленә. Уларҙың сығышы ла бер булмаған булып сыға.

*Кул* һәм *үҙәк* һүҙҙәре булған атамалар ҙа бер мәғәнәле ике терминдан яһалғандар. Ахун ауылында *Убырғул, Ҡарағайҙыкул*у *Әвләй ғулы*, *Әбдрәхмән кулыу Өңбар кулы* (уны *Үмбарғол* да тиҙәр), *ТаштыкуЛу Теркелеҡул* менән бергә *Ослотау үҙәге*у *Ҡарауыл таш үҙәге* тигән ата-

малар осрай. *Үҙәк* һүҙе лә, *ҡул* һүҙе лә сығышы менән төрки һүҙҙәре, әммә *ҡул* һүҙенең тамырҙары монгол, тунгус-маньчжур телдәренә барып тоташа. Был топонимдар ҙа, *арал* һәм *утрау* һүҙҙәренән яһалған географик атамалар кеүек үк, **Ахун** ауылында сығышы төрлө булған ике төркөм башҡорттар йәшәүе тураһында һөйләй.

*Тәлпәк ҡарағай тауы, Тәлпәк ҡарағай бөгөлө* тигән урын атамалары ла хәҙерге ваҡытта дөйөм ҡулланылыштан төшөп ҡалған һүҙҙән яһалған. *Тәлпәк ҡарағай* тип өҫкө ботаҡтары киң йәйелеп үҫкән, тәпәш, бейек булмаған ҡарағайҙы әйтәләр. Тимәк, *Тәлпәк ҡарағай тауы* «Тәпәш ҡарағай тауы» тигәнде аңлата.

## БАЛАПАН

Әбйәлил районының Байым ауыл советына ҡараған **Иҫке Балапан** һәм **Яңы Балапан** тигән ике ауыл бар. Уларға табын ҡәбиләһенең күбәләк ырыыуына ҡараған башҡорттар нигеҙ һалған. Был яҡтарҙа беҙгә 1966 һәм 1971 йылдарҙа булырға тура килде. Шул осорҙа йәшәгән ҡарттар һөйләүенсә, Балапан ҡарт был тирәгә Учалы районынан, айырып әйткәндә, йә **Йәндек** йә **Науруз** ауылынан килеп ултырған. Ауыл халҡы өс аймаҡҡа (араға) — *бесэй*$_{у}$ *маңка*, *һарттарға* бүленеп йөрөтөлә. Ауылдың дөйөм тамғаһы түбәндәге формала. О Исеме — түңәрәк.

Архив материалдарында ла **Балапан:** ауылында күбәләк башҡорттары йәшәүе теркәлгән. Мәҫәлән, VIII рәүиздә, Верхурал әйәҙе 6-сы Башҡорт кантоны Күбәләк улусының 20-се йортонда 178 ир-ат, 158 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән, тип яҙылған. Бына ошо мәғлүмәттәр тел, тарих һәм әҙәбиәт өсөн бик мөһим.

Тел, диалект күҙлегенән ҡарағанда, ауыл атамаһы боронғо *балапан* тигән һүҙҙе һаҡлауы менән иғтибарға лайыҡ. *Балапан* һүҙен академик А. Н. Кононов «йырткыс ҡоштар төркөмөнән ыласындар ғаиләһенә ҡараған ҡош тип аңлата» *(Ҡара:* А. Н. Кононов. Родословная туркмен Абу-л-гази Хивинского. МгЛ.: Изд-во АН СССР, 1958. 104-се бит). Балапан кәүҙәһе 60 см-ға, ҡанаттары 130 см-ға тиклем етә икән.

«Башҡорт теленең һүҙлеге»ндә был һүҙҙе «бөркөт, ҡарсыға кеүек ҡоштарҙың иң ныҡлы, көслө балаһы» тип биргәндәр.

Башҡорт теле һөйләштәрендә, мәҫәлән, арғаяштарҙа имсәк имгән балаға, Ейәнсура районының **Иҙелбәк (Ҡаҙанболаҡ)** ауылында бәләкәй, йыуантыҡ кәүҙәле кешегә балапан тип әйтәләр. Бөркөттөң, ҡарсығаның тәүге балаһын *балапан* тип, икенсеһен *балаян* тип әйткәндәрен дә ишетергә тура килде беҙгә. Нисек кенә булмаһын, *балапан* һүҙен башҡорттар кешеләргә ҡарата ла ҡулланған һәм уны ошо һүҙ менән атауҙы хуп күргән. Әйтергә кәрәк, **Балапан** тигән ауыл Әбйәлил районында ғына түгел, Йылайыр районында ла бар. Хәҙер ул ауыл бөткән, тик мал фермаһы исемендә генә һаҡланған. Был ферма хәҙер **Матрай** менән **Үрге Сәлим** ауылдары араһында урынлашҡан.

**Балапан** ауылы тарихҡа ниндәй мәғлүмәттәр бирә?

Үрҙә әйтеп үтелгәнсә, **Иҫке Балапанда** ла, **Яңы Балапанда** ла күбәләк башҡорттары йәшәй. Легенда, риүәйәттәрҙә ауылға нигеҙ һалған Балапан ҡарт Учалы районының **Йәндек (Йәһүҙә)**, йә булмаһа Науруз ауылынан күсеп килгән.

Билдәле булыуынса, Науруз ауылы ла, **Йәндек (Йәһүҙә)** ауылы ла Балапан кеүек Күбәләк ырыуына түгел, ә тиләү ырыуына ҡарай. Был улай булырға тейеш түгел һымаҡ, сөнки башҡорт ырыуҙарының ерҙәре борон үҙ-ара яҡшы итеп бүленгән булған һәм теге йәки был ырыуға ҡараған ауылдар бер нисек тә бутап йөрөтөлмәй. Әйтелгән хәлдең сәбәптәрен тарихи материалдарҙы, халыҡ ижады әҫәрҙәрен өйрәнеп асыҡларға мөмкин.

«Башҡорт халыҡ ижады»ның II томындағы (Өфө: Китап, 1997) «Күбәләк — теләү нәҫеленең сығышы» тигән риүәйәттә бер әбейҙең

тәүге иренән тыуған Айбағыш менән Көнбағыштың икенсе атанан булған Күбәләк тигән ҡустылары булыуы тураһында бәйән итеlә (122—123-сө биттәр). Белеүебеҙсә, Айбағыш менән Көнбағыш — Ҡобағош сәсәндең улдары. Көнбағыштан хәҙерге **Науруз** ауылына нигеҙ һалыусы Ҡушкилде, Ҡушкилденән атаҡлы Ҡарас сәсән тыуған. Ҡарас сәсән дә, уның атаһы Ҡушкилде лә хәҙерге Учалы районында йәшәгән тиләүҙәрҙең ата-бабаһы булып тора. Тимәк, Айбағыш менән Көнбағыш та тиләү ырыуы кешеләре булған. Айбағыш, Көнбағыш менән бер әсәнән, тик икенсе атанан тыуған Күбәләк тә тиләүҙәр менән бер ырыуҙан булыуы көн кеүек асыҡ. Тик Күбәләк ни өсөндөр, тиләүҙәрҙән айырылып, үҙе айырым, күбәләк ырыуына нигеҙ һала. Бының сәбәптәрен БДУ профессоры Әнүәр Зәкир улы Әсфәндиәров асыҡлаған. Ул тикшергән тарихи документтарҙа Күбәләк төп табындар еренә ситтән килеп ултырған, сығышы менән нуғайҙарға бәйле шәхес булып күренә *(Ҡара:* Ә. З. Әсфәндиәров. Легенда һәм тарихи факт *Ц* Малоизученные источники по истории Башкирии. Уфа: БФАН СССР. 73—74-се биттәр). Риүәйәттә икенсе атанан тыуған тип әйтелеүе, күрәһең, Күбәләктең ситтән килгән, ят сығышлы кеше булыуына ишара яһайҙыр. Күбәләктәрҙең биләгән ерҙәре лә быны раҫлап тора кеүек. Табындың төп ырыуҙары булған ҡара табын, кесе табын, барын табын, күрпәс табын, кәлсер табын, ҡумырыҡ табын, тиләүҙәргә ерҙәр Башҡортостандың урта өлөшөнән бирелгән. Күбәләктәргә иһә биләмә табын ҡәбиләһенең тамъяндар менән булған сиктәренән бүленгән. Ниндәй ҙә булһа бер территорияға һуңыраҡ килгән ырыу йәки ҡәбиләгә ер һәр ваҡытта ла ҡырҙаныраҡ, төп ерҙең ситенән бүленер булған борон башҡорттарҙа. Ҡыпсаҡ ҡәбиләһенең һуңыраҡ килеп ҡушылған ырыуҙарына ла Башҡортостанда, мәҫәлән, уңайһыҙ урындан ер бүленгән булған *(Ҡара:* А. Камалов. Башкирская топонимия. Уфа: Китап, 1994. 216—225-се биттәр). Шуны ла иҫәпкә алырға кәрәк: тиләүҙәр сығышы менән борон-борондан Ҡытай, Монголияла беҙҙең эра башында көн күргән телеуттарға бәйле, тимәк, тиләүҙәр — боронғо ырыу, күбәләктәр — уларҙан һуң барлыҡҡа килгән этник берәмек. Шуға ла Күбәләк һәм унан таралған нәҫел тәүҙә табындарҙа ерһеҙ ырыу (русса әйткәндә припущенник) хоҡуғында була, аҙаҡ ҡына, XVII быуат аҙағында күбәләктәр аҫаба башҡорт статусын ала (Ә. З. Әсфәндиәров. Күрһәтелгән хеҙмәт. 74-се бит).

**Балапан** ауылына нигеҙ һалған Балапан Мәтисовтың Науруз һәм Йәндек тирәһенән Әбйәлил районындағы Ҡырҡты яғына күсеүе, күрәһең, XVII быуат аҙағына һәм XVIII быуат баштарына тап килә. Шәжәрәләрҙән, рәүиз материалдарынан күренеүенсә, Балапан Мәтисов 1732 йылда тыуған. Балапандың атаһы Мәтис ҡарт, тимәк, яҡынса 1680—1690 йылдарҙа тыуған булырға тейеш. Мәтис — тиләү ырыуы башҡорто Аһылайҙың улы Бәбеш менән бер заманда йәшәгән кеше булырға тейеш, сөнки Бәбеш Аһылаев 1680 йылда үҙенең ғарызнамәһендә үҙенең Табын улусының припущеннигы (типтәре) булыуы тураһында яҙған *(Ҡара:* РГАДА, фонд 1173, опись 1, дело 770, 1-се бит). Был документ та — күбәләктәрҙең тиләүҙәрҙән айырылып сығыуы на бер дәлил.

Юғарыла беҙ юҡҡа ғына Ҡобағош сәсән, уның тоҡомо Ҡарас сәсән тураһында һүҙ ҡуҙғатманыҡ. Алма ағасынан алыҫ төшмәй тигәндәй, Балапан Мәтисов тоҡомо Ишмөхәмәт сәсәндә лә арҙаҡлы Ҡобағош, Ҡарас сәсәндәрҙең ҡаны аҡҡанын әйтергә теләйем. Тарихи документтарҙа ла халыҡ ижады әҫәрҙәре лә Ишмөхәмәт сәсәндең ата-олатаһы Балапан Мәтисов Ҡобағош, Ҡарас сәсәндәр төйәге булған **Науруз, Йәндек (Йәһүҙә)** ауылдарына бәйле булыуынан күрһәтеп тора. Ул ғына ла түгел, Иҫке Балапан, Яңы Балапанда яҙып алынған халыҡ ижады әҫәрҙәре Балапанлыларҙың хәҙерге кешеләренә лә ижад итеү ят түгел икәнен раҫлай. Беҙ, мәҫәлән, **Балапан** ауылы тирәһендәге һәр тауға, йылғаға арналған йырҙарҙы яҙып алдыҡ. «Ямғырсы», «Әйүкә», «Ҡыҙыл», «Көркәк» тигән йырҙар тексы баҫылып сыҡҡан йырҙар исемлеге араһында осрамай.

Беҙгә «Ямғырсы» йырының алты куплетлыҡ тексын яҙып алырға тура килде:

*Ямғырсы ла тауҙың башында,*
*Ҡыҙыл төлкө йәшәй ҡашында.*
*Кемдәр генә килеп, кемдәр китмәй*
*Ямғырсы ла тауҙың ҡашында.*

*Ямғырсы ла тауҙа*$_{у}$ *ай, болот бар*$_{у}$
*Ҡасан яуыр икән ямғырың.*
*Ҡырҡты буйҙарында уҫкән ирҙәр*
*Киң күкрәк, яҫы яурын.*

*Ҡырҡты ғына тауҙан, ай, күренә*
*Матур һыуҙар, гүзәл донъялар.*
*Гүзәллеге һиндә, ай*$_{у}$ *артасаҡ*$_{у}$
*Йәш быуындар ҡәҙерен белһәләр.*

*Ямғырсы ла(й) тауҙың баштарына*
*Ниңә генә болот уралмай.*
*Яуыз ғына дошман һөйләй икән*$_{у}$
*Батыр ғына ирҙе күрә алмай.*

*Ямғырсы ла(й) тауҙың буйҙарында*
*Олатай-бабайҙарыбыҙ йәйләгән.*
*Йәш егеттәр йылҡы ла әйҙәгән,*
*Йәш килендәр ҡолон бәйләгән.*

*Урал арттарын да ярып аға*$_{у}$
*Матур ғына Ҡыҙыл һыуҙары.*
*Ҡыҙыл һыуын эсеПу батыр үҫә*
*Егеттәре һәм дә ҡыҙҙары.*

Тауҙың һәм уға арналған йырҙың «Ямғырсы» тип аталыуы шунан килә икән. Ямғырсы — Ҡырҡтылағы бейек таш. Ул ҙур, бик бейек, күккә олғашып торған ҡая. Уға болоттар эләкһә — ямғыр яуыуын көт

тэ тор. Ямғыр яуыуын хәбәр итеүсе таш булғанға уны *Ямғырсы* тип йөрөтәләр.

Ер-һыу атамаларын өйрәнеү өсөн махсус йөрөгәнлектән, **Балапан** ауылында эргә-тирәләге урын атамаларын ентекләп яҙып алдыҡ. Иҫке **Балапан** менән **Яңы Балапанда** йәшәүселәр 200-гә яҡын йылға, күл, күләү, ҡойо, кисеү, ятыу, һаҙ, тау, таш, һырт, үҙәк, ҡышлау, йәйләү, туғай, ялан һ. б. шундай ер-һыу объекттары исемдәрен әйтеп яҙҙырҙылар. Улар араһында халҡыбыҙҙа киң билдәлеләре лә, тик Әбйәлилдең Балапан төбәгендә генә таралған йырлы ер-һыуҙар бар. Бына шуларҙың Көркәк тигәненә арналған йырҙан өҙөктәр:

*Көркәк кенә тауҙың көн битендә*
*Абзан менән Әхмәр йылғаһы.*
*Нисек тә генә шатланмаҫһың*
*Йыр сығарып ҡына йырлаһы.*

*Көркәк кенә тауы бигерәк матур*
*Йәй көндәре күсеп йәйләүгә.*
*Урмандары матур$_у$ яланы киң*
*Өйөр-өйөр малдар йәйләргә.*

*Көркәк кенә тауҙың көн битендә*
*Матур-матур туғай, йылғалар.*
*Май айҙары етеп, сәскә атһа,*
*Йортҡа күсә торған йола бар.*

Әбйәлил районының ике ҙур йылғаһы *Оло Ҡыҙыл* менән *Бәләкәй Ҡыҙылға* ла йыр сығарғандар:

*Ҡыҙыл һыукайҙары бик тәмле,*
*Урал таукайҙарынан һыу алғас.*
*Ҡыҙыл исемдәре аталғандыр,*
*Яуҙыҡтарҙа ҡанға буялғас.*

*Ҡыҙыл һыукайҙарын кемдәр эсмәй,*
*Кисеүҙәрен уның кем кисмәй.*
*Ҡыҙыл буйҙарының матурлығы*
*Күңелемдән сығып һис китмәй.*

*Байым тархан менән, эй, Балапаң*
*Ҡыҙыл буйҡайҙарын буйлаған.*
*Тәкә һуйып, ҡымыҙ эсеп,*
*Ҡурай уйнап, ҡунаҡ һыйлаған.*

*Ҡыҙыл шишмәләре, Йәҙгәр тау*
*Көмөш төҫлө тәмле һыу бирә.*
*Ҡоластарын йәйеп ике Ҡыҙыл*
*Урал арттарына йәм бирә.*

Бына ошоноң кеүек төбәктең матурлығын, унда эшләгән кешеләрҙең изге эштәрен данлаған топонимик йырҙар бихисап. Тик ваҡытын-

да уларҙы яҙып алырға техник саралар булмау сәбәпле, йырҙарҙың текстары ғына теркәлгән.

Ер-һыу атамаларын өйрәнеү борон-борондан быуындан быуынға һөйләнеп килгән риүәйәттәрҙә арҙаҡлы шәхестәрҙең исеме һаҡланғанын күрһәтә. Былар иң тәүҙә ни өсөндөр тау-таш, ялан-туғай, йырын һымаҡ объект исемдәрендә йышыраҡ осрай. *Буранбай йырыны*, *Байғужа яланы*, *Буҫҡынбай төбәге*, *Ишкенә туғайы* кеүек атамаларҙы аңлатыу өсөн ауыл шәжәрәһенә мөрәжәғәт итергә тура килә. Мәҫәлән: Буранбай Балапан ҡарттың бер туған ҡустыһы һары Мәтисовтың ейәне, хәҙерге Зәйтүновтарҙың ата-олатаһы булып сыға. Байғужа, Боҫҡонбай, Ишкенәләр — Балапандың Әбдерәш тигән улынан таралған ейәндәре. Хәҙер улар Малыбаев, Кәримов, Солтанов тигән фамилия йөрөтә. Тимәк, һәр бер атама — үҙенә күрә бер тарих. Уның сәбәптәрен аңлатыу өсөн тарихты, ата-бабаларҙың тоҡомо теркәлгән шәжәрәне, халыҡтың ғөрөф-ғәҙәтен, телен, ер-һыу объекттарына исем ҡушыу тәртибен белергә кәрәк. Мәҫәлән, **Балапан** тирәһендә *Йәнекәй бәләһе*, *Ҡолоҡай бәләһе*, *Нәҙәрбай бәләһе* тигән тауҙар бар. Был тауҙарҙа убалар күп икән. Йәғни ул тирәлә борон бик ҙур яу булып, күп халыҡ ҡырылып бәләгә тарыған. Борон халыҡ бәлә булған ерҙе шулай атаған.

Боронғо ауыл йәйләгән урынды ауыл исеме менән атау был яҡтың тағы ла бер үҙенсәлеге булып тора. *Теләш Ҡырҡтыһы, Ҡусем Ҡырҡтыһы*, *Салауат Ҡырҡтыһы* тигән атамалар **Теләш, Күсем, Салауа**т ауылдарының **Ҡырҡты** тауында йәйләгән урындарына бәйле барлыҡҡа килгән. Шулай итеп, бер ауылдың ер-һыу атамаларын ентекле өйрәнеү оло һөҙөмтәләргә килтерергә мөмкин.

«Башҡортостан» гәзитенең 1998 йылғы 26 сентябрь һәм 1 октябрь номерҙарында Сәриә Малыбаеваның Әхмәт Сөләймәнов редакцияһында «Ишмөхәмәт сәсән» тигән ҙур күләмле мәҡәләһе баҫылып сыҡты. Ифрат ҡыҙыҡлы, мәғлүмәтле хеҙмәт емеше ул. Унан беҙ ауылда йәшәгән кешеләрҙең, ауыл атамаһының сығышын асыҡларлыҡ материалдар ала алабыҙ, **Иҫке Балапан** ауылының **Морон** тип аталғаны, мәҫәлән, беҙгә мәғлүм түгел ине. Был да үҙенә күрә бер асыш. Шулай ҙа Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев сәсәнгә **Балапан** ауылы шәжәрәһенә бәйле асыҡлайһы урындар бар әле. Авторҙар ҙа быны инҡар итмәй.

Беҙ, мәҫәлән, Балапан шәжәрәһенең бер вариантына юлыҡҡайныҡ. Уның буйынса Балапандың Әвәкән исемле улы булған. Был шәжәрәлә Әвәкәндең Мөхәмәдий, Көлбәт, Төхвәт һәм Хисмәт тигән 4 улы теркәлгән. Гәзиттә баҫылып сыҡкан ауыл шәжәрәһендә Әвәкән бөтөнләй күренмәй. Ишмөхәмәт сәсәндең сығышы ла асыҡланып бөткән, тип булмай. Сөнки Ишмөхәмәт — Балапандың Мәһәҙи тигән улының өлкәне тип әйтелә. Әгәр ҙә Ишмөхәмәт сәсән 1781 йылда тыуған булһа, уның атаһы Мәһәҙейҙең 1768 йылғы икәне билдәле. Улы менән атаһы араһында 13 йыл ғына йәш аралығы бар. Әгәр ҙә тағы ла әсә ҡарынында йөрөгән 9 айҙы алып ташлаһаң, Ишмөхәмәттең әсәһе ире Мәһәҙейгә 12 йәш тулғанда ауырға ҡалған булып сыға. Ғәҙәттә, ир-егет 15—16 йәштә генә енси йәһәттән өлгөрә. Шуға ла был мәсьәлә лә асыҡлауҙы талап итә. Ишмөхәмәттең Мырҙаҡаев тип йөрөтөлөүе лә сәсән Мырҙаҡайҙың улы түгелме икән, тигән һорау тыуҙыра.

Бөтә кешегә мәғлүм, XVIII быуаттан алып XIX быуат уртаһына тиклем башҡорттарға фамилия атаһы буйынса ғына бирелгән.

Һүҙ аҙағында тағы ла бер мәсьәләгә иғтибар итәйек. **Балапан** ауылында күбәләктәр генә түгел, һарттар ҙа көн күрә. Ғәҙәттә, башҡорттар Урта Азиянан килгән кешеләрҙе, айырып әйткәндә, үзбәктәрҙе *һарттар* тип йөрөтәләр. Балапанда *һарттар аймағы* булыуына иғтибар иткәндә, борон ауылда Урта Азиянан сыҡҡан кешеләр төйәкләнгәненә ышанырға мөмкин. Әбйәлил районының башҡа ауылдарында ла һарттар йәшәй. Шулай булмаһа, **Хөсәйен** ауылын **Тау Һарты**, Әбделмәмбәтте **Ҡыҙыл Һарты** тип атамаҫтар ине.

Һарттарҙың Әбйәлил төбәгендә йәшәүен күл исемдәре лә дәлилләп тора. Төрки телдәре араһында тик өс телдә генә, мәҫәлән, себер татарҙарына, ҡырғыҙҙарға һәм үзбәктәргә генә хас *күлмәк* термины бар. Ошо һүҙ уларҙа бәләкәй күлде белдереү өсөн ҡулланыла. Әбйәлил районы Ташбулат ауылында булғанда беҙгә *Ҡорокүлмәк* тигән атаманы яҙып алырға тура килде. *Ҡорокүлмәк* атамаһы ла һарттарҙың борон ошо төбәктә йәшәгәнен раҫлай. Был турала беҙ үҙебеҙҙең «Башҡорт географик терминдары һәм топонимия» тигән китабыбыҙҙа ла яҙып үткәйнек. *(Ҡара:* Азат Камалов. Башкирские географические термины и топонимия. Уфа: Китап, 1997. 70—71-се биттәр). Шулай итеп, ер-һыу атамалары, ауылдағы ара (аймаҡ) исемдәренең бер-береһен асыҡлап, тултырып тороуы ошо хәлдең ысынбарлыҡҡа тап килеүе тураһында ышаныслы дәлил булып тора.

Күмәкләгән — яу ҡайтарған тигәндәй, Балапандарға ҡағылышлы асыҡланмай ҡалған урындар ауылдағы төбәкте өйрәнеүселәр менән телсе, фольклорсы, тарихсы, ғалимдар тарафынан бергәләп киләсәктә хәл ителер тигән ышаныста ҡалабыҙ. Тик әлеге өлгәшелгәндәр менән ҡәнәғәтләнмәй, тикшеренеүҙәрҙе артабан дауам итергә генә кәрәк.

# БАШ-ИЛСЕКӘЙ АУЫЛЫ

**Баш-Илсекәй** ауылы Ҡалмаҡкол ауыл советына ҡарай. Рәсми исеме **Баш-Илсекәй** булһа ла, урындағы халыҡ уны **Башташ** тип йөрөтә. Икенсе исеме — **Илсекәй**. Тимәк, **Башташ-Илсекәй** тигән атама ҡыҫҡарып, ауылдың **Баш-Илсекәй** тигән рәсми исеме барлыҡҡа килгән.

Ауылдың **Башташ, Илсекәй** тигән исемдәре ҡайҙан килеп сыҡҡан? — тигән һорауға ауылда йәшәгән Диникаева Мөхрикамал әбей бер риүәйәтте һөйләгәйне. Шул легенда менән танышайыҡ.

Ҡасан булғандыр был хәл, уныһы билдәһеҙ. Көньяҡта йәшәгән бер башҡорт егете ошо яҡ байының һылыу ҡыҙын урлап алып китә. Был егет үҙенең кәләше менән хәҙерге **Арҡауыл** урынлашҡан ерҙә өй һалып тормош көткәндәр. Уларҙың алты балаһы була. Шулай булһа ла, был егеттең ҡайныһы, йәғни ҡатынының атаһы үҙенең кейәүен ғәфү итә алмай. Сөнки был егет байҙың ҡыҙын йола буйынса һоратып, туй яһап түгел, ә урлап алып ҡаса. Шуға ла бай кейәүен үлтерергә ниәтләй. Шул маҡсат менән бер көн бай ҡыҙының өйөнә килә, ишеген туҡылдата. Ишекте кейәүе аса. Бай уны уҡ менән атып үлтерә. Кейәүен ғәфү итмәһә лә, бай ҡыҙын ғәфү итә, уға ер бүлеп бирә. Ә байҙың ере, малы бик күп була. Әлеге Түбәләҫ станцияһы тирәһендә унық өйөр-өйөр йылҡылары йөрөгән. Шул ер хәҙер ҙә *Оло Өйөр (Оло Ер)* тип атала.

Байҙың алты улы була. Уларға ерҙе **Шәрәктау** башына баҫып бүлеп бирә. Ул балаларына әйтә:

«Күгәреп яҡкан был тау **Күкшек, Башташтау, Һилейә тауы, Мәсек тауы.** Һеҙҙең межа булыр **Мәсет тауында.** Атайыңдың (йәғни ата-олатаһарығыҙҙың) башы ятҡан тау — **Башташ тау.** Унда баш нигеҙҙе, баш ташты һин һалырһың», — тип әйтә ҡыҙына. Шунан ҡалған икән Башташ.

Бай үҙенең икенсе улы Ҡарағолға тауҙың арҡаһынан урын бирә. Хәҙер **Арҡауыл** тип йөрөтөлгән ана шул Ҡарағол ауылының икенсе исеме.

Өсөнсө улы Мөрсәлим станцияһы тирәһенән ер ала. Дүртенсе улына (уның исеме Тирмәнғол булған тиҙәр) әлеге **Тирмән** ауылы ултырған ерҙән урын эләгә. Бишенсе улы **Урмансыла,** алтынсыһы **Ноғай (Сүрәкәй)** ауылында нигеҙ ҡора.

Ерҙе бүлеп биргәс, ҡарт балаларына: «Алты татыу түбә булып йәшәгеҙ», — тигән. Шунан был алты ауылды «Алты ауыл Түбәләҫ» тип йөрөтәләр. Алты ауыл **Түбәләҫкә** хәҙерге **Башташ (Илсекәй), Арҡауыл (Ҡарағол), Мөрсәлим (Ҡалмаҡкол), Тирмән, Урмансы** һәм **Ноғай (Сүрәкәй)** ауылдары инә.

«Ә түбәләҫ нимә ул?» — тип һораһалар, түбәләҫ — ул Әй (Әйле) ҡәбиләһенең бер ырыуы, тип яуап бирергә кәрәк. Әйле ҡәбиләһе түбәләҫтәрҙән башҡа тағы ла *тырнаҡлы*, *ҡаратаулы* (уларҙы *табылғыҙар* тип тә йөрөтәләр), *һарт-әйле* (икенсе төрлө *алтауҙар*), *мырҙалар*, *дыуан* тигән ырыуҙарҙы үҙ эсенә ала.

Борон һәр ырыу, аймаҡ, хатта айырым кешеләр ҙә милекте билдәләй, айыра торған тамғаларҙы ҡулланған. **Баш-Илсекәй** ауылында ниндәй тамға йөрөткәндәрен ололар хәтерләмәй. Ә бына күрше Ноғай,

**Урмансы** ауылдарында һүмес тамға йөрөткәндәр. Уны төрлө формала ҡуйғандар: , , , . Быларҙы ла белеүе ҡыҙыҡлы.

Ауылдың оҙайлы тарихын уның административ-территориаль бүленеше йәһәтенән ҡарағанда ла күреп була. 1840 йылдарҙа **Илсекәй** ауылы Өфө губернаһы Троицк өйәҙе IV Көнбайыш Башҡорт кантоны, Түбәләҫ волосының 2-се йортона ҡараған (йорт — хәҙерге ауыл советынан ҙурыраҡ территориаль берәмек).

1870 йылда инде **Илсекәй (Башташ)** ауылы Өфө губернаһы Златоуст өйәҙенең II станына буйһонған.

1901 йылда ауыл Златоуст өйәҙе Нәсибаш улусының **Урмансы** ауыл йәмғиәтенә ингән.

**Баш-Илсекәй** ауылының хәҙерге адресын бөтәһе лә белә. Башҡортостан Республикаһы, Салауат районы, Ҡалмаҡкол ауыл советы, **Баш-Илсекәй** ауылы.

## ИҘРИС АУЫЛЫ ТАРИХЫ БУЙЫНСА МАТЕРИАЛДАР

**Иҙрис-Йонос, Әлкә, Юлай (Шағанай)** ауылдары менән бергә шайтан-көҙөй ырыуына ҡараған дүрт ауылдың береһе. Көҙөй ҡәбиләһе, шайтан-көҙөйҙән тыш, ҡыр-көҙөй, урман-көҙөй (уны ҡаҙаяҡ тип тә йөрөткәндәр), төркмән-көҙөй, бүләкәй-көҙөй ырыуҙарына бүленгән булған. Шайтан-Көҙөй башҡорттары башҡа көҙөйҙәрҙән үҙенең сығышы менән әҙ генә айырылып торған. Ул турала быуындан быуынға һөйләнеп киленгән риүәйәттәр бар. Шуларҙың береһе буйынса борон-борон заманда ошо яҡ кешеләренең бер йәш һунарсыһы бик йыраҡ ерҙәргә барып сыҡҡан, ти. Һунарсыға унда бер ҡарт осраған. Йәш һунарсы был ҡарт менән танышҡан, һөйләшеп ултырғандар. Төн булғас, йоҡларға ятҡандар, һунарсы ни өсөндөр был ҡарттан әҙерәк шикләнгән дә, төндә тороп, үҙенең урынына ағас түмәрен һалып, уны үҙенең бишмәте менән ябып ҡуйған, ти. Теге ҡарт, төн уртаһы еткәс, торған, бысағын утта ҡыҙҙырған, шунан йәш һунарсы тип уйлаған бишмәтле ағас түмәренә сәнскән дә үҙенең урынына ятып, йоҡлап киткән. Йәш һунарсы шунан һуң үҙенең урынына ятҡан. Иртәнсәк ҡарт егеттән һорай икән: «Йә, хәл-әхүәлдәр нисек?» — тип. Йәш һунарсы: «Яҡшы», — тип яуап биргәс, ҡарт ҡурҡа төшкән. Шунан үҙенең өйөнә саҡырып, был йәш һунарсыға үҙенең ҡыҙын биргән, ти. Йәш егет ҡатынын өйөнә алып ҡайтҡан. Ул ҡатындан тыуған тоҡомға *шайтан ырыуы* тип әйткәндәр. Шайтан-көҙөй ырыуы шунан таралған, имеш. Был тоҡомдан таралғандарҙың сәсе һары, күҙҙәре зәңгәр төҫлө булған икән. Беҙҙең өләсәй ҙә һары сәсле, зәңгәр күҙле булған, тип һөйләне Әлкә ауылында йәшәгән Сиражева Сәфиә әбей.

Шайтан-көҙөй ырыуына ҡараған башҡорттар Салауат районында 4 ауылда донъя күрәләр. Унда йәшәгән халыҡ һаны хәҙер 2 меңгә лә етмәй. Сөнки батшаға ҡаршы көрәше менән даны сыҡҡан Салауат Юлаев тоҡомдаштарына йәшәүе ауырға төшкән. Мәҫәлән, Иҙрис ауылында 1840 йылда 77 кеше, 1870 йылда 75 кеше, 1901 йылда 141 кеше, 1969 йылда 231 кеше йәшәгән.

1888 йылда сыҡҡан бер китапта Иҙрис ауылы тураһында түбәндәгеләр яҙылған: «Ауыл бөтәһе бер урамға теҙелгән 23 өйҙән тора. Ауылда аҫаба башҡорттар йәшәй. Иҙрис күрше Йонос ауылы менән бергә бер йәмғиәткә ҡарай» (Н. Н. Макаровский. Географическое и статистическое описание V стана Уфимского уезда». — Уфа, 1888, 104-се бит).

1901 йылғы документтарҙа ла ошо хәл үҙгәрмәгән. Мәҫәлән, «Сборник статистических сведений по Уфимской губернии» (Уфа, 1901) тигән йыйынтыҡта Иҙрис Йонос менән бер йәмғиәт төҙөгән ауыл булып күренә. Ул Өфө губернаһы Эләк (Илек) улусына ҡараған. Ауылда 22 йорт булып, унда 141 аҫаба башҡорт (67 ир-егет, 74 ҡатын-ҡыҙ) йәшәгән. Уларҙың 1533 дисәтинә ере булған. Аҫаба башҡорт өсөн был ер, әлбиттә, бик аҙ, сөнки һәр ир-егет башына бары 23-кә яҡын дисәтинә генә ер тейгән.

1870 йылда Иҙрис Өфө өйәҙенең V станына ҡараған. Ауылда ул саҡта 75 кеше көн күргән. Ә 1970 йылда бынан 34 йыл элек унда йәшәгән кеше һаны күберәк (77) була. Был Башҡортостандағы идара

итеүҙең кантон системаһы ваҡытына тура килә. Шуға ярашлы ауылдың административ-территориаль бүленеше лә икенсе. Иҙрис ауылы ул саҡта Өфө губернаһы VIII Башҡорт кантоны Шайтан-Көҙөй улусының 9-сы йортона ҡараған.

**Иҙрис** ауылында йәшәгән халыҡтың ниндәй аймаҡтарға бүленеп йәшәүе тураһында мәғлүмәттәр беҙгә билдәһеҙ. Уны ауыл, шул төбәк тарихы менән ҡыҙыҡһыныусылар оло ҡарттарҙан, ҡарсыҡтарҙан һорашып яҙып алырҙар, тип өмөт итергә кәрәк.

Ауыл тарихы риүәйәттәрҙә генә түгел, ә уның тирә-яғындағы ерһыу атамаларында ла сағылып ҡала.

**Иҙрис** ауылы *Үҙән йылғаһы* буйында ултыра. Ауыл халҡы *Йүрүҙәнде* шулай тип атап йөрөтә. Ауыл эргәһендә генә *Иҙрис шишмәһе* бар. Уны *Әрәсташ шишмәһе* тип тә атайҙар. *Күлекте* тигән һыу булыуын да әйттеләр.

**Иҙристе** тау-таштар уратып алған: **Оҙонғор тауы, Хөсәйен тауы, Ҡаяташ тауы, Тамуҡ тауы, Ҡаршытау.**

Салауат Юлаев исеме менән бәйле **Яҡташ өйө** урыҫса **Земляк** тигән мәмерйә бар. Батша хөкүмәте ни тиклем генә Салауат исемен, уның эшен, данын халыҡ хәтеренән йолоп алырға тырышһа ла, башҡорттар ғына түгел, урыҫтар ҙа уны Яҡташ «Земляк» тип атарға ҡурҡмаған, күңелендә һаман һаҡлап килгән.

Салауат районы башҡорттарының һөйләшенә ярашлы, был яҡта һәр бер ауылда (русса «лог», «ложбина», башҡа ерҙәге «үҙәк» тигән һүҙгә тап килгән) *ҡул* термины менән яһалған атамалар күп. Иҙристә лә Мырҙаҡул, Шәлеш ҡулы тигән урындар бар.

Арал төбәге тигән атама ла ошо һөйләшкә хас *арал* «утрау» һүҙе менән яһалған.

## ИКЕНСЕ ИҘЕЛБАЙ АУЫЛЫ

Йәмле Йүрүҙән йылғаһы буйында **Иҙелбай** тигән ике ауыл ултыра. Уның береһе — **Беренсе Иҙелбай,** икенсеһе **Икенсе Иҙелбай** тип атала. Икеһенең дә икенсе исеме бар — **Баҙраҡ**.

Ҡайҙан алынған был исемдәр?

Был һорауға яҙма документтарҙан яуап табыуы ҡыйын. Сөнки башҡорт ауылдарының тарихы бик борондан килә. Ә элеккене һөйләгән был ауыл шәжәрәһе юҡ. Шуға күрә лә бер-береһенә һөйләнә килгән ҡарттар һүҙенә иғтибар итергә тура килә. **Иҙелбай** ауылы тураһында Иҙелбай 8 йыллыҡ мәктәбе уҡытыусыһы Ғарифуллина Зарифа апайҙың ололарҙан яҙып алған риүәйәте бар. Шуны килтерәйек.

Был урында урман булған, тип әйтелә риүәйәттә. 1726 йылдар тирәһендә **Уралдан** был урынға *Иҙелбай* исемле бер кеше мал ҡыуып килгән дә, шул ерҙә йорт һалып туған-тыумасалары, бала-сағалары менән йәшәй башлаған. Иҙелбай ҡарт күпмелер йәшәгәс, ауылға *Һыр-Дарья* яғынан һағымбай тигән кеше, уның артынан Байғара тигән кеше күсеп килгәндәр. Байғара, был яҡҡа килгәс, ныҡ байып киткән. Тәүге мәсетте **Беренсе Иҙелбайҙа** Байғара һалдырған булған. Ауыл ҙурайып китә, сөнки ауылға Ҡурсабай, унан һуң Төлкөсисән тигән кешеләр ғаиләләре менән күсеп килеп йәшәп киткәндәр. Уларҙың барыһы ла мал аҫрағандар, ҡорт үрсетеп көн күргәндәр. Ана шул кешеләрҙең нәҫеле ауылға таралып, ауыл нығынып үҫеп киткән. Ауылды инде тәү башлап нигеҙ ҡороусы исеме буйынса Иҙелбай тип йөрөтә башлағандар.

Ауыл ҡарттары һөйләүенсә, Иҙелбай олатайҙың Ҡурсабай тигән улы 1812—1814 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан булырға тейеш. Ҡурсабайҙың буйы 2 метрҙар тирәһе булған, тип әйтәләр. Ҡурсабай Иҙелбаев тирә-яҡ ауыл егеттәрен йыйып, Ырымбурға алып барған. Унда тупланған башҡорт полктарына ҡушылған һәм шулар менән бергә үҙе яуға киткән. Ҡурсабай батыр француздарға ҡаршы ҡыйыу һуғышҡаны өсөн алтын ялатылған эйәр һәм ҡылыс менән бүләкләнә һәм иҫән-һау әйләнеп ҡайта.

Һуғыштан һуң батша еңеү тантанаһына башҡорттар исеменән Ҡурсабай Иҙелбаевты саҡырған, тип һөйләйҙәр ауылдың ололары *(Ҡара:* М. Йәғләмүнов. «Башҡортостан» гәзите. 03.03.99).

Ололар һөйләгән риүәйәттең ысынбарлыҡҡа тап килгән урындары бар. Мәҫәлән: «Рәсәй империяһы ауылдарының исемлеге» тигән китапта (СПб, 1877, 45-се том) 1870 йылда Иҙелбай ауылында 88 өй булған, унда 209 ир-егет, 189 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән, тип яҙылған. Ауылдағы аҫаба башҡорттар ҡортсолоҡ менән шөғөлләнгәндәр. Иҙелбайҙа ул саҡта бер мәсет төҙөлгән булған. 1901 йылғы мәғлүмәттәрҙән Иҙелбайҙың тағы ла ҙурая төшөүе шул уҡ китапта теркәлгән.

1901 йылда **Иҙелбай (Баҙраҡ)** ауылында Иҙелбай ауыл йәмғиәтенең үҙәге була. Ул үҙәк Өфө губернаһы Өфө өйәҙенең Мырҙалар волоҫына буйһонған. Ауылдағы 134 өйҙә 419 ир-егет, 390 ҡатын-ҡыҙ донъя көткән. Уларҙың 18979 дисәтинә ере булған. Шуның 9503 дисәтинәһенә ауылдағы бер община, 9476 дисәтинәһенә икенсе община хужа булып торған.

Ауылда ике община булыуы дөрөҫкә тап килә. Сөнки Иҙелбай ауылында әйле һәм көҙөй башҡорттары йәшәгән. Уларҙы ауылда ике аймаҡҡа (мәҫәлән, *ҡырғыҙ* һәм *барҡылдаҡ* аймаҡтарына) бүлеп йөрөткәндәр. Ергә Мырҙалар хужа булғандыр, сөнки бөтә документтарҙы ла **Иҙелбай** ауылы тик Мырҙалар волосы составында ҡарала. Ауылда төп ике ырыу кешеләрен ике аймаҡ булып йәшәүен тамғалары ла раҫлап тора. **Ике Иҙелбайҙа** ла өҙәңге һәм һәнәк тамғалары ҡулланған булған, сифаты Д, db .

Ауылдың элекке адрестары:

1840 йылдағы адресы: Өфө губернаһы VIII Башҡорт кантоны, Мырҙалар волосы II-се йорт.

1870 йылда уның адресы үҙгәрә: Өфө губернаһы Златоуст әйәҙе, 3-сө стан.

1901 йылда **Иҙелбай** Өфө губернаһы Өфө әйәҙе, Мырҙалар волосына инә.

Ауыл тирәһендәге йылғалар, тау-таш, урман-ялан исемдәре яҙып алынмаған. **Иҙелбайҙа** йәшәгән уҡыусылар ул атамаларҙы йыйып, дәрестә үҙ аллы тикшеренеүҙәр алып барырға тейеш.

## ИЛЕШ РАЙОНЫНДАҒЫ АУЫЛ ҺӘМ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ ХАҠЫНДА

Башҡорттар этник составы һәм биләгән территорияһы буйынса фәндә дүрт төркөмгә бүлеп ҡарала. Башҡортостандың төньяҡ һәм көнбайыш, Татарстан Республикаһының көнсығыш, Пермь әлкәһенең көньяҡ райондарында, йәғни элекке Ырымбур губернаһының төньяҡ-көнбайышында йәшәгән башҡорттарҙы төньяҡ-көнбайыш башҡорттары тип йөрөтәләр.

Был төркөм барлығы 19 ҡәбиләне үҙ эсенә ала. Мәҫәлән, байлар, балыҡсы, бүләр, гәйнә, гәрәй, дыуанай, ирәкте, йылан, йәлдәк, йәнәй, ҡаңлы, ҡаршын, ҡырғыҙ, таҙ, танып, ун, уран, ыуаныш һәм юрмый ҡәбиләләре төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын тәшкил итә. Ошо ҡәбиләләрҙең алтыһына, айырып әйткәндә, бүләр, гәрәй, йылан, йәлдәк, йәнәй, ҡырғыҙ ҡәбиләһенә ҡараған башҡорттар хәҙерге көндә Илеш районының алтмыш алты ауылында йәшәй.

Был ҡәбиләләр, бер (төньяҡ-көнбайыш) төркөмгә ҡараһалар ҙа, тарихы менән бер-береһенән айырылып торалар. Мәҫәлән, бүләр һәм юрмый башҡорттары тамырҙары менән VIII — IX быуаттарҙа Төньяҡ Кавказ далаларында һәм Волга буйында йәшәгән болғарҙарға барып тоташа. Йәнәй ҡәбиләһенең боронғо Венгрияла йәшәгән «ене» тигән төрки сығышлы ҡәбилә менән уртаҡлығы бар. Ҡайһы бер ҡәбиләләр (мәҫәлән, гәрәй, йылан, йәлдәк, ҡыпсаҡ, ҡырғыҙ) был яҡтарға XIII — XIX быуаттарҙа килгәндәр, тип раҫлайҙар ғалимдар. «Ҡаҙанлылар», «ҡаҙан кешесе» тип йөрөтөлгән халыҡты иһә тик XVII — XVIII быуаттарға ғына ҡайтарып ҡалдыралар. Һәм был шулай. Сөнки элекке Ҡазан губернаһынан татарҙар Башҡортостанға күпләп тик XVII быуаттарҙа ғына, рустарҙан һуң, килә башлайҙар.

## ИЛЕШ РАЙОНЫНДАҒЫ БАШҠОРТ АУЫЛДАРЫ

Илеш районындағы ауылдарҙа төрлө милләт кешеләре (башҡорт, татар, рус, мари һәм удмурттар) йәшәй. Хәҙерге көндә ошо милләт кешеләре ҡайһы бер ауылдарҙа үҙҙәре генә, ә күпселек осраҡта башҡа милләттәр менән аралашып, бергә йәшәйҙәр. Шулай ҙа ауылдар, уға кемдең тәү башлап нигеҙ һалыуына ҡарап, *башҡорт ауылы*, *татар ауылы*, *рус ауылы, мари ауылы* һ. б. тип йөрөтөлә.

Әлеге ваҡытта Илеш районында 66 башҡорт, 14 татар ауылы бар. Түбәндә һүҙ башҡорт ауылдары тураһында барасаҡ.

Башҡорт ауылдарының тарихын өйрәнгәндә, уларҙың сығышы яғынан төрлө-төрлө икәнлеге асыҡлана. Ҡайһы бер ауылдарҙы, мәҫәлән, ҡырғыҙ ҡәбиләһенә ҡараған башҡорттар төҙөгән, икенселәренә йылан башҡорттары нигеҙ һалған. Этник яҡтан тикшергәндә, Илеш районындағы башҡорт ауылдары борон алты ҡәбиләгә ҡараған булған.

Йылан ҡәбиләһенә ҡараған башҡорт ауылдары исемлеге: **Буралы, Иҫке Дөмәй, Этәй, Ишкар, Түбән Йонно, Юғары Йонно, Түбән**

**Йәркәй, Юғары Йәркәй, Ляшты, Түбән Сереккүл, Юғары Сереккүл, Теләпән, Тәжәй, Янтуған, Рсай, Сәйеткул** һ. б.

Ҡырғыҙ ҡәбиләһенә ҡараған ауылдар исемлеге: **Иҫке Айыу, Яңы Айыу** (яртыһы), **Илеш, Иҫәнбай, Иштирәк, Иҫке Күктау, Яңы Күктау, Ҡарабаш, Иҫке Ҡырғыҙ, Иҫке Татыш, Тыпый, Үрмәт, Шәммәт, Ябалаҡ.**

Йәлдәк ҡәбиләһенә ҡараған ауылдар исемлеге: **Оло Бишҡурай, Кесе Бишҡурай, Иләкшиҙе, Юғары Мансар, Сүлте, Төйләгән.**

Бүләр ҡәбиләһенә ҡараған ауылдар исемлеге: **Аҡкүҙ, Бүләр, Исәмәт, Ҡәҙер, Ҡыпсаҡ** (яртыһы)**, Сеңрән, Торасы.**

**Гәрәй ҡәбиләһенә ҡараған ауылдар ис**емлеге: **Иҫке Айыу** (яртыһы), **Яңы Айыу** (яртыһы), Теләкәй, Иҫке Хажы, Ҡыҙылъяр.

Йәнәй ҡәбиләһенә ҡараған ауыл берәү генә. Ул **Ҡыпсаҡ** ауылы. Был ауылдың бер яртыһында йәнәй ҡәбиләһе башҡорттары, икенсе яртыһында бүләр ҡәбиләһе башҡорттары йәшәй.

Был исемлеккә инмәгән башҡа (20) башҡорт ауылдары ла бар. Улар ошо күрһәтелгән ауылдарҙан айырылып сығып барлыҡҡа килгәндәр.

## ИЛЕШ РАЙОНЫНДАҒЫ ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ ХАҠЫНДА

Көньяҡ Уралда, *Ағиҙел, Дим, Ыҡ* йылғалары буйында йәшәгән боронғо башҡорттар ҙа *Ағиҙел* (фольклорҙа *Иҙел), Ҡариҙел* (хәҙерге *Уфимка), Күгиҙел* (хәҙерге *Дим), Сулман Иҙел (Кама)* тигән йылға исемен барлыҡҡа килтергән.

Илеш районындағы хәҙерге ваҡытта ҡулланылып йөрөгән тау-таш, йылға, күл атамалары урындағы халыҡҡа яҡшы билдәле. Шулай ҙа уларҙың ошо төбәктә йәшәгән башҡорттарҙың боронғо тел үҙенсәлектәрен һаҡлағанына, моғайын, берәүҙең дә иғтибар иткәне юҡтыр. Бында мин **Сүлте һәм Ляшты** ауылдарының исеме тураһында һүҙ алып барам. Атап әйткәндә, ошо атамаларҙағы *-ты, -те* ялғауҙары ошо төбәктең боронғо кешеләренә хас булған тел реликттары булып тора. Әгәр ҙә был атамалар хәҙерге Илеш башҡорттары һөйләшкән тел үҙенсәлектәренә ярашлы барлыҡҡа килһә, улар Сүлле, Ляшлы формаһында ҡулланылыр ине.

Тарихи документтарҙа **Исәмәт, Турасы** ауылы аша аҡҡан *Әүеште,* **Иҫке Хажы** ауылы аша аҡҡан *Миләште,* **Ҡәҙер** ауылы аша аҡҡан *Көҙәште* тигән йылғалар теркәлгән. Был атамалар ҙа *-ты, -те* аффиксы ярҙамында яһалған.

**Илешкә** күрше Туймазы районында *Оло* һәм *Кесе Бишенде,* Дүртөйлө районында **Миңеште** исемле йылғалар булыуы билдәле.

Бынан шул аңлашыла: Башҡортостандың көнбайышында һәм төньяғында башҡорттар борон икенсе төрлөрәк һөйләшкәндәр. Улар тел үҙенсәлектәре менән хәҙерге башҡорт теленең көнсығыш диалектына яҡын торғандар, тип фараз итеп була. Сөнки *-ты, -те, -ды, -де* һ. б. шундай аффикстар менән исем яһау — көнсығыш диалект башҡорттарына ғына хас сифат.

Оҙаҡ ваҡыттар татар теленең йоғонтоһон кисереү арҡаһында был үҙенсәлектәр хәҙер юйылған. Был төбәктең телендә татар әҙәби теленә хас һыҙаттар барлыҡҡа килгән. Шулай ҙа боронғо тел үҙенсәлектәре ер-һыу атамаларында һаҡланып ҡалған.

## БОРОНҒО ЫРЫУ, ҠӘБИЛӘ ИСЕМЕНӘН ЯҺАЛҒАН АТАМАЛАР

Һәр бер телдә ер-һыу атамалары бар. Улар шул телдәрҙең эске законсалыҡтарына ярашлы барлыҡҡа килгән. Телдәр күп булһа ла, был законсалыҡтар күп түгел һәм күп телдәр өсөн уртаҡ. Уларҙы беҙ ер-һыу атамаларының барлыҡҡа килеү принциптары тип атайбыҙ.

Беренсе принцип. Уның буйынса атамала объекттың эске һыҙаттары сағыла. *Һыуыҡйылға, Тәрәнкисеү, Олоялан, Аҡтау* кеүек атамалар ошо принципҡа ярашлы барлыҡҡа килгән.

Икенсе принцип. Уның буйынса бер географик объекттың исеме икенсе географик объектҡа күсә. Йылға, тау исеме ауылға, ауыл исеме ялanға күсергә мөмкин. Мәҫәлән, **Иләкшиҙе** ауылы шул исемле йылға буйынса аталған.

Өсөнсө принцип. Йәмғиәттәге кешеләр, халыҡтар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе, ул мөнәсәбәттәрҙең торошон сағылдырған атамаларҙы үҙ эсенә ала. Ауылдың тәү башлап нигеҙ һалыусы исеме менән, ауылда йәшәгән халыҡтың милләтенә, сығышына ҡарап атау осраҡтары күп кенә телдә бар. Улар ошо өсөнсө принципты тәшкил итә.

Түбәндә беҙ боронғо башҡорт ҡәбиләләре, ырыуҙары исеменән алынған атамалар хаҡында һүҙ алып барасаҡбыҙ. Милли яҡтан ҡатнаш ерҙәрҙә теге йәки был милләт исеменән яһалған атамалар күп була. Мәҫәлән, *Мари Мәнәүезе, Татар Мәнәүезе, Башҡорт Самаҙыһы, Рус Самаҙыһы* һ. б.

Башҡорттарҙың үҙҙәре лә төрлө ҡәбилә, ырыу, түбә, ара, аймаҡтарға бүлеп йөрөтөлә. Берәүҙәр үҙҙәрен — беҙ ирәкте ҡәбиләһенеке, икенселәр — беҙ дыуанай, өсөнсөләр — беҙ ҡаңлы ҡәбиләһе башҡорттары тип йөрөтәләр. Шуның кеүек ауылдар ҙа бер-береһенән айырылып йөрөтөлә.

Илеш районының **Тыпый** ауыл советына ҡараған **Бүләр** ауылы *бүләр* тип аталған боронғо башҡорт ҡәбиләһе исеме буйынса аталған.

**Иҫке Ҡырғыҙ, Яңы Ҡырғыҙ** ауылдары атамаһы нигеҙендә ҡырғыҙ ҡәбиләһе исеме ята. Тәүҙә, әлбиттә, **Иҫке Ҡырғыҙ** ауылы барлыҡҡа килгән, унан **Яңы Ҡырғыҙ** (икенсе исеме **Юлдаш**) айырылып сыға. Ике ауыл да боронғо ҡырғыҙ ҡәбиләһенән. Документтарҙа **Иҫке Ҡырғыҙ** ауылы — ҡырғыҙ ҡәбиләһенең *ябалаҡ* түбәһенә, **Яңы Ҡырғыҙ (Юлдаш)** ауылы шул уҡ ҡәбиләнең *айыу* түбәһенә ҡарағанлығы теркәлгән. Ауылдағы был башҡорттар үҙ әйберҙәрен айырыу өсөн, подпись урынына «өҙәңге» Δ , «әүернә» ╪, «ҡуш әүернә» ⧣ , «ураҡ» ʔ , «сүкеш» ╤ һәм «ю» тамғаларын ҡулланғандар. Был тамғалар солоҡ-умарталарға, аттарға һ. б. баҫылған булған.

Ҡәҙер ауыл советындағы **Сеңрән** ауылына бүләр ҡәбиләһенең ляшты түбәһенә ҡараған башҡорттар нигеҙ һалған. 1740 йылдарҙа

унда 124 башҡорт һәм 73 типтәр йәшәгән. Башҡорттарҙың малға һәм башҡа мөлкәткә һала торған тамғаһы түбәндәге формала *Һ* булған.

Ауыл үҙенең исемен *сеңрән* тип аталған ҡәбилә исеменән алған. Хәҙерге көндә был сеңрән башҡорттары Урал аръяғында, Силәбе әлкәһендә йәшәй. Әммә боронғо заманда улар Урал тауының көнбайыш яғында көн иткән булған.

Яңы Айыу ауыл советындағы **Иҫке Айыу, Яңы Айыу** ауылдарының атамалары ла этнонимға бәйле. Тик былар, юғарылағы ауылдар кеүек, ҡәбилә атамаһынан түгел, ә бәләкәйерәк этник төркөм — ырыу атамаһынан яһалған. Борон **Иҫке Айыу** ауылын ике ырыу кешеләре — гәрәй ҡәбиләһенең *бөртөк* түбәһе һәм ҡырғыҙ ҡәбиләһенең *айыу* түбәһе башҡорттары төҙөгән. Түбә исеме буйынса ауыл **Айыу** ауылы тип аталған. Хәҙер халыҡ быны онотоп, ҡайһы ваҡыт **Айыбауыл** тип тә йөрөтә. 1840 йылда **Айыу** ауылында 188 башҡорт йәшәгән. Шул уҡ йылдарҙа башҡорттар бер ниндәй документһыҙ 1400 дисәтинә ер биреп, 80 типтәрҙе ауылына ҡабул иткән. Ауыл эскән һыу Миләште (икенсе урында Минлеште) тип аталған булған. Был гәрәй һәм ҡырғыҙ башҡорттарының боронғо тел үҙенсәлеген һаҡлаған атама.

Тағы ла бер нәмәне әйтергә кәрәк: ауыл атамаһы айыу ырыуы исеменән яһалған. Ә ырыу, кеше исемдәре икенсе телгә тәржемә ителергә тейеш түгел. Шулай булғас, рәсми документтарҙа ауыл хәҙер ҡулланылып йөрөгән формала «Медведево» тип яҙылырға тейеш түгел. Сөнки уның урман кейеге — айыуға бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы юҡ.

**Ляашты** ауылы *Ляашты* йылғаһы буйында урынлашҡан. Йылға ла, ауыл да йылан ҡәбиләһенең *ляашты* ырыуы буйынса аталған. 1840 йылда был ауылда 304 башҡорт, 15 мишәр һәм 22 типтәр йәшәгән. Типтәрҙәр ауылға 1678 йылда күсеп килгәндәр. Уларға договор менән 850 дисәтинә ер бүлеп бирелгән булған.

**Иҫке Татыш, Яңы Татыш** ауылдары ла ырыу исеме буйынса аталған. Борон был ике ауыл ҡырғыҙ ҡәбиләһенең *татыш* тигән ырыуына ҡараған булған. Шуға бәйле рәүештә һыулаған күлдәре лә *Татыш* күле тигән исем йөрөткән.

Был ауыл халҡы үҙе **Татыш** исемен икенсе төрлөрәк аңлата. Ауылға Баҡалы районының **Ҡорос-Ҡатай** ауылы яғынан килгән *Тәнес*, *Тәтәмәл*, *Таймас* тигән кешеләр нигеҙ һалған, тиеләр. Әлеге *Тәнен* күленә, *Тәтәмәл* күленә, *Таймас* күленә ошо кешеләрҙең исеме ҡушылған. Бында, тимәк, дөрөҫлөк бар.

Ә *татыш* һүҙен «татлы аш» тигәндән барлыҡҡа килгән, тиҙәр. Беҙҙеңсә, бында эш әҙ генә икенсе төрлө.

Татыш атамаһы нигеҙендә, ысынлап та, *тат* һүҙе ята. Ул «тәм», русса әйткәндә «вкус», «вкусный» тигәнде аңлата. Ә -ыш — ялғау, уның бороню мәғәнәһе *-лы* ялғауына тап килә. Ундай ялғау хәҙерге сыуаш, венгр телдәрендә бар. Мәҫәлән, «ҡондоҙло» тигәнде сыуаштар «хәнтәрчә», венгрҙар «ҡондорош» тиҙәр. Шулай булғас, *-ыш* ялғауы «тат» һүҙенә ҡушылып, Татыш тигән атама яһаған. Тимәк, ул «татлы», «тәмле» тигән һүҙгә тап килә.

Ә татыш «татлы» һүҙе кеше исеме булып та, ер-һыу исеме атамаһы булып та йөрөй ала. *Татлыбай*, *Татлыбикә*, *Татыш*, *Татышев* кеүек кешеләр булыуын, *Татлы* йылға тигән атамалар осрап тора.

*Татыш*, әлеге осраҡта, иң тәүҙә кеше исеме. Күрәһең, ул — ҡырғыҙ ҡәбиләһенең бер ырыуы башлығының исеме. Ырыуҙы уның башлығы буйынса йөрөтөү — борон-борондан килгән ғәҙәт. Шулай итеп, Татыш — ырыу (түбә) исеме булып киткән, аҙаҡ ул күлгә лә, ауылға ла бирелгән.

**Ябалаҡ** ауылы — Илеш районының боронғо ауылдарының береһе. Хәҙер ауылда йәшәгән кешеләр был ауылдың элек ҡырғыҙ ҡәбиләһенең ябалаҡ ырыуына (түбәһенә) ҡарағанын бөтөнләй онотҡан. Шулай булмаһа, отставкалағы полковник Флүр Ғәлиев тигән ағай был ауылдың исемен *ябылған улаҡ* тигән һүҙбәйләнештән килеп сыҡҡан тип аңлатмаҫ ине. (Ҡара: Ҡыҙыл таң, 1989 йылдың 8-се декабрь һаны.)

Ысынында иһә *ябалаҡ* — боронғо башҡорт ырыуы атамаһы. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының ҡырғыҙ ҡәбиләһе *айыу*, *байсары*, *заит*, *тэнекәйу сырым, татыш*, *ябалаҡ (ябалаҡлы)* ырыуҙарын берләштергән булған. Бер юлы шуны ла әйтеп үтергә кәрәк. Был ҡәбилә боронғо төркиҙәрҙең төп вариҫтары булған ҡырғыҙҙарға туранан-тура бәйле. Ҡырғыҙҙарҙың атаҡлы «Манас» эпосында уларҙың бер өлөшө айырылып истәктәргә китте, тип әйтелә. Ҡырғыҙҙарҙың *истәк* тигәне башҡорттарға ҡағыла. Ҡырғыҙҙарҙың эҙҙәре Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә күҙәтелә. Мәҫәлән, Ейәнсура районында **Ҡырғыҙ-Муйнаҡ,** Миәкә районында **Ҡырғыҙ-Миәкә** ауылдары булыуын беләбеҙ. Баймаҡ районының хәҙер инде бөткән **Тоҡтағол** ауылында *сәмәтәй* тигән ара булған. *(Ҡара:* Азат Камалов. Башкирские географические термины и топонимия. Уфа: Китап, 1997. 225-се бит.) Билдәле булыуынса, Сәмәтәй — Манас батырҙың улы. Тимәк, башҡорттарҙың ҡырғыҙ ҡәбиләһе юҡҡа ғына ҡырғыҙ исемен йөрөтмәй. Күрәһең, ҡырғыҙҙарҙың дәү генә өлөшө (диаспораһы) Боронғо Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында ҡырғыҙ ҡәбиләһенең нигеҙен тәшкил иткән. Ә ябалаҡ (ябалаҡлы) — ошо боронғо төрки сығанаҡлы ҡырғыҙ ҡәбиләһенең бер ырыуы. 1692 йылға тиклем башҡорттар был ауылда бер үҙҙәре генә көн иткәндәр. 1692 йылдан алып типтәрҙәр менән бергә йәшәй башлайҙар. 1692 йылда улар, 1600 дисәтинә ер бүлеп, 39 типтәргә ауылдың бер осонан урын биргәндәр. 1840 йылдарҙа Ябалаҡта 121 башҡорт, 69 типтәр йәшәй. 1901 йылда башҡорттарҙың һаны 413-кә, типтәрҙәрҙең 219-ға етә. 1969 йылда Ябалаҡта 534 кеше йәшәй ине.

Ҡәҙер ауылы исеме лә ырыу атамаһына бәйле барлыҡҡа килгән булырға тейеш. Бүләр ҡәбиләһе борон ике ырыуҙан торған. Уның береһе *мышыға,* икенсеһе *ҡәҙер* тип аталған. Ҡәҙер ауылы борон ҡәҙер ырыуына ҡараған булған. Шуға ла Ҡәҙер ауылы атамаһының кеше исеменән түгел, ә ырыу исеменән яһалыуы бик ихтимал.

## ИЛЕШ РАЙОНЫ ҮҘӘГЕ ЮҒАРЫ ЙӘРКӘЙ ТАРИХЫНАН

**Юғары Йәркәй** — Илеш районының үҙәге. Уның хәҙер *Баҙы* йылғаһы ярында эфынлашҡаны һәр кемгә билдәле. 1777 йылда яҙылған бер һүҙлектә, **Йәркәй ауылы** *Ҡактау* йылғаһы буйында ултыра, тип теркәлгән. *Ҡактау* тигәне *Куктауҙыр*, моғайын. 1870 йылғы картала

**Йәркәй** ауылының исеме **Йәрекәй** формаһында теркәлгән. Унда ауыл *Баҙы* һәм *Иш* тигән ике йылға буйында төшөрөлгән. Быларҙың барыһы ла бөгөнгө көндә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыр, тип уйлайбыҙ.

**Юғары Йәркәйҙә** хәҙер биш меңдән ашыу кеше йәшәй. Уларҙың күпселеге башҡорттар. **Йәркәй** ауылында борон-борондан йәшәп килгән башҡорттар ҡыр-йылан ырыуының *уразай* түбәһенә ҡараған. 1795 йылда унда 199 башҡорт, 61 типтәр, 6 мишәр йәшәгән. 1840 йылда башҡорттар һаны 513-кә, мишәрҙәр — 10-ға, типтәрҙәр — 124-кә етә. Мишәрҙәрҙең **Йәркәйгә** ҡасан килгәнен теркәгән ҡағыҙҙар әлегә табылманы. Ә типтәрҙәр был ауылға 1718 йылда күсеп килгәндәр. Уларға ғасаба (вотчинный) башҡорттар договор менән 900 дисәтинә ер бүлеп биргән. 1870 йылда **Йәркәй** ауылы байтаҡҡа үҫә. Унда йәшәгән кешеләр һаны 1014-кә етә. Был ул заман өсөн ҙур ғына ауыл һанала. Шулай ҙа унда бер ниндәй ҙә уҡыу йорто булмаған. Тик 2 мәсет, 6 һыу тирмәне төҙөлгән булған.

**Йәркәй** ауылы атамаһына килгәндә, уны Флүр ағай Ғәлиев, «яр ауылы» мәғәнәле *яр кәйе* тигән һүҙбәйләнештән алынған, тип төптө яңылыша. Ауыл тәү башлап нигеҙ һалған **Йәркәйҙең** исемен йөрөтә. Йәркәйҙең 1704 — 1711 йылдарҙа булған ихтилалда ҡатнашҡаны билдәле. *(Ҡара:* Материалы по истории Башкирской АССР. М., 1956. Т. V. Ч. I. 118-се бит.) Унын атаһы Йәнсура, тамғаһы Х «әүернә» булған. Балалары, ейәндәренең исемдәрен дә табып була. Документтарҙа Йәркәйҙең өс улы: Фәйзулла, Сәйфулла, Фазыл; Фәйзулланан Фафритдин, Сафритдин, Мөхәмәтдин, Ғаяутдин; Сәйфулланан Мозафар, Мөхәмәтшәриф; Фазылдан Хөснигдин, Хөснөмәрҙән тигән тоҡом ҡала. *(Ҡара:* А. З. Асфандияров. История сел и деревень Башкортостана. Уфа: Китап, 1993. 112-се бит.)

Тимәк, ауылға нигеҙ һалған *Йәркәй* заманының билдәле бер тарихи шәхесе икәне шикһеҙ. Йәркәй ауылы *Йәркәй* исеме менән XVII быуат аҙағында ғына атала башлаған булырға тейеш. Ауылдың ошоға тиклемге, тәүге исеме үҙе ҡараған ҡәбилә буйынса *Йылан (Ялан)* тип йөрөтөлгән.

## ИЛЕШ АУЫЛЫ

Илеш районы үҙәге элек **Илеш** ауылында булған. Шуға район ул саҡта Илеш районы тип аталған. Аҙаҡтан район үҙәге икенсе ауылға, **Юғары Йәркәйгә** күсһә лә, район үҙенең элекке исемен һаҡлай.

**Илеш** — боронғо башҡорт ауылы. Был ауыл башҡорттар борон ҡырғыҙ ҡәбиләһенең *айыу* тип аталған түбәһенә ҡараған. 1776 йылда П. И. Рычков төҙөгән һүҙлектә был ауыл тураһында түбәндәгеләр яҙылған:

«Илишева — деревня башкирская и ясашных татар Уфимской провинции на Казанской дороге при ключе, впадающем в Сюнь. От Уфы в северо-западную сторону 145 верст». *(Ҡара:* П. И. Рычков. Лексикон или словарь топографический Оренбургской губернии. 1776. 1 том, ҡульяҙма, 127-се бит.) 1795 йылда бында 176 башҡорт, 65 йомошло

(служилый) татар, 42 яҫаҡлы татар, 10 типтәр иҫәпләнгән. Бында типтәр тигән һүҙҙе асыҡлап китергә кәрәк.

*Типтәр* — ул милләт исеме түгел, ә социаль төркөмдө белдергән термин. Ерҙең төп хужаһы (ғасаба) булмаған, тик ниндәйҙер шарт менән ер биләп ултырған кешеләрҙе *типтәр* тип йөрөткәндәр. Типтәр тип йөрөтөлгән кеше милләте менән башҡорт та, татар ҙа, удмурт та, мари ҙа булырға мөмкин. Шулай булғас, Илештәге 10 типтәрҙең башҡорт булыуы ла ихтимал. Бының шулай икәнен 1901 йылғы сығанаҡтар раҫлап тора. Мәҫәлән, 1901 йылда Илештә 28 татар — дәүләт крәҫтиәне, 654 ғасаба башҡорт, 99 башҡорт типтәре (припущенниги) чәйшәгән.

Илеиг ауылы атамаһының сығышы кеше исеменә бәйле. Урындағы халыҡтың һөйләүенә ҡарағанда, Илеш ауылына тәү башлап өс туғаны менән Илеш ҡарт килеп ултырған. Илеш исеме — ҡыҫҡартылған форма. Уның тулы формаһы йә Илмөхәмәт, йә икенсе форма булырға мөмкин. Әле осраған Илишев тигән фамилиялар ҙа ана шул ҡыҫҡартылған форманан яһалған.

## АҠКҮҘ АУЫЛЫ — ҠУШАМАТ ИСЕМДӘН

Аҡкүҙ исемен йөрөткән ауылдар был төбәктә икәү. Уның береһе хәҙерге Татарстан Республикаһында, икенсеһе — Башҡортостанда, Илеш районында. Ике ауылға ла *бүләр* ҡәбиләһе башҡорттары нигеҙ һалған. Татарстандағы **Аҡкүҙ** ауылы *бүләр* ҡәбиләһенең *мышыға* ырыуына ҡараған һәм Илеш районындағы **Аҡкүҙҙә** лә шул ырыу башҡорттары йәшәй.

Илеш районындағы **Аҡкүҙ** ауылында тәүҙә тик башҡорттар ғына йәшәгән. 1795 йылғы рәүиз (йәғни перепись) буйынса унда барлығы 27 ой булған, 85 ир кеше, 63 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән. Дөрөҫ, 1776 йылда яҙылған һүҙлектә, **Аҡкүҙ** (икенсе исеме **Ялкыян**) ауылында башҡорттар яҫаҡлы татарҙар менән бергә йәшәгән, тип әйтелә. Ләкин был мәғлүмәттең ҡайһы **Аҡкүҙгә** ҡарағанын асыҡларлыҡ миҫалдар табылманы. 1840 йылғы сығанаҡтарҙа был ауылда башҡорттарҙан тыш типтәрҙәр йәшәүе теркәлгән. Мәҫәлән, 1842 йылда **Аҡкүҙ** ауылында ир енесенән 87 типтәр булған. Уларға башҡорттар бер ниндәй договорһыҙ 700 дисәтинә ер бүлеп биргән. Был ваҡытта инде ауылдағы башҡорттар һаны 258-гә еткән. 1901 йылғы документтарҙа **Аҡкүҙҙә** 662 кеше иҫәпләнгән. Әммә ни өсөндөр ундағы ғасаба (вотчинный) башҡорттар типтәрҙәрҙән (припущенниктарҙан) айырып күрһәтелмәгән. Ауылдағы барлыҡ кеше лә башҡорт типтәрҙәре (припущенники-башкиры) тип яҙылған.

**Аҡкүҙ** ауылы исеме үҙенең сығышы менән ҡыҙыҡлы. Был атаманы өс төрлө аңлатырға мөмкин. Беренсеһе: уның нигеҙендә *аҡ* «белый» һәм *күҙ* «шишмә, родник» тигән һүҙҙәрҙән торған *шишмә* атамаһы ятырға мөмкин. Ләкин бындай *шишмә* ауыл тирәһендә юҡ. Шуға ла был фараз дөрөҫлөккә тап килмәй. Икенсеһе: *аккүҙ* ғип «аҡсарлаҡ»™ («чайка»ны) атаған башҡорт һөйләштәре бар. Мәҫәлән, Нуриман районында һәм Дим буйында йәшәгән башҡорттарҙа был

шулай. Өсөнсөһө: *аҡкүҙ* тип күҙенә аҡ һалған кешегә лә әйтәләр. Ул башлыса ҡушамат, лаҡап исем (прозвище) булып ҡулланыла. Әлеге осраҡта, күрәһең, Аҡкүҙ атамаһы нигеҙендә ошо һуңғы һүҙ ята. Быны ауылда һаҡланған легендалар ҙа раҫлап тора:

«Бынан нисәлер йылдар элек Торна ауылынан 6 кеше ошо матур тәбиғәтле урынға күсеп килеп ултырған. Уларҙың исеме *Мансур*, *Бускум*, *Хисмәтулла*, *Абдулла*, *Күсәр*, *Миңнеғәли* булған. Улар Мәскәү кенәзлегенән Себергә бара торған юл буйында ауыл ҡоралар. Ул юл хәҙер ҙә бар. *Уразай* юлы тип атала. Ошо юлдан йыш ҡына һөргөнгә ҡыуылған кешеләр үтә торған булғандар. Шулар араһынан *Ҡалкаман* тигән кеше булған. Ул ошо ауыл тирәһендә ҡасып тороп ҡала һәм урманда йәшәгән. Унын бер күҙенә аҡ төшкән була. Яҡын тирәләге кешеләр *Ҡалкаман* (йәғни *Аҡкүҙ)* йәшәгән ауылды **Аҡкүҙ** ауылы тип йөрөткәндәр. Шунан ҡалған «Аҡкүҙ» тигән исем».

Минеңсә, был дөрөҫлөккә яҡын. Сөнки ауылды кешенең исеме менән түгел, ә уның ҡушаматы менән атау осраҡтары бар.

## БИШҠУРАЙ — «БИШ ӘТӘС»

Был атама тураһында матбуғатта һүҙ алып барылғайны инде. *(Ҡара:* Р. Шәкүр. Бишҡурай, йәғни... «биш әтәс». *И* Совет Башҡортостаны, 28.02.82.) Унда **Бишҡурай** тигән 3 ауылдың тәүҙә Бишҡураз формаһында ҡулланылыуы, был форманың *биш* һүҙенә *ҡураз* «әтәс» тигән фарсы һүҙенең ҡушылыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килеүе тураһында һүҙ барғайны. Асылда, был дөрөҫ аңлатма. Бында беҙ ошо этимологияны яңы, өҫтәмә материалдар менән тулыландырырға булдыҡ.

Эйе, **Бишҡурай** тигән өс ауыл бар. Уның береһе хәҙер Туймазы районында, икеһе **(Оло Бишҡурай** һәм **Бәләкәй Бишҡурай)** Илеш районында.

Туймазы районындағы **Бишҡурай** ауылына ҡаңлы ҡәбиләһенең *үрмәкәй* ырыуына ҡараған башҡорттар нигеҙ һалған, Илеш районындағы **Бишҡурайға (Оло Бишҡурайға)** иң тәүләп йәлдәк ҡәбиләһенең *сырым* ырыуы башҡорттары килеп ултырған. **Бәләкәй Бишҡурай** — **Оло Бишҡурайҙан** айырылып сыҡҡан ауыл. Унда, башлыса, типтәрҙәр генә йәшәгән. Тимәк, **Оло Бишҡурай, Бәләкәй Бишҡурай** йәлдәк ҡәбиләһенә, Туймазы районындағы Бишҡурай *ҡаңлы* ҡәбиләһенә ҡараған ауыл. 1795 йылда Бәләкәй Бишҡураз (йәғни Бәләкәй Бишҡурай) Бишҡураз тип аталған йылға ярында ултырған. **Оло Бишҡураз** (йәғни **Оло Бишҡурай) Бөйәтъязы**, ә **Бишҡураз** (йәғни Туймазы районындағы **Бишҡурай**) ауылы *Ҡарандың* кесе *Нөгөшкә* ҡойған ерендә урынлашҡан булған.

Бишҡурай исеменә килгәндә, шуны онотоpға ярамай: өс ауыл да барлыҡҡа килгән ваҡытында Бишҡураз тип аталып йөрөтөлгән.

1840 йылда өс **Бишҡураздың** береһе, айырып әйткәндә, ***Бишҡураз*** йылғаһы буйында ултырған (хәҙерге Илеш районындағы **Бәләкәй Бишҡурай)** ауыл **Бишҡурай** тип йөрөтөлә башлай. *(Ҡара:* Малоизученные источники по истории Башкирии. Уфа: БФАН СССР, 1986. 129-сы бит.) 1901 йылғы сығанаҡтарҙа хәҙерге Туймазы районына

ингән ауыл 2 формала **Бишҡураз** һәм **Бишҡурай** тип теркәлгән. Күрәһең, күпмелер ваҡыт *Бишҡураз* һәм *Бишҡурай* формалары параллель ҡулланылған, һуңғы осорҙа ғына *Бишҡурай* формаһы еңгән һәм бер үҙе генә ҡулланыла башлаған. Бының сәбәптәрен тарихсы, этнограф һәм крайҙы өйрәнеүсе Р. Г. Игнатьев бик һәйбәт асып һалған.

Ул, *Бишҡураз* атамаһының мәғәнәһе тураһында һүҙ алып барғанда, ике төрлө фараз итергә мөмкин, тип ҡарай.

Беренсеһе: *Бишҡураз* «биш этәс» тигәнде белдерә. Икенсеһе: ҡураз «этәс» тигән төшөнсәнән түгел, ә үләнде белдергән һүҙ.

*Ҡураз* һүҙенең өсөнсө мәғәнәһе лә булған икән. Р. Г. Игнатьев уны килтермәһә лә, был һүҙҙең вульгар (унынса әйткәндә «в неприличном смысле») мәғәнәлә ҡулланылғанына ишара яһай. Бына ошо хәл (йәғни ҡураз һүҙенең өсөнсө вульгар мәғәнәһе) уның ҡурай формаһында ҡулланылыуына булышлыҡ иткән дә инде. Сөнки вульгар, йәғни насар мәғәнәле һүҙ ауыл исеме булып йөрөргә тейеш түгел. *(Ҡара:* Р. Г. Игнатьев. Названия вод, урочищ и прочих как памятники югров в Уфимской провинции. *Ц* Записки Оренбургского отдела Русского географического общества. Выпуск IV Оренбург, 1881. 148-се бит.)

Нисек кенә булмаһын, бөгөн шуныһы асыҡ: боронғо *Бишкураз* һүҙе Башҡортостандың көнбайыш районында *Бишкурай* формаһына күскән. Ә бына республикабыҙҙың төньяҡ-көнбайыш райондарында боронғо *ҡураз* һүҙе һаман да элеккесә ҡулланылып йөрөй. Уның мәғәнәһе лә шул «этәс» көйө ҡалған. Мәҫәлән, Ҡалтасы районында **Оло Ҡураз, Кесе Ҡура**з тигән ике ауыл бар. Башҡорттар был ауылды **Оло Ҡураз, Кесе Ҡураз** тип атаһалар, күрше ауылда йәшәгән татарҙар уны **Ҙур Атасауыл, Кесе Атасауыл** тип йөрөтәләр. Күреүегеҙсә, *ҡураз* һүҙен урындағы халыҡ «этәс» тип аңлаған. Тимәк, был яҡтағы боронғо *ҡураз* һүҙенең «этәс» тигән мәғәнәгә эйә булыуын белгән. Унан башҡа ла *ҡураз* һүҙенән яһалған ер-һыу атамалары булған. 1795 йылғы сығанаҡтарҙа Бөрө әйәҙендә **Иҫке Ҡураз, Ноғай Ҡураз** тигән ауылдар булыуы яҙылған. Шулай булғас, *ҡураз* күп кенә ер-һыу атамаларында ҡулланылған һүҙ булған.

Ер-һыу атамаларын өйрәнеү шуны күрһәтә: Башҡортостандың көнбайыш өлөшө — башҡорттарҙың борон-борондан йәшәгән төйәге. Уның мең йылдан ашыу шанлы тарихы бар. Ә төбәктең киләсәге тураһында уйланырға кәрәк. 60 йылдан ашыу көнбайыш башҡортон татар әҙәби телендә уҡытыу һөҙөмтәһендә, был төбәк кешеләре башҡорт телендә яҙа ла, уҡый ҙа, һөйләй ҙә белмәй. Был инде үҙ йәһәтендә көнбайыш башҡортоноң этник йөҙөн үҙгәртә. Урындағы халыҡ үҙенең кем икәнлеген дә онотоп бара. Ә был (Сыңғыҙ Айтматов әйтмешләй) «маңҡортлоҡҡа», рухи яланғаслыҡҡа килтерә. Бының ҡурҡыныс нәмә икәнен раҫлап тороу кәрәкмәй, һәр кеше үҙ туған телен, еренең, халҡының тарихын белергә тейеш. Уға ер-һыу атамаларын өйрәнеп тә өлгәшеп була.

## ИҪКЕ БАЙРАМҒОЛ (ӘҮЕШКҮЛ)

*Әүеш кенә менән*
*Ялсығолдоң*
*Аралары уның саҡ(ы)рым.*
*Иҫән генә һауҙар ҡайтһын*
*ахун,*
*Мәхәлләң дә ултыра*
*Мәхрүм, —*

тип йырланыла башҡорт халыҡ йыры «Ғайса»ла. Уның икенсе бер куплетында:

*Әүеш кенә күлдең*
*утрауында*
*Ҡалды минең ҡайыш дилбегәм.*
*Ҡалманы ла ҡайыш*
*дилбегәм*
*Ҡалды ла нәҙекәй бил генәм, —*

тип дауам итә.

Был йырҙа хәҙерге Учалы районы **Иҫке Байрамғол** (икенсе исемдәре Әүешкүл һәм Тәпәш), уға күрше ятҡан **Ялсығол** ауылдары, *Әүеш* күле тураһында һүҙ бара икән. Билдәле журналист Рәүеф Насиров һәм оло ғалим академик Ғайса Хөсәйенов тикшеренеүҙәре буйынса «Ғайса», «Илсе Ғайса» йырҙарындағы төп образ — Ғайса тарихи шәхес булып сыға. Ғайса Рәсүлев — атаҡлы шәйех Зәйнулла хәҙрәттең бер туған ағаһының улы. Ахун дәрәжәһен алғас, ул Әүеш (хәҙерге **Иҫке Байрамғол), Шәрип, Ялсығол** ауылдарында ахун булған, мәҙрәсәлә һабаҡ биргән. 1904 йылда урыҫ-япон һуғышында башҡорт һәм башҡа мосолман һалдаттарының баш муллаһы вазифаһын башҡарған. Урыҫ-япон һуғышы барған төбәктә Ғайса Хәбибулла улы Рәсүлев тарафынан ижад ителгән йыр тексында Учалы районындағы ауылдар, йылға-күлдәр, тау-таштар, ғөмүмән, Тыуған илендәге атамалар Ватан образын кәүҙәләндерергә, Тыуған иленә, ундағы яҡындарына булған ҡайнар тойғоларын сағылдырырға булышлыҡ иткән. Бына шуиың өсөн дә «Илсе Ғайса», «Ғайса» йырҙарының һүҙҙәрендә әлеге көндә Әүешкүл (хәҙергесә **Иҫке Байрамғол**) ауылы тирәһендәге ер-һыу атамаларын осратырға була. Мәҫәлән, йырҙан беҙ **Әүешкүлдә** утрау барлығын, **Иҫке Байрамғол** тирәһендә **Әсәт ташы** булғанын белә алабыҙ. Учалы районындағы **Иҫке Байрамғолд**а беҙ 1966 йылдың йәйендә булып киткәйнек. Ауыл ҡарттары миңә 40-тан ашыу йылға-күл, шишмә, тау-таш, түбә, һаҙ, ялан, сабынлыҡ исемдәрен әйтеп биргәйне. Улар араһында мин йырҙа иҫкә алынған *Әсәт* ташын осратманым. Күрәһең, ул йә бөтөнләй онотолғандыр, йә олатайҙарҙың хәтерендә һаҡланмағандыр.

Учалы районында ике **Байрамғол** ауылы бар. Икенсе исеме **Әүешкүл, Төпәш** булған **Иҫке Байрамғол** һәм **Яңы Байрамғол** ауылдары бар. Ике ауылға ла *Байрамғол* тигән кешенең исеме ҡушылған. Әммә был ике ауылдың сығышында ошонан башҡа бер ниндәй уртаҡлыҡ юҡ.

Сөнки **Яңы Байрамғолға** тиләү башҡорттары нигеҙ һалған булһа, **Иҫке Байрамғолға** ҡара табын, барын табын ырыуы старшинаһы Байрамғол Ғәбделйәлиловтың исеме ҡушылған.

**Иҫке Байрамғол** ауылы тарихы башҡа башҡорт ауылдарыныҡына оҡшаш. Байрамғол Ғәбделйәлилов тәүҙә **Мулдаҡайҙа** йәшәй. Ауыл ҙурая төшкәс, ул 1824 йылда *Әүеш* күле буйына күсеп, айырым ауылға нигеҙ һала. 1834 йылғы рәүиз (перепись) ваҡытында **Байрамғол (Әүешкүл, Төпәш)** ауылы Өфө губернаһы Троицкий өйәҙенең IV Тау арты Башҡорт кантонының 3-сө йортона ҡараған булған. Унда 49 ир-егет, 64 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән. Был һандың күберәк булыуы ла ихтимал, сөнки һәр рәүиздән һуң йән башына һалым арта торған булғас, башҡорттар рәүиздә үҙ һанын кәметеп күрһәтеүҙе хуп күргән. Рәүиз үткәреүселәр килеүен ишетһәләр, ауылды ташлап, йәйләүгә сыҡҡан да киткәндәр. Кеше иҫәбен алыусылар, өй нигеҙенә ҡарап, ауылда йәшәгән кешеләр һанын яҡынса билдәләгәндәр. Шуға ла рәүиздә күрһәтелгән һандарға ошо күҙлектән ҡарарға кәрәк.

**Иҫке Байрамғолда** ҡара табын, барын табындарҙан башҡа ҡыуаҡан башҡорттары ла йәшәгән. Ҡыуаҡандар **Әүешкүлгә (Иҫке Байрамғолға)** Шәриптән күсеп килгәндәр. Уларҙы *уңғарҙар аймағы, тунайҙар аймағы* тип йөрөткәндәр. **Иҫке Байрамғолда** тағы ла *зәләй, ырусай, ҡаҙаҡ, ҡоҙғон, ҡыҙылбаш, яңауыл, иҫкауыл* тигән аймаҡтар бар. Быларҙы миңә 1966 йылда ошо ауылда йәшәгән Ишбулатов Мозафа һәм Сәйфетдинов Зиннур олатайҙар һөйләгәйне. Улар ауылда шул ваҡытта йәшәгән кешеләрҙең ҡайһы аймаҡҡа ҡарауы тураһында ла бер ни тиклем мәғлүмәт бирҙе. Мәҫәлән, уңғарҙарға — Ишбулатов, Байбулатов, Туҡтамышев, ҡыҙылбаштарға — Мостафин, зәләйҙәргә — Ҡорамшин, Сәйфетдинов, Моратшин, ҡаҙаҡтарға — Хәйбуллин, ҡоҙғондарға Рәсүлевтәр ингән. «Ғайса», «Илсе Ғайса» йырҙарының авторы Ғайса Рәсүлев тоҡомо, тимәк, бынан 31 йыл элек тә Әүешкүл дә ҡоромаған булған.

«Ғайса», «Илсе Ғайса» йырҙарында телгә алынған *Әүеш күле, Әүеш тауы, Әсәт ташы, Ялсығол* тигән атамаларҙан башҡа, Иҫке Байрамғол тирәһендә тау-таш, йылға-күл, һаҙ, ялан, шишмә, сабынлыҡ исемдәре байтаҡ ҡына. Төбәк тарихы менән ҡыҙыҡһыныусылар өсөн быларҙы һанап үтергә була.

Йылға-күл, шишмәләр: *Ҡыҙылташ* һыуы, *Маҡар* һыуы, *Мейәс* һыуы, *Уй* йылғаһы, *Шаранаҡ* һыуы, *Шишмә, Әүлиә* һыуы; *Алагүл, Нәрәле* күле (ул *Мейәстең* башы), *Һарысаҡ* күле, *Һөләктөгүл, Әүеш* күле.

Тау-таш, түбәләр: *Айыутүбә, Арҡырытау, Байрамәле* тауы, *Бәшмәкте* тауы, *Ирәндек (Өйрәндек)* тауы, *Киленташ, Ҡөмәс* тауы *(Бәләкәй Ҡөмәс, Ҙур Ҡөмәс), Ҡарағастау, Ҡутырҙы, Ҡыҙылташ, Нәрәле* тауы (уны ҡаҙаҡтар *Ямантау* тип йөрөтә), *Сирнәкәү* тауы, *Уйташ, Уртатүбә, Һәпәй* тауы, *Һәретүр, Шыршылытау, Әүеш* тауы.

Һаҙҙар, сабынлыҡтар, яландар:

*Алагүҙ* һаҙы, *Ғиззәт* ҡорғойо, *Ендеүҙәк, Мәскәй (Ендөкәй)* һаҙы, *Өсҡортка* һаҙы, *Сыстым* һаҙы, *Әүеш* һаҙы, *Мәкәш үлгән* сабынлығы, *Әүеш* яланы һ. б.

Был атамаларҙың барыһы ла тарих, тел тарихы, төбәк тарихы өсөн бик мөһим сығанаҡ булып тора. Тик уларҙы ентекләп йыйырға һәм яҡшылап өйрәнергә кәрәк. Мәҫәлән, *Ғиззәт ҡорғойо* тигән атаманы ғына алайыҡ. Ғиззәт — кеше исеме, быныһы билдәле. Ә бына «ҡорғой» һүҙе күптәр өсөн таныш түгел. Иң тулы лексикографик хеҙмәт булған «Башҡорт теленең һүҙлеге»ндә был һүҙ юҡ. Дөрөҫ, унда «ҡорғо» һүҙе бар. Ләкин уның формаһы икенсе һәм мәғәнәһе ҡорғойҙоҡона тап килмәй. «Ҡорғой» һүҙе ҡырғыҙ телендә «тәрән үҙәк» мәғәнәһендә ҡулланыла. Сәйфетдинов Зиннур олатай «ҡорғой» һүҙен «тауҙағы үткәүел, үтә сығып йөрөй торған урын» тип аңлатты. Тимәк, «Ғиззәт ҡорғойо» «Ғиззәт үткәүеле» тигән мәғәнәгә эйә. Ул беҙҙең башҡорт теле менән ҡырғыҙ телдәре араһында уртаҡлыҡ булыуын күрһәткән атама.

Хәҙер **Иҫке Байрамғолда** йәшәгән кешеләрҙең фамилияһын, шәжәрәһен өйрәнеү бик мөһим. БДУ профессоры Әнүәр Әсфәндиәров хеҙмәттәрендә Әүешкүлгә нигеҙ һалған кешенең (Байрамғол Ғәбделйәлиловтың) Ҡорамша, Йыһанша, Ҡобаҡ тигән ҡустылары ауылға күсеп килә, тип яҙылған. Зөләй аймағына ҡараған Ҡорамшиндарҙың ошо Ҡорамшаның нәҫел-нәсәбе булыуы көн кеүек асыҡ. Юғарыла Ғайса Рәсүлев тоҡомдарының ҡоромағанлығын яҙып үткәйнем инде.

**Әүешкүлдә** 9 аймаҡтың береһе — тупай. Тупайҙар — **Шәрип** ауылынан күсеп килгән ҡыуаҡан башҡорттары нәҫеле. Зәйнулла хәҙрәт Рәсүлев — ошо Шәрип ауылында тыуған ҡыуаҡан башҡорто. Зәйнулла хәҙрәттең 9-сы быуын ата-олатаһы Тупай исемле булған. Тупай аймағы **Әүешкүлгә Шәриптән** күсеп килгән хәҙрәт тоҡомонан алынманымы икән тигән һорау тыуа. Бының шулай булыуы бик ихтимал, сөнки ҡәбилә исеме лә, Рәсүлевтәр тоҡомо ла **Шәрип** һәм **Әүешкүл** (Иҫке Байрамғол) ауылдары менән ныҡ бәйле.

Ауыл, ер-һыу атамалары — үҙе бер тарих. Уның һәр һүҙе, һәр исеме махсус өйрәнеүҙе талап итә.

## ЙОМАҒУЖА (УРМАН ҠЫПСАҒЫ) АУЫЛЫ

Бик борон замандарҙа *Эйек* буйында күп һанлы ҡыпсаҡ ҡәбиләһе ырыуҙары йәшәгән. Был ҡәбилә бошмаҫ ҡыпсаҡ, һыуын ҡыпсаҡ, сәңкем ҡыпсаҡ, гәрәй ҡыпсаҡ, ҡарағай ҡыпсаҡ, һарыш ҡыпсаҡ, аҡ ҡыпсаҡ (уны төркмән ҡыпсаҡ, нуғай ҡыпсаҡ тип тә йөрөткәндәр), һары ҡыпсаҡ һәм ҡара ҡыпсаҡ тигән ырыуҙарға бүленгән булған. Ырыуҙар иһә үҙ сиратында ара, аймаҡтарға айырылып, төрлө ауылдарға таралған. Шуларҙың береһенә — ҡара ҡыпсаҡ ырыуына — ҡараған башҡорттар *Эйек* буйында ауылдар ҡороп көн күргән. Йәшәү өсөн яҡшыраҡ шарттар эҙләп, ҡара ҡыпсаҡтарҙың бер төркөмө Йомағужа исемле кеше етәкселегендә *Һаҡмар, Таналыҡ* буйҙарына килеп сыға. Һынсылары *Таналыҡ* буйын ни өсөндөр оҡшатмай. Һаҡмар буйҙары ул саҡта йәмле, йылға-һыуҙары татлы, ҡош-ҡорттары, йәнлек-януарҙары мыжғып торған, емеш-еләккә бай булған. Һаҡмар буйы ҡара ҡыпсаҡтарға, әлбиттә, оҡшай. Әммә уның үҙ хужалары булған шул. Бында үҫәргәндәрҙең ерҙәре йәйелеп ятҡан. Түңгәүерҙәр алыҫ ерҙән килгән ҡыпсаҡтарға маҡам ҡорорға урын, мал көтөргә ялан, иген сәсергә баҫыу, йәнлек ауларға урман-тауҙарҙан *Һаҡмартиле* буйында мул ғына өлөш сығарғандар. Шулай итеп, Йомағужа ауылына *Һаҡмартиле* буйында нигеҙ ҡорорға рөхсәт алына. Был хәл ҡасан булғандыр, уныһын әйтеүе ҡыйын. Әммә ҡарттар, быға 300—400 йылдар тирәһе барҙыр, тип иҫәпләй.

Ололарҙың һөйләүенсә, Йомағужаға ҡара ҡыпсаҡтар әлеге ваҡытта Күгәрсен районына ҡараған Юлдыбай ауылынан күсеп ултырған. Быный шулай булыуы бик тә ихтимал, сөнки ике ауыл да бер үк ырыуға (ҡара ҡыпсаҡтарға) ҡараған. Хатта ауыл эсендәге ара исемдәренең һәм тамғаларҙың бер өлөшө тап килеп тора. Йомағужала ла (әлеге көндә ул Йылайыр районына ҡарай), Күгәрсен районындағы Юлдыбайҙа ла «таҙлар», «аҡкүҙләр», «күксәләр» тигән аралар бар. Ике ауылда ла борон «шәлтәү» тип аталған  ошондай тамға ҡулланылған. Быларҙан тыш һәр ауылдың үҙенә генә хас ара һәм тамғалары булған. Йылайыр районына ҡараған Йомағужала, мәҫәлән, аҡҡырман, тайыр, ҡалмаҡ, ҡатығорот, һыуын, иҫәнгилде тигән аралар булыуы билдәле. Йылайыр районындағы Йомағужа ауылында ҡара ҡыпсаҡтарҙан башҡа сығышы менән күрше ауылдарҙа йәшәгән үҫәргәндәргә бәйле кешеләр ҙә йәшәгән булырға тейеш. Мәҫәлән, иҫәнгилде araһын икенсе төрлө «ҡойошҡандар» тип тә атағандар. Ә ҡойошҡан — үҫәргәндәрҙең ырыу тамғаһы.

Йомағужа үҫә, ҙурая барған. Йомағужаларҙың бер өлөшө бүленеп сығып киткән. Ул халыҡ үҙе бер айырым ауыл булып ултырған. Ауылдарын *Ялан ҡыпсағы* тип, ә Йомағужаны Урман Ҡыпсағы тип йөрөтә башлағандар. Тәүгеһе ялан ерҙә, икенсеһе урманлы ерҙә нығынғанға шундай исемдәр бирелгән. Ялан Ҡыпсағы хәҙерге көндә ауыл булыуҙан туҡтай, сөнки унда йәшәгән кешеләр хәҙерге Хәйбулла районы Петропавловский (халыҡта Безводный) тигән ауылға күсеп ултырған.

Хәҙерге көндә ауылда йәшәгән кешеләрҙең ҡайһы берҙәре ошо тарихты белмәүе лә мөмкин. Бәхеткә күрә, ысын тарих ерҙең хәтер һандығында — атамаларҙа һаҡланып ҡалған. Тик уға иғтибар итергә һәм ентекләп өйрәнергә генә кәрәк.

# ЙОНОС (ТИМЕРӘК) АУЫЛЫ

*Йонос — Көҫкәнде* менән *Шоҡшөйҙө* йылғаларын һыулаған Салауат районына ингән боронғо башҡорт ауылы. Ауылға көҙәй ҡәбиләһенең шайтан-көҙөй ырыуы башҡорто Йонос ҡарт нигеҙ һалған. Ауыл XIX быуат уртаһында VIII башҡорт кантоны Шайтан-Көҙөй улусының 8-се йортона ҡараған. Ул саҡта ауылда 174 кеше йәшәгән. Шуларҙың 85-е ир-ат, 89-ы ҡатын-ҡыҙ. Ауылдың бөтә 174 кешеһе лә аҫаба башҡорт булған. Ауыл халҡы яҙлауға, йәйләүгә һәм көҙләүгә сыҡмай ғына донъя көткән. 1870 йылда Йонос Өфө өйәҙенең 5-се станына ингән. Ауылда 41 йорт булып, унда 241 кеше йәшәгән. Һуңғараҡ ауылды Өфө губернаһы Өфө өйәҙенең Илек волосына күсерәләр. 5-се стандың приставы Н. Н. Макаровский 1888 йылда үҙенең «Өфө өйәҙе V станының географик-статистик тасуирламаһы» тигән китабында ошолай тип яҙа: «Ауылда 54 йорт. Унда аҫаба башҡорттар йәшәй. Күрше ауылдар менән бергә 11 мең дисәтинә ер биләйҙәр. Әммә игенселек менән аҙ шөғөлләнәләр, сөнки 80 дисәтинә тирәһе ергә генә ашлыҡ сәсәләр. Ҡалған ерҙәрен дәүләт крәҫтиәндәренә арендаға биреп торалар.

Рәүиз буйынса 233 кеше иҫәпләнә. Ысынында 152 ир кеше, 139 ҡатын-ҡыҙ (йәғни 291 кеше) йәшәй. Халыҡтың бер өлөшө иген сәсә, икенселәре йә заводта эшләй, йә ылау йөрөтә, йә хеҙмәтсе булып ялланалар.

Йонос күрше Иҙрис ауылы менән бер йәмғиәт (община) төҙөгән. Шуға бәйле рәүештә һалымдарҙы ла бергәләп түләйҙәр. Йонос, Иҙрис, Ҡаратаулы һәм Ҡалмаҡлар ауылдары халҡына йылына 370 һум налог, 47 һум 20 тин дәүләт пошлинаһы, 24 һум 10 тин страхование һәм 181 һум 44 тин аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү һалымы түләргә тура килә. Йоноста сәнәғәт һәм ауҙа йорттары юҡ. Бөтә кәрәк-яраҡты Эҫем ауылынан һатып алалар...» (Күрһәтелгән китаптың 110-сы бите). 1870 йылғы яҙма сығанаҡтарға ҡарағанда Йоноста бер мәсет һәм һыу тирмәне булған. Халыҡ ҡортсолоҡ (умартасылыҡ) менән шөғөлләнгән. XX быуат башында ауыл ике йәмғиәткә (общинаға) бүленеп көн күргән. Беренсе община 3849 дисәтинә, икенсеһе 4137 дисәтинә ерҙе биләгән. Шул осор сығанаҡтарында ауылдың икенсе — Тимерәк тигән исеме лә теркәлә. Ауыл халҡының үҫеш динамикаһы тигеҙ генә бармаған. 1840 йылда Йоноста 174 кеше, 1870 йылда — 241, 1888 йылда — 291, 1901 йылда 457, 1969 йылда 387 кеше йәшәгән. Йонос халҡы төрлө аймаҡтарға бүленеп йөрөтөлгән. Унда *ҡалмаҡтар, кесерткән, серкәштәр, табылдылар һәм һайыҫҡандар* тип аталып йөрөгән аймаҡтар булған. Улар мал-мөлкәткә дүрт төрлө тамға ҡуйғандар: сифаты шундай  (һәнәк),  ,  (һәнәк),  (сүмес).

# ЙЫЛГИЛДЕ (ӘНЙӘК) АУЫЛЫ

Салауат районындағы **Йылгилде** — *Әй* йылғаһында ултырған эй башҡорттарының тырнаҡлы ырыуына ҡараған ауыл. Ҡайһы бер сығанаҡтарҙа, был ауыл төрөкмән тигән ырыу кешеләренән торған, тип әйтелә. Ауылда: әнжәк тигән аймаҡ булыуы иғтибарға лайыҡ, сөнки ул ауылдың икенсе исеме булып йөрөй. Риүәйәттәр буйынса (уны беҙгә **Йылгилделә** йәшәгән Мәзитов Мөхәмәтйән Мәзит улы һөйләне) ауылды яҙыуҙа йөрөгән рәсми исеме **Йылгилде** тип шуның өсөн атағандар, сөнки ул ошо урында нығынғанға тиклем йыл һайын бер урындан икенсе урынға күсә килгән. Быны ауылдың күсеп йөрөү тарихы ла раҫлап тора кеүек.

**Йылгилде** иң беренсе хәҙер **Мәсәғүт** ауылы ултырған ерҙә ултырған. Ер бүлгән ваҡытта ул ер урыҫтарға тура килгән һәм **Йылгилде** кешеләрен унан ҡыуғандар. Ауыл халҡы күсеп килеп әле Рухтино ултырған урында йәшәй башлаған. Ә ер бүлеү (дөрөҫөрәге ерҙе башҡорттарҙан тартып алыу) һаман да дауам иткән. **Рухтино** ере лә урыҫтарға эләгә. Халыҡ өсөнсө урынға, хәҙер **Рус Әнйәге** тигән ауыл ултырған урынға күсәләр. Унда ла ауыл халҡына оҙаҡ торорға тура килмәй. Башҡорттарҙы тағы ла ер өсөн ҡыуалар һәм улар бында, дүртенсе урынға, *Әй* буйына ултырғас ҡына (был хәл 1837 йылдар тирәһендә була) ауылды *Әнйәк* тип атап йөрөтә башлайҙар. **Әнйәк** тигән исемде **Әнйәк** тигән урындан күскән өсөн ҡушҡандар.

Бына шундай фажиғәле һәм оҙайлы тарихы бар **Йылгилде (Әнйәк)** ауылының. Ауыл әле ултырған урынында ярым күсмә тормош менән көн күргән. 1840 йылғы сығанаҡтарҙа **Йылгилде** Троицк әйәҙе IV көнбайыш Башҡорт кантоны Тырнаҡлы волосының 3-сө йортона ҡараған. Ауылда ул саҡта 150 кеше йәшәгән, шуларҙың 74-е ир-егет, 76-һы ҡатын-ҡыҙ. Ауыл халҡы йәйләүгә сыҡмаған. Шуғалыр ҙа бәлки, хәҙер, **Йылгилде** ауылында исемләнгән йәйләүҙәр юҡ. Йәйгеһен сығып, мал ҡараған урынды *Йәйләү* тип кенә йөрөтәләр. **Йылгилделәр** малға, солоҡҡа, ҡултамға урынына ошо сифаттағы Х тамға ҡуйыр булғандар. Хәҙерге көндә **Йылгилде** ауылында башҡорттар ғына түгел, татарҙар ҙа йәшәй.

**Йылгилде** ауылы ултырған ерҙәге ер-һыу атамалары ҡыҙыҡлы.

*Сысҡаҡ*, *Хәмәс шишмәләре*, *Түңәрәккүл*, *Һаҙлыҡ* тип йөрөтөлгән урындары бар.

Был яҡта инде *күл* термины менән атамалар булмаған ауыл юҡтыр. **Йылгилделә** *Дәүләт күлы*, *Йәкәле күлы*, *Сәкәй күлы*, *Йырғанаҡ* тигән урындар булыуы билдәле.

**Йылгилдене** *Ағыштау, Олотау*, *Ҡыҙҙар тауы*, *Йылан тауы* (урыҫтар уны *Змеиная гора)* тип йөрөтә. Ҡорсолоҡ тауы уратып алған. *Ҡаҙырай*, *Иҫке Әй эсе, Гәүһәр түбәге*, *Ҡаҙырай күтәүлеге*, *Ҡортсолоҡ яланы*, *Ағыштау сауыллығы*, *Ҡороған Ҡарағай һыулауы* тигән ер-һыу атамалары ауылдың боронғо шөғөлөн сағылдырған.

XX быуат башында Златоуст өйәҙенең Тырнаҡлы улусына ҡараған **Йылгилде (Әнйәк)** ауылында 49 йорт булған. Унда 269 аҫаба башҡорт йәшәгән, уларҙың 149-ы ир-егет, 120-һе ҡатын-ҡыҙ енесенән. Ауыл халҡы 4881 дисәтинә ер биләгән. Хәҙерге көндә **Йылгилде** — төпкөлдә

ҡалған бер ауыл ул. Торналы ауыл советына инә. Район үҙәгенән 20 км алыҫлыҡта ята. **Мөрсәлим** тимер юл станцияһынан 50 километрҙа. 1969 йылда Йылгилделә барлығы 150 кеше йәшәгән. **Йылгилде (Әнйәк)** ауылының киләсәге өмөтлө, яҡты булһын өсөн эшләйһе эштәр байтаҡ әле.

Ауыл исеменең мәғәнәһе тураһында һөйләгәндә, уның тәүге формаһы **Юлгилде** булғандыр, тип фараз итеү дөрөҫкә яҡындыр. *Юлгилде*, ул *Юлғотло*, *Юлбирҙе*, *Юламан*, *Юлдыбай* кеүек *юлда*, күсеп йөрөгәндә донъяға килгән сабыйға бирелгән исемдәр рәтендә тора. Шуға ла ауыл «юлда донъяға килде» тигән мәғәнәле Юлгилде тигән кеше исемен йөрөтәлер, тип уйлайбыҙ.

## КЕСЕҠЫР

Яңауыл районындағы боронғо ауылдарҙың береһе **Кесеҡырға** 1740—1747 йылдарҙа нигеҙ һалына. Ауылда тәү башлап йәшәгән башҡорттар **Янбарыс** ауылынан күсеп килгәндәр. Ауылда хәҙерге көндә көн күргән кешеләрҙең барыһы ла үҙҙәрен башҡорт тип иҫәпләйҙәр. Элек тә унда тик аҫаба (ергә хужа булған) башҡорттар ғына йәшәгән. 1748 йылда **Кесеҡыр** ауылында тик дүрт кенә йорт булған. Был хәл ауылдың яңы ғына барлыҡҡа килеүе тураһында һөйләй.

**Кесеҡыр** үҙенең тарихында төрлө административ-территориаль берәмектәргә ҡараған. 1834 йылда ул Бөрө өйәҙе X Башҡорт кантонының 13-сө йортона ингән. Йорт — ул саҡтағы иң бәләкәй административ-территориаль берәмек.

1901 йылда **Кесеҡыр** Бөрө өйәҙе Байғужа улусының **Бәҙрәш** ауыл йәмғиәтенә ҡараған. Хәҙерге көндә ауыл **Иҫке Ҡоҙаш** ауыл советына инә.

Тимәк, **Кесеҡыр** ауылының 250 йыллыҡ тарихы бар. Ауылдың үҫеш динамикаһы 1920 йылға тиклем тотороҡло ғына була. 1816 йылда унда 16 хужалыҡ ҡороп, 86 кеше йәшәгән. 1834 йылда 22 өйҙә 128 кеше, 1859 йылда 34 йортта 208, 1870 йылда 40 өйҙә 211, 1901 йылда 392, 1920 йылда 112 өйҙә 552 кеше донъя көткән. 1969 йылғы сығанаҡтарҙа был ауылда йәшәүселәрҙең һаны кәмей. Мәҫәлән, **Кесеҡырҙа** 383 кенә кешенең йәшәүе теркәлгән. 1979 йылғы рәүиз был ауыл халҡының тағы ла аҙайыуын билдәләй.

Ауылда хәҙерге көндә тормош ҡорған кешеләрҙең барыһы ла үҙҙәрен башҡорт тип иҫәпләйҙәр. Был шунан килә. Сөнки был ауылда борон-борондан тик аҫаба (ергә хужа булған) башҡорттар ғына йәшәгән. Быны беҙгә билдәле булған бөтә сығанаҡтар ҙа раҫлап тора.

VIII перепись (рәүиз) материалдарында **Кесеҡыр** ауылындағы уран ҡәбиләһенең янбарис түбәһенә (ырыуына) ҡараған башҡорттар үҙ ерҙәрендә йәшәйҙәр, тип яҙылған. 1898 йылғы Бөтә Рәсәй рәүизендә **Кесеҡырҙың** аҫаба башҡорттары 1067 дисәтинә ергә хужа булған.

**Кесеҡыр** башҡорттары игенселек менән дә, малсылыҡ менән дә берҙәй үк әүҙем шөғөлләнгәндәр. 1842 йылда ауылдағы 128 кешенең һәр береһе 1344-шәр бот иген сәскән. Һәр хужалыҡта уртаса ике ярым ат, өс ярым һыйыр һәм һарыҡ, 2-шәр кәзә булған. Бынан тыш халыҡ ҡорт ҡараған, солоҡ тотҡан.

Ауылдың оло бабайҙары **Кесеҡырҙағы** боронғо нәҫел-нәсәп исемдәрен хәтерләй. Ауыл халҡын өс нәҫелгә бүлеп йөрөтәләр икән. Бер төркөм халыҡты *башай,* икенселәрен — *мәндей,* өсөнсөләрен *айыт* тип атайҙар. Башҡорттарға хас булғанса, йылҡы, һыйыр малына, умарта-солоҡтарға һәм башҡа мөлкәткә тамға һалғандар. Кесеҡырҙа һәнәк сифатлы Y, киләп (йәғни кәләп) тигән I, табаҡас исемле ⊤ там-

ғалар булыуы билдәле. Исемләп йөрөтөлмәгән тағы ла ике тамға баҫа торған булғандар. Уларының сифаты түбәндәгесә: ϟ, S .

Ауылдың исеме документтарҙа төрлөсә яҙыла. Бәғзе сығанаҡтарҙа ул **Ҡысырыҡ**, күп осраҡта **Кесеҡыр** тип теркәлгән. Ауыл ололарының һөйләүе буйынса был атама **Кесе Соҡор** тигәндән ҡыҫҡартып алынған. Ысынында был хәл телдәге метатеза (йәғни хәрефтәрҙең, ижектәрҙең урынын алыштырып ҡуйыу) күренешенә бәйле. **Кесеҡыр**, тимәк, **Кесерыҡ**, **Ҡысырыҡ** булып та үҙгәрә алған.

## КИНЙӘ АУЫЛЫ

Башҡорт ауылдары тарихын өйрәнеү халыҡ тарихын өйрәнеүгә бәрәбәр һымаҡ. Бына Көйөргәҙе районы **Кинйә** ауылы тарихын алайыҡ. Ҡыпсаҡтарҙың төп ауылдарының береһе. Яҙып ҡалдырған шәжәрәләргә ҡарағанда XVIII быуат башында Мәләүез районындағы **Арыҫлан (Танып)** ауылынан айырылып сыға. Ауылға Арыҫлан Аҡколовтың улы, башҡорт халҡының данлыҡлы батыры, Салауат Юлаев менән Емельян Пугачевтың тоғро яуҙашы Кинйә Арыҫлановтың исеме бирелә. Ауылда бошмаҫ ҡыпсаҡ ырыуына ҡараған башҡорттар йәшәгән. Бошмаҫ ҡыпсаҡ иһә ҡарый (ҡара) ҡыпсаҡтарҙың бер өлөшө булған. XVI быуаттарҙа унан айырылып, ырыу дәрәжәһенә күтәрелгән. Быны шунан да күреп була. Арыҫлан Аҡколов (Аҡкошов та тиҙәр) Кинйә Арыҫлановтарҙың нәҫеле ҡара ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһендә урын алған. Ырыу Ласбейҙән башлана, уның 2 улы — Ҡолсары бей менән Алымлы бей булған. Арыҫлановтар нәҫеле Алымлы бейҙән тарала. Алымлы бей, уның улы Атағай бей. Шәжәрәлә Атағай бей 3 түбә ҡарый ҡыпсаҡ атаһы тип күрһәтелә. Атағай бейҙән 2 ул теркәлгән. Кинйә Арыҫланов заты Атағай бейҙең улы Баби бейгә барып тоташа. Баби бейҙән 4 ул тыуа, 4-сеһе Бабсаҡ бей, унан Көсөк бей (эпостарҙа ул Күсәк бей тип бирелгән). Унан Чирҡан бей, унан Бошман бей. Тарихи документтарҙа ул Басман тип йөрөтөлә. Басман (Бошман) исеменән ҡыпсаҡтарҙың бошман ҡыпсаҡ ырыуы аталып киткән. Борондоҡ бей — Бошмандың улы. Артабан шәжәрә түбәндәгесә: Сөйөндөк бей — Аҡбулат бей — Сарыбайсал дархан. Сарыбайсалдың 6 улы булған. Шәжәрәлә уларҙың дүртеһенең генә исемен уҡып була. Сарыбайсал дархандың 2-се улы Дәүләтколдан Миңлеғол, унан Аҡкош (Аҡкол), унан Кинйә Арыҫлановтың атаһы Арыҫлан һәм Кинйә күрһәтелә. Шәжәрәлә ул Кинйә тип теркәлгән. Күрәһең, ошо исем ауылдың рәсми атамаһына нигеҙ итеп алынған. Арыҫлан ҡарттың 3 улы булған: Кинйә, Юлбарыҫ, Илназар. Уларҙың һәр береһенең дүртәр-бишәр улдары булған. Кинйәнең 4 улын асыҡлап булды. Улар һеләүһен, Ҡужахмәт, Рәхмәтулла, Сәғит. Ауыл ҡарттары Кинйәнең Хәлил тигән улы булыуын да әйтәләр. Юлбарыҫтың 5 улы: Юлғотло, Юлдыбай, Аҡбирҙе, Аҡъюл, Аҡкужа. Ирназарҙың ир балалары байтаҡ ҡына була: Муса, Ҡотләхмәт, Ҡотлосаяф, Ҡотломөхәмәт, Ҡотлорәсүл һәм Ҡотлохәйҙәр.

Әлеге көндәге Көйөргәҙе, Мәләүез һ. б. райондарҙа осраған күп кенә Хәлилов, Шәрипов, Мөхәмәтшәрипов, Арыҫланов, Кинзин, Һеләүһенов, Ирназаров, Абдрахманов (Ғабдрахманов), Ғәбделхәйеров, Рахманғолов, Нәҙершин, Биктимеров, Ташбулатов кеүек фамилиялар ана шул Арыҫлан менән Кинйә ҡарттың балаларынан, ейәндәренән, бүләләренең исемдәренән алынған.

**Кинйә** ауылы икәү ине. Хәҙер береһе генә ҡалған. Ауыл яҙмышы — халыҡ яҙмышы кеүек. Халыҡ ни күрһә, ауыл шуны күрҙе. Ауылдар ойоша торҙо, уны оло яуҙарҙан һуң бөтөрә торҙолар. Шулай ҙа халыҡ икенсе урында уны яңынан төҙөнө. Икенсе исем менән булһа ла теркәй килде. Кинйә ауылының да тәүгеһе — Кинйә Арыҫланов нигеҙләгәне — бөттө. Ләкин ҡыпсаҡ халҡы бөтмәне. Бөтөү генә түгел,

илде һаҡлап ҡалырға ла ҙур өлөш индерҙе. Кинйәнең бер улы Хәлил 1812 йылғы Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашып, миҙал менән бүләкләнә. Кинйәнең ағаһы Ирназарҙың тоҡомдары Ғәфиәт Арыҫланов, Сәлмән Биктимеров, Хәсән Ғайсиндар Советтар Союзы Геройы тигән данлы исемде алалар. Ибәтулла Арыҫланов та Совет власы өсөн көсөн йәлләмәй, Мораптал волисполком рәйесе, Йылайыр кантонында милиция начальнигы, Башглавсуд рәйесе була.

1969 йылда миңә **Беренсе Кинйә** ауылында Вәлиева Таңһылыу апай менән һөйләшергә тура килгәйне. Ауыл тирәһендәге ер-һыу атамаларын һанағыҙ әле, тип һорауыма йылға, тау, таш, шишмә, күлдәрҙең исемдәрен әйтеп бирҙе, ҡайһыларының тарихын да һөйләне.

Ауылдан бик алыҫ түгел ерҙә **Мәмерйә, Ҡарай** мәмерйәһе тигән ике тау тишеге бар икән. Уның эсендә һыуы эсергә яраҡлы күле лә бар. Ошо мәмерйәлә батша ғәскәрҙәренең эҙәрләүенән ҡасып Кинйә йәшеренеп ятҡан, тине. Был мәмерйәлә оҙаҡ ҡына йәшәргә лә мөмкин. Сөнки эсе кеше бейеклек, һыуы ла бар.

*Ҡарамалы* күле. Кинйә Арыҫланов ауыл була торған ерҙә иң тәүҙә ҡыпсак ырыуының ағасы булған ҡараманы ултыртҡан, тип һөйләнеләр. Күл исеме шунан ҡалған, имеш.

*Кәзәкаран шишмәһе*, *Һөлөк куле*, *Абдуллауй буйҙары, Тирмән күле* (уны *Тоҙлокүл* дә тиҙәр), *Бәйгетау*, *Ташҡаҙғантау, Санатау, Кәсәтау, Ҡарай мәмерйәһе* һ. б. — был атамалар ауылдың борон тулы тормош менән йәшәгәне тураһында һөйләйҙәр.

Хәҙер ҡайһы бер атамаларҙың тышҡы һыҙатына күҙ һалайыҡ.

Ҡыпсаҡ ҡәбиләһе шәжәрәһендә Ҡыпсаҡ исемле хандың көбөсәктә (ағас ҡыуышында) тыуыуы, атаһының үлеүе сәбәпле, уны Оғуз хандың үҙенә ул итеп үҫтереүе хаҡында һөйләнелә. Ҡара ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһе түбәндәге юлдарҙан башлана: «Нух, аның уғлы Яфәс, аның уғлы Илхә, аның уғлы Мәғлүм, аның уғлы Ҡарайхан. Ҡарайханны Уғуз хан диерләр». Шәжәрәгә аңлатма биреүсе ғалим Р. Ғ. Кузеев, Ҡарайхан оғуздарҙың бер ханы булыуы мөмкинлеген әйтеп уҙа. Бында мин ошо яҡта оғуз телдәренә хас булған һыҙаттарға иғтибарҙы йүнәлтергә уйлайым. Ҡара ҡыпсаҡтарҙың шәжәрәһендә Бошмандан һуң бишенсе быуын кешеһен Сарыбайсал дархан тип биргәндәр. Берҙән был исем оло йәштәге, танылған кешеләргә сал тигән һүҙҙе ҡушып ҡулланылыуы менән иғтибарға лайыҡ. Шәжәрәнән тағы ла *Байсал*, *Ябағысал* тигән исемле кешеләрҙең булыуы мәғлүм. Беҙ *Атайсалдың* кеше исеме булыуы, аҙаҡтан ырыу атамаһына әйләнеп китеүен яҙып үткәйнек инде. Бында иң мөһиме икенсе нәмә Сарыбайсалдың тарханлыҡ дәрәжәһе шәжәрәлә дархан тип яҙылыуы иғтибарҙы йәлеп итә. Дархан ул оғуз телдәренә хас форма. Уларҙа һаңғырау тартынҡынан башланған һүҙҙәр яңғырау итеп әйтелә. Был миҫал ҡыпсаҡ ҡәбиләһенең боронғо оғуз ҡәбиләләре менән бәйләнешен раҫлаған дәлилдәрҙең булыуы тураһында һөйләй.

# КҮСЕМ АУЫЛЫ ТУРАҺЫНДА

Көньяҡ Урал армыттарының Ҡырҡты һырттары — теҙем-теҙем тауҙар иле. Бер тауҙы артылһаң, икенсеһе башлана. Шуларҙың Арҡырығыр тип аталғанына арҡа терәп Әбйәлил районының Күсем ауылы ултыра. Был ауылдың тарихы данлы яҡташыбыҙ, 112-се Башҡорт (аҙаҡ 16-сы гвардия) кавалерия дивизияһының элекке полк командиры, отставкалағы генерал-майор, Советтар Союзы Геройы Таһир Таип улы Күсимов менән бәйле. Таһир Күсимов ошо ауылда тыуған. Уның балалыҡ, йәшлек йылдары ошо ауылда үткән.

**Күсем** ауылының исеме Таһир Таип улы Күсимовтың ата-бабаларына барып тоташа. Ауылдың ҡулъяҙма тарихында ауылға нигеҙ һалыусыларҙың иң беренсе кешеһе итеп Йомор бей күрһәтелгән. Йомор бейҙең улы Иһәш тархан, уның улы Тәүәш батыр исемле булған. Тәүәш батырҙан Йосоп, Йосоптан Ҡарабай, Ҡарабайҙан Күсем тыуған. Ауыл ошо кешенең исеме менән аталған. Бында Күсемгә исем атау тарихына туҡталып үтеү урынлы булыр. Халыҡта һаҡланып ҡалған легендаларҙа *Күсем* Ҡаҙаҡ далаларына киткән инәһенең ҡарынындағы бала итеп һүрәтләнә. Ситтә, ҡаҙаҡ далаһында тыуа Күсем. Бәләкәйҙән үк тырамыҙ, етеҙ бала була ул. 9—10 йәш сағында уҡ көтөү көтөрлөк малай булып етә. Быны күреп, ҡаҙаҡтар: «Тиген бала булмаҫтыр, ғуй» тиешәләр ҙә Күсемгә ниҙер эшләмәк булалар. Күсемде яратып йөрөгән ҡаҙаҡ ҡыҙы, быны ишетеп ҡалып, Күсемгә әйтә. Күсем тыуған иленә, Башҡортостанға ҡаса. Бына шулай әсәһе ҡарынында күсеп китеп, донъяға килгәнгә, Күсем исеме алып егет тыуған еренә әйләнеп ҡайта. Ҡулъяҙма тарихтағы Күсем кеүек үк 6 быуындан һуң тыуған Таип улы Таһир Күсимовтың да йәшлек, ир етеү йылдары Башҡортостанда ғына түгел, ә Ҡаҙағстан, Үзбәкстан яҡтарында үтә.

Ике шәхес. Күсем Ҡарабай улы (хәҙергесә әйтһәк Күсем Ҡарабаев) һәм Таһир Таип улы Күсимов (боронғо осорҙа ул Таһир Таипов тип йөрөтөлөр ине). Икеһенең биографияһында ла оҡшаш моменттар бар. Күсемдең улдары заманаларҙың шомло ваҡытында Пугачев яугирҙары менән ирек, бойондороҡһоҙлоҡ өсөн яуға күтәрелгән. Таһир Таип улы Күсимов илебеҙҙе фашист илбаҫарҙарынан һаҡлап алып ҡалыуҙа ҡатнашты. Ҡарабаев Күсемдең исеме ауылға бирелһә, Таһир Күсимов Күсем ауылының һәм Әбйәлил районының ғына түгел, бөтә Башҡортостандың яугир данын арттырҙы.

Күсем ауылының тарихы бына ошондай шәхестәргә бәйле булыуы менән генә лә махсус өйрәнеүгә лайыҡ. **Күсем** ауылының 300 йылға яҡын тарихы бар. Шулай ҙа документтарҙа **Күсем** ауылы 1795 йылдан бирле генә теркәлгән. «Генераль межалауға иҡтисади иҫкәрмәләр»ҙән («Экономические примечания к Генеральному межеванию») күренеүенсә, элекке Ырымбур губернаһы Верхнеурал өйәҙенең Тамьян волосындағы **Күсем** 24 өйләк ауыл булған. Унда 65 ир, 58 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән. Ваҡыты өсөн **Күсем** ҙур ғына ауыл иҫәбендә торған. Шуға тиклем **Күсем** ауылы кешеләре ярым күсмә тормошта йәшәгән булырға тейеш. Бындай ваҡытта ауыл яҙҙы, йәйҙе, көҙҙө бер урында түгел, ә төрлө урында яҙҙау йә яҙғыйорт, йәйләү йә йәйгейорт, көҙҙәү йә көҙгөйорт тип йөрөтөлгән урындарҙа үткәргәндәр. Тик ҡышлай тор-

ған урындары ғына даими булған. Хатта XIX быуат урталарында **Күсем** кешеләре ауылда йәшәһәләр ҙә, йәйләүгә сығыуҙы ташламаған булғандар *(Ҡара:* А. З. Асфандияров. Ведомости башкирских и мишарских кантонных начальников о численности и социально-экономическом положении населения по деревням в середине XIX в. *Ц* Южноуральский археографический сборник. Уфа: БФАН СССР, 1976. 2-се сығарылыш. 229-сы бит).

Ҡасан барлыҡҡа килгән **Күсем** ауылы? Ауылдың ҡулъяҙма тарихында Таһир Күсимовтан Йомор бейгә тиклем 11 быуын иҫәпләнә. Әгәр ҙә һәр быуынға 25—30 йәштән һалғанда ла, Йомор бей XVI быуат аҙағында (яҡынса 1580 йылдарҙа) йәшәгән булып сыға. Ауылдың тарихы менән уға **Күсем** исеме ҡушылыу ваҡыты тап килмәй. Минең уйымса, **Күсем** исемен алғанға тиклем ауыл күсмә хәлдә йәшәгән. Ауылдың ул ваҡытта йөрөткән исеме билдәһеҙ. Ә *Күсем* ваҡытында ауыл ултыраҡ тормошҡа күсә. Шуға ла ауылға шул осорҙа ауыл халҡын һаҡлап, ҡурсалап йөрөгән Күсем батырҙың исеме бирелә. Ауылға *Күсем* исеменең ҡушылыу ваҡытын башҡа сығанаҡтарҙан да билдәләп була. Мәҫәлән, ревизия материалдарынан күренеүенсә, 1816 йылда Күсем ауылында 50 йәшлек Динмөхәмәт Күсимов тигән йорт старшинаһы йәшәгән. Шәжәрәгә ҡарағанда, Динмөхәмәт — Күсемдең улы Мөхәмәтрәхимдең улы булып тора. Бер быуынға 25—30 йылдан һалып иҫәпләгәндә лә Күсем яҡынса 1690 йылдың аҙағында йә 1700 йылдың башында тыуған булып сыға. Тимәк, легендала Күсем тураһында һөйләнелгән ваҡиғалар XVII быуат аҙағына йә XVIII быуат башына тура килә.

Этнографик материалдарҙа **Күсем** тамъян ырыуына ҡараған ауыл иҫәпләнә. Күсем шәжәрәһендә **Бикҡол, Мөхәмәт, Ниязғол, Ташбулат, Теләш** һәм **Әүмеш** ауылдары, *Күсем* кеүек үк, *Йомор* бейҙән таралған, тип әйтелә. Бының шулай булыуы мөмкин, сөнки һаналған ауылдарҙың бөтәһе лә тамъян ырыуына инә. Ҡайһы бер тамғаларҙың (мәҫәлән, **Айыуһаҙы** менән **Ҡаҙмаш** ауылдарында), ара исемдәренең (Әүмеш менән Боранғолдоң һәм Аҙнағол менән Айыуһаҙының) уртаҡлығы ошо турала һөйләй *(Ҡара:* Камалов А. Башкирские географические термины и топонимия. Уфа: Китап, 1997. 207—208-се биттәр). Ә тамъяндар борон Көньяҡ Уралдың ике яҡ итәгендә лә йәшәгән ҡәбилә булған. Хәҙерге ваҡытта был ҡәбиләгә ҡараған ауылдар Башҡортостандағы *Дим*$_{у}$ *Өршәк* йылғалары; Ырымбур, һарытау, һамар өлкәләрендәге *Тук*, *Кэрәлек* йылғалары буйында таралған *(Ҡара:* Р. Г. Кузеев. Происхождение башкирского народа. М., Наука, 1974. 112-се бит).

Күсем шәжәрәһендәге ҡайһы бер исемдәр Әбйәлил районындағы йылға атамаларында һаҡланып ҡалған. Шәжәрәлә Иһәш тархан тигән кеше булыуы күрһәтелгән. Был исем әҙәби телдәге Иҙәш һүҙенә тап килә. Ә *иҙәш* — ғалимдарҙың раҫлауынса, боронғо венгр һүҙе *(Ҡара:* Башҡорт АССР-ының топонимдар һүҙлеге. Өфө, 1980. 54-се бит). Ул мәғәнәһе менән хәҙерге башҡорт телендәге *татлы*, *тәмле* тигән һүҙҙәргә яҡын. Билдәле булыуынса, был һүҙҙәр кеше исемдәрен яһауҙа актив ҡатнаша. **Татлыбай, Татлыбикә, Татлымбәт** тигән исемдәр булыуын хәтергә төшөрөгөҙ. Тимәк, *Иҙәш* йылғаһы, Иһәш тархан тигән

атамалар, исемдәр боронғо башҡорт-венгр бәйләнештәре булыуына ишара яһай.

**Күсем** ауылы Әбйәлил районындағы боронғо ауылдарҙың береһе. XVIII быуат аҙағында 123 кеше йәшәгән 24 өйлөк ауыл булған. 1866 йылдарҙа был ауыл *Бикембэт* шишмәһе буйында ултырған. Унда 45 өй булған. Ауылда 350 кеше йәшәгән, шуларҙың 176-һы ир, 174-е ҡатын-ҡыҙ. Ауылда 1 мәсеттән башҡа нәмә булмаған. Хәҙер Күсем ауылында 400-ҙән артыҡ кеше йәшәй. Ауылда мәктәп, клуб, медпункт һәм башҡа учреждениелар бар, Советтар Союзы Геройы, генерал-майор Таһир Таип улы Күсимовтың йорт-музейы эшләй. Ошо мәғлүмәттәрҙе ауылдың үткәне менән сағыштырып, уның үҫеш тарихын асыҡ күҙ алдына килтереп була.

## ҠАПСЫҒАЙ НИМӘНЕ АҢЛАТА?

Учалы районының **Наурыҙ** ауылы янында **Ҡапсығай, Ҡабат Ҡапсығай** исемле ике тау бар. Һуңғыһын икенсе төрлө **Һыуыҡ Ҡапсығай** тип тә йөрөтәләр. Серле исемдәр былар. Шул төбәктә йәшәгән халыҡ был исемдәрҙең мәғәнәһен аңларға теләгәндәр һәм үҙҙәренсә аңлатҡандар. **Наурыҙ** ауылында яҙып алынған риүәйәттәр шул турала һөйләй.

...Ҡасандыр ошо төбәктә көн күргән башҡорттар *Яйыҡ* аръяғындағы ҡаҙаҡтар менән күрше йәшәгәндәр. Күрше булһалар ҙа, үҙ-ара тыныс йәшәмәгәндәр. Ҡаҙаҡ яғынан яу килгәндә, ауылдың яуҙа ҡатнаша алмаған кешеләре тау ҡыуышына йәшенә торған булғандар. Бына бер мәлде яу килә тигән хәбәрҙе ишеткәс, ҡарт-ҡоро, бала-саға, ҡатын-ҡыҙҙар шул тауҙарға барып яу үткәнсе йәшенергә булалар. Тик быны яуға килгәндәр, ҡаҙаҡтар, белеп ҡалалар. Улар: «Ошо тауҙы ҡапчағыз», — таба алмағас: «Ҡабат ҡапчағыз!» — тип әйтәләр. Был ике тауҙың исеме шунан тороп ҡалған, имеш.

Был, әлбиттә, дөрөҫлөккә тап килмәй. Сөнки унда ауыл кешеләрен һыйҙырырлыҡ тау ҡыуышы, мәмерйә булырға тейеш. Ә ундай мәмерйәләрҙең булыуы асыҡланманы. Икенсенән, «һыуыҡ Ҡапсығай» тигән атаманы был версия буйынса аңлатып булмай. Әгәр ҙә халыҡ аңлатмаһын дөрөҫ тип иҫәпләгәндә, «һыуыҡ Ҡапсығай» тауы «Һыуыҡ ҡапчағыз» тигәндән барлыҡҡа килгән булып сыға. Ә былдай һүҙбәйләнеш тел закондарына һыймай.

Был ике тау исемен аңлатыу өсөн ҡәрҙәш телдәргә, башҡорт телендәге ошо һүҙҙең тамырҙаш морфемаларының мәғәнәһенә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ошо йәһәттән алтай телдәре семьяһына ингән монгол, ҡалмыҡ, бүрәт телдәре бик ҡиммәтле материалдар бирә. Монгол телдәрендә *хабцағай* тигән һүҙ ике тау араһындағы ҡыҫыҡты, тарлауыҡты белдерә. *(Ҡара:* Казакевич В. А. Современная монгольская топонимика. Ленинград, 1934; Мурзаевы Э. и В. Словарь местных географических терминов. М., 1959). Башҡорт телендә был һүҙ *капсағай* формаһында ҡулланыла. Бынан башҡа ла башҡорт телендә ошо һүҙҙең тамырына мәғәнәһе менән яҡын һүҙҙәр бар.

Монгол телдәрендәге *хабцағай* һүҙе *хабцағ* тамырынан һәм *-ай* ялғауынан тора. *Хабцағ* тамырына яҡын лексик берәмек башҡорт теленең көньяҡ диалектына ҡараған дим һәм урта һөйләштәрҙә *капсак* «ҡабаҡ», русса «веки» мәғәнәһендә ҡулланыла. Ә *кабак* һүҙенең «обрыв» мәғәнәһендә йөрөүен һәр кем беләлер. Мәҫәлән, Башҡортостан Республикаһының Ҡырмыҫҡалы районында Ҡабаҡ ауылы бар. Ул ана шул исемле тау буйынса йөрөтөлә. *Капсак* һүҙе башҡорт телендә «ҡыҫыҡ, тарлауыҡ, ҡыҫынты», мәғәнәһендә лә ҡулланылған булырға тейеш. Мәҫәлән, *кыпсыуыр* «клещи» һүҙендәге *кыпсыу* морфемаһы «ҡыҫыу» мәғәнәһен бирә. «Тар» мәғәнәһен йөрөткән *кипсәү, кипсәлеү* тигән һүҙҙәрҙе ике томлыҡ «Башҡорт теленең һүҙлеге»ндә осратырға мөмкин. *(Ҡара:* Башҡорт теленең һүҙлеге: ике томда. I том. А — М. М., Русский язык, 1993. 504-се бит). Был осраҡта *капсағай* һүҙенең «ҡыҫыҡ, тарлауыҡ, ҡыҫынты ер, тарлауыҡ» мәғәнәһенә эйә булыуы асыҡлана. Тимәк, *капсағай* һүҙе ике мәғәнәлә ҡул-

ланылырға мөмкин: «ҡабаҡ» һәм «ҡыçыҡ». Ҡапсағай, Ҡабат Ҡапсығай *Н* һыуыҡ Ҡапсығай атамаларының нигеҙендә ҡайһы ғына мәғәнә һалынһа ла, ул боронғо төрки сығанаҡлы һүҙгә барып тоташа. Шуға ярашлы үрҙә һанап кителгән Ҡапсығай йә «Ҡыçыҡ» йә «Ҡабаҡ», Һыуыҡ Ҡапсығай «Һыуыҡ Ҡыçыҡ» йә «һыуыҡ ҡабаҡ» тигәнде аңлата. *Ҡабат Ҡапсығай* тигәндәге *ҡабат* һүҙе «арғы» йә «икенсе» тигән төшөнсәне бирә.

Атамалар өсөн үҙе яһалған һүҙҙәрҙең мәғәнәһе һаҡланыуы мәжбүри түгел. *Ҡапсығай* һүҙенең мәғәнәһе лә онотолған, хәҙерге телдә ҡулланылыуҙан төшөп ҡалған. Әммә боронғо башҡорт һүҙе ер-һыу атамаһында һаҡланған. Шуға ла төбәктәге йылға, тау-таш, урын исемдәренең һәр береһе үҙенә күрә сер йөрөтә. Уларға иғтибар итергә, серҙәрен асырға тырышырға кәрәк.

## ҠАРТКИҪӘК АУЫЛЫ

Ҡарткиҫәк — Асҡын районында урынлашҡан төп башҡорт ауылдарының береһе. Уға бик боронғо башҡорт ҡәбиләләрен тәшкил иткән *су-таныш* һәм *ун* ҡәбиләләренә ҡараған башҡорттар нигеҙ һалған. Ауылда *арыҡбай, суманай, мәнди, ҡәлмырҙа, алый* тигән нәҫел (зат) исемдәре һаҡланып ҡалған. Был кешеләр үҙ әйберҙәренә, малға өс төрлө тамға һалған булғандар. Мәҫәлән:  ,  ,  ,  . Уртағы ике тамға бер нәҫелдеке (заттыҡы, араныҡы) булғандыр, сөнки дөйөм формаһы оҡшаш.

Ауылға кем нигеҙ һалғанын асыҡлаусы мәғлүмәттәр юҡ. Әммә мәғәнәһен бер ни тиклем асыҡлап була.

Ә. Әсфәндиәровтың 1993 йылда «Китап» нәшриәтендә сыҡҡан «История сел и деревень Башкортостана» тигән бик файҙалы китабында был ауыл тарихы тураһында байтаҡ материал бар. Китапта шул ауылда тыуып үҫкән М. Н. Нурғәлиев ағайҙың версияһы килтерелгән. Уның буйынса был ауыл *ҡарт* һәм *киҫәк* «доля — өлөш» тигән һүҙҙән яһалған. Бының шулай булыуын раҫлаусы материалдар юҡ. Башҡортта ер өлөшөн, пайҙы башлыса *бүләк* һүҙе менән атап йөрөткәндәр. Ул «бүлеү — делить» тигәнде белдергән термин. Ә *киҫәк* һүҙе башлыса «зат, ырыу, нәҫел» мәғәнәһендә ҡулланылған. Пермь өлкәһе Барҙы районындағы **Ҡайынауылда** (икенсе исеме **Березники**) *саҡай киҫәк, тау киҫәк, турғай киҫәк, әрәмәс киҫәк, юғары киҫәк* тигән нәҫел (ара, аймаҡ) исемдәре бар. Үзбәк телендә лә *кесек* һүҙе хәҙер ҙә «ырыу» тигәнде белдерә. Ә *ҡарт* һүҙе «оло, ҙур» мәғәнәһендә ҡулланылған. Учалы районындағы *Ҡарт Муйнаҡ* атамаһы, мәҫәлән, «Оло Муйнаҡ» тигәнде аңлата. Шуның кеүек Ҡарткиҫәк ауылы ла «Оло ырыу, оло нәҫел, оло зат» тигәнде белдерә.

## ҠОЛҒОНА АУЫЛЫ

Ишембай районында **Ҡолғона,** Әбйәлил районында **Ҡолғана** исемле ауылдар бар. Һирәк осрай торған исемле ауылдар былар. «Был ауылдар ни өсөн шулай аталған?» — тигән һорауҙар менән беҙгә хаттар яҙалар.

Ер-һыу атамаһының сығышы, мәғәнәһе кешеләрҙә һәр ваҡыт ҡыҙыҡһыныу уятҡан. Йыш ҡына кешеләр үҙҙәре теге йәки был атамаға легенда һәм риүәйәт формаһында аңлатма бирергә тырышҡан. Был легендаларҙың дөрөҫтәре лә, яңылыштары ла бар. Нисек кенә булһа ла, был риүәйәттәр ҡыҙыҡлы. Улар үҙҙәре ғалимдар өсөн тикшереү объекты булып тора. Сөнки легендала халыҡтың үҙе йәшәгән мөхитте аңлатыу системаһы сағыла. Ошондай легендаларҙың береһенә танылған яҙыусыНоғман Мусин иғтибар иткән *(Ҡара:* «Совет Башҡортостаны, 1965 йыл, 18 февраль). Шул легенда буйынса Ишембай районындағы **Ҡолғона** ауылы «тәү башлап яңғыҙ ҡол ғына йәшәгәнгә» шулай аталып киткән, имеш. Был легенда тарихы дөрөҫлөккә тап килмәй. Дөрөҫлөктө асыҡлау өсөн ер-һыуға исем ҡушыу тәртибенә иғтибар итергә кәрәк. Тикшереүҙәр шуны күрһәтә: **Ҡолғона** ауылы шул ауылға тәү башлап нигеҙ һалған *Ҡолғона* тигән кешегә бәйле.

**Ҡолғона** — борон йыш ҡына ҡулланылған исем булған. Әлеге Әбйәлил районындағы **Ҡолғанаға** ла *Ҡолғана* тигән кешенең исеме ҡушылған. Унан башҡа Бөрйән районында ла *Ҡалғаһау* йылғаһы буйында **Ҡолғона** тигән ауыл булған. Ул ауыл хәҙер бөткән инде. Бөтһә лә, исеме халыҡ телендә һаҡлана. Әбйәлил районындағы ауыл Ишембай районындағы кеүек **Ҡолғона** тип түгел, ә **Ҡолғана** тип (икенсе ижекте «а» өнө менән) йөрөтөлә. *Ҡолғонаның* (шулай уҡ *Ҡолғананың* да) кеше исеме булыуын раҫлаған дәлилдәр шәжәрәләрҙә (ауылдың ҡулъяҙма тарихында) һаҡланған. Мәҫәлән, беҙгә шул билдәле: **Ҡолғанаға** (Әбйәлил районы) нигеҙ һалған кеше *Ҡолғана Тулыбаев* булған. Уның *Ишбулат, Бүләк, Искәнйәр* тигән 3 улы булыуы яҙып ҡалдырылған. *Ҡолғана Тулыбаев,* Әбйәлил районындағы **Ярлыҡап** ауылынан *Үҙән* буйына күсеп, әлеге **Ҡолғана** ауылына нигеҙ һалған.

Ишембай районындағы **Ҡолғонаны Тау Кирәйе** тип тә атағандар. Бының сәбәбе шунда: ул ауыл кирәй (гәрәй) ҡыпсаҡ ырыуына ҡараған ауыл булған. Был ауылда хәҙер ҙә *кәстәй, ҡабыҡҡанат, таҙ, таулы, тойғон, төйҙә, шауһөйәк* тигән аралар булыуы билдәле. Һәр бер ауыл үҙенә бер айырым тамға — тоҡомдо белдергән, милекте айырыусы билдә йөрөткән. **Ҡолғона (Тау Кирәйе)** ауылында командировкала булғанда беҙ , , ,  формаһындағы тамғалар ҡулланылыуын яҙып алғайныҡ.

Әбйәлил районындағы **Ҡолғананы** бик боронғо ауыл тип булмай, сөнки ул XIX быуат башында ғына барлыҡҡа килгән. Ишембай районындағы **Ҡолғона (Тау Кирәйе)** ауылының барлыҡҡа килеү ваҡыты билдәле түгел. Әммә сығышы менән алыҫ Ҡаҙағстан далаларында ятҡан *Ябыҡҡарағай* тигән ерҙәргә бәйле. *Ябыҡҡарағай* тигән урын хәҙер ҙә бар. Ул яҡынса хәҙерге Ҡаҙағстандың төньяҡ-көнсығыш

өлөшөндә, Силәбе әлкәһенең Магнитогорск ҡалаһынан көньяҡ-көнсығыштараҡ булырға тейеш.

Нимәне белдерә ул *колғана*, *колғона* һүҙҙәре? Был һорауға яуап табыу өсөн монгол телдәренә мөрәжәғәт итергә тура килә. Монгол теленә ҡәрҙәш тел булған бурят телендә «кесерткән» үләнен «халгана», «сысҡан»ды «хулгана» тип йөрөтәләр. Бына ошо ике һүҙҙең береһенән *Ҡолғана Ц Ҡолғона* тигән кеше исемдәре барлыҡҡа килгән. Беҙҙең уйыбыҙса, *Ҡолғона Ц Ҡолғана* тигән кеше исеменә «сысҡан» мәғәнәһендә ҡулланылған *хулгана* һүҙе нигеҙ булып торған. Бының шулай булыуы бик мөмкин. Сөнки борон башҡорт телендә «сысҡан» һүҙе йыш ҡына кеше исеме булып ҡулланылған. Мәҫәлән, Йософ Гәрәй *Сысҡан Лҡкышев* тигән кешенең булыуы тураһында үҙенең бер мәҡәләһендә яҙғайны *(Ҡара:* Совет Башҡортостаны, 1967 йыл, 23 август). Ҡырмыҫҡалы районында **Сысҡан (Баҡсалы)** тигән ауыл бар. Ул ауыл да *Сысҡан* тигән кеше исеменән. *Сысҡан* һүҙе башҡорт телендә исем функцияһында ҡулланылғас, бурят телендә лә *хулгана* исем булып йөрөй ала. Бурят антропонимияһы буйынса тикшереүҙәр бының шулай булыуын раҫланы *(Ҡара:* Л. В. Шулунова. Прозвище в антропонимии бурят. Улан-Удэ, 1985). *Хулгана* һүҙе унда бәләкәй кәүҙәле кешеләргә ҡушамат исем итеп бирелә, тип әйтелгән. Тимәк, шул асыҡланды: *сысҡан* — башҡорт телендә, *хулгана* — бурят телендә кеше исеме итеп ҡулланылған һүҙ.

Өндәрҙең тарихи үҫеше яғынан тикшергәндә *хулгана* формаһының *сысҡан* һүҙенә туранан-тура мөнәсәбәте барлығы асыҡлана. Билдәле булыуынса, алтай ғаиләһе телдәрендә (уға бурят теле лә, башҡорт теле лә инә) һүҙҙең төрлө позицияһында *т(д)* өнө *к(х)* өнөнә, л өнө *ш(л)* өндәренә тап килә. Мәҫәлән, *Теләш* һәм *Келәш*, *теләү* «желать, просить» һәм *келәү* (шул уҡ), таш «камень» — *чал*, *чул* (сыуаш телендә) һ. б. Бурят һүҙенең аҙағындағы *а* һуҙынҡыһы төрки телдәрендә төшөп ҡала *(Ҡара:* Г. Д. Санжеев. Современный монгольский язык. М., 1959). Шулай итеп, бурят телендәге *хулган(а)* һүҙе төрки телдәрендәге *точкан* формаһына тап килә. Был форма хәҙерге татар телендәге *тычкан,* башҡорт телендәге *сысҡан* һүҙҙәрен бирә. Төп сығышы бер тамырҙан булһа ла, береһе монгол *(хулгана),* икенсеһе төрки *(сысҡан*, *тычкан)* телдәрендә нығынған һүҙҙәр, улар был телдәрҙең антропонимияһында үҙенсәлекле урын тота. Төрки телдәрендә монгол варианты *(колғана* формаһы) төрки вариантҡа ҡарағанда активыраҡ ҡулланыла. Был инде *колғана* һүҙенең мәғәнәүи яҡтан аңлайышһыҙ булыуынан киләлер. Исемдәр өсөн мәғәнәнең билдәһеҙ булыуы яҡшы. Шуға *Сысҡан* исеменә ҡарағанда *Ҡолғана, Ҡолғона* исемдәре халыҡҡа ҡулайыраҡ күренгән.

## ҠОТҠОР — ҠӘҺӘРМӘН

Белорет районында *Котҡор* исемен йөрөткән урындар күп. Мәҫәлән: **Ҡотҡор** ауылы (рәсми исеме **Ҡәһәрмән)**, *Котҡор, Бәләкәй Котҡор, Ҡоро Котҡор, Котҡороскан* тигән йылғалар, *Котҡор тамағы, Котҡор тамағы яланы, Котҡор ташы, Котҡор урманы, Котҡор үҙәге.* **Кухтурский** тип йөрөтөлгән рус ауылының исеме лә **Котҡо**р формаһынан үҙгәртелгән.

Былар араһында ҡиммәтле тарихи һәм тәбиғәт ҡомартҡыларын аңлатҡандары ла бар. Мәҫәлән, *Котҡор урманы.* Элек унда суйын ҡойоу заводы булған. Был заводта ваҡытында Емельян Пугачев менән Салауат Юлаев армияһына ла пушка ҡойолған. Е. Пугачев был яҡтарға заводтар менән танышып йөрөүсе сауҙагәр булып восстаниеға тиклем үк килеп киткән. Уның көрәштәше Хлопуша 1773 йылдың көҙөндә баш күтәреүселәргә ҡорал, аҡса һәм яңы отрядтар йыйып йөрөгән.

*Котҡор урманында* бик борондан һаҡланып ҡалған һирәк осрай торған үҫемлектәр һәм ҡош-ҡорттар бар. Шуны иҫәпкә алып, 1985 йылда Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы *Котҡор урманын* һаҡлау тураһында ҡарар ҡабул итте.

*Котҡор* һүҙенән яһалған атамалар рухи ҡомартҡы булараҡ та әһәмиәтле, сөнки улар башҡорт теленең тарихы өсөн ҡиммәтле сығанаҡ булып тора.

— Нимәне аңлата *Котҡор?* Ҡайҙан барлыҡҡа килгән ул? — тигән һорауҙар менән йыш ҡына мөрәжәғәт итәләр.

Урындағы халыҡтың күбеһе был атамаларҙы үҙенсә аңлата. Йәнәһе, ҡасандыр был яҡтарға сит кеше килеп, яҙғы ташҡын ваҡытында йылғанан аҡҡан. Ҡышлау халҡы: «Ҡотҡарығыҙ, ҡотҡар!» — тип ҡотҡарырға тырышҡан. Шуға ла «Ҡотҡор» атамаһы «ҡотҡар» һүҙенән барлыҡҡа килгән, тиҙәр. Ысынында иһә был атамалар борон башҡорт телендә булып та хәҙер ҡулланылыштан төшөп ҡалған *котҡор* һүҙенән яһалған. Уның мәғәнәһе төрки телдәрендә алыҫ ҡәрҙәш хәҙерге монгол һәм бүрәт телдәрендә һаҡланған. Бүрәт телендә *хотогор* тау итәген, эйеңке, һарҡыу урынды аңлата. Монгол телендәге *хотогор* беҙҙәге *соҡор, тәрән үҙәк* тигән һүҙҙәргә тап килә. Бүрәт Республикаһында *Хотогор, Хотогор-Булак, Цаган-Хотогор* тигән ауыл, йылға, соҡор атамалары бар. *(Ҡара:* Кузьмина Г. Г. Словарь географических терминов и слов, встречающихся в бурятских географических названиях. М.: ЦНИИГАиК ГУГК при Совете Министров СССР, 1969. 49-сы бит).

Тимәк, юғарыла һанап үтелгән башҡорт атамаларының нигеҙендә «тәрән үҙәк, соҡор» мәғәнәһен йөрөткән боронғо башҡорт һүҙе ята.

*Котҡор йылғаһы* «Соҡор йылғаһы» йәки «Тәрән үҙәк» йылғаһы тигәнде аңлата. Бында шуны ла онотorға ярамай: һәр атаманың барлыҡҡа килеүе бер төрлө булмай. Иң тәүҙә *котҡор* һүҙе йылғалар исе-

мендә урын алған булырға тейеш. Унан ауылға, тау-ташҡа һәм башҡа урын исеменә күскән.

Белорет районы **Ҡәһәрмән** ауылы тирәһендә *коткор* һүҙенән яһалған атамалар бик күп булып сыҡты. Сәбәбе: ауыл янында *5 Коткор* йылғаһы аға. Улар тураһында 1891 йылда тыуған **Ҡәһәрмән (Ҡоткор)** ауылы кешеһе Ҡужахмәтов Яхъя Ҡужахмәт улы беҙгә шул турала 1971 йылда һөйләгәйне. Шул уҡ ауыл кешеһе А. Асылбаев, *Коткор* йылғаһы биш ҡушылдыҡтың бергә ҡушылыуынан барлыҡҡа килгән, тип иҫәпләй. Нисек кенә булмаһын, быларҙың барыһы ла ҡыҙыҡһыныу уята һәм артабан тикшереүҙе талап итә. Был ҡушылдыҡтарҙың барыһы ла бейеклеге 1600 метр булған **Бешәтәк** тауынан башлана һәм һәр ҡайһыһы 18—20 саҡрым тирәһе аралыҡ үтеп, *Ағиҙелгә* 6—7 саҡрым етмәйенсә бергә ҡушылалар. Бер ҙур йылға бу~ лып **Ҡәһәрмән** ауылынан 2 саҡрым түбән *Ағиҙелгә* килеп ҡушыла. Ошо 5 йылғаның элек-электән һәр ҡайһыһының үҙ исеме булған. Мәҫәлән, һул яҡтан ситтәгеһе *Байгускар* йылғаһы тип атала. Икенсеһе — *Кыҙылйылга* (уны *Коро Коткор* ҙа тип йөрөтәләр). Өсөнсөһө — *Коткороскан* йылғаһы. *Бешәтәк* түбәһе тапҡырынан башлана ул йылға. Башланған урыны үтеп сыҡҡыһыҙ ҡыуаҡлыҡ, батҡаҡлыҡ. Бер ни тиклем ағып килгәс, йылға бер нисә урындан ҡаянан аҫҡа оса. Аҫта бергә ҡушылып, 6—7 метр бейеклектәге ҡаянан тағы ла аҫҡа тәгәрәй һәм ике ҡатлы шарлауыҡ барлыҡҡа килтерә. Тәбиғәттең һоҡланып бөткөһөҙ ере ошондалыр. Дүртенсе *Коткор — Баштыйорт йылгаһы* — шулай уҡ *Бешәтәктең* уң яғынан башлана. Бишенсе йылға — *Урланган рудник йылгаһы.* Ни өсөн «Урланған рудник» тигәндәре билдәһеҙ. Уның *Никрутский* тигән яңы исеме лә бар. Бына ошо йылғалар бергә ҡушылып ҡасандыр Ҡотҡор атамаһын алған һәм *Агиҙелгә* ҡушылғансы ни бары 6—7 саҡрым ғына *Коткор* исемен йөрөтә. *Коткорҙоң Агиҙелгә* ҡушылған урынында *Коткор тамагы яланы* бар.

**Ҡәһәрмән** ауылы тәүҙә шунда урынлашҡан булған. Ярым землянкалар төҙөп ҡышын шунда көн күргәндәр, һәм ауыл иң тәүҙә **Ҡыштау** тип аталған. Хәҙер ул ерҙе **Иҫке Ҡыштау** тип йөрөтәләр. Ә йәйен юғарыға **Бешәтәк** яғына йәйләүгә күсер булғандар. Унда *Таштыйорт*, *Караңгыйорт*, *Сатырйорт* һ. б. төрлө исемдәр барлыҡҡа килгән. Дөйөм алғанда, **Ҡәһәрмән** ауылының төп сығышы Әбйәлил районындағы элекке **Юлдаш** ауылынан. Иң тәүҙә ауыл *Сакынды* йылғаһында утарлаған, **Иҫке Ҡыштауҙан** һуң **Сыбатма** тигән ерҙә йәшәп ҡарағандар. Унан да ҡыуғастар, *Иҙелдең* аръяғына ултырғандар. Әлеге йәшәгән урыны ауылдың 5-се ере. Ҡәһәрмәндең хәҙерге урынына тәү башлап килеп ултырған аралар *дүмәй*, *сартанбай, көршәк, акһуйылдар, карабалтыр*, *сук төйгөстәр*, *төлкөләр, кыргыҙҙар*, *каракалпактар*, тсукты. Аҙаҡтан *татарҙар*, *бөйәндәр* араһы өҫтәлгән. Дүмәйҙәргә хәҙер *Кужахмәтов*, *Котлобаев*, *Мөхәмәтйәнов*, ҡарағалпаҡҡа *Тансыккужин*, *Гәҙелшин*, ҡарабалтырҙарға *Йәнйегетов*, ҡаҙаҡтарға

*Ҡаҫырғалин*, ҡырғыҙҙарға *Бикташев* фамилиялы кешеләр ҡарай. Тамғалары төрлө сифатта: × (әүернә), Δ (бетеү), т (сүкеш),  , , ♀ (сүмес),  (эмзә). Хәҙерге ваҡытта ауылды ара буйынса ғына түгел, ә урам исеме менән бүлеп йөрөтөү бар. Мәҫәлән: *Йәштәр урамы, Килмешәктәр урамы, Хәйләкәрҙәр урамы* (урлаша торған берәү йәшәгән ул урамда), *Мунса урамы* (ике ҡатынға мунсанан өй һалып биргәндәр), *Тауйаҡ урамы, Бажалар урамы.* Был мәғлүмәттәр ауылда йәшәгән мәктәп уҡыусыларын ҡыҙыҡһындырырға тейеш. Әгәр ҙә инде кем дә булһа берәү ошо әйтелгәндәрҙең дөрөҫлөгөн тикшерергә ниәтләһә, бигерәк тә яҡшы.

## «ҠЫҢҒЫР» ҺҮҘЕ НИМӘНЕ АҢЛАТА?

Республикабыҙҙың төрлө төбәктәрендә *ҡыңғыр* һүҙенән яһалған атамалар бар. Мәҫәлән, **Ҡыңғыр-Мәнәүез** ауылы (Бишбүләк районында), *Ҡыңғыр йылғаһы* (Бөрө һәм Бишбүләк райондарында), *Ҡыңғырбаш* (Ейәнсура районында), *Ҡыңғырташ* (Баймаҡ районында), *Ҡыңғырсатау* (Дүртөйлө районында), *Ҡыңғыр һаҙы* (Мишкә районында) һ. б.

«Ҡыңғыр» һүҙе хәҙерге башҡорт телендә бар, әммә ул киң ҡулланылмай. Шунлыҡтан уны күп кеше белмәй. Халыҡ ижадында, ҡайһы бер яҙыусыларыбыҙҙың әҫәрҙәрендә *ҡыңғыр* һүҙе осрай. Халыҡта «Ҡырыҫланған эт ҡыңғыр йүгерер», «Ҡыңғыр заманға ҡырын бүрек» тигән мәҡәлдәр бар. «Ҙур ҡапҡасы ҡыңғыр ята, сәйнүк уны дыңғырлата» тип яҙған бер шиғырында Р. Басимов тигән шағирыбыҙ. Был миҫалдарҙа *ҡыңғыр* һүҙе «ҡырын» мәғәнәһендә ҡулланылған. Ә тау-таш атамаларында *ҡыңғыр* «кәкре» төшөнсәһендә ҡулланыла. *Ҡыңғырташ* тимәк «Кәкре таш», Ҡыңғырсатау «Кәкерсә тау» һ. б. Балҡар, ҡараим телдәрендә лә *ҡыңғыр* һүҙе ошо мәғәнәлә йөрөй.

# МАҠАР

**Маҡар** — Ишембай районындағы ҙур ауылдарҙың береһе, шул исемле ауыл советы үҙәге. Элегерәк ул **Маҡар** районының үҙәге булған. Райондар ҙурайтылған саҡта, ул Ишембай районына ҡушыла.

**Маҡар** бынан 146 йыл элек Юрматы волосы Илсек-Тимер түбәһенең 10-сы йортона ингән булған. Күршеләге **Янрус, Иҫәкәй, Түбәнге Ташбүкән, Үрге Ташбүкән, Ибрай** ауылдары **Маҡар** менән бер йортҡа ҡараған. **Маҡарҙа** ул саҡта бөтәһе 522 кеше йәшәгән. Ә инде 200 йыл элек **Маҡарҙа** 200-ләп кеше йәшәүе билдәле. Унда барыһы 56 өй иҫәпләнгән.

Р. Ғ. Кузеев материалдары буйынса **Маҡар** ауылы элек юрматы ҡәбиләһенең ҡармыш ырыуына ҡараған. Ауылда XIX быуатта 5 ара булған. Улар *муҡшы*, *әтәмәс, ҡалмаҡ*, *ҡалмыш* һәм *аҡҡүбәк* тип йөрөтөлгән. 1972 йылда миңә **Маҡар** ауылында булып, унда халыҡ хәтерендә һаҡланып ҡалған аралар исемен яҙып алырға тура килде. 84 йәшлек Абдуллин Сәлимулла Ғәбит улы **Маҡар** ауылында (һаналғандарҙан башҡа) *көлгөт*, *таңғатар*, *күсәр* тигән аралар булыуын әйткәйне. Унан тыш хәҙерге *Баҙар урамы* менән *Аҫҡы урам* да айырым исем менән йөрөтөлгән ара булған, һәр араның үҙенә башҡа бер тамғаһы булған. **Маҡар** ауылында борон 8 төрлө тамға ҡулланылған.

1841 йылдарҙа **Маҡар** ауылы кешеләре йәйләүҙәргә сығып йәшәгән. Абдуллин Сәлимулла олатай ул йәйләүҙәрҙең исемдәрен онотмаған икән. Ауыл *Сауҡайорт, Сураш*, *Ереклейылға*, *Шәреп утары* һәм *Күксә* исемле урындарҙа йәйләгән. 1793 йылда **Маҡар** *Һикәҙе* йылғаһының уң ярында урынлашҡан булған. Әле ул *Аллағеүәт* йылғаһын һыулай. Бынан 200 йыл элек **Маҡарҙа,** күрше ауылдарҙа йәшәгән халыҡ малсылыҡ менән генә түгел, ә игенселек менән дә шөғөлләнгән. Унан башҡа бойҙай, һоло, борсаҡ, ҡарабойҙай һәм арпа ла сәскән халыҡ. Был мәғлүмәттәрҙең барыһы ла хәҙер **Маҡарҙа** йәшәгән кешеләрҙә ҡыҙыҡһыныу уятыуы ихтимал.

**Маҡар** ауылының ҡасан барлыҡҡа килеүен асыҡлауы ауыр, сөнки быны сағылдырған яҙма ҡомартҡылар һаҡланмаған. Әммә 1793 йылда ул 56 өйҙән торған, 274 кеше йәшәгән **Маҡар** үҙ ваҡыты өсөн ҙур ғына ауыл иҫәпләнгән. Йәшәгән кешеләре күп, йорттары байтаҡ булғас, ауыл үҙе лә оло ғына үҫеш юлы кисергән булырға тейеш. Халыҡта һаҡланып ҡалған легенда-риүәйәттәрҙә **Маҡар** ауылына тәүге нигеҙ таштарын һалған кешеләрҙең береһе **Маҡар** исемле булған. Ул XVI быуатта, Иван Грозный заманында Татарстан яғынан килгән, тип һөйләне Сәлимулла олатай. Ҡайһы бер сығанаҡтарға ҡарағанда, борон *маҡар* исемле ырыу булыуы билдәле. 1735 йылда Ырымбур экспедицияһының етәксеһе Иван Кирилов яҙған бер документта юрматы ҡәбиләһендә 6 ырыу булып, шуларҙың береһе *маҡар*, икенсеһе *әрмет* тип аталған. *(Ҡара:* Материалы по истории Башкирской АССР. М.,-Л.: Изд-во АН СССР, 1949. 495—496-сы биттәр). Р. Ғ. Кузеев *маҡар*

исемле айырым ырыу булыуын танымай, сөнки был мәғлүмәт башҡа сығанаҡтар менән раҫланмай. Беҙҙең уйыбыҙса, маҡар — ырыу дәрәжәһенә үҫеп етмәгән аранан (аймаҡтан) ҙурыраҡ этник берәмектең исеме. Нисек булһа ла *Маҡар* — кеше исеменән алынған ауыл.

*Маҡар* һүҙе сығышы менән ғәрәп теленә барып тоташа. Ғәрәпсә *мэккяр* тигән «бик хәйләкәр, сеп-сей алдаҡсы» кешегә әйтелә торған һүҙ бар. Кешенең ниндәйҙер сифатын сағылдырған һүҙ йыш ҡына кеше исеме булып ҡулланыла. Ғәрәп телендә мәҡар тигән «йәшәй торған урынды, ерләшкән төп урынды» белдергән һүҙ ҙә (маҡам һүҙенең синонимы) бар. Бының да ер-һыу һәм кеше исеме урынында йөрөүе ихтимал.

# МӘМБӘТ (ҠАҘАҠ, ИҪӘНҒОЛ) АУЫЛЫ

Хәйбулла районындағы Мәмбәт ауылы XVIII быуат аҙаҡтарында хәҙер Йылайыр районына ҡараған Һабырҙан айырылып сыҡҡан. Ауылдың *Мәмбәт, Ҡаҙаҡ* тигән атамалары шуға бәйле: *Мәмбәт* — боронғо ваҡытта ҡаҙаҡтарға яһалған яуҙан алып ҡайтҡан малайға бирелгән исем. Уны Һабыр ауылына нигеҙ һалған *Һабыр Ҡотлобәков* үҙенә алып үҫтерә. Ир ҡорона еткәс, уны Мәмбәт ауылына айырып сығара. *Мәмбәттең* нәҫеле ҡаҙаҡтан булғанға, унан таралған кешеләрҙе *ҡаҙаҡтар* тип, ауылдың үҙен Ҡаҙаҡ ауылы тип йөрөткәндәр. Ауылдың Иҫәнғол тигән исеме *Мәмбәт* ҡарттың *Иҫәнғол* тигән улынан килә. Ауылға Иҫәнғол тигән атама һуңғараҡ бирелгән. Сөнки 1846 йылғы рәүиздә 14-се класлы түрә, 9-сы кантон ярҙамсыһы 43 йәшлек Иҫәнғол Мәмбәтов Һабыр ауылы кешеһе итеп теркәлгән. XIX быуат урталарында Мәмбәт ҙур ғына ауыл булған. Унда барлығы 252 кеше йәшәгән, уларҙың 122-һе ир-егет, 110-ы ҡатын-ҡыҙ булған. Был кешеләр сығышы менән ҡаҙаҡтың Урта Йөҙөнөң *арғын* тигән ырыуына бәйле булһалар ҙа, үҙҙәрен үҫәргән ҡәбиләһенең *сурай* һәм *мәмбәт* ырыуына ҡараған башҡорттар тип иҫәпләгәндәр. Мәмбәт ауылы халҡы элек *ашамдар, ҡыуандыҡтар, сибаштар, сураштар, татарҙар, туҡмандар, шамтырҙар* тигән араларға бүленгән булған. Тамғалары ошо һүрәттә  . Мәмбәт ауылы тарихы һәм уға нигеҙ һалған *Йәнһары (Мәмбәт)* тураһында төрлө риүәйәттәр бар.

*Мәмбәт* ҡарт әлеге *Таналыҡ* буйына ултырып ныҒынғанға хәтлем *Һаҡмар, Быҙаулыҡ* һәм *Таналыҡ* буйында 10-дан артыҡ урында йәшәп ҡарай, сөнки ырыуҙаштары, *Һабыр* ҡарттың үҙ ҡатынынан булған улдары *Мәмбәткә* ерҙе тиҙ генә бүлеп бирмәйҙәр. Мәмбәт ырыуы шәжәрәһендә был турала бик асыҡ итеп яҙылған: «Мәмбәт был ер һәм байлығы өсөн иштәктән (йәғни шешәй башҡорттарынан. — *Авторҙар)* күп йәбер-яфа күреп, 75 йәшендә фани донъянан әхирәт йортона күсә. Ай, Мәмбәт атабыҙ балаларының динен һаҡлап, Арғындан бында күстек, *Һаҡмарға* күстек, *Һаҡмарҙа* иштәк тыныслыҡ бирмәгәс, балаларҙың тыныс йәшәүен уйлап, *Айыулыға* күстек. *Айыулынан* ер һайлап, *Таштуғайға* күсеп, төрлө михнәттәр сигеп, яфа тарттыҡ». Шешәй башҡорттары *Мәмбәт* Ҡәиповҡа йәшәү урынын үҙ биләмәләренең ситендә ятҡан ерҙәрҙән бүлеп бирәләр. Үҙ ҡанаты аҫтына алһалар ҙа, Һабыр балаларында Мәмбәт нәҫелен барыбер сит тоҡом тип ҡарағандар, шуның өсөн уға йәшәү урынын бер юлы ғына бирмәгәндәр. Мәҫәлән, ул Преображенский заводы (Йылайыр), *Һаҡмар* буйында *Бараҡал* йылғаһы тамағында, *Айыулы* йылғаһының *Быҙаулыҡҡа, Быҙаулыҡтың Таналыҡҡа* ҡойған ерҙәрендә, хатта хәҙерге Ырымбур өлкәһендә *Аҡсура* йылғаһы буйында ла нигеҙ ҡорорға самалап ҡарай. Тик Таштуғайҙы түңгәүер башҡорттары бушатҡас ҡына, тынысҡа сығып, нығынып, ауыл ҡороп ебәрә. XVIII быуатта төҙөлгән карта-

ларҙа **Мәмбәт** ауылының күсеп йөрөгән бөтә урындары ла күрһәтелгән. Тик уларҙың ҡайһы берҙәре **Һабыр** ауылы исеме менән теркәлгән. Хәҙерге исемдәре йәйәләр эсендә бирелгән.

Ауылдың тарихын ундағы ер-һыу атамаларынан, халыҡтың телендә һаҡланып ҡалған һүҙҙәрҙән дә белеп була. Мәҫәлән, *Ҡотләхмәт Ҡара ҡыуғаһы, Әҙелсай үҙәге* тигән атамалар һәм *сал* «аҡһаҡал», ҡараған «селек тубылғының бер төрө», йыраусы «йырсы, сәсән», бөгәү «канал, канау», түңкәү «түң» мәғәнәһендә йөрөгән һүҙҙәр, һис шикһеҙ, уларға ҡаҙаҡтан килеп ингән.

**Мәмбәт** ауылы ялан ерҙә урынлашһа ла, байтаҡ ҡына ер-һыу атамалары һаҡланып ҡалған. Мәҫәлән: *Таналыҡ, Торжы (Туржы), Өлкән Маҡан, Урта Маҡан, Түбәнге (Кесе) Маҡан* йылғалары, *Ерәнат күле, Вәли күле*, *Хәммәт куле, Ғилман күле, Оҙонкүл, Үмәр (Ғүмәр) күле, Фәтҡулла куле, Бирлекүл, Вәлит күле, Аҡбалсыҡлы күл, Маҡан күле, Сәскәкүл, Фатима ҡоҙоғо* кеүек йылға, күл, ҡоҙоҡ; *囉штуғай, Алатау (Мәмбәт тауы), Айғыртау*, *Өлкәнтау* тигән уба, тау атамалары; *Оҙонташ, Дүкән Ҡалтай түңе, Сыбағайын үҙәге*, *Ҡалтай үҙәге*, *Сапуҡ утрауы, Бирлекүл аралы, Яуғыр соҡоро* кеүек тау-таш, соҡор-үҙәктәр; *Ситдыҡ баҡсаһы, Ҡыҙырым уҫаҡ ҡыуаҡлығы, Сыбағайын* кеүек ер-урын, баҡса атамалары һаҡланған. Быларҙың һәр береһенең тарихы бар. Уларҙың күбеһенең тарихы Мәмбәт ырыуы шәжәрәләрендә яҙып ҡалдырылған («Мәмбәт шәжәрәһе», Өфө, «Китап», 1994).

## МӘНДЕМ ҠАСАБАҺЫ

*Мәндем* йылғаһының башланған еренән бик үк алыҫ булмаған, тирә-яғынан бейек тауҙар менән уратып алынған уйһыу урында Ғафури леспромхозының *Үҙбәйҙәк, Быяла, Һикәште, Бейәлекүл* урман участкалары эшселәре йөрөп ағас әҙерләгәндәр, сөнки үҙҙәре йәшәгән участкаларҙа ағас бөткән булған. Ә халыҡ хужалығына ағас кәрәк. Йәйәү йөрөп эшләгәс, хеҙмәт етештереүсәнлеге лә түбән. Шунлыҡтан леспромхоз етәкселеге 1959 йылда **Мәндем** башындағы бер яланда яңы ҙур эшселәр ҡасабаһы төҙөргә ҡарар итә. Был ҡасабала юғарыла һанап үтелгән ваҡ-ваҡ дүрт участканың эшселәре ғаиләләре менән күсеп киләләр. Тәү башта күсеп килгән халыҡ тарҡау урынлаша. Бер төркөм кешеләр йылғаның арғы яғына, икенселәр йылғаның бирге яғына, өсөнсөләр йылғаның дуғаланып киткән үҙәне буйына ултыра. Шуға күрә лә тәүҙә ауылдың исеме өсәү була. Береһе — **Сыуаш Ҡарамалыһы**, икенсеһе — **Фәхри** яланы, өсөнсөһө **Күҫәкселәр урамы** тип йөрөтөлә. Шулай ҙа ауыл ҙурая төшкәс, өс өлөштө рәсми рәүештә бер исем менән **Мәндем** тип атайҙар. Урындағы кешеләр **Мәндембаш** тип тә йөрөтә.

Ҡасабала тәүге ваҡытта башланғыс мәктәп кенә асыла. Балалар, махсус бина төҙөлөп бөтмәгәнлектән, барактарҙа уҡығандар. Артабан улар *Ташлы, Сәйетбаба* урта мәктәптәрендә уҡыуын дауам иткәндәр. Хәҙерге көндә ҡасабала урта мәктәп, элемтә бүлексәһе, 3 магазин, клуб, мунса, икмәк бешереү йорто, радиоузел бар. Ҡыҫҡаһы, эшселәр һәм уларҙың ғаиләһе өсөн кәрәкле социаль инфраструктура булдырылған.

**Мәндем** ҡасабаһы тәбиғәте ер-һыу атамаларына бай. Ниндәй генә атаманы алма, һәр береһенең тарихы бар. Урындағы халыҡ уны онотмай. Мәжлестәрҙә, йыйылыштарҙа, эш араһында ял иткән ваҡытта ла йәштәргә һөйләп ишеттерә.

Иң ҙур йылғалары *Мәндем.* Унан башҡа *Тирәкле, Ҡараташ, Шаҡитәр, Батҡаҡлы* һәм *Үҙбәйҙәк* тигән йылғалар бар. Тау-таштың, күл-үҙәндәрҙең иҫәбе-хисабы ла юҡ. **Ҡараташ тауы, Бабайоскан тауы, Әбей яланы, Фатиматаш, Бабай яланы, Сергей долы, Йылытау (Теплая гора), Ҡабыҡҡыуыш, Һалдат боролмаһы (Солдатский поворот),** Ташлы һәм башҡалар. Артабан шуларҙың бер нисәһенең барлыҡҡа килеү тарихы.

## ӘМИР КҮПЕРЕ

**Мәндем** ҡасабаһына нигеҙ һалынғас та уға машина юлы төҙөй башлайҙар. Йылғалар, бәләкәй үҙәктәр аша күперҙәр һалырға кәрәк булған. *Әмир* исемле кешенең 6 кешенән торған бригадаһы күпер эшләгән. Ҡарҙар иреп, һыу таша башлау менән үк уларҙың күперен яҙғы һыу йыуып алып киткән. Күперҙе төҙәткәндәр. Төҙәтеүселәре *Әмир* бригадаһы түгел, икенселәр булһа ла, улар «Әмир күпере»н төҙәттек», — тигәндәр. Шулай итеп, күпер тәүге төҙөүселәр бригадирының исеме менән атала башлаған.

## ҺАЛДАТ БОРОЛМАҺЫ (СОЛДАТСКИЙ ПОВОРОТ)

**Мәндем** ҡасабаһынан 9 км алыҫлыҡта Йылытау (Теплая гора) тигән оҙон, текә тау бар. Тау итәгендәге 15 метр тәрәнлектәге соҡорҙо урап үткән тау юлында армиянан яңы ғына ҡайтҡан Сергей исемле егет утын тейәлгән машинаһы менән ошо боролмалағы соҡорға осоп үлә. Ошонан һуң тауҙағы бер ҡулға *Сергей долы (Сергеев дол),* боролмаға *Һалдат боролмаһы (Солдатский поворот)* тигән исем бирелә.

## БАБАЙ ЯЛАНЫ

Элекке замандарҙа башҡорттар кәсебенә ҡарап төрлө урындарҙа йәшәгәндәр. *Ғәлим* тигән ҡарт ҡортсолоҡ менән шөғөлләнгән. Бал ҡорттары ҡарау өсөн уңайлы булғанлыҡтан, ул бер бейек тау башындағы яланда үҙенең ҡорттары, мал-тыуары менән көн күргән. Йорт һалған, кәртә-ҡура төҙөгән, ғаиләһе менән шунда торған. Йәй көндәрендә мал көткән, умарта-солоҡтарын ҡараған, ҡыш көндәре һунарға йөрөгән. Улдары тыуып ир-ҡорона тулғас, *Ғәлим бабай* үлеп киткән. Шунан бирле был яланды «Бабай яланы» тип йөрөтәләр. Ғәлим бабайҙың балалары Ғәлимов фамилияһын алған. Хәҙерге ауылдағы *Дәүләтбай., Хаммат, Әүхәт Ғәлимовтар* ошо *Ғәлим* ҡарттың ейәндәре була инде, тип һөйләне беҙгә 1902 йылда тыуған Ғәлиев Ғәриф ағай Сәлим улы.

## ӨФӨ

*Тау башында балкый бер ҡала,*
*Ул ҡала Өфө тип атала...*

Шағирә һәм актриса Рәғизә Янбулатова яҙған шиғыр юлдары бөтәбеҙгә лә таныш. Тау башындағы Өфө — Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы. 2001 йылда уның төҙөлә башлауына — 427 йыл. Өфө тарихы республикабыҙҙа йәшәгән урыҫ, татар һәм башҡа халыҡтарҙың күпләп күсеп килеүе, илебеҙҙең әлеге демографик хәлен, иң мөһиме, төп халыҡ — башҡорттарҙың урбанизацияланыу үҙенсәлектәрен аңлатыу өсөн ҡиммәтле сығанаҡ булып тора. Шуға күрә лә Өфөнөң төҙөлөү тарихын һәр кемгә, бигерәк тә йәштәргә белеү фарыздыр.

Билдәле булыуынса, Башҡортостан Рәсәй дәүләтенә үҙ ирке менән 1552—1557 йылдар араһында ҡушыла. Был хәл тейешле килешеүҙәр төҙөү менән тамамлана. Килешеү буйынса Башҡортостан Рәсәйгә күпмелер кимәлдә яһаҡ түләргә тейеш була. Яһаҡ түләү урыны булып Ҡазан ҡалаһы тәғәйенләнә. Яһаҡты башҡорттар үҙҙәре алып барырға тейеш. Уҡыусылар үҙ иғтибарын ошо һуңғы хәлгә иғтибар итһәләр ине. Яһаҡты Урыҫ дәүләте баҫҡаҡтар аша түгел, ә башҡорттарҙың үҙҙәренең ҡулынан алған. Ҡайһы бер сығанаҡтарҙа, Башҡортостан Мәскәүгә үҙ ирке менән ҡушылмаған, ә баҫып алынған, тип әйтелә. Улай булһа, баҫҡынсы ил яһаҡты үҙе йыйып алыр ине. Яһаҡты түләүсе үҙе хилтергән ваҡытта яһаҡтың хатта күләмен, составын тикшереп тә булмай бит. Шулай итеп, Мәскәү дәүләте яһаҡ йыйыуҙы 22 йыл буйы башҡорттарҙың үҙенә ышанып тапшырған. Тимәк, бында ике яҡ та үҙҙәрен тиң партнер тип иҫәпләгән, шуға ла бында Рәсәйҙең Башҡортостанды баҫып алыуы тураһында һүҙ булырға тейеш түгел.

Ҡазан ҡалаһы алыҫ булғанға 1573 йылда башҡорттар, яһаҡ түләү урынын уңайлыраҡ ергә күсереүҙе һорап, Урыҫ дәүләтенә мөрәжәғәт итә. Был турала Рәсәй Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы Петр Иванович Рычков былай тип яҙа:

«По достоверным выправкам нашлось, что башкирцы о построении сего города челобитье свое имели в 7081 году (то есть от Рождества Христова 1573) не только для того одного, чтобы им положенный ясак тут, внутри их жилищ, платить было льготнее, но и от неприятелей бы иметь здесь убежище и защиту» *(Ҡара:* П. И. Рычков. Топография Оренбургская. СПб., 1762. 371, 372-се биттәр).

Килтерелгән өҙөктә Өфөнө төҙөү өсөн һайланған урынға иғтибар итергә кәрәк. Был тирәлә, берҙән, элекке Ҡазан, Нуғай, Себер, Уса даруғалары сиктәре киҫешә, икенсенән, һайланған урын башҡорттар элек яһаҡ түләгән өс ханлыҡтың (Ҡазан, Нуғай, Себер) баш ҡалаларынан байтаҡ уҡ алыҫ, өсөнсөнән, Башҡорт иленең цивилизациялы үҙәге — баш ҡаланың хәүефһеҙлеге лә хәл ителергә тейеш була. Күрәһең, Өфө урыны тураһында П. И. Рычков «внутри их жилищ» тип юҡҡа ғына яҙмаған. Үҙ иленең ҡап уртаһында ҡала төҙөүгә рөхсәт биргәс, тимәк, башҡорттар ҙа үҙ сиратында ул осорҙа Урыҫ дәүләтенә ышанған.

Юғарыла П. И. Рычковтан килтерелгән өҙөктән тағы бер нәмәне аңлатып үтергә кәрәк. Унда, **Өфө** ҡалаһын төҙөүҙе башҡорттар үҙҙәре һораған, тип әйтелә. Ошо фекерҙе П. И. Рычков 1776—1777 йылдарҙа яҙылған «Ырымбур губернаһының топографик лексиконы» тигән хеҙмәтендә лә ҡабатлай. Яһаҡ түләү урыны булараҡ яңы ҡала төҙөү тураһында башҡорттар үҙҙәре һораны тигән фекер 1569 йылғы урыҫ сығанаҡтарында ла теркәлгән (*Ҡара:* История Уфы. Уфа, 1981. 21-се бит). Бында беҙҙе башҡорттарҙың үҙ иленең урталыҡтағы өлөшөндә ҡала төҙөүен һорауы тураһындағы мәғлүмәттәрҙең урыҫ телендәге сығанаҡтарҙа йыш ҡабатланыуы уйландыра төштө. Әлбиттә, **Өфө** ҡалаһын төҙөү кәрәклеген башҡорттар үҙҙәре күтәргән тигән фекер юрматы шәжәрәһендә лә бар. Тик бындай ҡала юрматылар ерендә түгел, ә мендәрҙең ерендә төҙөлә. Ә меңдәрҙең шәжәрәһендә яһаҡ түләү өсөн яңы ҡала төҙөү кәрәклеге тураһында мәғлүмәт ни эшләптер сағылмаған. Бында уйланырға урын бар, сөнки **Өфөнә**н 19 йыл элек 1555 йылда, йәғни Ҡазан баҫып алынғандан һуң өс йыл үткәс, Бөрө ҡалаһы төҙөлә. Был турала «урыҫ тарихы фәненең атаһы» Василий Никитыч Татищев бик асыҡ итеп яҙып ҡалдырған:

«Бирек, город Башкирской провинции при реке Белой и устья реки Бири... Оный в 1555 году первый русскими построен и от русских назван Челяднин, от построителя. Оное имя мало кто знает, особливо, что о том, в истории царя Ивана Васильевича нет за тем, что от 1550 года почитай все утрачено, а остались по разным краткие записки» *(Ҡара:* В. Н. Татищев. Лексикон Российский, исторический, географический, политический и гражданский. СПб, 1793).

1555 йылда **Бөрө** ҡалаһы төҙөлә төҙөлөүен, әммә уға оҙаҡ йәшәргә яҙмаған булып сыға, сөнки күп тә үтмәй ул башҡорттар тарафынан яндырыла. **Бөрөнөң** яндырылыу сәбәбен беҙ был ҡаланы һалыу өсөн урыҫтарҙың бындағы ерҙең төп хужалары — башҡорттарҙан рөхсәт алмауындалыр, тип фараз итәбеҙ. Башҡорттар үҙ ерен борон-борондан күҙ ҡараһы кеүек һаҡлаған. Рөхсәтһеҙ башҡорт ерендә бер кемдең дә ниндәй ҙә булһа төҙөү эше алып барырға хаҡы булмаған. Шуға ла яһаҡ түләү урыны булараҡ ҡала төҙөлөүгә башҡорттарҙың ризалығын алғас ҡына, урыҫтар тарафынан **Өфө** ҡалаһын төҙөү башлана. Урыҫ авторҙарының **Өфөнөң** башҡорттарҙың үҙ һорауы буйынса төҙөлөүен бер нисә тапҡыр ҡабатлап яҙыуы тап ошоноң менән аңлатыла булыр.

Башҡорттар яһаҡ түләргә яҡын, дошмандарынан һаҡланырға уңайлы ҡала төҙөргә рөхсәт бирә биреүен. Ысынбарлыҡта иһә уның урынына үҙ биләмәләренең уртаһында Рәсәй империяһының мәнфәғәттәрен күҙәтеүсе ҡәлғә, нығытма барлыҡҡа килә. Иң тәүҙә ҡала төҙөләсәк урындағы мең башҡорттары үҙ ауылдарынан һөрөлә. Ҡала төҙөү өсөн бер башҡорт та йәлеп ителмәй. Ул ғына ла түгел, буласаҡ ҡәлғә, нығытма тирәһендә ултырған бөтә башҡорт ауылдары ла бөтөрөлә, сөнки ер ҡалала йәшәгән стрелецтар, пушкарҙар, офицерҙар, дворяндарға биләмәләр өсөн кәрәк була. Тимәк, Башҡорт иленең уртаһындағы **Өфө** Рәсәй дәүләте тарафынан баштан уҡ башҡортһоҙ ҡала итеп планлаштырыла. Ошо хәл 427 йылдан һуң да үҙен һиҙҙертә. Мәҫәлән: **Өфөлә** хәҙер ҙә башҡорттар һан яғынан аҙсылыҡты тәш-

кил итә, социаль йәһәттән дә башҡа халыҡ вәкилдәренә ҡарағанда уларҙың хәле хөрт.

Рәсәй батшалығын XVI быуатта үҙ территорияһын төрки халыҡтар иҫәбенә киңәйтеү сәйәсәтенән бер башҡорттар ғына зыян күрмәгән. Иң тәүҙә 1552 йылда Ҡазан ҡалаһы баҫып алына. Шунан һуң **Өфө** менән бер ваҡыттарҙа Иҙел-Волганың урта ағымында һамар, Көнбайыш Себерҙә Төмән (Чимги-Тура) ҡалаларына нигеҙ һалына башлай. Шулай булғас Өфө ҡәлғә-нығытмаһының 1574 йылда төҙөлә башлауы — Рәсәй империяһының көнсығыш сәйәсәтенең бер өлөшө. Өфө тарихы буйынса рәсми әҙәбиәттә элек әйтеүе мөмкин булмаған яңы фекерҙәр, беҙҙеңсә, ошоларҙан ғибәрәт. Тарихи ысынбарлыҡтың дөрөҫлөккә тап килеүен **Өфө** ҡалаһының исемдәре лә раҫлап тора.

**Өфө** ҡалаһы XVI быуатта өс исем йөрөткән: **Туратау, Имәнҡала** һәм **Өфө**. Уларҙың мәғәнәләре тураһында һүҙ алып барғанда, Туратау атамаһының бороню төрки телендәге *тура* «ҡала, ҡәлғә» һәм башҡорт теленең *тау* һүҙҙәренән яһалғанын һәм хәҙерге башҡорт теленсә, «**Ҡалатау**», йәғни «ҡалалы тау, ҡала булған тау» тигән мәғәнәгә эйә булғанын әйтергә кәрәк. Ә инде **Имәнҡала** атамаһын аңлатып тороу ҙа кәрәкмәй, сөнки был исем **Өфө** ҡәлғәһе имән диуар менән уратып алынғандан һуң барлыҡҡа килгән. Иң ауыры ҡаланың өсөнсө исемен — **Өфө** атамаһының сығышын һәм мәғәнәһен асыҡлау. Шуға күрә исем тураһында төрлө фараздар бар.

**Өфө** исемен фин-уғыр, иран, балтик телдәренән сығып аңлатырға тырышыуҙар булды. Мәҫәлән, мари ғалимы Ф. И. Гордеев *Өфө, Өфәле* атамаларын литва телендәге *упе* «йылға», *упеле,* «бәләкәй йылға» һүҙҙәренә бәйләп аңлатырға мөмкин, тип иҫәпләй. Үзбәк ғалимы М. Т. Мөьминов Өфө ҡалаһы исеме нигеҙенә боронғо иран телендәге *ап* «һыу» тигән һүҙ һалынған тигән фараз әйтә. *Өфө* атамаһын фин-уғыр телдәре нигеҙендә аңлатҡан фараздар ҙа байтаҡ. Мәҫәлән, М. В. Лоссиевский, Йософ Гәрәй, Р. Әхмәров һәм башҡалар фин-уғыр телдәрендәге һүҙҙәрҙән яһалғанын иҫбат итергә тырыша. (Был турала «История Уфы» китабын ентекләберәк ҡара.)

Башҡорт теленә бәйләп аңлатыуҙар ҙа байтаҡ ҡына. Борон-борондан Уралды үҙ төйәге иткән башҡорттарҙың, әлбиттә, боронғо Башҡортостандың уртаһында урынлашҡан боронғо ҡалаға исем биреүҙә туранан-тура ҡыҫылышы бар. Эштең асылы ниндәй һүҙгә бәйләп һәм нисек аңлатыуҙа тора. Әгәр ҙә Ғәбделәхәт Уйылданов үҫәргән ҡәбиләһе бейе Әфтәбейгә, В. Шевич у фа «ҡараһыу» тигән һүҙгә бәйләй, Пятигорск институты профессоры В. И. Филоненко *у ф а к* «ыуаҡ» һүҙенән сығара икән был атаманы, улар үҙ фекерҙәрен тейешле тарихи һәм лингвистик дәлилдәр менән нығытырға бурыслы. Бында күңелде ҡырғаны шул: юғарыла һанап (хатта һанамай) үтелгән бөтә авторҙар ҙа **Өфө** атамаһы этимологияһы тураһында тикшереүҙәр алып барғанда, был исемдең **Өфө** тигән башҡорт варианты барлығын бөтөнләй иҫәпкә алмайҙар, ҡаланың тик **Уфа** формаһын ғына тикшерәләр. Ә бындай хәл этимология фәненә ҡабул ителгән ҡағиҙәләргә бер нисек тә һыймай.

**Өфө** ҡалаһы һәм *Өфө* йылғаһы исемдәренең барлыҡҡа килеү законсалыҡтары бер төрлө. Шуға ла һүҙҙе *Өфө* йылғаһының исем алыу тәртибен асыҡлауҙан башларға кәрәк.

*Өфө* йылғаһы буйлап, тамағынан алып башланған еренә хәтлем төрлө-төрлө башҡорт ҡәбиләләре йәшәй. Шулар араһындағы өпәй ҡәбиләһе башҡорттары телендә *Өфө* йылғаһы һәм хәҙерге **Өфө** ҡалаһы **Өпә, Өфә, Үфә** тип йөрөтөлә. Свердловск өлкәһендәге **Уфалей** ҡалаһы *Уфалей* йылғаһы буйында ултыра. Уны ла әпәйлеләр **Өпәле, Өфәле** тип әйтәләр. Бына ошо мәғлүмәт Өфө атамаһының мәғәнәһен аңлауҙа үтә мөһим асҡыс булып тора. Сөнки был формалар атаманың фонетик йәһәттән тарихи үҫешен асыҡларға ярҙам итә.

Боронғо төрки телдәрендә *ф* өнө бөтөнләй булмаған. V — VII быуаттарҙа асылған төрки яҙма ҡомартҡыларында ла был өн сағылыш тапмаған. Бороню төрки телдәренең ·гура вариҫтары булып иҫәпләнгән ҡырғыҙҙарҙа ла *ф* юҡ. Шуға ла ҡырғыҙҙар үҙҙәренең баш ҡалаһының элекке исемен — Фрунзены әйтә алмай ыҙаланғандары билдәле. Ошо мәғлүмәттәрҙең барыһын да иҫәпкә алһаҡ, хәҙерге *Өфө* йылғаһы элек *Өпө* йә *Өпә* формаһында ҡулланылған булып сыға. Ә *өпө*, *өпә* һәм уның ҡалын варианттары *опо, опа* боронғо төркиҙәрҙә һәм монголдарҙа ҡорбан килтерә торған урынды белдергән. Исемдең юҡҡа ғына бирелмәгәнен иҫкә алып, *Өфө* йылғаһы тамағындағы бейек яр борон ҡорбан килтерә торған изге урын булған, тип фараз итергә тулы нигеҙ бар. Был фараз тарихи йәһәттән раҫлана. Әлеге «Зеленая Роща» санаторийы территорияһындағы бер түбәне *Лысая гора* тип йөрөтәләр ине. Унда археологтар, боронғо ҡаласыҡ, убалар табып, төрлө ҡомартҡыларға юлыҡтылар. Тәңреләргә ҡорбан килтереү урыны аҙаҡ *Ағиҙелдең* уң ҡушылдығының исеме булып киткән. Әйткәндең дөрөҫлөгө гидронимика (һыу атамаларын өйрәнеүсе фән) законсалыҡтары менән дә нигеҙләнә. Уның буйынса, йылға кеүек һыу объекттарына исем, ғәҙәттә, уның ағып башланған ерендә түгел, ә тамағында бирелә. *Өфө* йылғаһына ла исем уның *Ағиҙелгә* ҡойған еренә бирелгән. Һәм йылға уның тамағындағы табыныу, ҡорбан килтерә торған изге урын буйынса *Опа* йә *Өпә*$_у$ *Өпө* тип аталған.

Боронғо табыныу, тәңреләргә ҡорбан килтереү урыны тора-бара шул осорҙоң цивилизациялы үҙәгенә әүерелгән һәм ул ике исем менән: Өфө (Өпә) һәм Туратау тип йөрөтөлгән. Туратау һүҙенең хәҙерге башҡорт телендә «Ҡалатау» тигәнгә тап килеүе тураһында алда яҙып үткәйнек инде. Урал ҡалаларын өйрәнеүсе ғалимдар, мәҫәлән, урыҫтар төҙөгән Өфөгә тиклем үк урындағы халыҡтың (уларса: туземецтарҙың) ҙур йәшәү төйәге булған, тип иҫәпләйҙәр *(Ҡара:* Л. £. Иофа. Города Урала. М., 1951). Шулай булғас, хәҙер Иҫке Өфө тип аталған биҫтәләге бейек яр башында ике (Өфә һәм Туратау) исемле ҡаласыҡ булыуы шикһеҙ. Был турала 1574 йылда хәҙерге Дуҫлыҡ монументы тирәһендә, айырып әйткәндә, *Соҡалаҡ (Сутолока)* йылғаһының *Ағиҙелгә* ҡойған урынында ҡалға төҙәүселәр ҙә белгән булырға тейеш. Сөнки ҡалаға исемде Соҡалаҡ йә Туратау тип алмағандар, ә Өфө тигәнен һайлағандар. Ошо хәлгә Ырымбур губернаһы буйынса күп хеҙмәттәр яҙған Г1. И. Рычков та иғтибар иткән һәм 1574 йылғы урыҫ ҡалаһынан хәҙерге Иҫке Өфө тигән урындағы бороню ҡаласыҡтың

исеме ҡушылған булырға тейеш, тип фараз иткән. Был фаразды дөрөҫ аңлау өсөн авторҙың үҙ һүҙҙәрен килтерәйек.

«О звании города Уфы можно догадаться, что оное не вновь ему придано, но паче возобновлено прежнее и сущее то, которым ногайские (башкирские — тип уҡы. — *Авторҙар)* ханы исстари живучи в здешних местах город свой именовали, ибо никакого резону не видно, чтоб городу, построенному над самою рекою *Белою,* коя величиной против реки *Уфы* вдвое больше именоваться по реке *Уфа...»* (П. И. Рычков. Лексикон топографический Оренбургской губернии. Оренбург, т. 1. 1776; т. 2. 1777) (Рәсәй дәүләт китапханаһы. Ҡулъяҙмалар бүлеге. 313-сө (Федоров) фонды).

Тимәк, хәҙерге *Өфө (Ҡариҙел)* йылғаһының *Ағиҙелгә* ҡойған ерендә, унның уң яҡтағы бейек яры өҫтөндә боронғо башҡорттарҙың табыныу һәм ҡорбан килтереү урыны булған. Ул урын *Өпә* тип аталған. Шул изге урын тирәһендә башҡорт хандары йәшәгән төйәк икенсе исем менән *Туратау* тип йөрөтөлгән. Ҡорбан килтереү урыны атамаһы булараҡ *Өпә* яйлап *Өпө*, *Өфә*, *Өфө* формаһына үҫкән. XVI быуаттағы урыҫтарға был исемдәр билдәле булған. Шул боронғо атаманы *Соҡалаҡ* йылғаһының *Ағиҙелгә* ҡойған ерендә 1574 йылда төҙөлгән ҡалғаға исем итеп ҡушҡандар, тик уны Өфө тип түгел, урыҫсалаштырып Уфа тип рәсмиләштергәндәр.

## ТАЛПАҠ ҺҮҘЕ НИ АҢЛАТА?

Был күл Ҡырмыҫҡалы районының Бишауыл-Уңғар ауылы эргәһендә ята. Нимәне белдерә был атама? Ошондай һорау менән йыш ҡына мөрәжәғәт итәләр.

Уны асыҡлау өсөн ошо һүҙ менән яһалған башҡа атамаларға һәм был һүҙҙең диалекттарҙағы мәғәнәһенә иғтибар итергә тура килә.

Салауат, Бәләбәй райондарында *талпаҡ* һүҙенең нәҙек варианты *тәлпәк* менән яһалған урын атамалары булыуы билдәле. Мәҫәлән, *Тәлпәкҡарағай, Тәлпәкҡарағай бөгөлө* (Салауат районы **Ахун** ауылында), *Тәлпәк урманы*, *Тәлпәк баҫыуы; Тәлпәк өҫтө* (Бәләбәй районы **Аҡбаҫар** ауылында) тигән атамалар яҙып алынған.

Һүҙлектәрҙә талпаҡ // тәлпәк һүҙенең мәғәнәһе бөтөнләй бирелмәгән. Әммә уның *ялпаҡ* һүҙенә синоним булып йөрөүен асыҡлап була. Мәҫәлән, *тәлпәк танау* тигән һүҙбәйләнештә ул «ялпаҡ танау» тигән мәғәнәлә ҡулланылған. Өндәрҙең тап килеше (соответствие) йәһәтенән дә был раҫлана (телдә *т* менән *й* өнөн тап килеше бар). Тимәк, *талпаҡ // тәлпәк* һәм *ялпаҡ* һүҙҙәре бер мәғәнәлә ҡулланыла. Ә *ялпаҡ* һүҙе беҙҙең телдә ике мәғәнәлә ҡулланыла: беренсеһе — «тәпәш», икенсеһе — «киң». «Ялпашып ултырған өй» тигәндә лә «яҫы һәм тәпәш» бинаны күҙ алдына килтерәбеҙ, һәҙиә Дәүләтшинаның «Айбикә» повесында, «Ырғыҙ» романында, И. Көҫәпҡолдоң, «Дауыллы көндәрҙә» әҫәрендә «ялпаҡ йөҙлө», «ялпаҡ битле», «ялпағыраҡ йөҙлө» тигән фразеологик берәмектәр осрай. Бында *ялпаҡ* һүҙе «киң» мәғәнәһендә ҡулланылған. Әйткәндәй, ҡараҡалпаҡ телендә талпаҡ һүҙе хәҙер ҙә «киң» мәғәнәһен белдерә. Ошо уҡ мәғәнәләргә *тәлпәк* һәм уның ҡалын варианты *талпаҡ* һүҙе лә эйә, тип фараз итеп була. Бының шулай булыуына тел материалдары ҡаршы килмәй. Ул саҡта, *Тәлпәкҡарағай*, *Тәлпәк урманы* тигән атамалар «тәпәш ҡарағай», «тәпәш урман» тигәнде белдерә. Ә *Тәлпәк баҫыуы*, *Талпаҡ куле* «киң баҫыу», «киң күл» тигәнде аңлата булып сыға.

# ҺАРТТАР ҺӘМ КҮЛМӘК ТЕРМИНЛЫ АТАМАЛАР

XVIII—XIX быуаттарҙа Өфө губернаһының Өфө, Троицкий, Силәбе өйәҙҙәренә ҡараған IV Көнбайыш Башҡорт, V һәм VIII Башҡорт кантондарында әйле ҡәбиләһенең һарт ырыуы кешеләре айырым улусҡа ойошоп йәшәгәндәр. Һарттарҙың дөйөм һаны ул саҡта өс мең кешегә еткән. Әлеге көндә лә сығышы һарттар менән бәйле тип иҫәпләгән ауылдар бар. Мәҫәлән, Башҡортостан Республикаһының Дыуан районындағы **Арый, Мөлкәт, Мәржәнғол** (икенсе исемдәре **Монас, Һуҡалы), Иҫке Хәлил, Яңы Хәлил, Әбдрәшит, Үрге Әпсәләм,** Салауат районының *Ҡарағол (Түбәләҫ Арҡауылы*) ауылының бер өлөшө, Балаҡатай районы **Арслан (Арсланбәк)**, Ҡырмыҫҡалы районы **Һарт-Шишмә** ауылының бер өлөшө, Курган өлкәһендәге Сафакүл районы **Аҙналы, Мансур, Оло Султан, Кескәй Султан, Һарт-Әбдрәш (Сибиряк)** ауылдары әйле ҡәбиләһенең һарт һәм һарт-әйҙе ырыуҙарына ҡарай.

Ауылда йәшәгән халыҡтың бер өлөшө һарт ырыуынан булған өсөн күршеләре ул ауылдың төп атамаһына һарт этнонимын ҡушып йөрөтөр булған. Быға миҫал итеп Иглин районындағы **Ҫарт-Лабау,** Ҡырмыҫҡалы районындағы Һарт-Науруз, Һарт-Шишмә, Әбйәлил районы **Хөсәйен** (икенсе исеме **Тау Һарты**) һәм **Әбделмәмбәт (Ҡыҙыл Һарты**), Баймаҡ районы **Баймырҙа (Һарт)**, Бөрйән районы **Монасип (Һарт),** Учалы районы **Ҡәйепкол (Һарт)**, Шишмә районындағы **Илкәш (Сарт-Хәсән)** ауылдарын алырға була.

Быларҙан тыш ауыл эсендәге һарт исемле аймаҡтар, ара, нәҫелдәрҙең булыуы билдәле. Һарт тигән ара, аймаҡ исемдәре, башлыса, Башҡортостандың көнсығыш яртыһында күп. Шулай ҙа Башҡортостан Республикаһының үҙәк, көньяҡ райондарында, *Дим* буйында ла осрай. Мәҫәлән: Әл шәй районы **Ибрай**, Дәүләкән районы **Ҡаҙанғол**, Ейәнсура районы **Юнай**, Күгәрсен районы **Үрге Бикҡужа, 1-се Бикбулат**, Миәкә районы **Сәтәй-Бөрйән** һәм **Туҡҫанбай** ауылдарында теркәлгән.

Юғарыла килтерелгән миҫалдар ауыл халҡының бер өлөшө һарт ырыуына ҡарағайлығы тураһында һөйләй. Шул уҡ ваҡытта борон был этноним *үзбәк*, *уйғыр*, *тажик*, *Урта Азия*, *Бохара кешеһе* һәм *сауҙагәр* тигән мәғәнәләрҙе лә белдергән. Дөйөм алғанда, һарт этнонимы башҡорттар составында Урта Азия сығышлы кешеләрҙең, ырыуҙың булыуын асыҡ күрһәтеп тора. Был хәл башҡорт шәжәрәләрендә лә сағылған. Улар буйынса һарттар Башҡортостанға борон уның көнсығыш сиктәрен үтеп ингән. Тәүге туҡтап йәшәгән урындары хәҙерге Учалы районы һәм уға күрше **Мейәс** ҡалаһы тирәһендә булған. Әммә һарттар был урында оҙаҡ торлай алмаған. Уларҙың бер өлөшө көнбайышҡа ҡарай китеп, хәҙерге Ҡырмыҫҡалы, Өфө райондары тирәһенә килеп еткән һәм урындағы башҡорттар менән бергә ҡушылып йәшәй башлаған. Айырым ғаиләләр, туғандаш төркөмдәр, күрәһең, көнбайышҡа ҡарай артабан күсеүен дауам иткән. Юҡһа, әлеге Әлшәй, Өфө, Дәүләкән һ. б. райондарҙағы ауылдарҙа һарт этнонимы осрамаҫ ине.

Урта Азиянан килгән һарттарҙың ҡалған ҙур төркөмө Учалы, **Мейәс** тирәһенән артабан төньяҡҡа һәм төньяҡ-көнсығышҡа күскән. Улар хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Балаҡатай, Дыуан, Са-

лауат; Силәбе әлкәһенең Арғаяш, Ҡоншаҡ, Нәҙе-Петровский районы һәм Курган әлкәһенең Сафакүл, Щучан районды тирәһенә үк барып етеп төпләнгән.

Урта Азиянан башҡорттар араһына килгән һарттар үҙҙәре менән бергә ғөрөф-ғәҙәттәрен, йәшәү тәртибен, тормош күреү ысулын ғына түгел, ә тел үҙенсәлектәрен дә алып килгән һәм һаҡлаған булырға тейеш. Сөнки тап һарттар йәшәгән ерҙәрҙә генә башҡорт теленең башҡа һөйләштәренән айырылып торған лексик берәмектәр барлыҡҡа килгән. Шуларҙың береһе булып *күлмәк* һүҙе тора.

*Күлмәк* һүҙе, мәҫәлән Арғаяш һөйләшендә — «күләүек, бәләкәй күл», «йылғаның йәки һаҙлыҡтың ҡамыш үҫмәгән асыҡлығы» тигән, Мейәс һөйләшендә «һыуы күренеп ятҡан һаҙ» тигән мәғәнәләрҙә ҡулланыла. Был диалекталь һүҙ менән бик күп кенә ер-һыу атамалары барлыҡҡа килгән, уларҙың күбеһе (70%) Силәбе әлкәһенең Ҡоншаҡ районында тупланған. Мәҫәлән, төрлө экспедицияларҙа ошо райондың **Ҡорман** ауылында *Абдулла күлмәге*, *Оҙонгүлмәк*, *Өскүлмәк*, *Таргүлмәк;* **Яңы Ҡаҙаҡбай** ауылында *Бигәйембәт күлмәге*, **Бүре** ауылында *Ғәйшә күлмәге*, *Касима күлмәге*, *Кыйғыс күлмәге*, *Һаттык күлмәге*, *Шәкүр күлмәге;* **Хәлит** ауылында *Муктегүлмәк*, **Һарыгүлмәк** ауылында *Һарыгүлмәк* тигән атамалар яҙып алынған. Быларҙан башҡа был районда тағы ла *Ҡашҡала күлмәге*, *Нурый күлмәге*, *Ямантай күлмәге*, *Ярһаҙ күлмәге* исемле күләүектәр бар. Тик уларҙың ҡайһы ауылдарға яҡын булыуы ғына билдәһеҙ.

Арғаяш районында *Таштыгүлмәк*, *Тиҙәккулмәк*, *Әйҙе Куктегулмәк*, *Ҡаракулмәк*, *Кләткүлмәк*, *Ялпаҡкүлмәк* тигән атамалар бар.

Силәбенән ары китһәк, Курган әлкәһендә *Аҡкулмәк* (**Арслан** ауылында), *Ишлегулмәк* (**Зәйнекәйҙә**) тигән атамалар яҙып алынған.

Һарттарҙың тәүге туҡтап киткән урындарында *күлмәк* термины менән яһалған күләүек исемдәре осрай. Мәҫәлән, Әбйәлил районы Ташбулат ауылында *Ҡорогүлмәк*, шундай уҡ исемле күләүек Салауат районының **Миәшәгәр** ауылында бар.

Ошо һанап үтелгән атамаларҙың географияһына иғтибар итһәң, улар, башлыса, Башҡортостан Республикаһының көнсығыш өлөшөндә (Әбйәлил, Салауат райондарында), Силәбе һәм Курган әлкәләрендә генә таралыу алған. Асығыраҡ күҙ алдына килтереү өсөн уларҙы беҙ картаға төшөрҙөк. Күренеүенсә, *күлмәк* һүҙе әй, мейәс һәм һалйот һөйләштәрендә ҡулланыла. *Күлмәк* тигән диалекталь һүҙ менән яһалған атамалар ҙа, дөйөм алғанда, шул уҡ һөйләштәрҙә яҙып алынған. Тик атамаларҙың таралыу территорияһы (йәғни ареалы) *күлмәк* термины ареалына ҡарағанда әҙ генә киңерәк, сөнки улар Курган, Силәбе әлкәләрендә генә түгел, Башҡортостан Республикаһының Әбйәлил, Учалы һәм Салауат райондарында ла таралған.

Картаға һарт, һарт-әйҙе ырыуҙарына ҡараған башҡорт ауылдары төшөрөлгән. Унан һарт ырыуына ҡараған ауылдар ареалы *күлмәк* һүҙе ареалына тап килеү-килмәүен күрергә мөмкин.

Йомғаҡлап шуны әйтергә кәрәк. Телде, бигерәк тә диалектты, топонимия һәм этнография материалдары менән сағыштырып өйрәнеү әлегә тиклем иғтибар ителмәгән проблемаларҙы уңышлы хәл итергә мөмкинлек бирә. Быларҙан тыш башҡа төрки телдәрҙе лә иғтибар


Казань
Волга
Кама
Степной Зай
Уфа
УФА
Ик
Дема
Волга
Кондурча
Белая
Урал
Челябинск
Курган
Бол. Иргиз
Самара
Оренбург
Урал
Сакмара
— күлмәк һүҙле атамалар
— күлмәк һүҙе ареалы
— һарт ырыуы ауылдары

үҙәгенән сығарырға ярамай. Мәҫәлән, *күлмәк* термины 30-ҙан ашыу төрки телдәренең тик бишеһендә (башҡорт, Көнбайыш Себер татарҙары, ҡарағалпаҡ, ҡырғыҙ һәм үзбәк телдәрендә) генә һаҡланған. Был телдәрҙә *күлмәк* һүҙенең мәғәнәләре лә яҡынса тап килә. Үзбәк, Көнбайыш Себер татарҙары телендә, башҡорт телендәге кеүек, «күләүек»; ҡарағалпаҡ, ҡырғыҙ телдәрендә «соҡорҙа йыйылып ятҡан һыу» мәғәнәһендә ҡулланыла. Бындай мәғәнәүи тап килеүҙәр бер ҙә осраҡлы түгел, сөнки улар этнографик материалдарҙың дөрөҫлөгөн (йәғни башҡорттар араһына һарттарҙың Урта Азиянан килеүен) раҫлап тора.

## ӘМИН (ТАШ, ТАШМӘСЕТ) АУЫЛЫ

**Әмин** ауылы — бөрйән ҡәбиләһенә ҡараған ауыл. Бөрйәндәр элек бик күп территорияны биләп торған көслө ҡәбилә булған. Уға ҡараған ауылдар хәҙерге көндә республикабыҙҙың Баймаҡ, Бөрйән, Дәүләкән, Ейәнсура, Күгәрсен, Күмертау, Мәләүез, Әлшәй райондарында һәм һамар, һарытау әлкәләрендә бар. Быны шулай икәнлеген әлеге көндә лә ҡулланылып йөрөгән ер-һыу атамалары раҫлап тора. Мәҫәлән, **Бөрйәнйылға,** Бөрйән (икенсе исеме **Үтәкәй**) тигән ауылдар, *Бөрйән йылғаһы* тигән бер нисә йылға, *Бөрйән ҡойоһо* тигән шишмә һәм башҡа шундай күп кенә атамалар осрай. Бөрйән ҡәбиләһе бер нисә ырыуҙан торған. Әлеге **Әмин** ауылында йәшәгән халыҡтың ата-бабаһы уның монаш исемле бер тармағына ҡараған булған. **Әмин** ауылында, беҙгә билдәле булыуынса, хәҙер *Монаш үҙәге* тигән урын бар. Был атама ана шул монаш тигән ырыу исеменә барып тоташа.

**Әмин** ауылының исеменә килгәндә, шул билдәле. Борон **Әмин** тигән батыр булған. *Әмин* батырҙың даны киң таралған. Быны *Әмин* батырҙың исеме күп кенә легендаларҙа иҫкә алыныуынан белеп була. «Әмин тигән кеше ҙур кәүҙәле, ҡарап тороуға айбарлы, ырыуҙаштары күҙ терәп торған батыр булған», — тип әйтелә Баймаҡ районы **Әмин** ауылында йәшәүсе Ишбирҙина Шәһрибостан апай яҙҙырған легендала. *Әмин* батыр ғына түгел, ә бик оҫта тимерсе лә булған. 1969 йылда «Совет Башҡортостаны» гәзитенең 31 октябрендәге номерында Ғата ағай Сөләймәнов әҙерләп баҫтырған легендала ла был турала әйтелә. *Әмин* кеүек батырҙар йыш ҡына ауылдың, ырыуҙаштарының етәксеһенә әйләнә. Шуға ла ауылдар күп осраҡта батырҙар исеме менән йөрөтөлә. Ауылға ана шундай, *Әмин* кеүек кешеләрҙең исемен ҡушыу — борон-борондан килгән йола. Был ауылға ла халыҡтың оло ихтирамын ҡаҙанған, тыуған ерен дошмандарҙан ҡурсалаусы, халыҡты көрәшкә әйҙәгән *Әмин* батырҙың исеме ҡушылған. Батыр үлгәс тә, уның исеме оҙаҡ ваҡыттар ауыл исеме булып ҡулланылыуын дауам итә. Был инде халыҡтың үҙ батырҙарын ололауы, хөрмәтләүе һәм онотмауына бәйле.

Шулай ҙа ваҡыттар үтә килә, социаль-иҡтисади шарттарҙың үҙгәреүенә бәйле рәүештә, ауылға уның төп исеменән тыш тағы ла исем ҡушылырға мөмкин. **Әмин** ауылына ла **Таш, Ташмәсет** тигән исемдәр бирелә. Был исем инде тәүге исем менән йәнәш ҡулланылып йөрөй.

Ҡайҙан алынған һуң ауылдың **Ташмәсет, Таш** тигән атамалары?

Халыҡтың аңлатыуынса, **Әмин** ауылының төп исеме 1755 йылғы ихтилалда ҡатнашҡан өсөн батша карателдәренең эҙәрләүҙәренән ҡотолоп ҡалыу, йәшеренеү өсөн **Таш** тип үҙгәртелгән булыуы ла мөмкин. Шулай ҙа уны Таш тип кенә түгел, ә **Ташмәсет** формаһында ла йөрөтәләр.

Ихтилалдарҙан һуң (ә улар Башҡортостанда йыш ҡына булып торған) батша хөкүмәте баш күтәреүселәрҙе дингә ныҡыраҡ күндереү, үҙ ихтыярына буйһондороу маҡсатында ауылдарҙа күпләп мәсеттәр һалдыра торған булған. **Әмин** ауылының **Таш, Ташмәсет** тигән атамалары ла 1755 йылғы ихтилалдан һуң барлыҡҡа килә. Тимәк, Әмин ауылында ла мәсет төҙөлгән. Ул таштан һалынған булғанға, мәсетте

лә, ауылды ла **Ташмәсет** тип йөрөтә башлайҙар, тип уйлайбыҙ. Ауылдың Таш тип йөрөтөлөүе лә ана шул *Ташмәсет* атамаһының ҡыҫҡартылыуынан хасил булған, күрәһең.

Хәҙер **Әмин** ауылында йәшәгән кешеләргә *Брагиндар* тип өндәшеү тураһында. Бының төбөндә тарихи ваҡиғалар ята. Тарихи документтарҙа *Брагин* тураһында мәғлүмәттәр бар. Ул действительный тайный советник Черкасов тарафынан ебәрелгән руда әҙерләүсе кеше. 1754 йылдарҙа руда эҙләп **Ирәндек** тауы яҡтарына килеп сыҡҡан. *Брагин* менән булған ваҡиғаларҙы аңлау өсөн шул осорҙағы социаль-сәйәси хәлдәрҙе байҡап сығырға кәрәк.

1754 йылдарҙа Башҡортостандың Урыҫ дәүләтенә ҡушылыуына 200 йыл ваҡыт үткән була. Ошо осорҙа башҡорттар үҙҙәренең социаль-иҡтисади үҫешендә байтаҡ үҙгәрештәр кисереп өлгөрә. Башҡортостанда башҡорттарҙың да һәм башҡа милләт вәкилдәренең дә башҡаларға ҡарағанда байыраҡ ҡатламы (феодалдары) барлыҡҡа килә. Батша хөкүмәте башҡорттарҙы иҡтисади һәм милли иҙеүгә дусар итә. Батша башҡорттарға тоҙ налогы һала. Халыҡ өсөн был бик ауырға төшә. Ошондай шарттарҙа заводчиктарҙың мәнфәғәтен күҙәткән *Брагин* кеүек ҡуштандарҙың баш-баштаҡлығы халыҡтың түҙемен бөтөрә. Ул иҙеүселәргә ҡаршы көрәшкә күтәрелә. Башҡортостандағы хәлдәрҙе яйға һалырға тәғәйенләнгән генерал-майор А. И. Тевкелевтың бер донесениеһында былай тип яҙылған:

«... отправленный от действительного тайного советника Черкасова камнетёс Брагин ... поступал там непорядочно, отнимал у тамошних башкирских старшин и башкирцев хороших дочерей к себе и за такие поступки от них башкирцев по не стерпимости де и в Оренбург было прошение у бывшего тогда губернатора Неплюева, но токмо де они башкирцы никакой справедливости от него получить не могли». Күренеүенсә, башҡорттар иҙеүгә ҡаршы көрәштә төрлө форманы ҡулланып ҡараған. Тик тейешенсә һөҙөмтә бирмәгәс кенә, үҙ ирке өсөн ҡорал менән яуға күтәрелгән. Брагин кеүек яфалаусыларҙы юҡ иткән.

Был турала «Материалы для статистики Российской империи» (СПб,, 1844) тигән китапта ла бар: «... Брагин, который будучи послан в 1754 году для обыска камней на Ирендык ... был убит... на берегах озера Толкача, и таким образом подал повод к уходу ста башкирских кибиток в Кайсацкую Орду и к возмущению 1754 года» (52-се бит). Бына ошо ваҡиғаларҙың барыһы ла Әмин ауылы (әйткәндәй ауыл эргәһендә Брагин ташы тигән урын бар) хаҡындағы легендаларҙа үҙенсәлекле сағылыш тапҡан. Халыҡ хәтерендә сал тарихтың сағыу көндәре генә түгел, ҡара янған биттәре лә яҡшы һаҡлана, күрәһең. Күрше-күләндең **Әмин** ауылы кешеләренә «брагиндар» тип өндәшеүе, тимәк, һис тә ул ауылда *Брагинға* бәйле тоҡом йә ара, аймаҡ булыуы тураһында һөйләмәй, ә XVIII быуатта булып үткән ысын тарихи ваҡиғаларға бәйләнгән. Башҡорт халҡының килеп сығышын ентекле өйрәнгән Р. Ғ. Кузеевтың материалдарында түбәндәге мәғлүмәттәрҙе табабыҙ: «**Әмин, Таш, Ташмэсет (Аминев) ауылы Бөрйән улусына ҡарай. Бөрйән ҡәбиләһенең «монаш ырыуы**на инә». Башҡортостанда кантон системаһын өйрәнгән Әнүәр Әсфәндиәров материалдарында: «Әмин ауылы Верхурал өйәҙенең 4-се йортона ҡараған. Ауылда

113 ир, 89 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән. Бөрйән ҡәбиләһенең монаш ырыуына ингән. Ауыл ара, зат, аймаҡ йә түбәләргә бүленмәгән булған. Борон-борондан ата-бабаларынан ҡалған үҙ ерҙәрендә йәшәгәндәр», тип әйтелә. Яҙ, йәй һәм көҙ яҙлауға, йәйләүгә һәм көҙләүгә сыҡҡандар. 1816 йылғы тарихи документтарҙан күренеүенсә Бөрйән улусында Әҙеһәм Әминев тигән старшина булған. Ул, бәлки, Әмин ауылына нигеҙ һалған *Әмин* батырҙың тоҡомонан булғандыр. Быны асыҡлау өсөн ауыл шәжәрәһе кәрәк.

Күренеүенсә, **Әмин** ауылына ҡағылышлы материалдар байтаҡ ҡына. Шулай ҙа улар Әмин ауылы тарихының барлыҡ осорҙарын күҙәтеү өсөн етерлек түгел. Беҙ хатта **Әмин** ауылындағы ҡултамға урынына ҡулланған тамғаларҙы ла белмәйбеҙ. Бынан тыш **Әмин** тирә-һендәге ер-һыу атамалары ла әлегә өйрәнелмәгән. Ауылдың элекке ултырған урындарының яҙлаған, йәйләгән, көҙләгән ерҙәренең исеме лә яҙып алынмаған. Шул атамаларҙы аңлатырға тырышҡан легенда-лар беҙгә билдәле булһа, тарихын нығыраҡ төпсөнөргә мөмкинселек ҙурыраҡ булыр ине.

Билдәле булыуынса, тарихты халыҡ тыуҙыра. Ауыл тарихын да ауыл кешеләре яҙған. Элек тә шулай булған, әле лә шулай, шуның өсөн һәр ауылда тарихҡа ҡараған бөтә нәмә ваҡытында йыйыла һәм мөмкин тиклем өйрәнелә барырға тейеш. Шулай күмәкләшеп эшлә-гәндә генә беҙ тыуған еребеҙҙең хәҙерге тарихын өйрәнеүгә лә, борон-ғоһон белеүгә лә тейешле өлөш индерер инек.

## ӘҮМЕШ

Әбйәлил районының **Таштимер** ауыл советына ҡараған ҙур булмаған бер ауыл бар. Ул **Әүмеш** ауылы. Элек **Алсынбай** тип аталып йөрөтөлгән. Ауылдың ҡулъяҙма тарихында **Әүмеш тә, Алсын** да *Тәуәт* ҡарттың улдары итеп теркәлгән. *Тәуәт* ҡарттың кем икәнлегенә килгәндә, уның тураһында **Күсем** ауылы шәжәрәһендәге мәғлүмәттәрҙе файҙаланып ҡайһы бер нәмәләрҙе асыҡларға мөмкин. **Күсем** ауылына нигеҙ һалыусыларҙың береһе **Йомарт бей** булған. Уның улы *Иһәш тархан. Тәуәт* батыр *Иһәш* тархандың улы. *Тәүәт* батыр яҡынса XVII быуат башында йәшәгән булырға тейеш. Әүмеш ауылының шәжәрәһендә *Тәүәт* ҡарт, уның улдары тураһында түбәндәгеләр яҙылған: «Ауыл элек **Алсынбай** тип аталған. **Алсынбай** — *Тәүәт* олатайҙың улы. *Тәүәт* олатайҙың бөтәһе 7 улы булған: *Әүмеш*, *Алсын*, *Алдыҡай*, *Мырҙаҡай*, *Шәрифйән*, *Ишмырҙа*, *Йәнҡаҙык...»*. Тимәк, **Әүмеш (Алсынбай)** ауылы ағалы-энеле *Әүмеш* менән *Алсындың* исемдәрен йөрөтә.

Беҙҙең уйыбыҙса, *Әүмеш* менән *Алсын* аталары бер булһа ла, икеһе ике әсәнән тыуған булырға тейеш. Ауылдың шәжәрәһендә башҡорттар менән ҡаҙаҡтар араһында барған көрәш тураһында айырым әйтеп үтелгән. Быныһы бер. Икенсенән, *Алсьтбайҙың* исеме уның ҡаҙаҡтарға бәйләнеше булыуына ишара яһай. Бының өсөн ҡаҙаҡта алсын тигән ырыуҙың булыуын иҫкә төшөрөү ҙә етә. Нисек кенә булмаһын, ауылдың ике исем йөрөтөүе ундағы элекке социаль-патриархаль бүленеш тураһында һөйләй. Ауылға һәр бер кешенең исеме ҡушылмай. Ауыл атамаһы булып уның тарихында ниндәйҙер урын тотҡан кешенең исеме генә ныҒына. Шуның өсөн **Әүмеш (Алсынбай)** ауылында элек ике көслө төркөм булғанына ышанырға мөмкин. Уның береһенә — *Әүмеш*, икенсеһенә *Алсынбай* етәкселек иткән. Ауылда, быуындан быуынға һөйләнеп килгән риүәйәттәрҙә *Алсынбай* — бай төркөм вәкиле булһа, ә *Әүмеш* ауылды төҙөүҙә әүҙем ҡатнашҡан ярлы кеше итеп кәүҙәләндерелгән. Шәжәрәлә был хәл үҙенсәлекле сағылыш алған. Мәҫәлән, унда *Әүмеш* ҡаҙаҡ байы менән ярыша, тип әйтелә. Ярышта *Әүмеш* еңә. Тик ул еңгән өсөн бүләккә алтын алмай, ә тыуған тупраҡ, ер һорай. *Әүмеш* өсөн ер, тыуған тупраҡ алтындан да ҡәҙерлерәк була. *Әүмештең* бына шундай тыуған еренә бирелгән булыуы, туғандарының мәнфәғәтен үҙенеке кеүек итеп һаҡлағаны, яҡлағаны өсөн ауылдаштары уның исемен ауылға ҡушыуҙы хуп күрәләр.

Тарихи документтарҙа **Әүмеш** ауылының үҫеш юлы яҡшы уҡ сағылдырылған. «Генераль межалауға иҡтисади иҫкәрмәләр»ҙә 1795 йылда **Әүмеш** ауылында 20 өй булғаны, унда 58 ир, 44 ҡатынҡыҙ йәшәгәне теркәлгән. 1841 йылда ундағы халыҡ һаны ике тапҡырға арта. Ул осорҙа **Әүмеш** ауылында 249 кеше йәшәгән. Ә 1866 йылда инде **Әүмеш** 58 өйлө ауылға әүерелгән. Унда 358 кеше йәшәгән. Ауыл һыулаған йылға ла *Әүмеш шишмәһе* тип аталған. *(Ҡара:* Список населенных мест по сведениям 1866 года. Т. 28. Оренбургская губерния. СПб., 1871.)

Этнографик йәһәттән Әүмеш ауылы тамъян ырыуына ҡараған. Ауылда 6 ара булған. Улар *айыу*, *алкым*, *ботток*, *ҡуян*, угед *һәлбер* тип аталған. Икенсе информатор Ғәйнуллин Муллахмәт ағай тағы ла бер ара булыуын өҫтәп әйтте. Ул *бейәләйҙәр* араһы. Был араға Ғәйнуллиндәр ингән. Ауылда ҡултамға урынына ошондай ⌓ өҙәңгегә оҡшаған тамға ҡулланылған. Уны *өҙәңге тамға* тип атап йөрөткәндәр.

1841 йылғы документтарҙа Әүмеш ауылы кешеләренең йәйләүгә сығыуҙары тураһында яҙып ҡалдырылған. Ауыл кешеләре иң тәүҙә *Сатрайортта* яҙлаған, унан һуң *Ҡараһыйыр* тигән урынға күскән, көҙгә яҡын *Яҡтыкүл* тирәһендә булғандар. Ҡышты үткәрергә ауылға ҡайтҡандар. Быларҙың бөтәһе лә тыуған төбәкте өйрәнеүселәргә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыр, тип ышанабыҙ.

## ЯНБАРИС

Яңауыл районындағы *Бәҙрәш* исемле йылғаны һыулаған **Янбарис** ауылына Уран ҡәбиләһе башҡорттары нигеҙ һалған. XVII быуат урталарында (йәғни 1659—1661 йылдарҙа) Ҡазан өйәҙе Ар даруғаһы **Аҵы Төтмәт** ауылынан килгән бер төркөм татарҙар ошо ауыл башҡорттарынан бергә йәшәргә рөхсәт һорайҙар. Башҡорттар уларға үҙ ырыуы ерҙәрендә бер ауыл булып йәшәргә ризалыҡ бирәләр. Ауылдың оло кешеләре, Иван Грозный мосолмандарҙы суҡындыра башлағас, Ҡазан яғынан татарҙар ҡасып килгән, тип һөйләйҙәр. Документтарҙа улар татар тип теркәлһә лә, Янбаристағы башҡорттар уларҙы *типтәрҙәр* тип йөрөтәләр. Шул бабайҙарҙың әйтеүенсә — Янбариста ике төркөм халыҡ йәшәй. Береһен, ҙурыраҡ төркөмдө, *башҡорттар,* икенсеһен, кесерәк төркөмдө, *типтәрҙәр* тәшкил итә. Һәр төркөм элек айырым донъя көткән булған, күрәһең. Сөнки һәр береһенең тамғалары айырым. Һәнәк исемле Y ,Y һәм ҡабырға тип аталған ошондай ≡ тамғалар — башҡорттарҙыҡы, Y (ухват), ⌒ (дуға), × (әүернә) формаһындағы тамғалар типтәрҙәрҙеке булған. Типтәр тип йөрөтөлгән төркөм тик татарҙарҙан ғына тормаған. Уларҙың бер өлөшө сығышы менән башҡорт булған. Башҡорт типтәрҙәре аҫаба башҡорттар кеүек үк төрлө заттарға (нәҫелдәргә) бүленеп йөрөтөлгән. Әүернә (× ) тамғаһын һалғандары *Шәфи заты* тип аталған.

**Янбарис** ауылы ҡасан барлыҡҡа килгән? Был һорауға яуапты ауыл тарихынан эҙләргә кәрәк. **Янбарис** ауылындағы аҫаба (вотчинник, ергә хужа булған) башҡорттар үҙ ауылына Ҡазан өйәҙе татарҙарын 1659—1661 йылдарҙа ҡабул иткәс, **Янбарис** ауылы ошо датанан элегерәк барлыҡҡа килгән булып сыға. **Янбаристың** боронғо ауыл икәнен уның үҫеш динамикаһынан да сырамытырға мөмкин. 1795 йылда **Янбариста** 161 кеше йәшәгән. Тимәк, XVIII быуат аҙағында **Янбарис** ҙур ғына ауылды тәшкил иткән. Ошо тиклем халыҡ үҫеүе өсөн байтаҡ

ваҡыт кэрэк. Ауылда 1816 йылда 228, 1834 йылда 290, 1859 йылда 444, 1870 йылда 506, 1901 йылда 636 кеше донъя көткән. Ошо йылдан һуң **Янбариста** йәшәгән кешеләрҙең һаны ни өсөндөр кәмей башлай. Мәҫәлән, 1920 йылғы Совет рәүизе **Янбариста** 571 кешене теркәгән. 1969 йылдағы белешмәләр унда 299 кеше булыуын күрһәтә. 1981 йылда ауылда йәшәгән кешеләр һаны тағы ла кәмей төшкән.

Ауылдағы кешеләрҙең сығышына килгәндә, шуны өҫтәп әйтергә кәрәк. Ауылда ысынлап та ике милләт кешеләре йәшәгән һәм йәшәй. Уларҙың күпселеген башҡорттар тәшкил итә. Күпмелер өлөшө яҫаҡлы татарҙар булған. 1901 йылда **Янбаристың** 31 йортонда 245 аҫаба башҡорт, 36 йортонда 247 башҡорт типтәрҙәре, 17 йортонда 144 татар милләтле типтәрҙәр йәшәгән. Аҫаба башҡорттар 1152 дисәтинә ер биләһәләр, башҡорт типтәрҙәренең ере 546, татар типтәрҙәренең 128 генә дисәтинә ере булған.

Тарихи документтарҙа ауылда элек йәшәгән кешеләрҙең исем-фамилиялары һаҡланған, халыҡтың нисек йәшәгәне сағылған. Мәҫәлән, Янбариста Бинәзир Солтанғолов тигән кеше көн күргән. Уның Сөләймән һәм Исмәғил Бинәзиров тигән ике улы булыуы билдәле.

**Янбарис** ауылынан данлы шәхестәр сыҡҡан. 1815 йылда **Янбарис** кешеһе Ғосман Байсәже улы Усманов Чернореченский редутында 11-се башҡорт полкы составында урыҫ губернаторҙары ойошторған төрлө походтарҙа ҡатнашҡан. 1831 йылдағы документтарҙа Ғосмандың Мөхәмәтша, Фәйруҡшат һәм Әхмәдулла атлы улдары барлығы тураһында мәғлүмәттәр бар.

1773—1775 йылғы Салауат Юлаев күтәрелешендә **Янбарис** ауылының 43 кешеһе ҡатнашҡан. Уларҙың 23-ө Уран улусы старшинаһы Мәсәй Йосопов етәкселегендә, 20-һе ошо уҡ улустың старшинаһы Мәнәй Абдрахманов ҡулы аҫтында һуғышҡан. Әгәр ҙә һәр кем үҙенең ата-бабаларын, тоҡомон ете быуынға тиклем шәжәрәләр төҙөп өйрәнһә, бәлки ошо кешеләрҙең береһенең **Янбариста** бөгөнгө көндә туғаны булыуы асыҡланыр ине.

**Янбарис** ауылының исеме ҡайҙан килә?

Уға яуап табыу өсөн башҡорт ҡәбиләләре һәм ырыуҙары тарихына иғтибар итергә кәрәк. Уран ҡәбиләһенең 10-дан ашыу ырыуы булған. Мәҫәлән, әмзә, тынбай, тарағол, мерҙәш, иҙбаҡты, сапай, маңғул, ҡыпламыш, йөҙбирҙе, истәк, янбарыс һәм башҡалар. Тимәк, **Янбарис** атамаһы уран ҡәбиләһенең *янбарыс* тигән башҡорт ырыуы исеменән алынған.

# ПРИЛОЖЕНИЯ

***Приложение 1***

## СПИСОК СОКРАЩЕНИЙ И АББРЕВИАТУР

*АЭБ* — Археология и этнография Башкирии
*Б.* — башкиры (в некоторых источниках)
*баш.* — башкир
*Башкнигоиздат* — Башкирское книжное издательство
*БГУ* — Башкирский государственный университет
*БДУ* — Башҡорт дәүләт университеты
*букв.* — буквально
*БФАН СССР* — Башкирский филиал АН СССР
*БШ* — Башкирские шежере
*вып.* — выпуск
г. — год
гг. — годы
*ГМИИ* — Генераль межалауға иҡтисади иҫкәрмәләр
*гос.* — государственный
*д.* — дело
*ед. хр.* — единица хранения
*изд-во* — издательство
*ИИЯЛ* — Институт истории, языка и литературы
*имп.* — императорский
*ИРГО* — Императорское Русское географическое общество
*КГУ* — Казанский государственный университет
*КФАН* — Казанский филиал Академии наук
*ҠДУ* — Ҡазан дәүләт университеты
*лл.* — листы
*ЛО ИВ* — Ленинградское отделение Института востоковедения
*миш.* — мишари
об-во — общество
*оп.* — опись
*р.* — река
*Р.* — русские (в некоторых источниках)
*РАН* — Российская академия наук
*РГАДА* — Российский государственный архив древних актов
*РГБ* — Российская государственная библиотека
*редколл.* — редколлегия
*р-н* — район
*РФА ҠФ* — Рәсәй Федерацияһы академияһы Ҡазан филиалы
*РФА ӨҒҮ* — Рәсәй Федерацияһы академияһы Өфө ғилми үҙәге
*РФА ШИ СПбб* — Рәсәй Фәндәр академияһы Шәрҡиәт институты Санкт-Петербург библиотекаһы
*с.* — страница
*соотн.* — соотношение
*сс.* — страницы
*СПб.* — Санкт-Петербург
*СТ* — Советская тюркология
*Т.* — татары (в некоторых источниках)
*т.* — том
*тт.* — томы
*тат.* — татар
*ТТӘИ* — Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты
*УЗ* — Ученые записки
*указ.* — указанное
*ун-т* — университет
*УНЦ* — Уфимский научный центр
*УрО* — Уральское отделение
*ҮДТА* — Үҙәк дәүләт тарих архивы
*ф.* — фонд
*һаҡ. бер.* — һаҡлау берәмеге
*ЦГИА* — Центральный государственный исторический архив
*Ч.* — черемисы (в некоторых источниках)
*ч.* — часть
*ЭПГМ* — Экономические примечания к Генеральному межеванию

# УКАЗАТЕЛЬ АУЛОВ
# РЕСПУБЛИКА БАШКОРТОСТАН

**Абзелиловский район**

Абдулгазы — 100
Абдулмамбет — 104
Абзелил — 103
Айгир-баткан — 104
Альмухамет — 104
Амангильде — 97
Аскар — 102
Аслай — 101
Аумыш — 100
Ахмет — 103
Аюсазы — 97
Баим — 101
Бакр-Узяк — 105
Биккул — 97
Большой Габдин — 101
Бузыкай — 97
Булат — 104
Бурангул — 97
Верхний Абдряш — 104
Второе отделение (Янгельское) — 105
Давлет — 97
Давлетша — 98
Даут — 97, 102
Елимбет — 98
Еникей — 101
Идяш-Кускар — 99
Искак — 98
Искужа — 102
Ишбулды — 103
Ишкильде — 98
Ишкул — 102
Казмаш — 98
Калмак — 103
Кирдас — 102
Красная Башкирия — 105
Крутой Лог — 105
Кужан — 98
Кулгана — 98
Кулукас — 98
Кусим — 98
Кусимовский Рудник — 105
Кусяр — 98
Кушый — 99
Майгашты — 105
Малый Габдин — 101
Махмут — 103
Мелькомбинат — 105
Муракай — 101
Нижний Абдряш — 104
Ниязгул — 99
Новый Балапан — 101
Озерный — 105
Первомайский — 106
Равиль — 99
Рахмет — 102
Рыскужа — 99
Саиткул — 100
Салават — 99
Салават-Совхоз — 106
Самарский — 106
Станция Альмухаметово — 106
Старый Балапан — 101
Таксыр — 99
Тал-Кускар — 99
Ташбулат — 99
Таштимер — 100
Теляш — 100
Тепян — 103
Туиш — 102
Тупак — 100
Утяган — 100
Халил — 104
Хамит — 100
Хусаин — 103
Целинный — 106
Четвертое отделение (Янгельское) — 105
Шарип — 100
Юлдаш — 100
Яйкар — 102
Якты-Куль — 106
Янаул — 106
Янгельский — 105
Ярлыкап — 101

**Альшеевский район**

Абдрашит — 108
Абдулкарим — 110
Акберды — 109
Ак-Куль — 109
Акшик — 109
Акыс-Тау — 109
Алдар — 108
Балгазы — 108
Баязит — 109
Ибрай — 107
Игенче — 109
Идрис — 107
Кармыш — 107
Кипчак-Аскар — 107
Красный Клин — 109
Кункас — 108
Кызыл — 110
Кызыл-Юл — 110
Малый Аккулай — 106
Маян-Куль — 110
Мурзагул — 109
Новый Сепяш — 107
Новые Балгазы — 108
Новый Кипчак — 109
Раевский (Элшэй) — 107
Сарыш — 109
Себенли — 108
Старый Аккулай — 106
Старый Сепяш — 107
Сурай — 107
Суракай — 107
Ташлы — 108
Таш-Тюбе — 110
Теветей — 109
Трунтаиш — 108
Туктар — 108
Яик-Сыбы — 108

**Архангельский район**

Абзан — 110
Азау — 110
Айтмембет — 112
Акьяр — 112
Аскин — 113
Басу — 113
Беис — 110
Верхние Лемезы — 112
Гайфулла — 111
Карагай — 111
Кизги — 111
Красные Иргизлы — 113
Кумарлы — 111
Кургаш — 111
Кызыл-Яр — 111
Кысынты — 111
Липовка — 113
Муллакай — 111
Новый Кызыл-Яр — 111
Новый Тимербай — 112
Тавакач — 112
Тереклы — 112
Убалы — 112
Узундар — 112
Усаклы — 113
Усть-Басу — 113
Ялан-Елга — 113

**Аскинский район**

Абдал — 117
Абдулкаюм — 118
Авадай — 117
Альягиш — 116
Амир — 115
Базанчат — 115
Баргак — 113
Башкортостан — 117
Бильгеш — 113
Вашьязы — 118
Гумба — 113
Ерма-Елань — 118
Камашады — 114
Кара-Куль — 118
Карткисяк — 117
Кашка — 114
Кигазы — 117
Кубияз — 117
Кунгакбаш — 118
Куш-Куль — 118
Кышлау-Елга — 115
Мута-Елга — 116
Новая Кара — 115
Новые Кускильды — 114
Новые Багазы — 116
Новые Казанчи — 115
Новый Кубияз — 116
Новый Карткисяк — 117
Новый Мутабаш — 116

Новый Суюш — 114
Старая Кара — 115
Старые Кускильды — 113
Старые Казанчи — 115
Старый Мутабаш — 116
Султанай — 114
Султанбек — 114
Сураш — 114
Ташлы-Куль — 114
Терeклы-Чишма — 118
Тульгузбаш — 118
Улу-Елга — 118
Улу-Кул — 116
Упкан-Куль — 117
Урмияз — 114
Уршады — 115
Чишмали-Кул — 115
Шорохово — 118
Янкисяк — 115

**Аургазинский район**

Ахмет — 121
Валит — 119
Верхний Бегеняш — 119
Гумер — 119
Игенче — 121
Кальчир-Буран — 120
Миннибай — 120
Назмутдин — 119
Нижние Леканды — 121
Нижний Бегеняш — 119
Новый Итекей — 119
Новый Мурадым — 120
Ситдик-Мулла — 119
Сулейман — 121
Старый Итекей — 119
Старый Мурадым — 120
Старый Турумбет — 120
Ташбаш — 121
Турсагазы — 120
Турумбет — 120
Усман — 120
Усть-Белеш — 120
Утеймулла — 121
Юлдаш — 121

**Баймакский район**

Абдрахман — 121
Абдулкарим — 130
Абзак — 127
Акмурун — 130
Ак-Тау — 130
Алгазы — 130
Амин — 124
Ахмер — 124
Баймак — 124
Баим — 126
Баиш — 124
Баймурза — 124, 129
Бакыр-Тау — 130
Бахтигарей II — 122
Бахтигарей 1 — 125
Билал — 129
Большой Басай — 128
Буранбай — 125
Бурзян-Елга — 130
Верхний Идрис — 122
Верхний Мамбет — 126
Верхний Тавлыкай — 123
Верхний Тагир — 130
Верхний Яикбай — 127
Второй Завод — 130
Второй Иткул — 127
Второй Мукас — 127
Второй Туркмен — 124
Гадельбай — 125
Гадельша — 128
Гали — 128
Гумер — 125
Давлет — 122
Елым — 125
Ислам — 129
Исян — 128
Исянбет — 122
Ишберде — 122
Ишмурза — 129
Ишмухамет — 129
Казанка — 131
Калинин — 131
Карамалы — 131
Карышка — 129
Комсомол — 131
Крепостной Зилаир — 131
Куват — 130
Культубан — 131
Кульчура — 128
Куртульган — 131
Кусей — 126

Куян-Тау — 131
Меряс — 123
Муллакай — 123
Мунасип — 131
Мустай — 128
Назар — 128
Нигамат — 127
Нижний Идрис — 122
Нижний Тавлыкай — 123
Нижний Тагир — 129
Нижний Яикбай — 127
Октябрьский — 131
Первый Иткул — 126
Первый Мукас — 126
Первый Туркмен — 124
Покровка — 132
Саитбаттал — 127
Сакмар — 132
Саксай — 132
Самян — 130
Сарыбия — 132
Семёновка — 132
Сосновка — 132
Сингиз — 123
Старый Сибай — 128
Туктагул — 124
Татлыбай — 123
Темяс — 123
Третья ферма — 131
Тубинск — 132
Уметбай — 129
Файзулла — 126
Хасан — 128
Шулька — 132
Юмаш — 125
Юнусбай — 132
Янгазы — 129
Янзигит — 123
Ярат — 126
Ярмухамет — 125

**Бакалинский район**

Гурдыбыш — 135
Камай — 132
Камышлытамак — 133
Кандалакбаш — 135
Килькабыз — 133
Куруч-Каран — 134
Мустафа — 134
Нарат-Елга — 134
Новый Азмей — 135
Новый Катай — 133
Новый Куруч — 134
Новая Сасы-Куль — 135
Ногайбак — 134
Сакат — 134
Сасы-Куль — 135
Старый Азмей — 135
Старый Катай — 133
Старый Куруч — 133
Старый Куян — 133
Суюндук — 135
Туктагул — 134
Урманай — 135
Устюм — 134
Чумале — 134

**Балтачевский район**

Верхний Кансияр — 139
Имян — 136
Кумьязы — 136
Кундашлы — 140
Кунтугуш — 136
Магашты — 136
Манагаз — 137
Маты — 137
Мишар — 137
Нижний Кансияр — 139
Нижний Сикияз — 137
Новый Балтач — 136
Новая Тимка — 140
Новые Штанды — 138
Новый Тушкыр — 137
Новый Якшей — 139
Нуркей — 139
Рахимкул — 140
Сейтяк — 138
Старая Тимка — 140
Старые Каргалы — 138
Старый Балтач — 136
Старый Иликей — 136
Старый Якшей — 138
Старый Янбай — 140
Текан — 139
Тузлуку ш — 137
Туйчибай — 139
Тутагач — 137
Тушкыр — 137

Уразай — 138
Урта-Елга — 138
Усман — 138
Чипчик — 137
Чукалы — 140
Чурапан — 138
Шавьязы — 139
Штанды — 138

**Белебеевский район**

Азикей — 141
Акбасар — 140
Ирек — 140
Казанлытамак — 141
Метевбаш — 141
Таш-Кичу — 141
Тузлукуш — 141
Чулпан — 141

**Белокатайский район**

Абсалям — 142
Айдакай — 143
Айгирьял — 143
Апут — 141
Ашай — 143
Билян — 141
Верхний Утяш — 142
Кадыр — 142
Каип — 142
Кирикей — 141
Красный Муравей — 143
Красный партизан — 144
Красный Пахарь — 143
Кургаш-Елга — 142
Майгазы — 144
Мидят — 143
Мунас — 143
Нижний Утяш — 142
Новые Маскары — 142
Перевоз — 143
Старые Маскары — 142
Урак — 142
Ургалы — 143
Хайбат — 142
Чёрный Ключ — 143
Шайдалы — 143
Юлдаш — 142
Яныбай — 143
Ясаул — 143

**Белорецкий район**

Абзак — 149
Азикей — 146
Азнагул — 148
Азналы — 145
Аис — 147
Акташ — 150
Арипкул — 147
Арышпар — 147
Ассы — 144
Ахмер — 147
Бакий — 149
Баскан — 150
Бельский — 150
Бирдегул — 144
Бриш — 144
Briштамак — 144
Бутай — 144
Габдюк — 145
Гадельша — 147
Зуяк — 145
Искушты — 149
Исмакай — 150
Иткулкин Ключ — 151
Кагарман — 148
Кадыш — 146
Калашты — 147
Карагай — 149
Карталы — 145, 150
Карыш — 151
Касмакты — 150
Кудашман — 146
Куз-Елга — 150
Кузгун-Ахмер — 146
Кулмас — 145, 150
Кумба — 150
Куткур — 150
Куюк — 147
Кызыл-Яр — 150
Кысык — 150
Манышты — 147
Махмут — 146
Мулдакай — 149
Мухамет — 148
Нижний Сермен — 146
Новый Хасан — 145
Нукат — 147
Нуруш — 149
Рысыкай — 147

Савельева Поляна — 151
Сатра — 151
Сафаргул — 145
Сосновка — 151
Средний Сермен — 146
Средняя Тюльма — 148
Субхангул — 147
Суир-Аис — 146
Суюндук — 150
Сурензяк — 151
Татлы — 148
Тукан — 151
Уметбай — 149
Урал-Тау — 151
Усмангали — 145
Усть-Казы — 151
Уткаль — 148
Хайбулла — 149
Худайберды — 145
Хусаин — 148
Черновка — 151
Шигай — 148
Ямашты — 151

**Бижбулякский район**

Азнай — 152
Аит — 152
Биккул — 152
Дюсян — 152
Елбулактамак — 152
Исякай — 153
Канакай — 153
Каскин — 153
Кунаккул — 153
Кынгыр-Менеуз — 153
Третья ферма — 153
Четвёртая ферма — 153

**Бирский район**

Верхний Лачентау — 154
Нижний Лачентау — 154
Новый Баиш — 154
Новый Яндыз — 154
Угуз — 154

**Благоварский район**

Агарды — 155
Ак-Ялан — 156
Ахмет — 156
Балышлы — 156
Башбуляк — 156
Баштерма — 156
Бузавлык — 157
Второй Чулпан — 158
Дюсмет — 155
Заготскот — 157
Камышлы — 157
Кулле-Кул — 157
Кызыл-Шар — 157
Кызыл-Юлдуз — 157
Новые Санны — 158
Новый Абзан — 155
Новый Буляк — 156
Новый Кузей — 155
Новый Сынташ — 155
Сабай — 157
Сарайлы — 157
Сатра — 157
Слакбаш — 157
Старый Абзан — 155
Старый Кучербай — 156
Старый Усман — 156
Старый Сынташ — 155
Таллы-Куль — 158
Тюркей — 158
Удрякбаш — 156
Улу-Арема — 155
Урняк — 158
Четвёртое отделение — 157
Чулпан — 158
Шамей — 158
Шарлык — 158
Шарлы-Куль — 158
Яныш — 156

**Благовещенский район**

Аркаул — 158
Ахмет — 159
Карагай-Куль — 159
Куряш — 159
Мухаметдин — 159
Новый Минзитар — 159
Новые Турбаслы — 159
Средний Минзитар — 159
Тугай — 159
Шарип — 159
Янаул — 159

**Буздякский район**
Абдулла — 164
Амир — 165
Арслан — 164
Байраш — 164
Бакча — 164
Батырша-Кубау — 162
Большая Устюба — 160
Верхняя Сатра — 165
Второй Новый Ахун — 164
Ишмян — 164
Малая Устюба — 160
Казаклар-Кубау — 163
Канлы-Туркей — 160
Каразирек — 163
Каран — 161
Каранай — 161
Каранбаш — 161
Кска-Елга — 160
Киязитамак — 164
Киязи-Тау — 163
Капей-Кубау — 163
Кубяк — 161
Кузей — 161
Кызыл-Яр — 163, 164
Малая Устюба — 160
Нижняя Сатра — 165
Новошигай — 162
Новый Актау — 164
Новый Таулар — 162
Новый Шигай — 162
Письмянтамак — 165
Рәм — 165
Сабай — 161
Сабанай — 165
Севадыбаш — 165
Старошигай — 162
Старые Богады — 162
Старый Буздяк — 160
Старый Актау — 164
Старый Карбаш — 164
Старый Таулар — 161
Старый Шигай — 162
Сыртлан — 163
Таллыкул-Кубау — 163
Ташлы-Кул — 165
Телякей-Кубау — 163
Тюреш — 165
Урал — 165
Урзайбаш —160
Хазиман — 165
Чишма — 165
Шигайкульбаш — 162
Шланлы-Куль — 160
Юрак-Тау — 164
Якуп — 162
Ярдам — 165

**Бураевский район**
Абдулла — 168
Абзай — 168
Аит — 169
Ардяш — 171
Арняш — 171
Байсаке — 167
Бакалы — 172
Большой Бадрак — 169
Бурай — 166
Бустанай — 168
Вал ы ш — 172
Ваныш — 168
Ваныш-Алпаут — 167
Варзитамак — 170
Воткурзя — 169
Даутлар — 171
Дюсмет — 166
Каинлык — 170
Калмык — 167
Камиль — 166
Карабай — 170
Каразирек — 168
Каратамак — 170
Кашкаль — 171
Кудаш — 168
Кулай — 169
Кушманак — 169
Кызыл-Октябрь — 172
Ленин-Буляк — 172
Менле — 168
Нарыш — 167
Новая Мустафа — 172
Новый Карагуш — 172
Новые Каргалы — 170
Новый Бикмет — 167
Новый Кизган — 171
Новый Тазлар — 171
Новый Шилек — 170
Разлив — 172

Саитбай — 170
Саит-Курзя — 169
Сибирган — 169
Силасау — 167
Старая Курзя — 169
Старая Мустафа — 172
Старый Бикмет — 166
Старый Карагуш — 171
Старый Кизган — 171
Старый Тазлар — 171
Старый Тукран — 167
Сумсабаш — 172
Таз-Тюба — 171
Танатар — 169
Тансызар — 172
Ташкубар — 172
Тугай — 166
Тугаряк — 167
Тукай — 170
Утяган — 166
Хази — 172
Чалкак — 170
Чишма-Бурай — 166
Шабай — 166
Юмакай — 170

**Бурзянский район**

Абдельмамбет — 177
Акбулат — 173
Аралбай — 175
Аскар — 177
Атик — 175
Ачибар — 175
Байгазы — 175
Байназар — 175
Большой Бретяк — 177
Верхний Нугуш — 174
Гадельгарей — 174
Галиакбер — 173
Исламбай — 177
Исянгазы — 173
Ишдавлет — 174
Киекбай — 174
Кильдигул — 176
Кургашлы — 177
Кутан — 174
Магадей — 178
Максют — 174
Малый Бретяк — 177
Миндигул — 173
Мурадым — 176
Наби — 176
Новый Мунасип — 176
Новый Мусят — 174
Новый Субхангул — 173
Новый Усман — 175
Старый Мунасип — 176
Старый Мусят — 173
Старый Субхангул — 173
Старый Усман — 174
Суюш — 175
Тимир — 176
Яумбай — 177

**Гафурийский район**

Абдулла — 183
Акташ — 180
Баимбет — 178
Бакрак — 178
Баянды — 183
Берёзовая Поляна — 183
Большой Ибрагим — 180
Большой Утяш — 179
Верхний Ташбукан — 182
Журавлёва Поляна — 183
Зилим-Каран — 178
Зирик — 180
Зириклы — 180
Игенчеляр — 183
Имендяш — 180
Имянник — 178
Каварды — 180
Каран-Елга — 179
Карлы — 183
Кулкан — 179
Кургашлы — 183
Кутлугужа — 182
Малый Ибрагим — 180
Малый Утяш — 179
Мендим — 183
Мураз — 181
Му рак — 182
Нижний Ташбукан — 182
Новые Каварды — 181
Новый Кармыш — 182
Новый Таиш — 181
Сабай — 181
Саитбаба — 179

Сик-Елга — 183
Средний Утяш — 180
Таиш — 181
Талпар — 181
Тугай — 182
Убалар — 184
Узбек — 179
Урал — 184
Усман — 179
Утяк — 183
Юзимян — 179
Юлук — 178
Юрмаш — 181
Явгильды — 180
Якты-Куль — 178
Янгиз-Каин — 183

**Давлекановский район**

Алга — 187
Ахун — 186
Бурангул —186
Давлекан — 184
Дюртюли — 186
Игенче — 187
Исмагил — 184
Кадыргул — 185
Казангул — 184
Кидряс — 186
Курьятмас — 184
Макяш — 184
Новый Аккулай — 186
Новый Меряс — 186
Новый Шарип — 185
Новый Янбек — 185
Новый Яппар — 185
Сапай — 186
Старый Курменкей — 184
Старый Меряс — 185
Старый Шарип — 185
Старый Яппар — 185
Фаридун — 187
Хусаин — 186
Яппар-Янбек — 185

**Дуванский район**

Абдрашит — 188
Арий — 187
Верхний Апсалям — 188
Кадыр — 188
Кара-Куль — 188
Маржангул — 187
Месягут — 188
Мулькат — 188
Новый Халил — 188
Старый Халил — 187
Янбай — 188

**Дюртюлинский район**

Абзай — 194
Аканей — 194
Алга — 194
Аргамак — 190
Асян — 191
Баргызбаш — 194
Бергата — 188
Бишнарат — 194
Венеция — 190
Верхний Алькаш — 189
Верхняя Карга — 192
Гублюкучук — 191
Гулюк — 193
Зайляу — 195
Зитембяк — 189
Ильдус — 195
Исмаил — 189
Казаклар — 190
Казы-Ельдяк — 190
Каиш — 190
Кучергич — 195
Куш-Нарат — 195
Кушуль — 192
Малый Бишкураз — 195
Маньязыбаш — 193
Миништы — 190
Москов — 193
Назитамак — 193
Нижний Алькаш — 189
Нижний Аташ — 192
Нижняя Карга — 192
Нижний Манчар — 192
Новый Биек-Тау — 192
Новый Ишмет — 194
Новый Кангыш — 190
Новый Уртай — 194
Сабанай — 194
Семилетка — 195
Старый Баиш — 193

Старый Кангыш — 189
Старый Султанбек — 191
Старый Уртай — 194
Суккул — 191
Султанбек — 191
Сюгали-Куль — 193
Таймурза — 191, 195
Такарлик — 191
Тамак — 190
Таубаш-Бадрак — 189
Улькаш — 195
Урман-Асты — 194
Чишма — 189
Юкали-Кул — 192
Юнтиряк — 192
Юсуп — 189

**Ермекеевский район**

Абдулкарим — 196
Абдулла — 196
Аксаково — 198
Атам-Куль — 196
Ермекей — 195
Ик — 198
Исламбахты — 196
Кулбай — 196
Куш-Каран — 198
Кызыл Ик — 198
Кызыл Яр — 196
Нижние Карамалы — 197
Новый Турай — 197
Новый Шах — 198
Рятамак — 197
Старые Сулли — 196
Старый Турай — 197
Старый Шах — 198
Сук-Куль — 197
Суермет — 197
Тарказы — 197
Усман-Ташлы — 198
Чулпан — 198
Яссы-Каран — 198

**Зианчуринский район**

Абзан — 199
Абзановский заготскот — 205
Абуляис — 205
Агурда — 200
Акдавлет — 200
Алибай — 203
Аюв — 199
Баиш — 200
Байдавлет — 202
Башбармак — 204
Башкирский Кужанак — 199
Башкирский Серегул — 201
Бикбай — 203
Бикберда — 201
Биккужа — 203
Биштиряк — 204
Бурангул — 200
Верхняя Сара-Биль — 202
Верхний Муйнак — 201
Вторая ферма — 205
Второй Назар — 199
Габбас — 203
Ибрай — 204
Идяш — 201
Ишемгул — 205
Исянгул — 199
Калимулла — 206
Караберда — 206
Киньябулат — 203
Кугарчи — 202
Кужабак — 199
Кызыл-Яр — 206
Мазит — 204
Малый Байдавлет — 202
Малый Муйнак — 201
Мурзабай — 206
Мухамедьян — 204
Нижняя Сара-Биль — 202
Нижний Идельбак — 204
Ниязгул — 200
Новый Аскар — 203
Новые Чебеньки — 206
Первый Назар — 199
Пятая Ферма — 205
Сагит — 204
Сазалы — 203
Сакмарский совхоз — 206
Самаза — 201
Средний Муйнак — 201
Сулейман — 205
Тазлар — 203
Третья ферма — 205
Умбет — 201
Утягул — 200

Четвёртая ферма — 205
Эльмяле — 205
Юлдаш — 200
Юлдыбай — 203
Юнай — 202
Яныбай — 205

**Зилаирский район**

Аралбай — 207
Ашкадар — 207
Байгужа — 207
Балапан — 208
Бикьян — 207
Верхний Галей — 206
Верхний Салим — 209
Искужа — 207
Ишбулды — 208
Кадырша — 207
Камыш-Узяк — 208
Канзафар — 207
Кашкар — 208
Максют — 209
Малый Юлдыбай — 209
Матрай — 208
Нижний Галей — 206
Новый Якуп — 210
Сабыр — 207
Салях — 210
Старый Якуп — 210
Султантимер — 209
Суртан-Узяк — 209
Шамсутдин — 207
Юлдыбай — 209
Юмагужа — 208
Яман-Саз — 210
Япар-Саз — 210
Яфанкин — 210

**Иглинский район**

Большие Карамалы — 211
Казаяк-Кутуш — 211
Казаяк-Хуснулла — 211
Красный Восход — 212
Минзитар — 211
Нижние Лемезы — 212
Новый Кубау — 211
Сабит — 212
Сарт-Лабау — 211
Старый Кубау — 210
Старые Карашиды — 210
Субакай — 211
Тавтиман — 211
Тау — 212
Ташлы-Елга — 212
Тикей — 212
Тюба-Ялань — 212
Улу-Теляк — 212
Улу-Ялан — 212
Шуктей — 212

**Илишевский район**

Абдулла — 220
Аккуз — 216
Араптан — 213
Ашман — 220
Базы-Куян — 220
Базытамак — 220
Бишкурай — 218
Буляк — 221
Буляр — 216
Буралы — 213
Верхний Манчар — 214
Верхний Черек-Куль — 215
Верхний Юлдаш — 218
Верхние Юнны — 214
Верхний Яркей — 213
Восток — 221
Груздевка — 221
Заготскот — 221
